МИНИСТЕРСТВО НАУКИ
И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
Федеральное государственное бюджетное
образовательное учреждение
высшего образования
«Башкирский государственный университет»
Стерлитамакский филиал
Федеральное государственное бюджетное
образовательное учреждение
высшего образования
«Башкирский государственный университет»

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ
РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
Институт развития образования
Республики Башкортостан
Муниципальное казенное учреждение
«Отдел образования администрации
городского округа город Стерлитамак РБ»
Муниципальное автономное
общеобразовательное учреждение
«Гимназия №3 имени
Джалиля Киекбаева»
городского округа г. Стерлитамак РБ

РЕСПУБЛИКАНСКИЕ КИЕКБАЕВСКИЕ ЧТЕНИЯ

Сборник материалов
Республиканской научно-практической конференции
«XII Киекбаевские чтения»,
посвященной Международному дню родного языка,
письменности и культуры и
Году башкирского языка

г. Стерлитамак, 21 февраля 2020 г.

УДК 80/81(470.57)(061.3)
ББК $80_я431+81+83$
Р 43

Рецензенты:

кафедра востоковедения и башкирского языкознания (БГУ, г. Уфа); кафедра башкирской и тюркской филологии (Стерлитамакский филиал БашГУ, г. Стерлитамак); доктор филологических наук, профессор Р.А. Абуталипова (Стерлитамакский филиал БашГУ, г. Стерлитамак); кандидат филологических наук, доцент, зав.кафедрой башкирского и других родных языков и литератур Э.Ф. Рахимова (ИРО РБ, г.Уфа)

Под общей редакцией декана факультета башкирской и тюркской филологии СФ БашГУ Илишевой Р.Х., начальника отдела образования администрации городского округа г. Стерлитамак З.Я. Ишбаева

Редакционная коллегия:

д.филол.н., проф. СФ БашГУ Саляхова З.И., д.филол.н., проф. БашГУ Абдуллина Г.Р., директор МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева» Шагисултанова А.Б., к.пед.н., доцент Аккужина Ф.А., доцент СФ БашГУ Арсланова М.С., к.филол.н., доцент СФ БашГУ Басырова Г.А., к.филол.н., доцент БашГУ Валиева Г.Д., к.филол.н., доцент СФ БашГУ Утяев А.Ф., к.филол.н., доцент, и.о. декана факультета башкирской филологии БГПУ им. М.Акмуллы Хусаинова Л.М., зам. директора МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева» Сафарова Р.Х. (отв. секретарь)

Р 43 **РЕСПУБЛИКАНСКИЕ КИЕКБАЕВСКИЕ ЧТЕНИЯ**: Сборник материалов Республиканской научно-практической конференции «XII Киекбаевские чтения», посвященной Международному дню родного языка, письменности и культуры и Году башкирского языка. г. Стерлитамак, 21 февраля 2020 г. – Стерлитамак: Стерлитамакский филиал БашГУ, 2020. – 284с.

Сборник включает материалы Республиканской научно-практической конференции «XII Киекбаевские чтения», посвященной Международному дню родного языка, письменности и культуры и и Году башкирского языка.. В нем отражены исследования обучающихся, студентов и учителей образовательных учреждений по актуальным проблемам современной филологической науки, по методике преподавания родных языков и литератур.

Издание адресовано обучающимся, студентам, преподавателям, занимающимся исследовательской и проектной деятельностью.

© Коллектив авторов, 2020
© БГУ, 2020
© Стерлитамакский филиал БашГУ, 2020
© МАОУ «Гимназия №3 имени Дж. Киекбаева», 2020

Рәхимова Э.Ф.,
филология фәндәре кандидаты,
БР Мәғарифты үҫтереү
институтының башҡорт һәм башка туған
телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы мөдире

Хөрмәтле уҡытыусылар! Ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ!

Стәрлетамаҡ ҡалаһының Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияһы коллективы уҙғарған «XII Кейекбаев уҡыуҙары»ның сираттағы республика фәнни-ғәмәли конференцияһында һеҙҙе күреүебеҙгә ысын күңелдән ихлас шатбыҙ.

Оло ғалим, профессор Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми хеҙмәттәре – башҡорт халҡы өсөн баһалап бөткөһөҙ хазина. Үҙ эштәрендә ғалим башҡорт дөйөм халыҡ теле һәм башҡорт әҙәби теле мәсьәләләрен ентекле яҡтыртты. Улар хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм уның сығанаҡтары, һүҙ тураһында тикшеренеүҙәр, тарихи мәғлүмәттәргә бай; был хеҙмәттәр телдең диалект варианттарын үҙ-ара, шулай уҡ башҡа ҡәрҙәш телдәр менән сағыштырып өйрәнә; уларҙа миҫалдар бихисап; һығымталар нигеҙле. Автор башҡорт теленең стилдәре һәм стилистикаһы мәсьәләләре тураһында яҙғанда ла күп һанлы үрнәктәр нигеҙендә яңы асыштарға килгән, шуға ғалимдың хеҙмәттәре бөгөнгө көндә лә үҙенең актуаллеген юғалтмай. Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың хеҙмәттәре киң ҡатлам уҡыусылар өсөн яҙылған, шунлыҡтан уларҙы күңелендә ватансылыҡ тойғоһо йөрөткән, үҙ туған башҡорт теленең киләсәгенә битараф булмаған һәр кем уҡый, өйрәнә һәм үҙ эшендә ҡуллана ала.

2019-2020 уҡыу йылында «XII Кейекбаев уҡыуҙары» Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты, Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы ғалимдары һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округының мәғариф бүлеге менән берлектә уҙғарыла. Быйылғы уҡыу йылында республика кимәлендәге был мәртәбәле сара Халыҡ-ара туған тел көнө, 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына һәм Рәсәйҙә Хәтер һәм дан йылына арнала.

Фәнни-ғәмәли конференцияның эше 5 йүнәлеш буйынса эшләйәсәк:

1. Башҡорт теле хәҙерге көндә: тәжрибәне дөйөмләштереү һәм үҫеү юлдары.

2. Башҡорт телен үҫтереүҙә Ж. Кейекбаевтың ғилми-педагогик һәм әҙәби мираҫы.

3. 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышының башҡорт әҙәбиәтендә сағылышы.

4. Юбиляр яҙыусылар ижадына арналған әҙәби эҙләнеүҙәр (М. Ғафуриҙың тыуыуына 140 йыл, Ш. Бабичтың тыуыуына 125 йыл, Һ. Дәүләтшинаның тыуыуына 115 йыл, К. Кинйәбулатованың тыуыуына 100 йыл, А. Игебаевтың тыуыуына 90 йыл, М. Кәримовтың тыуыуына 90 йыл, Р. Солтангәрәевтың тыуыуына 85 йыл, Ф. Туғыҙбаеваның тыуыуына 70 йыл, А. С. Грибоедовтың тыуыуына 225 йыл, А. П. Чеховтың тыуыуына 160 йыл, А. Блоктың тыуыуына 140 йыл, Б. Пастернактың тыуыуына 130 йыл, С. Есениндың тыуыуына 125 йыл, М. Зощенконың тыуыуына 125 йыл, М. А. Шолоховтың тыуыуына 115 йыл, Е. Носовтың тыуыуына 95 йыл, И. Бродскийҙың тыуыуына 80 йыл һәм башҡалар).

5. Башҡорт теле йылына һәм 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған ижади конкурс.

Ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ! Туған башҡорт телен фән кимәленә күтәреүгә өлгәшкән арҙаҡлы шәхесебеҙ Ж. Кейекбаевтың мираҫын, юбиляр яҙыусыларыбыҙҙың ижадын, туған телдәребеҙҙең йәмғиәттә тоткан урынын өйрәнеү, Бөйөк Ватан һуғышын әҙәбиәттә сағылдырыу буйынса тәрән йөкмәткеле, төрлө яҡлап асылған, миҫалдар менән нигеҙләнгән, грамоталы ғилми-тикшеренеү эштәрегеҙ, ҡыҙыҡлы сығыштарығыҙ менән беҙҙе ҡыуандырырһығыҙ, тип көтәбеҙ. Һеҙҙең ғилми-ғәмәли эштәрегеҙ артабан да киң уҡыусылар ҡатламына файҙалы булыр, тип ышанабыҙ.

Уңыштар теләйбеҙ һеҙгә!

Ишбаев З.Я.,
начальник МКУ «Отдел образования администрации городского округа город Стерлитамак РБ»

Туған тел һәм мәҙәниәткә, Башҡорт теле йылына арналған бөгөнгө конференцияла ҡатнашыу теләге менән ошо күркәм залға йыйылған ҡунаҡтарҙы, уҡытыусыларҙы, студенттарҙы һәм уҡыусыларҙы ихлас сәләмләйем!

Международный день родного языка, письменности и культуры проводится с 1999 года по инициативе Генеральной конференции ЮНЕСКО с целью защиты языкового и культурного многообразия. В мире насчитывается несметное количество языков. Каждый язык является инструментом отражения национальной культуры, развития и сохранения духовного и материального наследия. Язык каждого народа самобытен и имеет самобытные выражения, отражающие менталитет и

традиции нации. Язык формирует сознание человека, знание языка помогает расширить кругозор, глубже проникнуть в культуру другой страны. Сегодня никого уже не нужно убеждать в том, что родной язык надо знать. Это язык матери, культура и образ мыслей, а их многообразие является огромным достоянием и наследием нашей страны. Признание и уважение всех языков позволяет сохранить мир во всем мире.

Сохранение и развитие родного языка требует глубоко продуманную, многостороннюю работу среди подрастающего поколения. Для того, чтобы у подрастающего поколения присутствовало желание знать и сохранять родной язык, свою культуру, обогащать духовные ценности, необходимо иметь в себе любовь к своему народу, родному краю, его природе, уважение к своей истории. Важнейшим средством в воспитании у детей чувства национальной гордости является пропаганда ее традиционной культуры, знаменитых писателей, родного языка.

Сегодня в Республике Башкортостан уделяется большое внимание сохранению и развитию родных языков народов Республики Башкортостан: открываются новые полилингвальные школы, разрабатываются учебники, интерактивные ресурсы, проводятся различные конкурсы. В нашем городе ведется комплексная работа по созданию условий для реализации национально-культурных потребностей многонационального населения, изучения и обучения на родном языке в государственной системе образования. В общеобразовательных организациях города Стерлитамак обучаются дети более 30 национальностей. 93% обучающихся охвачены обучением и изучением родных языков; 70% – изучением башкирского языка как государственного, организовано изучение краеведческого материала и родного языка в кружковой форме.

Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева успешно продолжает дело башкирского ученого, известного языковеда, прививая гимназистам любовь к родной, русской и мировой культуре через язык, литературу и искусство. Учащиеся гимназии ежегодно занимают призовые места в межрегиональных и республиканских олимпиадах по башкирскому языку и литературе, истории и культуре Башкортостана, становятся победителями и призёрами научно-практических конференций и конкурсов различных уровней.

Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева ежегодно собирает юных исследователей со всей республики на праздник науки. Программа конференции включает исследования по разным направлениям, здесь

выявляются новые имена, которые в скором времени внесут свою лепту в развитие науки, образования и культуры.

Желаю вам творческих успехов, прекрасных открытий, плодотворной работы и новых вершин, которые помогут нам глубже знакомиться с историей и культурой народов, проживающих в нашей многонациональной республике!

Конференцияла ҡатнашыусы уҡыусылар һәм уҡытыусыларға уңыштар теләйем!

Шаһисолтанова А.Б.,
Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия директоры,
Стәрлетамаҡ ҡалаһы

Хөрмәтле коллегалар, конференцияла ҡатнашыусылар!

Быйылғы 2020 йыл күркәм, йөкмәткеле, данлыҡлы сараларға бай. Ул илебеҙҙә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған Хәтер һәм дан йылы тип аталды. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан Башҡорт теле йылы тип иғлан ителде. Төп маҡсат – телебеҙҙе популяр итеү, йәмәғәтселектә башҡорт телен өйрәнеүгә, башҡорт мәҙәниәтенә һәм әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, республикала һәм унан ситтә, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә башҡорт телен уҡытыу шарттарын яҡшыртыу, Башҡортостанда башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡулланыу даирәһен киңәйтеү тора.

Был йүнәлештә Стәрлетамаҡ ҡалаһы Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияла бөтә шарттар булдырылып, әүҙем эштәр башҡарыла. Бөгөнгө көндә гимназиябыҙҙа 600-гә яҡын бала белем ала, мәктәпкәсә йәштәге төркөмдәрҙә 200-гә яҡын бала тәрбиәләнә. Туған телде өйрәнеү менән бер рәттән белем усағында төрлө тәрбиәүи саралар даими башҡорт телендә үткәрелә. Йыл һайын 25 октябрҙә Жәлил Кейекбаевтың тыуған көнөнә ҡарата, беренсе класс уҡыусыларын «Гимназистар сафына ҡабул итеү» тантанаһы традицияға инде. Йәй көндәрендә Мәрйәм Бураҡаева программаһына нигеҙләнеп ойошторолған «Йәйләү» лагерына балалар бик яратып йөрөй. Быйылғы уҡыу йылында республиканың «Тамыр» балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы ойошторған «Тамыр селтәре» проектында әүҙем ҡатнашып, гимназиябыҙҙа ойошторолған «Арғымаҡ TV» телестудияһы командаһы I дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Шулай уҡ ЖэКа Башҡорт КВН командаһы үҙенең эшен йәнле алып бара. Уҡыусыларыбыҙ ҡалабыҙҙа, республикабыҙҙа уҙғарылған төрлө предметтарҙан олимпиадаларҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, ижади конкурстарҙа

һәм спорт ярыштарында даими ҡатнашып, юғары уңыштарға өлгәшәләр.

Әйтеп үтергә кәрәк, быйылғы уҡыу йылында «Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү» дәүләт программаһына ярашлы рәүештә Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы уҙғарған конкурс һөҙөмтәләре буйынса гимназиябыҙҙың Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты интерактив комплекс менән йыһазландырылды. Әлбиттә, бындай күрһәтелгән иғтибар эшләргә дәрт һәм яуаплылыҡ өҫтәй, яңы талаптар ҡуя.

Быйылғы «XII Кейекбаев уҡыуҙары»на ла беҙ шулай уҡ тырыш, булдыҡлы, киләсәккә ҙур маҡсаттар ҡуйып алға барған уҡыусыларҙы саҡырҙыҡ. Бөгөн республикабыҙҙың төрлө ҡалаларынан һәм райондарынан йыйылған уҡытыусылар һәм уҡыусылар тел һәм әҙәбиәт өлкәһендәге асыштары менән уртаҡлашырҙар, фекер алышырҙар, филология фәндәре докторы, профессор, билдәле тюрколог, яҙыусы һәм туған телебеҙҙе донъя кимәленә сығарған мәшһүр ғалим Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың эшмәкәрлегенә байҡау яһарҙар. Әҙәби әҫәрҙәрҙә эҙләнеүселәр Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ватандаштарыбыҙҙың ҡаһарманлығы, батырлыҡтары тураһында бәйән итер. Шулай уҡ быйылғы конференцияла талантлы уҡыусыларҙың ижади эштәре юғары баһа алыр тип ышанабыҙ.

Конференцияла ҡатнашыусыларға уңыштар, яңы асыштар теләйем!

Илишева Р.Х.,
филология фәндәре кандидаты, доцент,
Башҡорт дәүләт университетының башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты деканы

Ҡалабыҙҙың үҙенсәлекле күренеше, рспубликаның милли мәғариф өлкәһендә билдәле әһәмиәткә эйә булған фәнни-ғәмәли форумда ҡатнашыусыларҙы БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты уҡытыусылары һәм студенттары исеменән тәбрикләйем!

Республика мәктәптәрендә милли телдәрҙе уҡытыуҙа ҙур методик тәжрибә тупланды. Көслө, заманса методика һәм алымдарҙың барлыҡҡа килеүе, һөҙөмтәле эшләүсе тәрбиәсе һәм уҡытыусылар быуынының үҫеп сығыуы – һуңғы йылдарҙа туған телдәр уҡытыу өлкәһендәге телгә алырлыҡ уңыш, ыңғай һөҙөмтә. Мәктәп уҡытыусыларының фиҙакәр хеҙмәте нигеҙендә туған телдәр уҡытыу

сифаты яңы баҫҡысҡа күтәрелде, һәм бында, һис шикһеҙ, Стәрлетамаҡ мәктәптәре башҡорт теле уҡытыусыларының һиҙелерлек өлөшө бар.

Туған телгә бәйле һорауҙар күптән инде уны ҡала шарттарында һаҡлау һәм үҫтереү проблемалары менән бәйле. Башҡортостанда ҡала башҡорттары проблемаһы, ҡалаларҙа күп милләтле мәҙәни мөхит булдырыу ҙур социаль-мәҙәни мәсьәлә булып ҡала. Тыуған ҡалабыҙҙа Ж. Кейекбаев исемендәге гимназия, интернат-лицейҙар, мәктәптәр, балалар баҡсалары, колледждар, башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты, театр-концерт берләшмәһе, ҡала гәзите, китапханалар күп милләтле мәҙәни мөхит булдырыуға ғәйәт ҙур өлөш индерә. Кейекбаев уҡыуҙарының йәмәғәтселекте бер ҡорға йыйыусы форум булараҡ тотҡан урыны йәмәғәтселек тарафынан тейешле баһалана.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) тарафынан 2020 йыл Башҡорт теле йылы тип ителде. Республикала телде һаҡлау һәм яҡлау буйынса хәрәкәттең әүҙемләшеүе ҡыуандыра. Башҡорт теле йылында үткән Кейекбаев уҡыуҙарының, һәр ваҡыттағыса, һөҙөмтәле үтеүенә һәм фәнни асыштарға бай булыуына ышанабыҙ. Был сараны юғары кимәлдә әҙерләүсе гимназия коллективына артабан да ижади уңыштар теләйбеҙ!

I БҮЛЕК

УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ҺӘМ СТУДЕНТТАРҘЫҢ ҒИЛМИ-ТИКШЕРЕНЕҮ ЭШТӘРЕ

Арҫланова И.И., 5-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Үтәев А.Ф.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

РӘШИТ НАЗАРОВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ДУҪ ОБРАЗЫ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Рәшит Назаров шиғриәтендә дуҫ образы айырыуса ҙур урын алып тора. Мәҫәлән, шағирҙың ике юллыҡтарында бәхет, шатлыҡ, ҡайғы, тормош айышы, йәшәү мәғәнәһе һымаҡ төрлө философик темалар күтәрелә. Был әҫәрҙәр төҙөлөшө, шиғри ағымы менән башҡорт халыҡ ижадындағы мәҡәл, әйтемдәргә яҡын торалар.

Батҡаҡ бәрә, дуҫ, ҡояшҡа.
Үҙеңдең бит төшөр башҡа, –

тигән юлдар башҡорт халыҡ ижадындағы «Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң» тигән мәҡәленә тура килә.

Р. Назаров ерҙәге бар башланғысты мөхәббәттән, һөйөүҙән башлана тип иҫәпләй. Был мөхәббәт ҡатын-ҡыҙға ҡарата ғына түгел, ата-әсәгә, туғандарыңа, дуҫтарыңа, ауылдаштарыңа, тыуған ереңә, тәбиғәтеңә, ғөмүмән, кешене уратып алған бар мөхиткә булған мөхәббәт. Автор бар нимәгә ғашиҡ әҙип, ул ярата, һөйә, ғашиҡ була белә, мөхәббәттең ҡәҙерен аңлай:

Эй, ауылым! Күңел тойғоларым
Сәскә төҫлө үҫһен ҡырыңда.
Һиңә булған яҡты мөхәббәтем
Урын алыр йөрәк йырымда.
Һин бит бирҙең миңә йәшәү көсөн,
Ҡанат ҡуйҙың хыял-уйыма.
Сафлыҡ менән дуҫлыҡ төҙөр өсөн
Ғашиҡ иттең Өршәк буйына...

«Йөрәк» шиғырында лирик герой йөрәген дуҫтарына һәм һөйгәненә илтә. Әммә һуңғыһы мөхәббәтте ҡабул итмәй. Шул саҡ лирик герой хурланып, йөрәген күккә ата һәм ул йондоҙға әйләнә:

© *И.И. Арҫланова, А.Ф. Үтәев, 2020*

Йыртып астым күкрәгемде,
Йолҡоп алдым йөрәгемде
Һәм, йомарлап устарыма,
Илттем уны дуҫтарыма,
Илттем уны һиңә, йәнем,
Тик күрмәнең ниңә, йәнем?..

Шиғырҙа һүрәтләнгән лирик геройға ихласлыҡ, ярһыулыҡ хас. Ул уфтанмай ҙа, ах та итмәй, мөхәббәт ғазабынан күҙ йәше лә түкмәй. Был ғазаптарҙы ул ғорур һәм түҙемле кисерә. Шиғырҙың йөкмәткеһе романтик пафос менән һуғарылған, ә бына автор үҙе ятаҡан поэтик образдар (йөрәк һәм йондоҙ) аша ирешә.

«Дуҫ менән һөйләшеү» шиғыры аша беҙ шағир йөрәге мөхәббәт өсөн генә яратылмаған тигән фекергә килә беҙ. Лирик герой йөрәген дуҫтарына аса, сөнки улар уның шатлығын уртаҡлашыусы, ҡайғыһын таратыусы, йыуатыусы, күңелендә иң яҡын кешеләр:

Һөйөклө дуҫым! Йөрәкте
Мин һиңә генә асам,
Усыңда ята тетрәп ул,
Усыңда – көтөп баҡһаң.

Р. Назаров «Дуҫҡа – һөйөү, дошманыңа – нәфрәт» шиғырында дуҫлыҡ бар ерҙә дошман барлығын да иҫкәртмәй ҡалмай. Ә инде ысын дуҫ тип йөрөгән кешең аҫтыртын дошман булып сыҡһа, был – иң хәтәре:

Тик хыянат итһә шул ҡурҡаҡ «дуҫ»,
Шунан да ҙур иргә ваҡлыҡ юҡ,
Тормош өсөн барған яуҙа саҡта
Тәү пуляны һалдат уға ата, –
Шунан да ҙур ерҙә хаҡлыҡ юҡ…

Был шиғырҙа дуҫ образының антиподы дошман, тәфтишсе образы шиғырҙың йөкмәткеһенә төшөнөргә, аҡты ҡаранан, яҡшыны ямандан айырырға ярҙам итә:

Дуҫҡа – һөйөү, дошманыңа – нәфрәт,
Шунан да ҙур ерҙә хаҡлыҡ юҡ.
Дуҫты йолоп тормош дауылында
Бысранһа дошман ҡандарында, -
Шунан да ҙур иргә сафлыҡ юҡ.

Шағирҙың «Дуҫлыҡ» шиғырында дуҫтың ауыр мәлдәрҙә, етди эштә, юлда, тормош һикәлтәләрен үткәндә һыналыуы тураһында күренә тиелә. Ысын дуҫ ниндәй генә хәл булһа ла ярҙам итергә әҙер тороусы, ҡайғыны ла, шатлыҡты ла уртаҡлашыусы булырға тейеш:

Ысын, дуҫтар, бәлки, ғүмерендә лә

«Дуҫым», тиеп, һиңә һүҙ әйтмәҫ.
Әйтмәһен дә…
Тик бел:
Ул һүҙ йәшәй,
Иң йылы хис булып, йөрәктә!

Бергә һабаҡ алған уҡыусылар, хеҙмәткәрҙәр, ата-әсәйең, һиңә ышанған кеше дуҫ була ала. Шуға күрә, Р. Назаровтың «Һау бул» шиғырында лирик герой үҙенең иң яҡын дуҫын – әсәһен һүрәтләй. Әсәй – беренсе дуҫ һәм тәрбиәсе, ул балаһы өсөн йәнен бирергә әҙер:

Һау бул, һау бул! Һин бит үҙең, әсәй,
Һин бит үҙең тотоп ҡулымдан,
Тәпәй баҫҡан тәүге көнөмдән үк,
Илттең юлға… Сәләм улыңдан!

Дөйөмләштереп әйткәндә, Р. Назаров ижадында дуҫ образы йыш осрай. Дуҫ шатлыҡта ла, ҡайғыла ла, бәлә килгәндә лә – һәр ерҙә һине яҡлаусы, ҡурсалаусы, кәңәшсе, ярҙам ҡулы һуҙыусы яҡын кеше.

Әҙәбиәт:

1. Ғафаров Б. V-VI кластарҙа Рәшит Назаров шиғырҙарын өйрәнеү // Башҡортостан укытыусыһы. – 1996. – №5. – 33-35-се биттәр.
2. Samirkhanova G.Kh., Bayguzhina G.Sh. SATIRE AND HUMOUR IN THE WORKS OF RASHIT NAZAR // Проблемы востоковедения. – 2016. – №1 (71). – С. 63-69.
3. Үтәев А.Ф. Хәҙерге башҡорт шиғриәтенең лирик геройын өйрәнеү: Уҡыу ҡулланмаһы. – Стәрлетамаҡ: БДУның Стәрлетамаҡ филиалы, 2014. – 116 бит.
4. Хөсәйенов Ғ.Б. Рәшит Назаров шиғриәте // Ағиҙел. – 2008. – №1, 2.

Арҫланова Р.Ф., 3-сө курс аспиранты
Ғилми етәксеһе – филол.ф.докторы, профессор Сәләхова З.И.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ АЛМАШТАРҘЫҢ КҮПЛЕК ФОРМАЛАРЫ

Ә.М. Аҙнабаев, Т.М. Ғарипов, Н.К. Дмитриев, М.В. Зәйнуллин, К.Ғ. Ишбаев, Э.Ф. Ишбирҙин, Н.Х. Ишбулатов, Ж.Ғ. Кейекбаев, Ғ.Ғ. Ҡаһарманов, В.Ш. Псәнчин, М.Х. Әхтәмов, Ә.Ә. Юлдашев һ.б.

© *Р.Ф. Арҫланова, З.И. Сәләхова, 2020*

телсе-ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә башҡорт теленең тарихи эволюцияһы процесында күплек категорияһының формалашыу процесы, уның синтаксик функциялары, стилистик мөмкинселектәре, күплектең яһалышына бәйле фекерҙәр һәм башҡа теоретик фекерҙәр сағыла.

Башҡорт теленең күплек категорияһының формаларын боронғо Орхон-Енисей яҙмаларында уҡ күрергә мөмкин. Белеүебеҙсә, оҙайлы дәүер төрки халыҡтары өсөн уртаҡ тел йәшәгән. Боронғо телдә айырыуса күплек формалары йыш сағылыш таба. Улар, берлек формаларынан айырмалы рәүештә, боронғо төрки телдә мөһим урын тота.

Ғөмүмән, төрки телдәрҙә алмаштарҙың күплек формаһы яһалышында эске флексия ҡатнашмай, ә берлектәге алмаш нигеҙенә күплектең боронғо күрһәткесе *-з (г)*, ҡайһы бер телдәрҙә яңы ҡатмарлы ялғау *-лар-ләр* ҡушыла. Мәҫәлән, боронғо төрки *би «мин» – би-з «беҙ», си «һин» и – и си-з «һеҙ»*, о *«ул» – о-лар-лар «улар»*. Шулай ҙа эске флексия төрки телдәрҙә лә алмаштарҙың күплек формаһы яһалышында күренә: башҡорт һәм татар телдәрендә ул – *алар*. Төрөкмән һәм ҡумыҡ телдәрендә *шу* алмашы яҡын предметты, *шо* алыҫыраҡ предметты күрһәтеү өсөн ҡулланыла.

Башҡорт телендә алмаштар башҡорт теленең морфологик системаһында үҙенсәлекле урын биләй. Башҡа исем һүҙ төркөмдәре (исем, сифат, һан) һымаҡ алмаш ысынбарлыҡтағы конкрет предметтарҙы, хәл-ваҡиғаларҙы белдермәй, алмаштар телмәр процесында һүҙ барған әйберҙәр, предметтар һәм хәл-ваҡиғаларҙы актуалләштереп киләләр. Лексик берәмек булараҡ һан яғынан күп булмаһалар ҙа, улар телмәрҙә актив ҡулланыла, сөнки алмаштар башҡа исем һүҙҙәрҙең һәм рәүештәрҙең урынбаҫары сифатында уларҙы һөйләмдә алмаштырып киләләр [2; 67].

Һөйләмдән тыш үҙ аллы ҡулланылған алмаштар, ғәҙәттә, дөйөмләштерелгән мәғәнә белдерә, ә инде һөйләм эсендә, контекста айырым мәғәнә белдереү мөмкинлегенә эйә була. Бер төркөм алмаштар һөйләмдә сифаттарҙы, икенселәре һандарҙы, өсөнсөләре рәүештәрҙе алмаштырып килә. Шулай уҡ алмаштар исемдәр урынына ла һөйләмдә актив сығыш яһай. Улар урынында килгәндә алмаштар исемдең бөтә категорияларын да ҡабул итәләр. Шуға күрә, алмаштар күплек категорияһын ҡабул итеп, төрлө жанрға ҡараған текстарҙа актив ҡулланыла. Бындай активлыҡты зат алмаштарында күрергә мөмкин. Зат алмаштарының күплек һаны аралашыу, һөйләшеү процесындағы заттарҙың (шәхестәрҙең) һәм предметтарҙың зат яғынан күп булыуын күрһәтә: *беҙ, һеҙ, улар.* Мәҫәлән: ***Беҙ*** *шунда балыҡ ебәреп үрсетһәк,*

ҡалай һәйбәт буласаҡ (М. Кәрим). Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин ***һеҙгә*** *(М. Кәрим).* ***Улар*** *түбән үк төшәләр - үрел дә тот үҙҙәрен (М. Кәрим)!* Билдәле булыуынса, башҡорт телендә 3-сө зат *ул* алмашы *ул* күрһәтеү алмашы менән бер сығанаҡтан. Төрки телдәрҙә *ул* алмашы, башлыса, түбәндәге өс төрҙә килә: *1) ал, 2) ол, о 3) ул, у.* Айырым телдәрҙә *улар* шулай килә: ҡырғ. *ал;* хак. *ол*; алт., ҡаҙ., ҡ.-ғалп., нуғ., төрөкм. *ол*; тув. *ол,* төрөк, *о*, *Ул* алмашының иң боронғо формаһы *у* (о) булған, икенсе төрлө әйткәндә, тәүге осорҙа *-л* элементы булмаған [1; 108]. Шуға күрә *-лар* аффиксы һуңғы күренеш һанала һәм, ул күплекте белдерә. Күрһәтеү алмаштары араһында *был, теге, шул, ошо* алмаштары айырым урын тота. Уларҙың күплек формалары телмәрҙә киң ҡулланыла. Мәҫәлән: *Тегеләр менән һөйләшмә. Былар шулай уйлайҙар икән. Шулар менән бәхәсләшмә.* Билдәһеҙлек, билдәләү, эйәлек һәм һорау алмаштары ла күплек аффиксын ҡабул итә. Мәҫәлән: *Ҡайһы бер үтә шуҡтары өҫкә һикереп сығалар ҙа,* ***үҙҙәренең*** *тәңкәләрен йылтыратып, маҡтанған булалар (М. Кәрим). Врач күреп ҡалһа,* ***бөтәбеҙгә*** *лә эләгәсәк (М. Кәрим). Тауҙың артында* ***әллә кемдәрҙең*** *ҡысҡырышыуҙары, эт өрөүҙәре, мал тауыштары ишетелә башланы («Мең башлы аждаһын еңгән батыр» әкиәтенән). Иртәгә лә көн* ***беҙҙеке*** *бит (М. Кәрим). Ә Вәзир* ***уларҙыҡын*** *таларға маташа (М. Кәрим).* ***Ҡайһығыҙҙыр*** *бик шәп йырлай икән (М. Кәрим).*

Шулай итеп, алмаштарҙың үҙҙәренә генә хас грамматик категориялары юҡ. Башҡа һүҙ төркөмдәре менән мөнәсәбәттә булып, уларҙы алмаштырып килгәнлектән, уларҙың грамматик категориялары менән файҙаланалар. Алмаштарҙың күплек һаны аралашыу, һөйләшеү процесындағы заттарҙың (шәхестәрҙең), йәки предметтарҙың зат яғынан күп булыуын күрһәтә.

Әҙәбиәт:

1. Аҙнабаев Ә.М., Псәнчин Ю.Ш. Башҡорт теленең тарихи морфологияһы (сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). – Өфө, 1976.

2. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле: Морфология. – Өфө: БДУ, 2002.

Арыҫланғәлиев И.Р., 9-сы класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зәйҙуллина М.И.
Туймазы ҡалаһының 7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

БАШҠОРТ ТЕЛЕН ҺАҠЛАУ ҺӘМ КИЛӘСӘК БЫУЫНҒА ТАПШЫРЫУ

Хәҙерге ваҡытта донъяла глобалләшеү һәм интеграция процесы бара. Был осорҙа телдәрҙең кәмей барыуы күҙәтелә. ЮНЕСКО тарафынан башҡорт теле лә юғалыу хәүефе аҫтында булған тел тип иғлан иттелде. Шуға күрә туған телебеҙ – башҡорт телен һаҡлау республика һәм рәсәй кимәлендә генә түгел, ә донъя кимәлендә лә актуаль проблемаларҙың береһе булып тора.

Тикшеренеү эшебеҙҙең маҡсаты: башҡорт телен һаҡлау үҙенсәлеген өйрәнеү. Бурыстары: 1) Тел һәм башҡорт теленең килеп сығышы һәм үҫеше тарихы тураһында материалдарға байҡау яһау; 2) Юҡҡа сығыу ҡурҡынысы аҫтында булған телдәр тураһында ЮНЕСКО билдәләмәһен өйрәнеү; 3) Туймазы ҡалаһы 7-се урта мәктәбен уҡыусылары араһында социалогик һорау алыу уҙғарыу, интервью алыу.

Тикшеренеү обьекты: башҡорт теле.

Тикшеренеү предметы: башҡорт телен һаҡлау үҙенсәлектәре.

Тикшеренеү эшебеҙҙең гипотезаһы: башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған уҡыусыларҙың телгә ҡарата ихтирамы, ғорурлығы ныҡлыраҡ, белемдәре тәрәнерәк. Тикшеренеү эше барышында эҙләнеү, һорау, интервью алыу методтары ҡулланылды.

Ғилми әҙәбиәтте өйрәнеп, йәмғиәтенең иң ҙур ҡаҙанышы – тел һәм башҡорт теленең килеп сығышы һәм үҫеше тарихы тураһында материалдар йыйҙыҡ, юҡҡа сығыу ҡурҡынысы аҫтында булған телдәр тураһында ЮНЕСКО билдәләмәһенә күҙәтеү эшләнек. Башҡорт теле юғалыу хәүефе аҫтында булған тел булыуын белгәс, беҙҙе телебеҙ артабан һаҡланырмы-юҡмы? Һаҡланһа – күпме ваҡытҡа тиклем, тигән һорауҙар борсой. Ошо һорауҙарға яуап эҙләп тикшеренеү эшебеҙҙең практик өлөшөндә Туймазы ҡалаһы 7-се урта мәктәбе уҡыусылары араһында уҡыусыларҙың башҡорт телен белеү-белмәүҙәре, был телде туған тел тип йөрөтөүҙәрен, теләп өйрәнеүҙәрен, башҡорт йолаларын, милли аштары, кейемдәрен, белеү-белмәүҙәрен тикшереү маҡсатында

© *И.Р. Арыҫланғәлиев, М.И. Зәйҙуллина, 2020*

социалогик һорау алыу уҙғарылды. Алда ҡуйылған гипотезабыҙ раҫланды: башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған уҡыусыларҙың телгә ҡарата ихтирамы, ғорурлығы ныҡлыраҡ, белемдәре тәрәнерәк булып сыҡты. Беҙ телде тәрәнерәк өйрәнгән уҡыусылар телде яҡшы белә, телгә ҡарата ыңғай ҡараштa булыуын иҫбатланыҡ. Мәктәбебеҙ ҙә башҡорт телен өйрәнеү буйынса күп төрлө эштәр башҡарыла, уҡыусылар ҙа телде өйрәнеүҙә ҙур уңыштарға ирешкән. Туған башҡорт телен өйрәнеү системаға һалынған, ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

Шулай итеп, тикшереү эше барышында Туймазы ҡалаһы 7-се урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙең юғары һөҙөмтәләрен күрҙек.

Һүҙебеҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтеп китәйек: рус телен барыһы ла белә, шулай ҙа туған телеңде өйрәнеү – ул һәр кешенең бурысы. Минең уйымса, Башҡортостанда йәшәп тә туған башҡорт телеңде белмәү, йәки белергә теләмәү – хурлыҡ. Беҙҙең республикала, ҡала һәм мәктәбебеҙҙә туған телен өйрәнеү өсөн шарттар булдырылған. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә лә бар мөмкинселектәр бар. Башҡа милләттәр араһында үҙебеҙҙе кәмһетмәйек, абруйыбыҙҙы төшөрмәйек тиһәк, башҡорт телен өйрәнергә, һаҡлап ҡалырға, башҡорт мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен юғалтмаҫҡа, киләһе быуынға мираҫ итеп ҡалдырырға тейешбеҙ.

Әҙәбиәт:

1. Башҡортостан энциклопедияһы. – Өфө: «Башҡортостан энциклопедияһы» ғилми-нәшриәт комплексы, 2013.
2. Бикбулатов Н.В., Юсупов Р.М. Башкиры: этническая история и традиционная культура. – Уфа: НИ Башкирская энциклопедия, 2002. – 247 с.
3. Баязитова Р.Р. Башҡорттарҙың традицион ғаилә этикеты: монография. – Өфө, 2010.
4. Дыбо А.В., Хисамитдинова Ф.Г. Башкирский язык в системе алтайских языков. // История башкирского народа: в 7т. / гл.ред. М.М. Кульшарипов, 400 с.

Арыҫланова Н.Р., 2-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Арыҫланова М.С.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВ ӘКИӘТТӘРЕНЕҢ ТӘРБИӘҮИ ҺӘМ ТЕЛ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Донъя тел ғилемендә һәм төркиәттә киң билдәле ғалим, телсе, талантлы әҙип, профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми-методик һәм әҙәби мираҫы башҡорт филологияһы һәм төрки тел ғилемендә мөһим урын алып тора. Жәлил Ғиниәт улы – хәҙерге заман башҡорт тел ғилеме мәктәбенә нигеҙ һалыусы лингвист. Ул шулай уҡ публицист, оҫта педагог һәм талантлы яҙыусы ла.

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев юғары мәктәп уҡытыусыһы, телдәрҙе белгән полиглот була. Немец теленең бөтә нескәлектәрен белгән ғалим тәржемә эше менән дә шөғөлләнә.

Жәлил Кейекбаев талантлы ғалим булған, уның «Башҡорт теленең фонетикаһы»; «Башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеше»; «Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы» кеүек хеҙмәттәре башҡорт тел ғилемен өйрәнеүгә, үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға ҙур өлөш индерә, уның киләсәктә өйрәнелеү юлдарын күрһәтеү өсөн йүнәлеш бирә.

Жәлил Кейекбаев – билдәле яҙыусы, уның «Туғандар һәм таныштар» романы, «Зөбәй Үтәғолов» очеркы; «Урман әкиәттәре»; «Ай, Уралым, Уралым» ҡобайыры бөгөнгө көндә лә уҡымлы.

1960 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә уның «Әкиәттәре» донъя күрә. Был йыйынтыҡҡа 8 әкиәт һәм бер хикәйәт ингән.

Жәлил Кейекбаев был әкиәттәрен балаларына уҡыған, хәҙер уҡыусы балалар башҡорт, урыҫ, инглиз, немец, төрөк телдәрендә ошо әкиәттәрҙе уҡый ала. Бында төп геройҙар – Айыу, Төлкө, Терпе, Бал ҡорттары, Кеше һ.б. Автор әкиәттәрен, ғөмүмән, башҡа әҙәби әҫәрҙәрен дә ябай, халыҡсан тел менән ижад итә. Әкиәттәрен халыҡсан итеп, кескәй уҡыусылар өсөн аңлайышлы һәм еңел, фәһемле итеп яҙған автор. «Айыуҙың ниңә ҡойроғо юҡ?», «Бал ҡорттары ниңә кешегә эйәләшкән?», «Айыу ниңә ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?», «Айыу ҡырмыҫҡаға ниңә үсле, ә ҡырмыҫҡа ниңә көслө?», «Төлкө менән бөрсә», «Төлкө менән терпе», «Төлкө менән йылан» һ.б. Төлкө образы йыш ҡына хәйләкәр, ике йөҙлө, аҫтыртын, яуыз итеп тасуирилана. Ул, үҙ мәнфәғәттәрен уйлап, алдаша, хәйлә ҡора. Ә айыу, киреһенсә, изге итеп һүрәтләнә. Ул – урман хужаһы. Айыуҙың ниңә ҡойроғо булмауы,

© *Н.Р. Арыҫланова, М.С. Арыҫланова, 2020*

ниңә ул ҡышҡыһын өңөнән сыҡмауын автор ябай итеп уҡыусыға аңлата. Балалар хайуандарҙың ҡылыҡтары хаҡында күберәк мәғлүмәт ала. Мәҫәлән: *ни өсөн айыу ояла ҡышлай, ҡуян етеҙ йүгерә, ни өсөн уны етеҙ тиҙәр, ни өсөн терпенең энәләре бар*, һ.б.. Әкиәттәр балаларға хайуандар донъяһын киңерәк асырға мөмкинлек бирә. Жәлил Кейекбаев балаларға төрлө йәнлектәрҙең йәшәү мөхиттәре хаҡында ла хикәйәләй, әкиәттәрҙә тәрбиә мәсьәләләре лә төп урынға ҡуйыла.

«Айыуҙың ниңә ҡойроғо юҡ» тигән әкиәт уҡыусыға һаран булмаҫҡа, кеше һүҙенә ҡолаҡ һалырға өйрәтә.

«Айыу ни өсөн ҡыш буйы өңөнән сыҡмай» тәүге әкиәттең дауамы кеүек. Айыу ҡойроҡһоҙ ҡалғас, бойоғоп ҡына йөрөгән, башҡа хайуандарҙан ҡасҡан, үҙенсә оялған. «Ояла белгән кешенең намыҫы бар», тигән боронғолар.

«Айыу ҡырмыҫҡаларға ниңә үсле, ә ҡырмыҫҡалар ниңә көслө» әкиәтендә *көслө яңғыҙ булһа, күмәк көсһөҙҙәр алдында көслө түгел*; *күмәкләп эшләһәң, һәр эш тә ырай*; *үс тоторға һәм кешенең өйөн туҙҙырырға ярамай* кеүек мәңгелек төшөнсәләрҙе автор әкиәткә таянып аңлата. «Ҡуян ул тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған», тигән халыҡ мәҡәле ҡулланылған: кескәй бала ата-әсә ҡарауында булырға тейеш, уларҙан ҡасып йөрөргә ярамай. Хәҙерге осор өсөн бик актуаль булып тора был әкиәт.

Яҙыусы бал ҡорттарының уңған булғанын, кеше менән нисек дуҫлашып китеүен «Бал ҡорттары ни өсөн кешегә эйәләшкән» әкиәтендә күрһәткән: изгелекле булырға, яҡшылыҡ ҡына уны барлыҡҡа килтерә. *Кешегә, хайуандарға, бөжәктәргә һәм бөтә тәбиғәткә ҡарата ярҙамсыл булырға һәм дуҫ йәшәргә кәрәк*, тигән фекерҙәр бирелә әкиәттә.

Хәҙерге заман өсөн бик актуаль проблемаларҙың береһе – тәбиғәткә ҡарата һаҡсыллыҡ тәрбиәләү хаҡында әкиәт. Тәбиғәтте һаҡламаһаҡ, яҡламаһаҡ, ул тәләфләнә, бөтә, шуға күрә тәбиғәттә булған бөтә нәмәне: тереклекте, файҙалы ҡаҙылмаларҙы, һыуҙы һаҡлап тотонорға кәрәк.

Артабанғы әкиәттәрҙең төп геройы – төлкө менән терпе. «Төлкө менән бөрсә» әкиәтендә ҡан эскес бөрсәләрҙең төлкөнө нисек итеп йонсотоуы һүрәтләнә, сөнки урлашырға ярамай һәм таҙа, йыуынып йөрөргә кәрәк. Таҙа булһаң, бөрсә лә, ауырыу ҙа йоҡмай. Әлбиттә, бер-береңә ҡарата ярҙамсыл булырға ярҙам һораған төлкөгә айыу, бүре, тейен йә башҡаһы кәңәш бирһә, ярҙам итһә, ул былай ябыҡмаҫ ине.

«Төлкө менән терпе» әкиәтендә бәләкәй генә терпенең хәйләкәр төлкөгә бирешмәүе күрһәтелә: терпе энәләрен тырпайтып, төлкөнән һаҡланып ҡалған, уға һунарсы ла ярҙам иткән. Батырлыҡ төрлө

бәләнән ҡотҡара ала, тимәк, ҡурҡаҡ булмаҫҡа һәм үҙенде һаҡлай белергә өйрәнергә кәрәк.

«Терпе менән йылан» әкиәтендә лә зәһәр йыланды терпе шулай энәләре менән ҡурҡытып еңә. Тимәк, әҙ һөйләргә, күп эшләргә һәм бушҡа маҡтанырға ярамай. Әгәр был эш ҡулыңдан килмәй икән – тотонма.

Әкиәттәрҙә хайуандар йәнләндерелеп бирелгән, әммә Кеше образы бында иң аҡыллы, ярҙамсыл, тырыш образ булараҡ та күрһәтелә. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә хайуандарға хас һыҙаттар Ж. Кейекбаев әкиәттәрендә лә һаҡлана, байытыла. Хайуандарҙы Жәлил Ғиниәт улы әкиәттәрендә ябай халыҡса төрлөсә атай, уларҙың сифаттарын асып бирә: *айыу – айыу ағай, тархан, көслө, яҫытабан, арҡырыаяҡ; төлкө – көләнсәс, оҙонкойроҡ, хәйләкәр; ҡуян – ҡурҡаҡ, ҡолағын ҡайсылап, күҙен таҫырайып йөрөгән йәнлек; йылан – уҫал, ҡара; ҡырмыҫҡа – эре, ҡыҙыл булһа, айыу ҡырмыҫҡаһы; тейен – ҡыҙылгүҙ; сысҡан – иҫәр; терпе – арҡырыаяҡ; бөрсә – мәхлүк* һ.б.

Шулай итеп, Ж. Кейекбаевтың әкиәттәрендә хәҙерге заман өсөн дә кәрәкле тәрбиәүи проблемалар күтәрелә. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш, хеҙмәткә һәм батырлыҡҡа, дцҫлыҡҡа ҡарата ихтирам уятыла был әкиәттәрҙә.

Әҙәбиәт:

1. Кейекбаев Жәлил. Урман әкиәттәре: башҡорт, урыҫ, инглиз, немец, төрөк телдәрендә. – Өфө: Китап, 2011.

Байбулов И.И., 2-се курс магистранты
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Вәлиева Г.Д.
БашДУ

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ РЕКЛАМА ТЕКСТАРЫНЫҢ СИНТАКСИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Реклама (лат. тел. reclamare – «иҫбат итеү, ҡысҡырыу, күтәрелеп сығыу») – төрлө юлдар, саралар менән яҡтыртылған, билдәле бер төркөм кешеләренә ҡарата йүнәлтелгән, рекламаланған тауарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы һәм артабан сауҙа өлкәһендә уның һатылыу үҫешенә булышлыҡ иткән төп мәғлүмәт. Ул үҙенең таралыуы менән бөтә Ер шарын тиерлек биләп алған, күп телдәрҙә сыға һәм шулай уҡ башҡорт телендә лә яҡшы үҫеш ала.

© *И.И. Байбулов, Г.Д. Вәлиева, 2020*

Рекламаның үҙенә тиҙ арала ҡыҙыҡһыныусыларҙы таба алыуы уның йөкмәткеһе һәм төҙөлөү үҙенсәлегенән тора. Башҡорт телендә сыҡҡан реклама текстары ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙән төҙөлә.

Ябай һөйләмдәр рекламаның исемендә осрай. Мәҫәлән: *«Әҫәрҙәре үҙ уҡыусыларын тапһын»; «Бәхетленең байрамы бер юлы»; «З. Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте тәҡдим итә»; «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналына 2006 йылға яҙылыу дауам итә»; «Гәзиткә яҙылыусылар артты»; «Тамаша һеҙгә килә»; «Башҡортостан гәзитенә яҙылғандар отолмай»* һ.б. Бындай ябай һөйләмле, әммә мауыҡтырғыс исем аҫтындағы рекламалар уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмай.

Шулай уҡ ябай һөйләмдәр текст эсендә йыш ҡулланыла. Мәҫәлән: *«Яҡын тирәлә йәшәүселәр редакцияға килеп тә яҙыла ала»; «Аҡмулла төйәге» гәзитенә 2012 йылдың I ярты йыллығына яҙылыу бара»; «Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә Булат Рафиҡовтың «Юғалтмағыҙ мине» китабы сыҡты»; «Китапҡа «Умартасылыҡ тураһында» БР Законы ла ингән»; Мәғариф яңылыҡтары яҡтыртыласаҡ»; «Бындай лотореялар киләсәктә лә үткәреләсәк»* һ.б.

Ябай һөйләмдәрҙең төрҙәренә иғтибар иткәндә, алда килтерелгән миҫалдарҙа тик ике составлы һөйләмдәр генә ҡулланылыуы күҙәтелде. Шулай уҡ реклама текстарында бер составлы һөйләмдәрҙә йыш осрай. Улар түбәндәге миҫалдарҙа күренә.

1. Билдәле эйәле һөйләмдәр: *«Бергә ҡалайыҡ»; «Яңы мең йыллыҡта ла бергә булайыҡ»* һ.б.

2. Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр: *«Осрашыуҙарҙа баҫмабыҙҙы ҡышын йышыраҡ уҡыуҙарын әйтәләр»* һ.б.

3. Эйәһеҙ һөйләмдәр: *«Мотлаҡ баҫмабыҙға яҙылырға кәрәк»; «Гәзиткә редакцияла яҙылырға була «Гәзитте редакцияға килеп алырға кәрәк буласаҡ»* һ.б.

4. Атама һөйләмдәр: *«Тамаша – мәҙәниәт һәм сәнғәт журналы»; «Пластик тәҙрәләр, ишектәр. Тиҙ һәм сифатлы»* һ.б.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, бындай бер составлы һөйләмдәр реклама текстарына йыйнаҡлыҡ һәм ябайлыҡ өҫтәйҙәр.

Ҡушма һөйләмдәр реклама текстарында шулай уҡ йыш ҡулланып, мәғлүмәтте асығыраҡ һәм мәғәнәлерәк итеп бирергә ярҙам итә. Төрҙәренә килгәндә, теҙмә һөйләмдәргә ҡарағанда эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр йышыраҡ осрай. Был күренеш түбәндәге миҫалдарҙа асыҡ күренә.

1. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр: *«Районыбыҙҙың үҙендә йәшәүселәр гәзиткә редакцияға килеп тә яҙыла алалар, тик улар гәзитте редакцияның үҙенән килеп кенә*

алаласактар»; «Ятраткан журналыбыҙға ярты йыллыкҡа яҙылыу дауам итә, әммә ваҡыт ҡыҫҡарып килә» һ.б.

Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр: *«Хайуандар тураһындағы, тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәренә айырым өлгөләр генә тәҡдим ителә, тематикаһы, йөкмәткеһе яғынан бала-сағa үҙ күргән һәм тәрбиәүи яҡтан айырыуса әһәмиәтле булған йомаҡ-әкиәттәр менән ғибрәтле әкиәттәргә урын күберәк бирелә»* һ.б.

2. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр: а) эйәрсән шарт һөйләмдәр: *«Фараздары теүәлерәк булыусылар күп булһа, уларға редакцияның дәртләндереү бүләктәре тапшырыласаҡ»; «Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе коллектив менән алдырһалар, беҙ эштәренә үк килтереп бирәсәкбеҙ» һ.б.*

б) эйәрсән ваҡыт һөйләм: *«Ваҡыт еткәс, беҙ һеҙгә ҡул һуҙырбыҙ».*

в) эйәрсән урын һөйләм: *«Потенциаль уҡыусыбыҙ һуңғы ваҡытта виртуаль донъяға киткән икән, уларҙы эҙләп беҙ ҙә шунда юлландыҡ.»*

г) эйәрсән сәбәп һөйләм: *«Баҫмабыҙ «Рәсәй матбуғаты» тигән каталогка индерелгән, шуға күрә бер ниндәй аңлашылмаусанлыҡ тыумаҫҡа тейеш».*

Дөйөм алғанда, матбуғатта сыҡҡан реклама текстарында ябай һәм ҡушма һөйләмдәр бер тигеҙ ҡулланыла. Ябай һөйләмдәр реклама йөкмәткеһенә ҡыҫҡалыҡ һәм ябайлыҡ өҫтәһә, ҡушма һөйләмдәр уларҙы тәрәнерәк мәғәнәле һәм бай йөкмәткеле итә.

Әҙәбиәт:

1. Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г.Р. Абдуллина, Г.Д. Вәлиева, К.Ғ. Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ.б. – Өфө: Китап, 2012. – 616 бит.

2. Валиева Г.Д., Камаева Р.Б., Усманова М.Г. Классификация текстов. // Вестник Башкирского университета, 2019. − Т. 24. №3. – С.729-731.

3. Тикеев Д.С., Тикеев Ф.С., Вәлиева Г.Д. Хәҙерге башҡорт теле. Синтаксис. – Өфө: Ғилем, 2008. – 376 б.

4. Искужина Ф.С., Валиева Г.Д. Теория и методика текста в башкирском языке (Пособие для учителя) [Электронный ресурс]. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы: учеб. пособие / Ф.С. Искужина, Г.Д. Валиева. − Уфа: Китап, 2011. − Электрон. версия печ. публикации. − Доступ возможен через Электронную библиотеку БашГУ. − <URL: https://elib.bashedu.ru/dl/read/Iskuzhina_Valieva_Teorija i metodika teksta v bashkirskom jazyke_up_2011.pdf>.

Байтурина Э., 10 класс
Научный руководитель – учитель башкирского языка и истории Абдрахманова А.М.
ГБОУ БКК ПФО имени Героя России А.В. Доставалова

ШАЙХЗАДА БАБИЧ – ПЕВЕЦ БАШКИРСКОГО НАРОДА

Мой народ имеет многих истинных сыновей и дочерей, которые посвятили свою жизнь и творчество процветанию и благополучию народа, страны, родного языка. Много среди них писателей и поэтов, благодаря которым и живет башкирский язык. Родная речь, ее неиссякаемая энергия вдохновляет к творчеству, открывает новые горизонты, манит к себе и делает сильным человека. А благодарные творцы красоты и мудрости обогащают свой язык новыми открытиями, образностью – так рождается свет и мелодия музы. Такими предстает перед нашим взором великий просветитель Акмулла, народные поэты – Тукай, Гафури, Пушкин, Есенин и д.р. Среди них сеятелем света и добра, ярким лучом в небосклоне поэзии мы воспринимаем и Ш. Бабича. В этом году испоняется 125 лет со дня рождения Бабича. Хотя прошло 100 лет его гибели, поэтический дар Бабича всегда привлекает новизной, образностью, юмором, музыкальностью и цветом добра. И потому вглядываясь в его глаза с портрета, хочется понять душу Шайхзады, который сумел совместить кровавые схватки гражданской войны с поэтической красотой родной речи, создавая светлые строки о родном народе, о его будущем:

Звенящее золотом слово
Не ради почета пою,-
Пою для народа родного
В родном златоцветном краю.

Живые закрывают глаза мертвым, мертвые на многое открывают глаза живым. Башкирский народ не смог в момент прощания закрыть глаза своему любимому поэту, похоронить его по-людски. Бабич же своей яркой жизнью и творчеством, своей борьбой на пути к свободе и гибелью на этом пути многим действительно открыл глаза, напомнив, что борьба будет нелегкой, предупреждая, что на каждом шагу придется сталкиваться с коварством, подлостью, изменой, призывая родной народ к бдительности и единству.

Творческий рост Бабича шел в тесной связи с общественным движением тех лет, в его биографии отразилась духовная биография

© *Э. Байтурина, А.М. Абдрахманова, 2020*

нации. Каждый шаг поэта был тесными узами связан с теми важными изменениями, что происходили в судьбе нации. Бабич-поэт, Бабич-фельетонист, Бабич-музыкант, Бабич-фольклорист, Бабич-педагог...

За свою короткую жизнь он успел свершить очень многое. Чрезвычайно широк был духовный мир поэта, его цели и идеалы всегда находились на высочайшем уровне. За свою короткую жизнь ему посчастливилось быть вместе с такими крупными личностями, как Заки Валиди, Риза Фахретдинов, Мухаметша Бурангулов, Галимжан Ибрагимов, Дэрдменд, Мажит Гафури, Зия Камали, Абдулкадир Инан, Хабибулла Габитов, Газиз Альмухаметов, Багбустан, Муса Муртазин, Сагит Мрясов, Шариф Манатов, Юнус Бикбов, узбекский поэт Чулпан, казахский писатель Мухтар Ауэзов, ощутить их душевное тепло, поделиться с ними светом своей музы.

Перелистав некоторые страницы жизни и творчества Бабича, можно назвать главное, что их объединяет. Прежде всего, это – народность. Его стихи были с башкирскими воинами и во время гражданской войны, и в годы Великой Отечественной, память о нем сохранилась в сердце народа даже в самые жестокие годы.

Судьба Бабича, родившегося со знаком добра, оказалась трагичной, но ее нельзя назвать несчастливой. Последние годы жизни поэта пришлись на распутицу, когда менялись пути исторического развития. Даже в этом бурном потоке Бабич рвался вперед, будто прыгая с льдины на льдину. Он творил вдохновенно, озаряя тьму, как летящий метеор. Такие мгновения в жизни нации наступают раз в столетие.

В этот мир наш великий поэт Шайхзада Бабич словно явился для того, чтобы, пожертвовав собой, воплотить в себе светлые надежды нашего народа, неустанные поиски его ума, его силу и вдохновение, талант и щедрость, свободолюбивую натуру, его взлеты и крушения на путях истории, его страдания в окружении коварства, зависти, его неутоленную жажду счастья!

Гордый Бабич, отважный Бабич, крылатый Бабич!

Гордый наш народ, отважный наш народ, крылатый наш народ!

Мое социологическое исследование среди кадетов.

Чтобы написать данную работу, мне пришлось поработать с литературой в библиотеке, поискать дополнительную информацию в интернет ресурсах и изучить биографию поэта. Мне захотелось узнать, какую роль сыграл Ш. Бабич, в борьбе за автономию Башкортостана. Эта тема мне показалась более актуальной.

В ходе исследования мною был проведен опрос кадет старших классов нашей школы. В опросе участвовали 25 человек.

На вопрос «Вам известно имя Ш. Бабича?» 54% респондентов ответили положительно, от 27% я услышал отрицательный ответ. Остальные 19% затруднялись ответить.

На второй вопрос «Вы можете сказать, что он сделал для Башкортостана?», только 51% из всех опрошенных, смогли сформулировать ясный ответ. Остальные 49 % из них остались без ответа или затруднялись ответить.

Третий вопрос «Как увековечена память Ш. Бабича в республике Башкортостан?» для опрашиваемых показался самым сложным. Лишь очень малое количество, (29%) дали удовлетворительные ответы, назвав Государственную Премию имени Ш. Бабича и музей.

Выводы по анкете. Сегодня в нашей республике сделано немало для того, чтобы имя и роль поэта, общественного деятеля, одного из лидеров башкирского национального движения Ш. Бабича сохранилось в памяти народа навсегда. Судя по результатам ответов можно сказать, что подрастающее поколение мало информировано.

Мне бы хотелось, чтобы имя Ш. Бабича звучал во всех устах, наравне с великими людьми нашей республики, такими как Салават Юлаев, Заки Валиди, Мажит Гафури, Мустай Карим и др. Я считаю, что его роль для родного Башкортостана неоценим.

В 1995 году постановлением Кабинета Министров Республики Башкортостан с целью поощрения наиболее талантливой молодежи была учреждена Государственная республиканская молодежная премия имени Шайхзады Бабича в области литературы, искусства и архитектуры. И с тех пор стало доброй традицией ежегодное чествование молодых талантов нашей республики в канун Дня российской молодежи.

В последние десятилетия книги Шайхзады Бабича были изданы в Уфе и Казани. На могиле поэта в селе Зилаир воздвигнут памятник. Имя выдающегося поэта носят улицы в Уфе, во многих городах и населенных пунктах республики. В 2017 году талантливым режиссером Булатом Юсуповым полнометражный фильм «Бабич», который не оставил равнодушными никого. Этот фильм должен посмотреть каждый, кто себя истинным патриотом своей Малой Родины!

Боҫҡанова Г.И., 9-сы класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Солтанғолова Р.Р.
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика
гимназия-интернаты

МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒЫРҘАРЫНДА ТӘБИҒӘТКӘ ҺӨЙӨҮ ТӘРБИӘЛӘҮ

Тыуған яҡтың гүзәл тәбиғәте, тыуған ер матурлығы, миҙгел артынан миҙгелдәрҙең алышыныуы, беҙҙе уратып алған донъя – ҡаурый ҡәләм эйәләре – яҙыусылар һәм шағирҙар өсөн мәңгелек актуаль булған темаларҙың береһе. Тыуған яҡтың тәбиғәте шағирға йәшәү көсө бирә, илһам сығанағы ла булып тора.

Башҡортостандың гүзәл тәбиғәте билдәле шағир Мәжит Ғафури ижадында күренекле урындарҙың береһен биләй.

Бөйөк шағирыбыҙ тыуған яҡ тәбиғәтенең илаһи матурлығын шиғырҙары аша бөтә донъя кимәленә танытты. Бөгөнгө көндә лә Мәжит Ғафури шиғырҙары актуаль булып тора.Тәбиғәт менән кеше – айырылғыһыҙ төшөнсәләр. Тәбиғәтте һаҡлау, уны киләһе быуындарға тапшырыу һәр кемдең изге бурысы.

«Ҡайһы ваҡыт шиғыр ижад ҡылған булам, эскә тулған хәсрәттән түҙмәгәндән», – тип яҙҙы халыҡ шағиры Мәжит Ғафури. Шуныһы характерлы, шағирҙың тәүге шиғырҙарынан уҡ туған халҡының, милләтенең киләсәген ҡайғыртыуға, белемгә, яңылыҡҡа, тәбиғәтте һаҡларға, тыуған ерҙе яратырға өндәгән мотивтар килеп инә.

Мәжит Ғафури ижады менән ҡыҙыҡһына башлауымдың төп сәбәбе шунан башланып китте, бер тапҡыр ауылға ҡайтҡанымда, өләсәйем миңә шиғыр һөйләп күрһәтте һәм минән: «Был шиғырҙы ишеткәнең бармы?» – тип һораны. Шиғырҙы ишеткәнем юҡ ине, иҫем китеп, аптырап тыңлап тора биргәс: «Юҡ, белмәйем», – тип яуап бирҙем.

Ул шиғыр былайыраҡ яңғырай:

Бер көн шулай гөлдәр баҡсаһында
Сәскәләргә ҡылдым тамаша.
Хуш еҫтәре менән йән шатлана,
Төҫтәренән күҙҙәр ҡамаша.

Өләсәйем түрҙә ултырған оло һандыҡты асып, иҫкереп бөткән бер китап алып миңә һондо. Был китап Мәжит Ғафуриҙың « Һайланма

© *Г.И. Боҫҡанова, Р.Р. Солтанғолова, 2020*

әçәрҙәр» тигән китабы ине. Ҡыҙыҡһыныу хисе шул тиклем көслө булғандыр, шиғыр артынан шиғыр уҡылды, үҙем дә шағир ижадын ныҡлы яратыуымды аңланым.

Тәбиғәт менән кеше икеһе бер бөтөн. Кеше тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө.

Борон-борондан башҡорт халҡы тәбиғәт ҡосағында йәшәгән, ғүмер иткән, йәйен йәйләгән, ҡышын ҡышлаған, яҙын яҙлауҙарҙа яҙлаған. Киң яландар буйлап көтөүҙәрен әйҙәгән, мул һыулы йылғаларҙа малын һыу эсергән, йәм-йәшел үләнен ашатҡан. Тәбиғәт ҡосағында тирмә ҡорған, туйҙар яһаған, төрлө ярыштар, һабантуйҙар үткәргән.

Шағир халҡы тәбиғәтте тик үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай, шиғырҙарында сағылдыра. Мәжит Ғафури шиғырҙары араһында ла тәбиғәткә арнап яҙылғандары бик күп. Мин дә был шиғырҙарҙы өйрәндем, үҙемсә фекер йөрөттөм.

Мәжит Ғафури шиғырҙары араһында «Ҡояш байығанда», «Ҡырҙа», «Һандуғастар», «Баҡсала», «Ҡоштар», «Балыҡтар һәм ҡыçала», «Үтә ғүмерем», «Йәш ҡыҙ», «Яҙ башланыуы», «Йәй көнө», «Көҙ», «Ҡыш», «Көҙ көнө», «Ҡыш фасылы», «Яҙ фасылы», «Яҙғы ҡояш», «Яҙ һәм йәй», «Йәй башы», «Ямғыр», «Ҡырҙа», «Йәйге эш ваҡыты», «Ялан» тигән шиғырҙары йыл миҙгелдәре, тәбиғәт менән бәйле. Шағир күңеле, саф йөрәге аша миҙгелдәрҙәге үҙгәреште тоя, кисерә. Һәр миҙгелгә, тәбиғәткә шағирҙың үҙ ҡарашы, үҙ фекере бар.

Был шиғырҙар араһында миңә шағирҙың бер шиғыры бигерәк оҡшаны, ул шиғыр «**Эңер ваҡыты**» тип атала.

Шағир:

Матур йәй көнөнөң дә иң күңелле, моңло бер ваҡыты,

Аяҙ көндә,ҡояш байығас,була торған эңер ваҡыты», – ти.

Шағир эңер мәлен донъяла тынлыҡ урынлашҡан мәл итеп һүрәтләй, күңел әллә ниндәй хистәр менән тула, – тип билдәләй. Шағирса әйтһәк, тоноҡ ҡына ай яландарҙы, урмандарҙы яҡтыртыуы, ағын һыу буйҙарында һандуғастарҙың үҙенсәлекле моң менән һайрауы, бөтә тере йән эйәләренең һандуғас моңон онотолоп тыңлауы – иң-иң матур күренеш.

Эҙләнеү-тикшеренеү эшемдә М. Ғафури шиғырҙарын уҡып, ижадына күҙәтеү яһағас, донъя, беҙҙе уратып алған тәбиғәт тағы ла киңерәк, йәмлерәк күренә башланы. Гүзәл Башҡортостан тәбиғәтенең матурлығы шағирҙы үткер ҡәләмле ысын шағир иткән. Мин дә күренекле шағир шиғырҙарынан илһам, көс алып шиғырҙар ижад итеп ҡараным, уларҙы һеҙгә лә тәҡдим итәм.

Тәбиғәт – ул серле донъя.

Һындырмайыҡ ағастарҙы,
Йәнлектәрҙе һаҡлайыҡ.
Шишмәләрҙе ҡоротмайыҡ,
Һыуҙарҙы бысратмайыҡ!
Тәбиғәт – ул серле донъя,
Урман, тау, йылға, һауа.
Тәбиғәтте дауаларға
Бармы һуң берәй сара?
Эсер шишмәләр ҡороһа,
Киләсәккә ни ҡала?

Кеше үҙенең тәбиғәткә булған ҡарашын үҙгәртергә тейеш. Тәбиғәткә һөйөү менән ҡарарға, сүпләмәҫкә, урмандарҙы янғындарҙан, ағастарҙы ҡырҡылыуҙан һаҡларға кәрәк.

Әҙәбиәт:

1. Ғафури М. Дүрт моң. – Өфө: Китап, 1978.
2. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. – Ҡазан, 1954.
3. Ғафури М. Ян йондоҙ. – Өфө: Китап, 1976.
4. Экология һәм айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы. «Киске Өфө» гәзите сайтынан.

Бәширова И., 6-сы класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле, мәҙәниәте уҡытыусыһы
Рәжәпова Ә.
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика
гимназия-интернаты

Мин Зөһрә апай Ҡотлогилдинаның Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнап сығарған «Һуғыш балалары – тарих яҙмалары» исемле китабын уҡып сыҡтым. 65 йыллыҡҡа һуғыш ваҡытында бала ғына булған 65 тыл ветераны менән осраша, уларҙың хәтирәләрен яҙып ала. Һуғыш ваҡытында ҡатын-ҡыҙҙарҙың, ҡарт-ҡороларҙың, балаларҙың тырышып эшләүҙәре, аслыҡҡа ла түҙеүҙәре ошо ваҡиғаларҙың шаһиты булған балалар күҙлегенән һөйләнеүе һуғыштың тылда ла ҡот осҡос эҙемтәләргә килтереүен иҫбатлай. Был балаларға еңелдән булмай. Уларҙың өлөшөнә һуғыштан һуң да илде аяҡҡа баҫтырыу бурысы йөкмәтелә.

Тыл ветерандарының да һаны йылдан-йыл һирәгәйә. Автор ваҡытында ошо батырҙарҙан хәтирәләр йыйып, мөһим эш эшләгән,

© *И. Бәширова, Ә. Рәжәпова, 2020*

сөнки китап донъя күргәндә, уларҙың күбеһе был донъянан киткән була. Минең дә ҡарт өләсәйем, ҡарт олатайҙарым күптән инде гүр эйәһе. Шуға китапты уҡып, һуғыштың ҡот осҡос афәт икәнен белдем.

Ваҡыт тәгәрмәсе алға тәгәрәгән һайын, үткәндәр тарих төпкөлөнә һалына бара, һандар, факттар ғына тарих һаҡлай. Ә был китапта үҙ күҙҙәре менән күргән, ошо ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған кешеләрҙең һөйләүҙәре һуғыш әселеген төрлө яҡлап күрергә ярҙам итә, үҙеңде кино ҡарағандай хис итәһең, һөйләнелгән ваҡиғаларҙы йөрәгең аша үткәрәһең, һуғыш осоронда йәшәгән балалар менән бергә асығаһың да, хатта ҡатҡан бер киҫәк икмәктең дә кеше ғүмерен һаҡлауын аңлайһың.

Китапта күберәк Көйөргәҙе районы тыл ветерандары хәтирәләре урын алған. Зөһрә апай үҙе Көйөргәҙе районында тыуып үҫкәс, был аңлашыла ла. Үҙемдең дә тыуған яғым ошо яҡ булғас, хәтирәләрҙә һүрәтләнгән геройҙар, ваҡиғалар урыны таныш. Беҙ бөгөн сүп үләне тип күҙгә лә элмәгән алабута, мысай, кесерткән – уларҙың төп аҙығы булған. Серек бәрәңге, үләкһә лә ашағандар. Ҡар аҫтында ҡышлаған ағыулы башаҡтарҙы ашап, ғаиләләре менән ҡырылғандар ҙа булған. Мәйеттәрҙе ерләргә лә хәлдәре булмай уларҙың. Мәрхүмдәрҙе таш келәттәргә һалалар, һаҡсы ла ҡуялар.

Һуғыш ваҡытында йәш балалар күпләп үлә, сөнки ҡарау етешмәй: әсәйҙәр көнө буйы эштә, ашау яғы ла наҡыҫ, өйҙәр ҙә һыуыҡ, йылы кейемдәр ҙә юҡ.

Көнө буйы колхоз эшендә йөрөгән әсәләр ҡайтҡас, шыйыҡ өйрә бешергәндәр. Шуның менән бәләкәй балаларының тамаҡтарын туйҙырғандар. Төнө буйына ла эштән бушамаған улар: фронтҡа кәртүф киптергәндәр, йылы ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләгәндәр.

Был китапты уҡығас, мин һуғыш осоро балаларын ваҡытынан алда ҡартайған балалар, тип уйланым. Уларҙың бәхетле бала саҡтарын һуғыш урлай. Бер яҡтан, уларҙы йәлләйем, икенсе яҡтан, уларҙың түҙемлелегенә, егәрлелектәренә һоҡланам. Бөгөн ауылдарҙа бер һыйырлыҡ бесәнде ҡул менән сабырға йыбанһалар, элек хатта ашлыҡты ла, борсаҡты ла, көнбағышты ла ҡул менән сапҡандар. Ә бесәнде әйтәһе лә түгел!

Һуғыш ваҡытында мин тылдағы тормош ул тиклем ауыр булған тип уйламай инем. Фашистар ауылдарыбыҙҙы баҫып алмаған, өҫтөбөҙгә бомбалар ҙа яумай. Ә китапты уҡығас, тылда ла хәлдәр фронттағынан кәм булмаған тип уйланым. Бында ла халыҡ ҡырылған, тик аслыҡтан, ауыр эштән, һыуыҡ тейеүҙән. Ас бүреләр ҙә яфалаған халыҡты.

Бөгөн ҡар өҫтөндә урмандай ултырған көнбағыш һабаҡтарын күрәм дә, ошо китап иҫемә төшә. Һуғыш ваҡытында бит ошо һабаҡтар алтынға бәрәбәр булған: уны яғып, аш бешергәндәр, өй йылытҡандар.

Бөгөнгө тормош ожмах бит! Ләкин ҡайһы берәүҙәр алкоголь, наркотиктар ҡулланып, тормоштарын үҙ ҡулдары менән һаҙлыҡҡа батыралар, матур тормош ҡәҙерен белмәйҙәр.

Ошо китапты уҡып, 3-сө БРГИ уҡыусылары ла үҙ ғаиләләренән һуғыш, тыл ветерандары тураһында мәғлүмәттәр йыя башланылар. Һуғыш бит һәр ғаиләгә ҡағылды. Беҙ, гимназистар, Әлфиә Ғәйзулла ҡыҙы етәкселегендә Еңеүҙең 75 йыллығына арналған йыйынтыҡ сығарырға булдыҡ. Бөгөн мәғлүмәттәр йыйып, киләсәк быуындарға ҡалдырһаҡ, улар беҙгә рәхмәт әйтәсәктәр. Аяҙ күгебеҙҙе ҡара һөрөм ҡапламаһын өсөн бар көстәрен һаласаҡтар.

Вәлиева А.О., 10-сы класс
Ғилми етәксеһе – Әхмәтова А.Т.
Аҫҡын районы Иҫке Ҡазансы ауылының мәктәбе

БАШКОРТ ТЕЛ ҒИЛЕМЕНЕҢ ҮҪЕШЕНДӘ ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВТЫҢ РОЛЕ

Тел, үҙенең ҡулланыу сфераһы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, йәмғиәттең иң ҡиммәтле хазинаһы тип һанала.

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев – башҡорт тел ғилеме күгендә яҡты йондоҙ ул. Ул яҡшы лингвистик мәктәп үткән һәм үҙ әсә телен тәрән белеүсе кеше.

Ғалим башҡорт тел ғилеме, төрки Урал-Алтай телдәре буйынса 60 артыҡ хеҙмәт яҙа.. Башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеше, диалекттары, ер-һыу атамалары, лексикаһы һәм фразеологияһы буйынса тикшереүҙәр алып бара, дәреслектәр, уҡыу ҡулланмалары яҙа. Телсе-ғалим бер нисә сит телде яҡшы белә (12 телде һәйбәт белә, 50-гә яҡын телде аңлай), мәҫәлән, немец һәм венгр телдәренән башҡортсаға туранан-тура тәржемә итә.

«Телде артабан байытыу, үҫтереү өсөн дөйөм халыҡ телен, халыҡ ижады әҫәрҙәрен төп нигеҙ итеп алырға кәрәк». Яҙыусы мәҡәл-әйтемдәрҙе киң ҡуллана, афористик өлгөләр һөйләмдәрҙе тәрән мәғәнәле һәм образлы итеүгә булыша, персонаждың телмәрен байыта: «Һин дә – мулла, мин дә – мулла, атҡа бесән кем һала?» [«Зөбәй

© *А.О. Вәлиева, А.Т. Әхмәтова, 2020*

Үтәғолов», 5-се бит]; «Аҡыллы уйын уйлағансы, дөргән эшен бөтөргән» [«Зөбәй Үтәғолов», 41-се бит] һ.б.

Профессор Ж. Кейекбаевтың башҡорт һәм дөйөм тел ғилемендә ғалим-новатор тапҡан һәм асҡан өр-яңы, революцион, мауыҡтырғыс, масштаблы концепция менән тулы. Немец, инглиз телдәрен һыу кеүек эсеүе, 60-лап Урал-алтай телендә аралаша алыуы тел ғилемендә феноминаль асыштар яһарға сикһеҙ мөмкинлектәр бирә һәм был асыштар бөгөн дә иҫкермәй торған фәнни хәҡиҡәт булып ҡала.

Жәлил Кейекбаев атаҡлы ғалим, талантлы яҙыусы. Ул үҙ халҡын, үҙ тыуған ерен, тыуған илен данлаған шағир йөрәкле, тәрән аҡыллы, күп яҡлы талант эйәһе. Халыҡтың тарихын һәм фольклорын, этнографияһын һәм музыкаһын, телен һәм әҙәбиәтен ныҡ белгән, аңлаған, аңлата белгән ғалим. Бик сәсән телле оҫта йырсы. Таң ҡалырлыҡ һәләтле кеше-өс йыллыҡ аспирантураны бер йылда тамамлап, фән кандидаты була. Үҙ әкиәттәрендә ҡатмарлы дидактик проблемаларҙы хәл итеүсе педагог. Сәнғәтте, әҙәбиәтте, фәнде яҡшы белгән, фольклорҙы «һыу кеүек эскән» һәм ятраҡан кеше. Илһамлы шағир, ҡобайырсы, йор һүҙле әкиәтсе, оҫта тәржемәсе. Балалар психологияһын яҡшы белеүсе. Тимәк, башҡорт культураһы, фәне үҫешенә Жәлил Кейекбаев ғалим булараҡ ҡына түгел, юғары әҙәби культуралы прозаик, халыҡ традицияларына бик иғтибарлы сәсән шағир рәүешендә лә ҙур өлөш индерҙе.

Жәлил Кейекбаевтың үҙ һүҙҙәре:

«Беҙҙең күп милләтле илебеҙҙә рус теле-дәүләт теле, милләт-аралашыу теле. Был бәхәсһеҙ, шулай кәрәк. Әммә беҙҙә башҡа телдәрҙе инҡар итеү тураһында рәсми заҡон юҡ. Ә бына ҡай саҡ үҙ телдәрен яҡларға кешеләрҙең ҡыйыулығы етмәй. Туғайҙа төрлө төҫлө, төрлө еҫле сәскәләр ни тиклем күп булһа, ул шул саҡлы йәмлерәк була. Ә телдәр – кешелек донъяһының төрлө төҫлө, төрлө еҫле сәскәләре бит. Кешелек иһә үҙенең йәмен, ҡиммәтен һә һиммәтен яҡларға үҙендә көс табыр…»

Туған телдең һәр бер һүҙен
Алтынға төрөр инем.
Тик: «Әсәй!» – тип әйтер өсөн
Йәнемде бирер инем.

Ниндәй аҡыллы, зирәк булған Жәлил Кейекбаев. Бер кемде лә үҙенең иғтибарынан ситтә ҡалдырмаған. Бөйөк ғалим булһа ла, үҙен ябай, кешелекле тотҡан. Беҙҙең өсөн иһә илаһи бөйөклөктә тотҡан шәхес.

Әҙәбиәт:

1. Жәлил Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр. – Өфө: Башҡортостан «Китап», нәшриәте, 1989. – 184 бит.

2. Жәлил Кейекбаев. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең фонетикаһы. 1 том. – Уфа: «Китап», 2012 – 288 с.

Гафарова А., 7 класс
Научный руководитель – учитель башкирского языка и литературы Тимиргалина Ф.М.
МБОУ «СОШ №11», г. Ишимбай

СЕМЕЙНАЯ ШКАТУЛКА ВОЕННЫХ РЕЛИКВИЙ
(вклад моей семьи в Победу над фашисткой Германией)

В этом году наша страна отмечает 75-ю годовщину со дня Победы над фашисткой Германией. Война затронула каждую семью в нашей стране. Никто не остался в стороне в это трудное время.

Актуальность моей работы несомненна, так как моя семья тоже не осталась в стороне. Мужчины воевали на фронте, а женщины и подростки работали в тылу. Бесценный вклад в Победу внесли мои прадедушки и прабабушки.

Для того, чтобы иметь больше материала, мне помогли архивные семейные документы, словари, энциклопедии и рассказы родственников.

Объектом исследования является Великая Отечественная война 1941 –1945г.

Предмет исследования: вклад моей семьи в Великую Победу над фашисткой Германией.

Цель моей исследовательской работы заключается в изучении информации о моих родственниках в годы Великой Отечественной войны, их личного вклада в приближение Великой Победы.

Задачи моей работы: изучить и проанализировать научно-историческую литературу по данной теме. Изучить историю моей семьи в период Великой Отечественной войны.

Собрать материал о моем прадедушке и прапрадедушке, участниках войны и прапрабабушке.

Гипотеза исследования: мои родные во время Великой Отечественной войны, внесли посильный вклад в дело Победы. Главным итогом работы должно стать повышение интереса

© *А. Гафарова, Ф.М. Тимиргалина, 2020*

школьников к истории своей семьи и страны. *Новизна работы* состоит в том, что в работе собран обобщающий материал об истории нашей семьи в годы Великой Отечественной войны, который мы можем передать своим потомкам.

22 июня 1941 года фашистская Германия вероломно напала на Советский Союз. Эта страшная война, унёсшая более 27 миллионов человеческих жизней, длилась долгие 4 года, 1418 дней и ночей. Но люди верили и знали, что «Наше дело правое. Победа будет за нами» (7 слайд).

9 мая 1945 года закончилась война. В этот день в России отмечается всенародный праздник – День Победы. Прошло 75 лет со дня окончания Великой Отечественной войны. Драматической страницей вошла в нашу историю эта война. С первых дней войны практически все мужчины были мобилизованы на фронт. На протяжении всех лет войны включалось все большее число подростков школьного возраста. За нашу счастливую и мирную жизнь отданы миллионы жизней. Эта всенародная трагедия коснулась и моей семьи. Я провожу исследование, чтобы вклад моих родственников в приближение Победы чтили и помнили и последующие поколения.

Мой прадедушка, Хужахметов Хажи Садикович, родился 12 апреля 1921 года, в деревне Ахмерово Ишимбайского района. Был призван на военную службу двадцатилетним юношей в 1941 году на Дальневосточный фронт в артиллерийские войска. Он был стрелком. Охранял нашу восточную границу 7 лет. Награжден медалью «За победу над Германией и Японией».

Неоднократно мой прадед был ранен, но судьба была к нему благосклонна. Он остался жив и вернулся домой. Вернувшись, на свою малую родину, он остался в своем родном селе. После военной службы он работал бухгалтером, председателем сельского совета. Мой прадедушка был уважаемым, трудолюбивым человеком и был награжден медалью «Ветеран труда».

В послевоенные годы он болел, сказывалось ранение. Умер он 31 марта 1987 года. К сожалению, я его не видела, но знаю о нем по рассказам моего дедушки.

Моя прапрабабушка – Латыпова Умукамал Басыровна родилась 9 ноября в 1909 г., в деревне Урман-Бишкадак. Ее муж – Латыпов Абдрахман Гиниятович был призван в военную службу в ноябре 1941 года. Она осталась одна с четырьмя детьми. Ей пришлось работать и днем и ночью. За ее трудную работу давали одну чашку муки. Моя прабабушка с двухлетним братом оставались дома одни. А братья четырех и шести лет ходили на рыбалку, ловили рыбу, чтобы не

умереть с голоду. Ночью к ним заходила соседка – старая бабушка Магира. Ей было детей жалко, и поэтому она присматривала за ними. С мамой дети и почти не виделись, не видели материнской ласки. Но дети ее понимали, ведь она работала ради них, ради приближения Победы. Моя прапрабабушка была очень трудолюбивой женщиной. Из ее четырех детей ни один не умер. Она вязала варежки и носки, сушила картошку в печи и отправляла на фронт.

Мой прадед Латыпов Абдрахман Гиниятович родился в 1904 году в деревне Урман-Бишкадак. Окончил четыре класса. Мой прапрадед был веселым человеком. Был гармонистом. До войны работал бухгалтером в детском доме. Был председателем ревизионной комиссии. Он ушел на фронт в 37 лет в конце ноября 1941 года. Был ранен 13 раз. По его рассказам, на войне не было никакой пищи, пили воду из под следа лошадей. Зимой солдаты переплывали холодные реки много раз, поэтому многие болели. Переплыли Днепр, там их ждали фашисты, где многих солдат расстреляли. Обратно переплыли единицы, среди них был мой прапрадед. Приходилось спать в окопах. На утро, солдаты, спавшие по краям умирали от холода.

Оружия не было, на десять человек одно ружье. Когда наступали танки, солдаты прятались в окопах, противник живьем на танках их закапывал.

Он умер 17 июня 1964 года, когда ему было 59 лет.

Исследуя историю моей семьи, мне понятнее стали события далёких военных лет. Я горжусь тем, что мои родители сохранили важные архивные документы военных лет, а так же память о своих родственниках. Теперь память о своей семье буду хранить – я. Гипотеза, поставленная в начале работы, нашла подтверждение: мои предки – были защитниками Родины, принимали участие в Великой Отечественной войне и внесли посильный вклад в Великую Победу. Занимаясь исследовательской работой, я увидела, что события Великой Отечественной войны не обошли стороной мою семью. Я сделала вывод, что мой прадед и прапрадед были героями, они являлись непосредственными участниками исторических событий нашей Родины, а прапрабабушка, Латыпова Умукамал Басыровна одна воспитывала четырех детей и выполняла трудную работу. Они приближали Победу в Великой Отечественной войне. История нашей Родины перекликается с историей моей семьи.

Каждый год, 9 мая мы с гордостью выходим с портретами своих предков, участников войны в рамках акции «Бессмертный полк».

Ғөбәйҙуллина А.Р., 5-се курс
Ғилми етәксеһе – доцент Арыҫланова М.С.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

ҒАФУРИ РАЙОНЫНЫҢ «ТАБЫН» ГӘЗИТЕНӘ КҮҘӘТЕҮ

Башҡортостандың тап уртаһындағы Ғафури районының «Табын» гәзите 1931 йылдан башлап нәшер ителә башлай. Әлбиттә, был осорҙа башҡа район-ҡала гәзиттәре кеүек урыҫ теленән күсермәһе генә була. 1990 йылға тиклем «Йондоҙ» гәзитенең туранан-тура тәржемәһендә генә сығарыла гәзит. Бары тик үҙаллылыҡ яулағандан һуң, Ғафури йәштәренең берлеге, дөрөҫөрәге «Звезда»ның башҡорт телендә күсермәһен эшләп ултырған редактор Нияз Булатбай улы Сәлимовтың көсө, тырышлығы менән «Табын» гәзите донъя күрә. Был республикала үҙаллы нәшер ителә башлаған берҙән-бер район-ҡала гәзите һанала. Әлбиттә, ҡаршылыҡһыҙ ғына булмай. Хатта үрҙәгеләр табын һүҙенең мәғәнәһен аңламайынса, баш мөхәррирҙән: «Ниндәй табын-мәжлес ойоштороп ятаһың унда?» – тип мыҫҡыллап көләләр. Ә ысынында табын һүҙенең синонимы мәжлес мәғәнәһендә алынмай. Ғафури районының халҡы Табын ырыуына ҡарай һәм гәзиткә лә ошо ырыуҙың исеме бирелә. Утыҙ йылға яҡын үҙ аллы гәзит булараҡ сығарылған был баҫманың тиражы ла бүтән райондарҙыҡынан сағыштырмаса ҙур. 2019 йылдың икенсе ярты йыллығында 1660 дана тираж менән нәшер ителә.

«Табын» гәзитенең рубрикаларына байҡау яһап шуны әйтергә мөмкин: бында ла район халҡының көнкүрешен, йәшәйешен яҡтыртыу үҙәк тема булып тора. «Юбиляр», «Ауыл уңғандары», «Иман», «Ҡыңғырау», «Редакция почтаһынан», «Беҙгә килгән хаттарҙан» кеүек рубрикалар даими баҫыла. Шулай уҡ ҡотлауҙар, иғлан-рекламалар, некрологтар, аҙна аҙағындағы номерҙа телевидение программаһы урын ала. Тағы ла гәзит уҡыусыһын артыҡ ҡыҙыҡһындырмаған «Мөһим, ҡыҙыҡлы, файҙалы» рубрикаһы тотош бер битте биләй һәм ошо рубрикаға ҡағылышлы артҡараҡ сигенеп шуны әйтергә була: ул барлыҡҡа килгәнсе, уның урынына Ғафури районынан сыҡҡан яҙыусыларҙың хикәйәләре, ҡыҫҡараҡ повестары бирелә һәм гәзит уҡыусы үҙенең яҡташтарының ижады менән таныша ала ине. Хәҙер гәзит битенең күләме сикләнгәнгә күрә, хикәйә-повестарға урын ҡалмай тиерлек.

© *А.Р. Ғөбәйҙуллина, М.С. Арыҫланова, 2020*

Ғафури районы – таланттарға бай төбәк. Бөгөнгө көндә донъялағы иң ҙур башҡорт ауылы Сәйетбанан ғына ун ике яҙыусы, шағир сығыуы билдәле. Ә халыҡ араһынан күпме үҙешмәкәр ҡәләм оҫталары барлығын барлау маҡсатында «Табын» гәзитендә төрлө рубрикалар эшләп килә. Мәҫәлән, «Мағаш тауышы» рубрикаһында урындағы халыҡтың лирик әҫәрҙәре урын ала, үҙ-ара бер-береһенең ижадына анализ эшләнә һәм бер нисә йылға бер тапҡыр ошо ижад емештәрен бер урынға туплап «Китап» нәшриәтендә китап итеп тә сығаралар. Уларға күп ваҡыт республикала билдәле шағир, яҙыусы, драматург, Таш-Аҫты ауылынан сыҡҡан Салауат Әбүзәр рецензия яҙа, анализлай, яҡташтарын тағы ла илһамға дәртләндерә.

«Табын» гәзитендә, шулай уҡ, уҡыусылар ижадына, уларҙың көндәлек эшмәкәрлеген яҡтыртыуға ла ҙур урын бирелә. Сәйетбаба ауылында тыуып-үҫкән, ҡасандыр үҙе лә «Табын» гәзитендә эшләп, башланғыс тәжрибә туплаған, шағирә, яҙыусы Гөлнур Яҡупов егерме йылға яҡын «Өмөтлө ҡәләм» конкурсын ойоштора, ә иң-иңдәре йыл дауамында «Табын» гәзитендә баҫыла барып, йылына бер тапҡыр еңеүселәр билдәләнә. Мәҫәлән, 2019 йылғы «Өмөтлө ҡәләм» конкурстанттарын билдәләгән сара тураһында Әлфиә Вәлиеваның «Өмөт саҡҡылары ҡабыҙып» тип аталған мәҡәләһендә былай тиелә: «Беренсе халыҡ шағирын үҫтергән, уның исемен йөрөткән районыбыҙҙа ошондай киң ҡоласлы ижади бәйгенең матур традицияға әүерелеүе ҡыуаныслы күренеш. Йөҙәрләгән бала ҡатнашҡан был сараны яҡташыбыҙ, танылған яҙыусы Гөлнур Яҡупова башлап ебәреп, уҡыусыларҙа өмөт саҡҡылары ҡабыҙҙы. Бына хәҙер 19 йыл рәттән уҙғарылып килгән бәйгелә Гөлнур Яҡупова сығыш яһап, тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ был сараны уҙғарыуға көс һалған «Табын» гәзите редакцияһына, район мәғариф бүлегенә рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе» [1; 8].

Шулай уҡ мәктәп уҡыусыларының тормошон яҡтыртҡан «Ҡыңғырау» рубрикаһы ла Ғафури районы уҡыусыларының эшен күрһәтеүсе сара тип атарға мөмкин. Бында йәш ҡәләм тирбәтеүселәр мәктәп тормошондағы ваҡиғалар, уҡыған китаптары, тормошҡа ҡарата уй-фекерҙәре менән бүлешә, журналистика өлкәһендә бәләкәйҙән үк тәжрибә туплай ала. Тағы ла уҡытыусылар ҙа мәктәп тормошона ҡағылышлы яңылыҡтар менән даими таныштырып бара. Мәҫәлән, «Һөйөнсө!» тигән рубрика аҫтында Красноусол башҡорт гиназия-интернатында телестудия асылыу хаҡында хәбәр иткән «Нөктә TV» күрһәтә!» мәҡәләһен алырға була. «Нөктә TV» телестудияһы өҫтәлмә белем биреү сәғәттәре сиктәрендә алып барыласаҡ һәм уны тәрбиәсе Лариса Ғаяз ҡыҙы Рәхимова етәкләйәсәк. Телестудия өсөн заманса

фотоаппарат, штатив, микрофондар алынған, уларҙы Арыҫлан Ҡоҙайғолов менән Булат Буранов оҫта файҙалана. Ике мөләйем алып барыусы Алһыу Ғәлимова менән Айназ Мәхийәнов тәүге тапшырыуҙарҙа ҡатнашыу бәхетен кисерҙеләр ҙә инде» [2; 3], тип яҙа мәҡәләнең авторы – Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты директоры Гөлсөм Монасипова.

Шулай итеп, Ғафури районының ижтимағи-сәйәси гәзите «Табын» гәзитендә райондың тулы ҡанлы тормошо һәр яҡтан да яҡтыртылып, уҡыусыһы менән тура бәйләнештә эшләй тип әйтергә мөмкин.

Әҙәбиәт:

1. Вәлиева Ә. Өмөт саҡҡылары ҡабыҙып // Табын. – 2019 – 10 октябрь. – 8-се бит.
2. Монасипова Г. «Нөктә TV» күрһәтә / Табын. – 2019. – 10 октябрь. – 3-сө бит.

Ғөбәйҙуллина Ә., 10-сы класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ғатина С.С
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 32-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

РИНАТ КАМАЛДЫҢ «ТАНЯ-ТАҢҺЫЛЫУ» СЕНТИМЕНТАЛЬ РОМАНЫНДА БӨГӨНГӨ КӨН ПРОБЛЕМАЛАРЫНЫҢ САҒЫЛЫШЫ

Ринат Камалдың 1996 йылда баҫылып сыҡҡан «Таня-Таңһылыу» исемле сентименталь романы туған теленә, милли рухына, киләсәк яҙмышына битараф ҡалып барыусы халыҡты уятып ебәрҙе. Был романдың үҙәгенә телһеҙ башҡорт ҡыҙының драматик һәм финалда трагик яҙмышы ҡуйылған. Башҡортостанда тыуып үҫкән, әммә үҙ телен, мәҙәниәтен, тарихын белмәгән, күңеленә сабый саҡтан уҡ башҡорт рухы түгел, ә башҡа рух, моң һеңгән героиняның шәхси фажиғәһе тотош башҡорт халҡының, дәүләт сәйәсәте арҡаһында, ассимиляцияға бирелеүе, үҙ милли йөҙөн юғалта барыуын күрһәткән бик мөһим проблемаға барып тоташа.

Әҫәрҙә бер ғаилә миҫалында ил ваҡиғалары сағыла. Яҙыусы раҫлауынса, бер кешенең һыҙланыуҙары халыҡтың аһ-зары менән

© Ә. Ғөбәйҙуллина, С.С. Ғатина, 2020

тығыҙ бәйләнгән. «Ринат Камалдың «Таня-Таңһылыу» сентименталь романында бөгөнгө көн проблемаларының сағылышы» тигән тикшеренеү эшендә әҫәрҙе өйрәнеп, унда сағылған проблемаларҙы хәҙерге заман проблемалары менән параллель үткәреп, уҡыусыларҙа әхләҡи, рухи ҡиммәттәр тәрбиәләү маҡсаты ҡуйҙыҡ. Туған тел, ғаиләлә милли тәрбиә, ҡатнаш никахтар проблемаһы проза жанрында быға тиклем етди сағылыш тапмағайны әле. Шуның менән беҙҙең тикшеренеү эше актуаль. Тикшеренеү эшен башҡарыу процессында туған телдәрҙең әһәмиәте, туған телдәргә ҡарата үткәрелгән сәйәсәт, ҡатнаш никахтарҙың ыңғай һәм кире яҡтарын анализлаған ғилми материалдар, гәзитә-журналдарҙан һәм интернет селтәренән тормоштан килтерелгән миҫалдар менән таныштыҡ, анализланыҡ, уларҙы әҫәр менән паралелль тикшерҙек һәм «Таня-Таңһылыу» романы бик күптәрҙең күңеленә уйылған яҙмыштың сағылышы түгелме? – тигән һығымтаға килдек.

Күп милләт вәкилдәре дуҫ, аралашып йәшәгән республикала теркәлгән һәр бишенсе ғаилә – ҡатнаш. *«Ике милләт кешеһе ҡорған ғаиләлә, кемдең милләт генетикаһы көслөрәк, шуныҡы өҫкә сыға», –* ти ғалимдар. Парҙар икеһе ике диндә булһа, ғәҙәти проблемаларға дин проблемаһы ла өҫтәлә. Ҡатнаш никахтар ҡороу кеүек аҙымға ныҡ уйлап, иптәшеңдең динен, телен, йолаларын хөрмәтләрлек булһаң ғына барырға кәрәктер, тигән фекергә килдек. Мөхәббәт менән янһаң, аҡылды йүгәнләү ауыр. Романда был Таңһылыу миҫалында асыҡ бирелә. Әҙип баш бирмәҫ мөхәббәт ҡолона әйләнгән, ахырҙа сиргә һабышҡан ҡыҙ образын тыуҙыра, ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы тойғоларҙы һүрәтләй. Романдың төп геройы үҙ телендә уҡыуҙан, яҙыуҙан мәхрүм, урыҫ мәҙәниәтенә, теленә табына, урыҫ романстарын һуҙа, «Матросканы етеҙ бейей», хатта Таңһылыу Шәриф ҡыҙынан Татьяна Владимировнаға әйләнә. Аҙ һанлы милләттәрҙе теленән айырыу сәйәсәте аҡрынлап ҡына Аңға һалынғанын уҡытыусы-әҙип яҡшы аңлай. Иң хәйләле алым – балаларын туған телдә уҡытыуҙан атай-әсәйҙәрҙең үҙҙәренең «баш тартыуы» тураһында уйҙырмалар таратыу. «*Туған тел артыҡ тел, ауылды сыҡҡансы ғына эшкинә, унан кәрәкмәй ҙә*» кеүек фекергә ышанған атай-әсәйҙәр баланы туған телдән яҙҙыра, туған моңдан айыра, рухһыҙландыра. Милли рухһыҙ кеше бер милләттең дә таянысы була алмай. Ринат Камалдың «Таня-Таңһылыу» романының төп идеяһы ана шуға ҡайтып ҡала. Таня-Таңһылыу – тотош милләткә килгән бәләне үҙ йөрәгендә татыусы ике миллионға яҡын халыҡтың бер вәкиле. Сентименталь роман прологтан, биш бүлектән, эпилогтан тора. Һәр бүлектең йөкмәткеһен асҡан эпиграфтан сығып, Таңһылыу – үҙ ерендә, үҙ илендә тамыры өҙөлгән, сит милләткә тамырлана алмаған гөл, олононан өҙөлөп төшкән ел хөкөмөндәге һары

япраҡ хәлендә икәнен күрергә була.»Таня-Таңһылыу» романының хәл-ваҡиғалары бөгөнгө заман һулышына яҡын.

Роман *«Ҡырау һуҡты ул бисара сәскәне. Ят тарафтың, сит рухтың ҡырауы»* тигән һүҙҙәр менән тамамлана. Яҙыусы милләтте сит рухтан һаҡланырға саҡыра.

Әҙәбиәт:

1. Вәхитов Ә.Х. Таланттың асылы (Башҡорт прозаһы үҫешенең ҡайһы бер мәсьәләләре). – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1972. – 280 бит.
2. Исхаков Р. Таняға әүерелә Таңһылыуҙар // Ағиҙел. – 1998. – № 12. – 175 бит.
3. Камалов Р. Бәлә. Повесть. Хикәйәләр, новеллалар. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 192 бит.
4. Камалов Р. Мөхәббәт дошмандары. Повестар. – Өфө, 2001.
5. Камалов Р. Оҙонтал. Романдар. – Өфө: Китап, 2003. – 550 бит.
6. Камалов Р. Таня-Таңһылыу: Роман һәм повестар. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996. – 368 бит.
7. Низамов Р. Ринат Камал. Буклет.
8. Сафуанов С.Ғ. Дуҫлыҡ, туғанлыҡ сәхифәләре. – Өфө, 1988.
9. Шәһиев Р. Бер тамсы бальзам // Ағиҙел. – 2002. – №5. – 138 бит.

Ғүмәрова Э., 9-сы класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Тимербулатова Р.М.
Өфө ҡалаһының Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

«ТИРМӘ» ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮ ҮҘӘГЕ ПРОЕКТЫ

«Тирмә» шәхес тәрбиәләү үҙәге йәки «Башҡорт йорто» проекты – башҡорт телен, мәҙәниәтен популярлаштырыу һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән, теләге булғандарҙың барыһы өсөн тәғәйенләнгән, башҡорттарҙы бер-береһе менән таныштырған, милләттәштәрҙе берләштергән урын.

Маҡсаты – башҡорт телен танытыу, мәҙәниәте, йолалары менән таныштырыу, туған тел аша милләттәштәр менән аралашыу даирәһен киңәйтеү, шәхес булараҡ төрлө яҡлап үҫеү юлдары мөмкинлектәрен

© *Э. Ғүмәрова, Р.М. Тимербулатова, 2020*

асыуға йәмғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү, белем алыуға, уның кимәлен күтәреүгә ҡыҙыҡһыныуҙы дәртләндереү.

Бурыстары:

– теләге булған һәр кемгә әсә телендә үҙенең белем кимәлен, һәләтен билдәләү мөмкинлеген биреү;

– башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһенә йәмғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү;

– башҡорт телен популярлаштырыу;

– башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыу.

Халыҡ яҙмышы менән телдең яҙмышы уртаҡ булыуы ла һәр кем өсөн билдәле. Шишмәләрҙе күсереп ултыртып булмағандай, бер телде лә бер ҡасан да башҡа ерҙән килтереп, яңынан терелтеп булмаясаҡ. Халыҡ юғала икән, тел дә юғала.

Милләт булып оҙаҡ йәшәүҙең төп шарттарының береһе – ғәзиз тел мәсьәләһе.

Милләттең юғалыуы уның теле юғалыуынан башлана. Телде һаҡлап ҡалыу өсөн нимә эшләргә мөмкин?

Мин һеҙгә үҙемдең проектымды тәҡдим итәм. Минең проект – «Тирмә» шәхес тәрбиәләү үҙәге йәки «Башҡорт йорто» тип тә атала.

Был йорт эсендә туған телде, йолаларҙы, тарихты, мәҙәниәтте һаҡлап ҡалдырыу өсөн түңәрәктәр, милли кейемдәрҙе, биҙәүестәрҙе, көнкүреш әйберҙәрен, уйын ҡоралдарын һ.б. һатыу буйынса бутиктар, милли ризыҡ өҫтөнлөк иткән ресторан, кафе, ял итеү өсөн уйын, кинозалдар урынлаша.

Был йорт тышҡы яҡтан заманса биҙәлгән Ҡаҙағстандағы Нур – Солтан ҡалаһында урынлашҡан «Хан Шатыр» сауҙа – күңел асыу үҙәгенә оҡшаш булырға тейеш, тип уйлайым. Эске яҡ милли колорит менән биҙәлеүе мөһим.

1-се ҡатта – 15 бүлмә. Уртала – «Ҡурай» фонтаны. Унда: «Әсәм теле – сәсән теле» башҡорт телен өйрәнеү курсы, «Кәнифә» башҡорт кейеме һәм биҙәүестәре бутигы, «Заманса кейем тегеү» студияһы, «Башҡорт биҙәүестәре» оҫталыҡ дәрестәре үткәреү бүлмәһе, «Башҡорт һылыуҡайы» студияһы, «Башҡортостан лидеры» клубы, «Авиамоделләштереү», «Робототехника», «Милли көрәш», «Мәргән уҡсы», «Оҫта ҡулдар» (ағасты һырлап эшләү), «Йәш эшҡыуар», «Йәш юрист», «Йәш эҙәрмән», «Изо-студия».

2-се ҡатта – 13 бүлмә. Уртала – башҡорт ресторандары һәм кафелары. Унда: Музей, Сувенирҙар залы, «Башҡорт балы» бутигы, «Бауырһаҡ» милли аш-һыу бешереү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, «Халыҡ табибы» дарыу үҫемлектәре бутигы, «Йәш блогер» студияһы, «Һүҙ оҫтаһы» студияһы, Кинозал (башҡорт фильмдары, йәнһүрәттәрен күрһәтеү),

Балалар өсөн уйын залы (башҡорт уйындарын ойоштороу), Сатраш, шашка уйыны бүлмәһе, Ҡурай, ҡумыҙ класы, «Башҡорт бейеүе» студияһы.

Шул түңәрәктәр ярҙамында кешеләр шәхес булараҡ үҫер, үҙенең башҡорт теле, тыуған ере менән ғорурланған кеше булып сығыр.

Был йорттоң оҙонлоғо 40 метр, киңлеге – 53. Тирмәнең ишеге, тышҡы яҡтары, стенаһы төрлө-төрлө орнаменттары менән биҙәлгән. Ә уртала – ишек башында – Ҡурай символы.

Тирмә ике ҡаттан тора. Беренсе ҡаттың төп уртаһында «Ҡурай»ға оҡшаған фонтан тора. Фонтан эргәһендә икенсе ҡатҡа менә торған лифт. Тирмә эсендәге бүлмә-кабинеттар кәрәҙ формаһында урынлашҡан.

Бында һәр кем бәләкәйҙән олоға тиклем кеше үҙенең күңеленә яҡкан эше менән шөғөлләнә ала.

Минең уйлауымса, был йорт С. Юлаев һәйкәле янындағы тирмәләр янында торорға тейеш. Әгәр ҙә әлеге тирмәләр йәй ваҡыттарында ғына эшләһә, минең проект йыл әйләнәһенә килеүселәргә ишеге асыҡ була.

Ошонда йортобоҙ булһа, беҙҙең башҡорт телебеҙ менән тағы ла нығыраҡ ҡыҙыҡһынып, ғорурланып, халҡыбыҙ уны өйрәнеп, үҙ балаларын өйрәтеп, киләсәк быуынына еткереп йәшәр ине.

Тел йәшәһә, халыҡ та йәшәйәсәк.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

Ежова Д.В., 2 курс
Научный руководитель – к.филол.наук, доцент
Коротаева Л.В.
СФ БашГУ г. Стерлитамак

РОЛЬ МАЖИТА ГАФУРИ В ФОРМИРОВАНИИ ЛИТЕРАТУРЫ ВОЛЖСКО-УРАЛЬСКИХ НАРОДОВ РОССИИ

Век XXI, характеризующийся в литературе приоритетом антропоцентрической парадигмы, обратился к Человеку как человеку говорящему. Проблема языковой личности сегодня приобретает особую остроту в связи с выявлением коммуникативного образа человека новой эпохи. Вопросы, касающиеся этой проблемы,

© *Д.В. Ежова, Л.В. Коротаева, 2020*

рассматриваются нами как взаимосвязанные подсистемы духовной культуры и литературы народов Поволжья и Башкортостана.

Щедрая башкирская земля дала миру классика татарской и башкирской литератур, Народного поэта Башкортостана – Мажита Гафури, она подарила чувашскому народу основоположника национальной поэзии – Константина Иванова и Народного чувашского поэта Якова Ухсая. Оба они хорошо знали Мажита Гафури и ценили его творчество.

Габдельмажит Нурганиевич Гафуров, так звучит полное имя Мажита Гафури, родился 8 июля 1880 года в деревне Зилим-Караново Уфимской губернии. Гафури – писатель, в советское время писал на родном и старотюркском языках. С детства Мажит отличался старанием и умением: за 2-3 года освоил программу мусульманской школы, читал религиозные книги. Отец это заметил и в одиннадцатилетнем возрасте взял его к себе в школу, чтобы тот помогал обучать детей. В 1893 году он начал работать в медресе, вскоре остался сиротой.

Мажит Гафури изучал арабский, турецкий, русский, иранский языки, увлекался историей и географией, поэзией востока и русской литературой. Мажит писал поэмы, стихотворения, басни, пьесы, легенды. В 1923 году Башкирский центральный исполком оценил вклад М. Гафури в национальную культуру. Мажиту присвоили звание Народного поэта Башкирской Республики. Мажит Гафури умер 28 октября 1934 в Уфе, причиной смерти стал туберкулез.

За свою жизнь писатель написал много стихотворений, басен, поэм. Не удивительно, что он заслуженно удостоился звания «народного поэта». На стиль поэта во многих аспектах повлияли смерть родителей, одновременная работа и учёба. Возможно, именно из-за своих «проблем и нужд» он выработал именно такой стиль, который смог оценить и полюбить простой башкирский народ – стиль критического реализма.

Какой же он вклад внёс в чувашскую культуру? Как интересный человек и известный писатель, он интересовал многих чувашских писателей и поэтов. Его творческий путь очень интересен, так как, несмотря на все трудности и проблемы, которые ему пришлось пережить и преодолеть, он не бросил своё дело и продолжил писать в том стиле критического реализма, который полюбил народ.

Поэтом, на чьё творчество повлиял Мажит Гафури, оказался Яков Ухсай, уроженец Башкирии. Яков Гаврилович Ухсай родился в 1911 году в селе Слакбаш Белебеевского района Республики Башкортостан.

На его творчество повлияло в большей части то, что после окончания Бижбулякской школы крестьянской молодежи он поступил на подготовительное отделение Уфимского института народного образования. Отдельное почетное место в судьбе и творчестве советского чувашского поэта занимает столица Башкирии. У него есть стихи, посвященные Уфе.

Яков вспоминал, что здесь ему открылся огромный книжный мир: «Стоял я, как во сне, перед высокими полками в институтской библиотеке, каждый вечер сидел в читальном зале старинной аксаковской библиотеки». В Уфе он подружился со многими профессиональными писателями, изучал их произведения с карандашом в руках.

Он жил в Уфе и обучался на подготовительном отделении Уфимского пединститута. Здесь он вошёл в круг местных писателей, познакомился со многими литераторами.

Яков Ухсай пишет в своей автобиографии, написанной в 1963 году: «В Уфе я учился два года, подружился со многими башкирскими писателями, хорошо знал их произведения, восторгался стихами Батыра Валидова о баймакских золотоносных горах, любил слушать гортанный голос Рашита Нигмати на студенческих вечерах. Сагит Агиш и Баязит Бикбай были моими близкими друзьями. Читали они мне на берегу реки Белой под голубым уфимским небом стихи тонких мастеров Дэрмэнда и Бабича, пели песни Салавата Юлаева.

Я часто бывал у Мажита Гафури в его деревянном особняке на улице его имени. Видя перед собою чрезмерно скромного, хромого и на вид мужиковатого человека в черной тюбетейке, я не мог его представить великим, называл просто, как принято в простонародье, «Мажит агай», слушал его рассказы, в том числе и о Дёме, с детства мне знакомой реке, куда я ездил в гости к башкирам и пил кумыс...» [Российская государственная библиотека: официальный сайт. – Москва, 1999. – URL: http://www.rsl.ru (дата обращения: 24.12.2019)].

В столице Башкирии молодой человек частенько навещал Мажита Гафури, «слушал рассказы Мажит-агая»… По окончании учебы в МГУ им. М.В. Ломоносова Яков Ухсай возвращается в Уфу, трудится чувашеведом в Научно-исследовательском институте языка, литературы и истории имени М. Гафури. В 1934 и 1936 годах через чувашскую секцию Союза писателей и чувашский сектор «Башгиза» Яков издал два поэтических сборника.

Яков был частым гостем в доме Гафури, и они сблизились в общении, он посвятил своему старшему другу по перу следующие строки в стихотворении «Меня татарином считают»:

«С Мажитом Гафури, бывало,
Не раз я по Уфе гулял,
Тогда – ни много и ни мало –
Большим поэтом стать мечтал….
Поэтом необыкновенным,
Как Гафури, хотел я стать,
Вот почему на мне, наверное,
Его поэзии печать» [Российская государственная библиотека: официальный сайт. – Москва, 1999. – URL: http://www.rsl.ru (дата обращения: 24.12.2019)].

Яков Ухсай уважал и почитал Гафури, равнялся на него, считал поэта «старшим братом по перу». Мажит Гафури смог повлиять не только на творчество поэта, но Я. Ухсай достиг той ступени доверия, когда преемник очень восхваляет и «рекламирует» творчество самого поэта. После выхода в свет стихотворения «Меня татарином считают» многие чуваши обратили внимание на творчество Мажита Гафури.

Мажит Гафури так же повлиял на творчество Константина Иванова. К. Иванов – классик чувашской литературы, основоположник национальной литературы.

Мажит Гафури начинал некоторые произведения с описания местоположения, географических данных и описания природы. К. Иванов же любил начинать свои шедевры так же с описания природы, одновременно описывал ее и естественно, и одновременно восхвалял.

Оба поэта дают понять читателю, что природа предстает перед нами не только как мир, где живут люди и все живые существа, но и говорят о том, что природный мир имеет свои правила и своё царство. В поэме «Нарспи» К. Иванова природа описана в точных и красочных деталях, природа занимает особое место в произведении. У М. Гафури есть повесть «В родную сторону», где само уже название говорит о влиянии природы на воспоминания и сознание человека. Он так же описывает природу в деталях, чтобы читатель смог представить картину и понять, какое важное место изображение природы в произведении занимает.

Мажит Гафури оказал сильное влияние на чувашскую культуру. Николай Кондрашкин чувашский скульптор, который работает в настоящее время над созданием барельефа Мажита Гафури. По его словам, надо «продолжать увековечивать память всех достойных сыновей своего болгаро-чувашского и Российского народа». Он видит в этом нравственный смысл своей творческой жизни.

Габдельмажит Нурганиевич Гафуров внёс огромный вклад в чувашскую культуру. В 90-е года он оказал сильное влияние на формировании на великих чувашских поэтов, тем самым смог привить преемникам К. Иванова и Я. Ухсая любовь к природе, показать ее важность, он добился того, что на него равнялись, ценили его и его творчество писатели и поэты. Так как М. Гафури был их наставником, они его уважали, почитали, слушали его советы и мнение, ценили дружбу с башкирским поэтом. Они смогли сохранить дружбу народов, запечатлеть это влияние в произведениях.

В настоящее время память о М. Гафури сохранилась в виде названий улиц, музеев, построены памятники и бюсты, имеется мемориальный дом-музей, общественный фонд и парк носят имя Мажита Гафури.

Литература:

1. Афанасьев П. Иванов Константин Васильевич // Писатели Чувашии. – Чебоксары, 2006. – С. 154-156.
2. Гафури Мажит Повести. – М.: Изд-во «Совесткий писатель», 1981. – 237 с.
3. Ухсай Я.Г. В воспоминаниях современников. – Чебоксары: Калем, 2005. – 383 с.

Зайнуллин И.Ф., 7 класс
Научный руководитель – учитель английского языка
Козлова О.Н.
МОБУ СОШ с. Большой Куганак Стерлитамакский район

CATCHPHRASES FROM MOVIES, THEIR USE IN REAL LIFE SITUATIONS

The theme of our report is «Catchphrases from movies, their use in real life situations «. Our investigation is based on studying the main features, etymology and use of catchphrases in modern English. We analyzed some sources from the Internet, English dictionaries and books. The object of our investigation is catchphrases as an important part of speech. The subject of study is the modern English language.

The aims of our report are the following:

1. To sum up the basic features of catchphrases.
2. To classify English catchphrases into groups .

© *И.Ф. Зайнуллин, О.Н. Козлова, 2020*

3. To describe real life situations when we can use catchphrases.
4. To show the advantages of using catchphrases in modern speech.

Our hypothesis is that catchphrases are used in different real life situations.

The materials of our study are:

1. examples from modern English language;
2. Russian – English, English – Russian dictionaries;
3. Internet-resources.

The novelty of our investigation lies in the approach of the conceptual world view behind the language through catchphrases. The actuality of the report is defined by the necessity of studying the nature of the most popular phrases and expressions in the English language. The practical value of the report consists of the application of the results of our investigation.

According to Cambridge Advanced Learners' Dictionary (2011), catchphrase is a phrase that is often repeated by and therefore becomes connected with a particular organization or person, especially someone famous such as a television entertainer [2].

A catchphrase is a very popular trope of modern means of communication all over the world: on TV, on the radio, in video games, in literature.

We defined some categories of catchphrases:

1. **Common catchphrases** (used by all people in different life situations):

«After all, tomorrow is another day!»

2. **Verbal Tic**: It is not part of speech. It can be a short meaningless word or a series of strange sounds issued by the mouth.

«Bahmbarbeeyah – Kehrgoodoo!» (Operation «Y» and other Shurik's advantures»).

3. **A Copy Paste** (a replica is constantly changing, not the whole but it's part).

«Bond. James Bond».

If you want to act cool, you can say your name with his intonation: Ivanov (pause), Ivan Ivanov.

There are many catch phrases in Russian films. In our point of view, they play an important role in our language because they slightly soften the circumstances that are not very well of the situation, and bring a piece of humor:

«Life's good! And a good life is better!» («The Caucasian captive or new Shurik's adventures»).

We came to the conclusion that a well-chosen expression is able to make a very strong impression on listeners. The famous catchphrases from

movies can not only entertain us but also they help us make some important decisions and improve our knowledge of languages.

The phrases from the films and cartoons will make every dialogue rich and informative. Learning and use of catchphrases and aphorisms in the speech develops mind abilities and activate our brains for solving complex problems.

So I wish you to be always a good conversationalist and communicate successfully! Thank you for your attention!

Засова А., 11-се класс
Ғилми етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Хәкимова Г.А.
Учалы ауылының башҡорт гимназияһы

ТУҒАН ТЕЛДЕҢ КЕШЕ ҺӘМ ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮҘӘГЕ РОЛЕ

Дүртенсе көн инде ҡар яуа ла яуа. Әйтерһең дә, күктең төбө тишелгән һәм хәҙер гел генә шулай ҡар яуып торасаҡ. Шулай ҙа көҙгө ямғыр кеүек ялҡытҡыс түгел был ҡышҡы ҡар. Ана ҡара, күр, ниндәй матур, тирә-яҡ ап-аҡ шәленә төрөнөп, тәбиғәтте тағы ла йәмләндереп ебәрҙе.

Эх, ғүмер! Йылдар, йылдар! Һинең һәр миҙгелеңдең үҙенә күрә күркәмле, матурлығы бар. Ямғырлы көҙ етһә, матур яҙҙы һағынаһың, эҫе йәйең килһә, һалҡын ҡышты көтәһең һәм ғүмереңдең тын ғына ағып китеүен дә һиҙмәй ҡалаһың.

Ошондай уйҙарҙан арына алмай бүлмә буйлап йөрөйөм дә йөрөйөм. Ә уйҙар бер туҡтауһыҙ башҡа керәләр ҙә керәләр. Шулай йөрөй торғас: «Берәй эшләнмәй ҡалған эш юҡмы?» – тигән кеүек, бүлмәгә күҙ йүгертеп сыҡтым. Бүлмәнең һәр мөйөшө, ундағы һәр бер әйбер бөхтә итеп йыйыштырылған, һауыт-һаба ла йыуылған, үҙ урындарын алған. Артыҡ бер ниндәй ҙә етешһеҙлек тапмағас, минең күҙем өҫтөлдә ятҡан класыбыҙҙың фотоһына төштө. Бигерәк матур төшкәнбеҙ! Бөтәһенең дә йөҙө шат, уртала беҙҙең яратҡан класс етәксебеҙ башҡорт теле уҡытыусыһы Мөкәрәмә Дауыт ҡыҙы урын алған. «Эх, дуҫтар, дуҫтар ниндәй бәхетле беҙ! Мәктәптә ни тиклем ҙур тәжрибә туплаған уҡытыусы уҡыта беҙҙе», – тип, уйҙар ебен һүтә-һүтә тәҙрә быялаһындағы быуҙы һөртөп, тышҡа ҡараным. Унда ябалаҡлап ҡар яуа ла яуа. Бына бер төркөм мәктәп балалары шау-гөр килеп үтеп

© *А. Засова, Г.А. Хәкимова, 2020*

киттеләр: «Мин мәктәпкә барам!» «Мин уҡыйым!». Ни тиклем ғорурлыҡ ошо һүҙҙәрҙә! Ошо матур һүҙҙәр тағы ла үҙ телебеҙҙә, үҙ моңобоҙҙа йыр булып ағыла. Шул моңдо тыңлап:

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар,
Ерең, күгең – иркең бар,
Утың,һыуың – дүртең бар, –

күңелемдә үҙемдең яратҡан шағирым Рәми Ғариповтың шиғыр юлдары ағылды ла ағылды.

Эй, тынғыһыҙ мәктәп йылдары! Һин тын ғына ағаһың да ағаһың, ҡапыл таштар ватып, урғылып аҡҡан шарлауыҡҡа әйләнәһең, алдан ҡоролған хыялдарҙы тормошҡа ашырырға ынтылып, бөтөнләй башҡа йүнәлештә аға башлайһың. Бына бит яңы тормошта йәшәүебеҙгә, мәктәптә уҡыуыбыҙға күпме ғүмер уҙҙы, әҙме юғары белемгә эйә булған кешеләр тик үҙебеҙҙең ауылда ғына иҫәпләп бөтөрлөк түгел. Беҙҙең белемле, Тыуған илен, туған телен яратҡан, кешелекле, изгелекле шәхес булып үҫеүебеҙҙә, беҙҙең биографияһының беренсе битен яҙышыуҙа, ҙур тормошҡа путевка биреүҙә, әлбиттә, мәктәптә эшләгән уҡытыусыларыбыҙ һәм уларҙың беҙгә ҡарата йылы мөнәсәбәте айырым урын биләй.

Уйҙар ебе мине бала саҡҡа этәрҙе... Бөгөнгөләй хәтеремдә минең өсөн Учалы башҡорт гимназияһында беренсе тапҡыр ҡыңғырау яңғырағаны. Ҡурҡа-ҡурҡа ғына тупһа аша атланым. Әммә ҡаушауым шунда уҡ юҡ булды – асыҡ йөҙлө, яғымлы Зөлфиә Рамазан ҡыҙы Исламова ҡаршы алды. Ул туған телебеҙҙә, башҡорт телендә, ижади хыялдарға бирелергә, бейергә-йырларға өйрәтте ул беҙҙе. Ижадтың нигеҙендә ятҡан матурлыҡҡа һоҡланып, төрлө һөнәргә өйрәнеп, яңынан-яңы биҙәктәр менән асыла барып, белем тауын туған телдә яуларға тырыштыҡ. Ә алда – үрләп етә алмаҫлыҡ бейеклек! Беҙ аҫта, түбәгә менеү юлдарын эҙләп маташабыҙ, фекер алышабыҙ, ә уҡытыусыбыҙ тауға үрләү юлын күрһәтмәй, йүнәлеш барлығын ғына әйтә. «Уңышҡа ирешеү, иң тәү сиратта маҡсат ҡуйыуҙан башлана», – тип йылмая. Дәрестәр ҡыҙыҡ үтте, кластан тыш саралар ҙа мауыҡтырғыс бара – мәктәпкә байрамға һымаҡ йөрөнөк. Уҡытыусының беҙгә ҡарата яҡшы дуҫтарса мөнәсәбәте белем үрҙәренә тағы ла нығыраҡ ҡанатландырҙы. Мин башланғыс класты «4» һәм «5» билдәләренә генә тамамланым. Эшкә ижади, яуаплы ҡараған һәм һәр ғаиләнең үҙенсәлеген, тарихын белгән уҡытыусыбыҙ беҙҙең күңелдәрҙә яҡтылыҡҡа ышаныс, белемгә ынтылыш, ижадҡа һөйөү, әсә теленә

ыңғай ҡараш тәрбиәләй алды. Кескәйҙән балаға үҙ телендә матур сифаттар һалына икән, кеше тормошта юғалып ҡалмай. Ул саф шишмәләй артабан барыбер үҙ юлын, үҙ ағышын таба. Минең уйымса, туған тел мөхитендә тәрбиә алған кеше генә бөгөнгө һәм киләсәк быуын мәктәбендә Тыуған иленең ысын Шәхесенә һәм Гражданина әүерелә ала.

Туған телем... Ғәжәп серле, изге, ҡәҙерле ул минең өсөн... Киләсәк һөнәремде лә, моғайын, шул тел ғилеме юлы менән бәйләрмен... Туҡтап ҡалған уйҙарымдың йомғағы артабан һүтелде.

Мин бер аҙ үҫкәс, 5-се класҡа барғас, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мөкәрәмә Дауыт ҡыҙы үҙ ҡанаты аҫтына алды. Бөгөн дә юғары бәҫлеге, интеллигентлығы менән барыбыҙҙы ла әсир итә. Киң эрудициялы, белмәгән нәмәһе юҡ, шул уҡ ваҡытта һәр бер уҡыусының шәхси фекеренә иғтибар итә, төрлө темаға әңгәмәләр ҡора. Бигерәк тә маңҡортлоҡттан йыраҡ булырға өндәй. Һәр ваҡыт беҙгә яҙыусы, күренекле ғалимә, дәреслектәр авторы Мәрйәм Бураҡаеваның туған тел тураһында әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрә: «Туған тел –ул туған моң. Туған моң – ул тәбиғәт тарафынан кешене сәләмәтләндереү өсөн бирелгән бер сара. Йырлап беҙ үҙебеҙҙе дауалайбыҙ. Туған телде белмәйһең икән, тимәк, туған моңондо ла белмәйһең һәм үҙеңде сәләмәтләндерә алмайһың, тигән һүҙ. Ғөмүмән, һин үҙ илеңдең ысын хужаһы булыу һәр кемдең үҙенән тора. Кеше күңеле менән ҡол икән, ул барыбер ҡол булып ҡала». Туған тел һәм мәҙәниәтте, халҡыбыҙҙы эскерһеҙ һөйә һәм ошо мөхәббәтте беҙҙең күңелдәргә лә ярып һала яратҡан уҡытыусыбыҙ. Беҙҙе ул яуаплы, тырыш, ғәҙел һәм әҙәпле, ысын мәғәнәһендә рухлы Шәхес һәм иң беренсе үҙ теленә битараф булмаған Кеше итеп итеп тәрбиәләргә тырыша һәм шул йүнәлештә бер туҡтауһыҙ эшләй.

Заман башҡа, заң башҡа тигәндәй, уҡытыусыбыҙ заман менән бергә атлап, уҡыусыларына һәр ваҡыт заманса дәрес бирә. Инновацион алымдарҙы дәрестә ҡулланыу – заман талабы, тип ҡабул итергә тейешбеҙ. Бәләкәйҙән компьютерҙы яҡшы белеп үҫкән беҙҙе китап, ҡағыҙға төшөрөлгән һүрәт, таҡтаға аҡбур менән яҙып ҡына ҡыҙыҡһындырыу мөмкин түгел. Мөкәрәмә Дауыт ҡыҙы ла дәрестәрен заман талаптарына ярашлы «1 уҡыусы: 1 компьютер», Вотум уҡытыу программаларын, шулай уҡ Learning Apps.org программаһын да актив ҡуллана. Кемдер быны уҡытыусы эшенә өҫтәмә ауырлыҡтар килтерә, тип һанай, ә минеңсә, уҡытыусының эшен был еңеләштерә генә, яңы мөмкинлектәргә ишек аса. Был эш төрҙәре беҙҙә дәрескә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята. Көн артынан көн үтеп, уҡытыусы тырышлығының юҡҡа түгел икәненә инана: беҙ дәрестәрҙә башҡортса аралашырға,

телмәрҙе аңларға өйрәнәбеҙ, туған тел серҙәренә тағы ла нығыраҡ төшөнәбеҙ, предмет буйынса төрлө олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, конференцияларҙа ҡатнашып, юғары һөҙөмтәләргә ирешәбеҙ, театрҙа уйнайбыҙ. Ниндәй генә әҫәрҙәр сәхнәләштермәнек: М. Кәримдең «Өс таған», «Ҡайынлыҡ урманында», «Айгөл иле», М. Ғафуриҙең «Тормош баҫҡыстары», «Шағирҙың алтын приискыһында», С. Сурина «Кем көслө?» һ.б. Туған телебеҙҙә яңғыраған матур әҫәрҙәр аша үҙебеҙҙә рух ныҡлығы, ышаныс, матур тәрбиә сифаттарын үҙләштерҙек. Ә былар йәш быуынды донъя күләмендә әһәмиәткә эйә булған мәсьәләләрҙе хәл итә алырлыҡ рухлы, үҙ телендә яҡшы һөйләшкән шәхес итеп тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай һәм уйнаясаҡ. Шуға ла мин бөгөнгө һәм киләсәк белем йортон туған телһеҙ күҙ алдыма ла килтермәйем.

«Тыуған йылың ҡайһы һорауына – халҡым тыуған йыл – тигән ҡыйыу яуапты донъяла, тарихта һәм тормошта үҙ урынын аңлаған шәхес кенә әйтә алыр ул», – тигән башҡорт яҙыусыһы Ә. Вәхитов. Шуға ла үҙ иленә, тыуған төйәгенә, уның тәбиғәтенә, туған халҡына, уның рухи байлығына, туған теленә оло ихтирам, тәрән һөйөү тәрбиәләү – бөгөнгө һәм киләсәк быуын кешеләре алдына ҡуйылған маҡсат, тип уйлайым. Минеңсә, ундай маҡсатһыҙ заман балаһын бөгөн дә, киләсәк тә лә ысын Кеше һәм Шәхес итеп тәрбиәләп булмаясаҡ.

Эйе, башҡа телдәрҙе өйрәнеү туған телде барлыҡ нескәлегендә аңларға ярҙам итә, әсә телен өйрәнеү балаларҙа Ватанға һөйөү, илһөйәрлек тәрбиәләй, әҙәбиәт уҡыу – тормош мәктәбе үтеү… Ҡайһы бер рухи ҡиммәттәр юғалып барған осорҙа беҙҙе, үҫеп килгән быуынды, арҙаҡлы шәхестәребеҙ Ҡаһым түрә, Кинйә абыҙ, Алдар, Батырша, Ҡараһаҡал, Салауат батырҙар һәм башҡа шәхестәр, бай йөкмәткеле әҫәрҙәребеҙ өлгөһөндә тәрбиәләү ифрат мөһим. Мәҫәлән, VII класта Фәрзәнә Аҡбулатованың «Атай икмәге» тигән хикәйәһен уҡыныҡ. Дәрестә бер-ике иптәшемдең күҙ йәшен һөртөп алғанын күрҙем. Хикәйәнең ҡалған өлөшөн өйгә уҡырға бирҙеләр. Мин уны бик тулҡынланып уҡып сыҡтым. Икенсе көндө класташтарымдың күбеһе әҫәрҙе илап уҡығаны хаҡында әйтте. Тимәк, яҙылғанды йөрәктәребеҙ аша үткәргәнбеҙ. Көнделдәребеҙҙә ҡыҙғаныу, йәлләү, шул уҡ ваҡытта һуғыш осоро балаларының түҙемлегенә һоҡланыу хистәре тыуған икән ошо мәктәптә, бер ҡасан да насарлыҡ ҡылмаясаҡбыҙ. Бала күңеле һутлы тупраҡ – ни сәсһәң, шул үҫә. Әгәр ҙә беҙҙең дәреслектәр киләсәктә лә ошондай бай йөкмәткеле, ҙур тәрбиә мәктәбе булған әҫәрҙәр менән тағы ла нығыраҡ байытылһа, башҡорт моңон, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен ҡаныбыҙға һеңдереп, башҡорт телле, башҡорт рухлы балалар булып үҫеп, илебеҙ ғорурланырлыҡ илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр, эшһөйәрҙәр, изгелекле, игелекле булырбыҙ.

Кешеләргә кәрәк булһын,
Бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын.
Янып эшләһен дә,
Көлһөн,
Йырлаһын!
Күркәм булһын кеше,
Халыҡ ғәме менән ул тулһын!
Шундай бай бәхетле итеп
Күрәм
Киләсәктең

Матур Кешеһен һәм Гражданинын! – ти беҙҙең яратҡан шағирыбыҙ Р. Ғарипов. Эйе, мин дә матур киләсәкте тәрбиәле, рухлы, үҙ теле өсөн йәнен бирергә әҙер торған кешеләрҙән башҡа күҙ алдына килтерә алмайым.

Шулай уйлана-уйлана тағы тәҙрәнән тышҡа күҙ һалдым. Тап шул мәлдә, минең уйҙарымды хуплағандай, болоттар араһынан ҡояш сыҡты. Сыҡты ла, үҙенең иркә йылы нурҙарын тирә яҡҡа һибеп: «Кешеләрем, тыныс булығыҙ! Бөтә уй-теләктәрегеҙ тормошҡа ашыр! Был – ергә хыялдарҙы ысын итеүсе февраль ҡарының айырылғыһыҙ юлдашы, бәхет нуры – Ҡояш!» – тигән кеүек, яғымлы йылмайҙы ла тағы болоттар араһына кереп юғалды.

Ләкин был оҙаҡҡа түгел, бына-бына ҡар яуыуҙан туктар һәм үҙенең бәхет нурҙарын тағы ла ергә һибер.

Искужина С.Р., 2-се курс
Ғилми етәксеһе – өлкән укытыусы Дилмөхәмәтов И.Т.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ҠАТЫН-ҠЫҘ ШИҒРИӘТЕ

Донъялағы иң яғымлы, нескә куңелле, ләкин эске доньяһы менән батыр һәм тоғро кеше – ул ҡатын-ҡыҙ. Ғөрөф-ғәҙҙәттәрҙе, мәҙәниәтте һаҡлаусы, өй усағын гел дә йылы итеп тоткан, әсәй, өләсәй. Ҡатын-ҡыҙ – ул Бөйөк Ватан һуғышында ла, ауырлыҡҡа бирешмәй, түҙемле, сыҙамлы кеше булып ҡалған. Әсә кешенең был доньяла урыны бик ҙур, ҡайҙа ғына хеҙмәт итмәһен, ул үҙенә бөтә матурлыкты йыйған йыһан, ижади кеше. Әлбиттә, ижадҡа хеҙмәт иткән ҡатын-ҡыҙ үҙ-үҙен

© *С.Р. Исҡужина, И.Т. Дилмөхәмәтов, 2020*

тулыһынса ғаиләгә арнай алмай. Ләкин ул бөтә хәстәрлеген, хистойғоларын шиғри юлдарға һала.

Ошо күҙлектән ҡарағанда Гүзәл Рамазан ҡыҙы Ситдиҡова шиғриәте айырым иғтибарға лайыҡ. Унең шиғырҙарында, һөйөү йырҙарҙарында матур, гүзәл, түҙемле, нәзәкәтле, ҡатын-ҡыҙ образы тора. Сәңгелдәк йырҙары аша бөтә тарих һәм башҡорт халҡының йәшәйеше бирелә. Әгәр ҙә әсәй кеше үҙенең балаһына үҙ тыуған телен яратыу һәм хөрмәт итеү тойғоларын һалмаһа, ул бала кеше бер ҡасан да үҙ тыуған телендә һөйләшмәйәсәк. Тоғролоҡ, наҙлылыҡ, ҡыйыулыҡ, аҡыл, кешене биҙәүсе һыҙаттар булараҡ, Гүзәл Ситдиҡованың һәр шиғырында тиерлек данлана.

Башҡортостанда береһенән-береһе талантлы шағирәләр йәшәй. Шуларҙың араһынан Таңһылыу Ҡарамыш (Таңһылыу Фаяз ҡыҙы Ҡарамышева) ижады айырыл тора. Мәҫәлән, «Бәхет» шиғырында автор бәхет төшөнсәһенең нимәнән торғаны тураһында яҙа. Бәхет ул кескәй генә төйәктәрҙән, йылы, йошмаҡ һүҙҙәрҙән тора, атай-әсәй ҡосағында иркәләнеп үҫеү ул тағы ла бер бәхет. Иртә тороп, күҙҙе асып, яҡты донъяны күреү бына тағы ла бер бәхет. Автор бәхетте йәшәүҙә, тын алыуҙа һәм был донъяла яратып, һөйөлөп ғүмер итеүҙә күрә.

Шулай итеп, хәҙерге башғорт шиғриәтендә талантлы шағирәләр бик күп. Улар ижады ил, тел, халыҡ яҙмышына бәйле глобаль проблемаларҙы ғына күтәреп ҡалмай, ә тормош-көнкүреш, дөйөм фәлсәфәүи мәсьәләләргә лә мөрәжәғәт итә.

Әҙәбиәт:

1. Ҡарамышева Т.Ф. Мәңгелек сәфәр. – Өфө: Китап, 2014.– 208 б.

2. Ситдикова Г.Р. Йәннәт баҡсаһы: хаж яҙмалары. – Өфө: Өфө полиграфкомбинаты, 2014. – 231 б.

Исмәғилев А.А., 9-сы класс
Ғилми етәксеһе – Шәкирова Г.Ғ.
Октябрьский ҡалаһының 9-сы урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ПРОФЕССОР Ж.Ғ. КЕЙЕКБАЕВ ҺӘМ Н.В. ГОГОЛЬ ИЖАДЫНДА ӘСЕ КӨЛӨҮ-САРКАЗМ АЛЫМЫНЫҢ ҮРЕЛЕШЕ

2020 йыл Башҡортостан Республикаһы Радий Хәбиров тарафынан Башҡорт теле Йылы тип иғлан ителде. Ошо оло ваҡиғаға арнап, атаҡлы

© *А.А. Исмәғилев, Г.Ғ. Шәкирова, 2020*

профессор Ж.Ғ. Кейекбаев һәм бөйөк рус яҙыусыһы Н.В. Гоголь әҫәрҙәрендә нескә юмор, сатира, әсе көлөү-сарказм алымдарының үрелешен актуль проблема итеп алдым.

И.А. Гончаров һүҙҙәре менән әйткәндә, киң ҡоласлы, масштаблы эпик әҫәргә «тормоштағы бөтә нәмә лә ҡарай, бары тик улар дөрөҫ һәм талантлы тасуирланһын». Бигерәк тә мәшһүр әҙип Жәлил Кейекбаев ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлап эш итә. Ул үҙенең «Туғандар һәм таныштар» исемле төп әҫәрендә халыҡ ижадын, тарихын, этнографияһын дөрөҫ һәм талантлы тасуирлап ҡына ҡалмай, был романда көлкөлө хис-тойғолар «тулҡынын» тыуҙыра, уҡыусының зиһен-күңел донъяһына төрлөсә тәьҫир итә: йылмайта, көлдөрә.

Нескә юмор һәм сатира үрелеше романдың тәүге өлөшөн тамамлап ҡуйған туғыҙынсы бүлекте тәшкил итеүсе губернаторҙы ҡаршы алырға әҙерләнеү мажараларына бәйләнгән һөйкәлмә эпизодта айырыуса күҙгә ташлана, үҙенең эпогейына етә. Ундағы хәл-ваҡиғалар ағышын, Н.В. Гоголдең «ревизоры» менән булған тарихты үҙенсәлекле, милли колоритта һынландыра, әсе көлөү-сарказм алымын оҫта ҡуллана.

Оло әҙип Ж.Ғ. Кейекбаетың «Туғандар һәм таныштар» романында Ғариф староста улус үҙәгенән «тау ҡуйынына ҡаушырынып…йоҡо тыныслығы менән ғүмер иткән Ташбатҡанға» губернатор хәҙрәттәре килә тигән хәбәр алып ҡайта. Рус яҙыусыһы Н.В. Гоголдең «Ревизор»ында Чичиковты губерна ҡалаһының йоҡоға сумған шөкәтһеҙ өйҙәре, соҡор-саҡырлы урамы ҡаршылай. Тик унда ике ир йораты ғәмһеҙ генә коляскала ултырған әфәнде менән түгел, ә тәгәрмәстәр менән ҡыҙыҡһыналар.

«Бынан теүәл йөҙ йыл элек булған «Француз яуын» иҫәпкә алмағанда» ташбатҡандар өсөн үтә мөһим был тарихи ваҡиғанан ауылды тотоп тороусы Ғариф, Баһау, Шаһиәхмәт, Әхмәди, Әхмәтша, Усман байҙар губернаторҙы һыйлап-мәйләп, ябай халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы ҡылған яман эштәрен юҡ итергә тырыша. Хатта бер туған Шаһиәхмәт менән Әхмәди ҙә бер-береһенә ҡаршы тора: уларҙың һәр ҡайһыһы губернаторға биренеп, Табын йортона старшина булыу тураһында хыяллана.

Н.В. Гоголдең «Ревизор» комедияһында үҙ ғүмерҙәрендә тикшереүсе күрмәгән губерна ҡалаһы чиновниктары зауыҡ менән кейенгән Хлестаковты юғарынан ебәрелгән «ысын ревизор» итеп ҡабул итәләр. Чиновниктарҙың мораль йөҙө, йәшәү принциптары «алдаҡсы» ревизорға бер-береһенән йәшереп биренеү ваҡытында бөтә яланғаслығында асып һалына. Ә губерна ҡала башлығы Хлестаковты кейәү итеп, үҙ иҫәбен тормошҡа ашырып ҡалырға тырыша.

Шулай итеп, мин үҙемә шуны асыҡланым: әсе көләү-сарказм алымын ике әҙиптең оҫта ҡулланыуы губернаторҙы ҡаршы алыу эпизоды йөкмәткеһенә һәм «Ревизор» комедияһына ҙур сатирик дөйөмләштереү һәләте бирә. Быны губернаторҙы ҡаршы алырға әҙерләнеү мажараларының кульминацияһын тәшкил иткән күренеш бик асыҡ күрһәтә. Оло юл өҫтөнә кейеҙ-келәм түшәп, уның ике яғынан алдан байҙарҙы, арттан ярлыларҙы һәм бала-сағаларҙы баҫтырып ҡуйып, «үрә!» ҡысҡыртып, губернаторҙы ҡаршы алыу репетицияһын үткәрә торғас, ваҡиға көтөлмәгәнсә тамамлана. Өсөнсө көндө десятскийҙар, һыбайлылар оҙатыуында губернаторҙың Ғөмәр ауылы яғынан килә ятыуы хаҡында хәбәр һалғас, юл буйында уны ҡаршы алырға йән-фарман әҙерләнгән, «үрә» ҡысҡыра-ҡысҡыра хәле бөткән халыҡтың алдында сиғандар төркөмө пәйҙә була – бөтәһе лә өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡатып ҡала.

Гоголдең «Ревизор» комедияһында Хлестаковты оҙатҡас, кеше хаттарын тартынмайса уҡып өйрәнгән почтмейстер, уның баш ҡалала йәшәгән бер иптәшенә яҙған хатын уҡып ишеттерә. Минеңсә, хаттың йөкмәткеһе – сарказм алымының иң юғары нөктәһе. Һәр чиновник үҙе тураһында сатирик йөкмәткеле характеристика ала. Ошо ваҡытта ысын ревизор килеүе һәм үҙ янына ҡала башлығын саҡырыуы тураһында хәбәр ителә. Шулай уҡ бөтәһе лә таш һын һымаҡ ҡатып ҡала.

Минең тикшеренеүемдең асылы шунда: Кейекбаевса, Гоголсә әсе көләү-сарказм алымының үрелеше рус һәм башҡорт халҡының реаль тормошон бөтә нескәлектәрендә белеп, уның тормошҡа ҡарашынан һәм мөнәсәбәтенән сығып эш итеү емеше булып тора. Ә һәр-бер халыҡтың тормошо, донъяға ҡарашы, төрлө хыял-фантазиянан күпкә байыраҡ һәм үҙенсәлерәк. Киләсәктә мин был тикшеренеү эшемде дауам итәсәкмен.

Әҙәбиәт:

1. Вәхтов Ә. Башҡорт прозаһының жанр-стиль ҡанундары. – Өфө, 2007. – 162-се бит.

2. Вәхитов Ә. Жәлил Кейекбаев хаҡында бер нисә һүҙ.

3. Вәхитов Ә. Жәлил Кейекбаев ижады хаҡында бер нисә һүҙ // Ж Кейекбаев. Туғандар һәм таныштар. Баш һүҙ. – 12-се бит.

4. Гоголь Н.В. «Ревизор» комедияһы.

5. Кейекбаев Ж. Туғандар һәм таныштар. – Өфө, 1975.

6. Сөләймәнов Ә. Халыҡ ижадынан һут алып. – Ғилем, 2000, 26-28-се биттәр.

Йәрмөхәмәтова И.И., 8-се класс
Ғилми етәкселәре – башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусылары Әминева Л.И., Йәрмөхәмәтова Г.М.
Бөрйән районы Аҫҡар аулының урта дөйөм белем биреү
мәктәбе Брәтәк филиалы
Рәми Ғарипов 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

«БАШЙОРТ» ТУРИСТИК КОМПЛЕКС ЯРҘАМЫНДА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕН ПОПУЛЯРЛАШТЫРЫУ

Проект эшенең проблемаһы: Әлеге көндә башҡорт теле ЮНЕСКО тарафынан юғалып барған телдәр рәтенә индерелгән. Был бик аяныслы күренеш. Әлбиттә, бының сәбәптәре күп. Беренсенән, йәмғиәт роль уйнаһа, икенсенән, үҙ башҡорттарыбыҙ туған телде инҡар итеп, балалары менән рус йәки башҡа телдә һөйләшә, хатта ауылдағы бәләкәй генә балалар үҙ-ара рус телендә аралаша. Был хәл мине аптырауға һәм борсоуға һалды. Былай дауам итһә, киләсәктә телебеҙ юҡҡа сығырға ла мөмкин, тип уйлайым.

Актуаллеге: Һәр бер халыҡ туған теле менән үҙенсәлекле. Туған тел аша беҙ милләт тураһында мәғлүмәт алабыҙ, уның менән танышабыҙ. Тел бөтһә, ил дә бөтә. Ил һаҡланһын өсөн башҡа тармаҡтарҙа туған телде үҫтереү, пропагандалау, сит өлкәләргә танытыу кәрәк.

Маҡсат: 1) Башҡорт телен пропагандалау, тел байлығын, мөһимлеген күрһәтеү, аңлатыу маҡсатында һәр бер илдә, республикала, өлкәлә аҫаба халыҡтың тел үҙенсәлектәре менән таныштырыу өсөн айырым туристик комплекс булдырыу.

2) Башҡа милләттәрҙә, бигерәк тә сит илдәрҙән, башҡа региондарҙан килгән туристарҙа, республика ҡунаҡтарында телгә, уның яңғырашына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

3) Шулай уҡ башҡорт халҡының йәшәйеше, тормош-көнкүреше, аш-һыуы, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында мәғлүмәт биреү

4) Тел аша башҡорт милләтен донъяға танытыу.

Бурыс: Үҙ теле, үҙ милләте, халҡының артабанғы яҙмышы өсөн борсолған һәр кеше телебеҙҙе үҙ илендә генә һаҡлап ҡалыу түгел, ә башҡа илдәргә лә танытыу өсөн төрлө юлдар эҙләргә бурыслы. Һәм мин билдәләнгән маҡсатҡа, бурысҡа ярашлы һеҙгә ошо проект эшемде тәҡдим итәм.

© *И.И. Йәрмөхәмәтова, Л.И. Әминева, Г.М. Йәрмөхәмәтова, 2020*

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен популярлаштырыу өсөн мин баш ҡалабыҙҙың Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә башҡортомдоң ете ырыу рухына арнап, ҡурай тажы рәүешендә ете тирмә ултыртасаҡмын (тирмәләрҙең макеты). Был тирмәләрҙең дөйөм исеме «Башйорт» буласаҡ.

Минең Башйортто эшләп, донъя кимәленә танытып, башҡорт теленә һәм әҙәбиәтенә башҡа халыҡтарҙың да ҡыҙыҡһыныуын уятҡым килә. Был тирмәләрҙә гел башҡортса ғына һөйләшәсәктәр, кемдәр белмәй һәм телде белергә теләүселәр өсөн тәржемәселәр эшләйәсәк. Һүҙлек китаптары буласаҡ. Һәр тирмә үҙ маҡсатына ярашлы башҡорт теле һәм әҙәбиәтен популярлаштырасаҡ. Ә дөйөм алғанда, башҡорт халҡының шул тиклем матур телен, бар тормошон, йәшәйешен, оҫталығын бөтә донъяға бер юлы күрһәтә алыу мөмкинселегe буласаҡ.

Һәр тирмәлә интернет селтәренә тоташҡан телевидение буласаҡ һәм уның эсендә барған эш барышын ер шарының төрлө нөктәһенән ҡарап, Башйорттоң эшмәкәрлеген өйрәнеп, кәрәк әйберҙәренә интернет-заказдар биреп, һатып алыу мөмкинселегенә лә эйә була аласаҡтар. Интернет аша бәйләнешкә керергә лә мөмкин.

Шулай уҡ, төрлө каналдарҙа балаларға башҡортса йәнһүрәттәр, әкиәттәр, эпостар, нәфис фильмдар, башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтеү, интеллектуаль яҡтан үҫтереү программалары эшләйәсәк, сөнки телде өйрәнеүгә төп нигеҙ бала саҡтан һалына.

Беренсе тирмәлә башҡорт музейы буласаҡ.

Икенсе тирмәлә дарыу үләндәренең серҙәренә төшөнөү мөмкинселеге булыр.

Өсөнсө тирмәлә инде милли аҙыҡ, аш-һыу менән танышырға һәм тамаҡ ялғап алырға мөмкин буласаҡ. Шулай уҡ күңеленә оҡшаған ризыҡты үҙең лә әҙерләп ҡарарға ярай.

Дүртенсе тирмәлә халҡымдың бренды булған бал менән бәйле бөтә хужалыҡ эштәре күрһәтеләсәк. Боронғо башҡортомдоң солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүе, умарта эшләүе, бал ҡорттарының эшмәкәрлеге, сифатлы һәм файҙалы башҡорт балы тураһында бик матур итеп мәғлүмәт биреләсәк.

Бишенсе тирмәлә халҡымдың матур көйҙәре яңғырап торор.

Алтынсы тирмәлә халҡымдың ҡул эштәре урын алыр. Аҫалы балаҫ һуғырҙар, кейеҙ баҫырҙар, түшәктәргә серге тыш эшләрҙәр.

Етенсе тирмәлә башҡорт халҡының милли уйындары уйнатылыр: уҡ атыш, ҡолғаға менеү, көрәш, көршәк ватыу һ.б. уйындар.

Әлбиттә, был эште мин яңғыҙым башҡарып сыға алмайым. Киләсәктә ошо теманы киңәйтеп, бизнес-план төҙөп, хөкүмәт

тарафынан ярҙам күрһәтелһә, был эшкә ауылдаштарым, туғандарым менән бергә тотонор инем.

Был тирмәләрҙең бер урында булыуы килгән ҡунаҡтар өсөн бик тә уңайлы булыр, тип уйлайым. Сөнки ете тирмәгә инеп, улар башҡорт халҡының бар булмышы, яҙмышы, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында тулыһынса мәғлүмәт алып ҡайта ала, үҙҙәре лә ниндәйҙер һөнәргә өйрәнеп, артабан үҙ илендә милләттәштәрен өйрәтә ала. Ә иң мөһиме – башҡорт теленең шундай матур, яғымлы, күркәм тел икәнен аңларҙар һәм өйрәнергә тырышырҙар ине, тип уйлайым.

Йәһүҙина Д.С., 9-сы класс
Ғилми етәксеһе – башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Дәүләтшина М.Ф.
Республика инженер лицей-интернаты

ӘСӘМ ТЕЛЕ – СӘСӘН ТЕЛЕ

Мин бөгөнгө көндә Республикабыҙҙың инженер лицей-интернатында 9-сы класта белем алам. Лицейыбыҙ техник вуздарға йүнәлтелгән белем биреүгә ҡарамаҫтан, башҡорт телен укытыу, беҙҙе рухи яҡтан көслө, илһөйәр шәхестәр итеп тәрбиәләү юғары кимәлдә ҡуйылған. Әлбиттә, быларҙың барыһы ла әсә теле аша һалына. Әммә, ҡыҙғаныска ҡаршы, тиҫтерҙәрем араһында башҡорт теленең киләсәктә кәрәкмәүе тураһында фекерҙәр яңғырауы уйланырға мәжбүр итә.

Беҙҙе киләсәктә буласаҡ инженерҙар, етәкселәр, эшҡыуарҙар, рух инженерҙары тип үҫтерәләр. Ысынлап та, Республика инженер лицей-интернатын, гимназияларҙы тамамлаусы егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың күбеһе ҙур етәксе постарҙы биләйҙәр, төрлө өлкәлә танылыу табалар. Әгәр хөкүмәтебеҙ тарафынан башҡорт теле яҡлау табып, дәүләт хеҙмәткәрҙәре, чиновниктар өсөн ике телде – башҡорт теле менән урыҫ телен – белеү талабын ҡуйһалар, белем усаҡтарында башҡорт телен өйрәнеүгә ата-әсәләрҙең һәм балаларҙың ҡарашы ҡырҡа үҙгәрәсәк.

Һәр бер ата-әсә балаһының уңышлы булыуын теләй. Психологтар фекере буйынса, туған телендә һөйләшкән кеше генә үҙен ижади, камил шәхес итеп тоя ала. Әгәр ошо һәләт булһа, ул шәхес буласаҡ үҙен аса, үҙе менән ҡәнәғәт була, бындай кеше бер ҡасан да маҡсатһыҙ йәшәмәй, тормошто ярата белә, төшөнкөлөккә бирелмәй, сөнки йәшәүенең бөтә йәме үҙенең ҡулында икәнен төшөнә. Кемдең теле сит телдә асылып, фекерләүе икенсе телгә күсерелә, ул кеше ҡушҡанды

© *Д.С. Йәһүҙина, М.Ф. Дәүләтшина, 2020*

эшләүсегә әйләнә. Бала ни өсөн был донъяға килгәнен, ни өсөн бер милләт булып тыуған, әммә икенсе телдә һөйләшеп йөрөүен аңлата алмай. Ошо сәбәптәр битарафлыҡҡа килтерә. Шуға күрә, минең уйлауымса, балаға бәләкәй саҡтан һин үҙеңдең халҡың, телең менән көслөһөн, тигән милли идеяны һеңдереп үҫтерергә һәм, әлбиттә, башҡорт булыуынан оялмаҫлыҡ тәрбиә бирергә кәрәк. Бында ғаилә генә түгел, тотош йәмғиәт ошо йүнәлештә эш алып барырға тейеш, тип уйлайым.

Күренекле халыҡ шағиры Р. Ғариповтың «Туған тел» шиғырында шундай юлдар бар:

Ысынлап та, бөгөнгө ҡатмарлы заманала күп балалар сит мөхиткә барып эләкһә, телен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе белмәү, йәғни тейешле тәрбиә алмау арҡаһында башҡорт булыуынан ояла.

Минең уйлауымса, балалар, йәштәр башҡорт булырға теләһен өсөн башҡорт булыу модалы булырға тейеш. Ә уның өсөн халҡыбыҙ араһында ғорурланып телгә алырлык, уларға тиңләшергә теләрлек башҡорттар булырға тейеш.

Боронғо замандарҙан төрлө тарафтарға башҡортлоҡто танытып, яҡлап, халҡының тарихы, мәҙәниәте менән таныштырып йөрөүсе Мифтахетдин Аҡмулла, Йомабай Иҫәнбаев, Зәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан, Ғәбдрахман Ҡадыров кеүек арҙаҡлы шәхестәребеҙ булған.

Бөгөнгө көндә донъя кимәленә халҡыбыҙҙың исемен сығарған, уның исеменән сығыш яһаусы билдәлелек яулаған Эльбрус Ниғмәтуллин, Динис Шафиҡов, Хәбир һәм Сабир Сөләймәновтарҙы кемдәр генә белмәй!? Ни өсөн Силәбе башҡорттары? Барыбыҙ өсөн уйланырлыҡ һорау! Бөрйән дә, Баймаҡта, Учалы ла, Әбйәлил дә түгел?

Башҡортостан автономияһын төҙөгән һәм яулаған бөйөк юлдашсыбыҙ, шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең «Башҡорт халҡына хушлашыу» хатында **«Беҙҙең милләтебеҙ аҡтамыр киҫәге кеүек, тупраҡ араһында бәләкәй генә киҫәге ҡалһа ла, яңынан терелеп, бөтөн баҡсаға таралыр»** тип яҙған. Ысынлап та, был фекер менән мин дә килешәм. Хәҙерге көндә ҡотолғоһоҙ күренгән күренештәр милләтебеҙҙе өмөтһеҙлеккә төшөрмәһен.

Шулай уҡ Әхмәтзәки Вәлиди ошо хатында йәштәрҙең уҡыуы, уларҙан ғилем һәм техника белгестәрен, йәғни инженерҙар әҙерләү менән шөғөлләнеүҙе үҙәк мәсьәлә итеп билдәләй. Бөйөк шәхесебеҙҙең маҡсаттары тормошҡа ашты. Бөгөн илебеҙҙә инженерлыҡ нигеҙендә төрлө уҡыу йорттары бар. Шуларҙың береһе беҙҙең Республика инженер лицей-интернаты уңышлы һәм маҡсатлы эшләй. Инженер йүнәлешендә белем алыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙ теленә, иленә һәм милләтенә битараф булмаған йәштәр уҡый.

Беҙ, йәш быуын, кешенең барлыҡ тормошо, карьераһы, уңыштары үҙенең туған теленә, халҡына, республикаһына мөнәсәбәтенән тороуын аңлап, бөгөндән үҙебеҙҙе илһөйәр, телһөйәр шәхестәр итеп тәрбиәләү бурысын ҡуйырға тейешбеҙ.

Касымбек А.Д., магистрант 3 курса
Научный руководитель – доцент Аккужина Ф.А.
СФ БашГУ г.Стерлитамак

ИДЕЙНО-ТЕМАТИЧЕСКОЕ СОДЕРЖАНИЕ ЭПОСОВ ТЮРКСКИХ НАРОДОВ

Для раскрытия идейно-тематического содержания эпосов тюркских народов каждый народ опирается на свои вековые традиции, обычаи, которые раскрываются в различных поэтических образах.

Хотя у каждого народа есть образы, принадлежавшие только ее истории, но во многом случае у родственных народов они схожи, а иногда они одинаковы по силе их участия в жизни народа. Таковыми в эпосах являются опоэтизированные образы природы: гор, рек, скал, деревья, дикие звери и птицы, даже змеи и насекомые. Одушевление природных явлений, особенно небесных тел – самое часто встречающееся образное выражение в народном творчестве. Как отмечает Афанасьев А.Н., известный собиратель народного фольклора и исследователь народных сказок и былин, «былинные и сказочные герои – не вымысел, но реальность, реальность особого рода. Сказка не пустая складка, в ней, как и вообще во всех созданиях целого народа, не могло быть и в самом деле нет ни нарочито сочинённой лжи, ни намеренного уклонения от действительного мира... Чудесное сказки есть чудесное могущественных сил природы» [Интернет]. Народ с любовью дает имя природным уголкам, имея ввиду характер, ценность, внешность. Зачастую мы встречаем в названиях имен самих богатырей или их детей. Так в башкирском эпосе «Урал батыр» название Урал народ дает горе, которая образовалась на месте захоронения богатыря: каждый приносил горсть земли на его могилу в знак благодарности, и выросла большая, красивая гора Уралтау – прародина башкирского народа. А сыновья Урала продолжают дело отца и становятся реками, которые спасают людей от засухи, это – Идель, Нугуш, Яик, Сакмар. С такой же любовью названы уголки родной земли в эпосах других тюркских народов: Черет – Чемет, Чеметен – Туу, Юч – Курбустан,

© *А.Д. Касымбек, Ф.А. Аккужина, 2020*

Юч-Мыйгак – в алтайском эпосе, Кырлы – Кала, Сырлы – Кала, Алатоу, гора Караспан, озеро Азулы, озеро Елик – в казахском эпосе. Эти опоэтизированные уголки природы играют роль в судьбе героя, и мифологическая обоснованность названий сохраняется до сих пор.

Поэтический образ боевого коня батыра во всех эпосах является самым распространенным и любимым образом народа. К описанию внешнего вида коней народ выбирает самые прекрасные сравнения, эпитеты и метафоры, к коням дается человеческие качества, когда он наравне с батыром решает сложные задачи, разговаривает на человеческом языке. В описаниях подчеркивается готовность коня всегда прийти на помощь, чем добывается монолитность образа батыра и коня: во всех эпосах герои с любовью относятся к лошади, увидев в них равного бойца в ратных делах, прислушиваются к их словам, не нарушая условности. Во всех эпосах поэтический образ коня так высоко ценится кочевыми племенами: выбранного коня они готовы ждать, за него бороться, добиваться признания самого коня:

На спине его лежит седло...
А к луке того седла
Привешан меч, острый как алмаз,
Золотые удила в узде;
Уши, словно шило, навострил,
Грива расчесана , как у девушки,
(волосок к волоску),
Ноздри – словно башкунак,
Зубы –как дольки чеснока,
Грудь – как у кречета, узок в боках,
Ноги тонкие легки,
Медью (отливают), как у зайца, глаза,
Двойная макушка, челюсть узка.
Шея – длиной в колас,
Дикий орлиный взгляд...
Уши, как ножницы, торчат...
По сторонам беспокойно косит:
Словно хваткий волк,
Глазом влажным сверкает;
В яростижует удила,
Пена падает с губ;
Поскачет – птицей взлетит,
Облако пыли оставляя за собой.

Так описывается боевой конь в башкирском эпосе «Урал батыр», конь, который сам ищет своего батыра и готовый служит человечеству.

Условность, связанная воспитанием жеребенка в казахском эпосе показывает, что между человеком и конем живет невидимая связующая сила. Нарушив эту условность, батыр может попасть в трудные ситуации, а растущая сила Тайбурыла, который готов своим спутником одолеть все преграды, восхищает каждого, так как в фантазии народа крылатый конь чалой масти Кобланды-батыра смог за 40 дней «перелететь» все страны:

Словно гром перед летним дождем,
Тайбурыл на дороге гремит,
И земля трепещет кругом
От ударов мощных копыт.
Он степного бурана сильней.
Две передних его ноги
Задних ног на четверть длинней.
Он бежит ни с кем не сравним,
Не касается он земли.

Описание могучего коня Маадай-Кара в алтайском эпосе также показывает глубокую привязанность человека и коня, и это единство не только по жизни, но и в ратных делах: конь узнает врагов по стуку копыт, он готов переносить все невзгоды. И народ благодарный своему другу, посвятил самые прекрасные строки:

Тут славный аргамак стоит,
Ветвями от жары укрыт.
Живою вспоенный водой,
На пышных вскормленный лугах,
Покрытый шерстью золотой, –
Могучий конь Карыш-Кулак,
Чья грива, будто водопад,
Струясь, колышется, густа,
Чьи, укрывая след, висят
Сто прядей длинного хвоста.
Летит огонь, рокочет гром
От стука четырех подков,
И лунно-солнечным тавром
Скакун помечен с двух боков.
Глаза прекрасные черны,
Как при затменье две луны,
Глядят по обе стороны,
И все дороги им видны.

Поэтические образы в фантазии народа выражают любовь народа к родной земле, и творческий полет создает все новые сюжеты, где

даже дикие птицы, как лебедь, журавль, кукушка становятся своеобразными героями, привычки, природные характеры которых, позволяют воссоздать образы, близкие к мифологии.

Ҡотлогилдина И.М., 4-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Үтәев А.Ф.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

КӘТИБӘ КИНЙӘБУЛАТОВА ШИҒРИӘТЕНДӘ ҺУҒЫШ ТЕМАҺЫ

Кәтибә Кәрим ҡыҙы Кинйәбулатова 1920 йылдың 15 сентябрендә Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Мәүлет ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде атаһы бирә, унан һуң Мөхәмәтҡол мәктәбен тамамлай. 1933 йылдан Б. Нуриманов исемендәге Өфө педагогия эшселәр факультетында уҡый һәм уны 1938 йылда тамамлай. 1939 йылда Тимирязев исемендәге Башҡортостан педагогия институтына уҡырға инә, әммә уны тамамлап өлгөрмәй. 1938 йылда атаһы репрессияға эләгә, тиҙҙән әсәһе лә вафат була. Ул ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсә һәм Силәбе өлкәһенең Ҡолой урта мәктәбендә уҡытыусы, унан һуң директорҙың уҡыу-уҡытыу буйынса урынбаҫары булып эшләй. Етем ҡалған биш ҡусты-һеңлеһен тәрбиәләп үҫтерә. Кәтибә Кәрим ҡыҙы 1953 йылға тиклем мәктәптә эшләй, унан һуң Өфөгә күсеп, «Әҙәби Башҡортостан» журналына хеҙмәткәр булып килә. 1963 йылда Мәскәүҙәге Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. «Башҡортостан ҡыҙы» журналын ойоштора һәм уның тәүге баш мөхәррире була.

Кәтибә Кинйәбулатованың поэтик ижадында тыуған яҡ темаһы шаҡтай ҙур урын алып тора. Был хаҡта Ҡамса Мортазин [2; 86]: «Кәтибә Кинйәбулатова шиғриәтенең үҙенсәлеге шунда: тыуған яҡ тураһындағы уйланыуҙары уның әҫәрҙәренең ҙур бер өлөшөн тәшкил итә», – тип яҙҙы. Фәлсәфәүи, мөхәббәт лирикаһы ла шағирә ижадында киң урын алған. Ижадында әҙибә әсә образын һынландырыуға, әсә кешенең эске донъяһын өйрәнеүгә, уның булмышын, уй-хистәрен сағылдырыуға ҙур иғтибар бүлә. Ғөмүмән, К. Кинйәбулатова шиғриәтендә кеше характеры, кеше тәбиғәте асыла, уның аҫыл сифаттары үҙәккә ҡуйыла, кешелектең рухи байлығы кәүҙәләндерелә.

Шағирәнең ижадында граждандлыҡ лирикаһы айырым бер урынды биләй. Уның лирик геройы яҡшылыҡҡа ҡыҙығып һәм һоҡланып ҡына

© *И.М. Ҡотлогилдина, А.Ф. Үтәев, 2020*

ҡалмай, шуның өсөн көрәшә. Кәтибә Кинйәбулатованың 50-70-се йылдарҙа ижад ителгән күп кенә әҫәрҙәре һуғыш темаһына бәйле. Мәҫәлән, «Кәкүк тауышы» шиғырында әҙибәнең заман һулышын яҡшы тойоуы күҙәтелә:

Һары һағыш?
Ниндәй һары һағыш?
Кәкүккә һуң нимә етмәгән?
Барыһы бар бит:
Урал,
Иҙел, ҡамыш…
Ә, юҡ,
Ерҙә һуғыш бөтмәгән!
Ерҙә шом бар…, –

тигән юлдар илдәр араһында барған «һалҡын» һуғыш тураһында ишаралай.

Күп кенә автобиографик сюжетлы әҫәрҙәрҙә лирик герой үҙе кисергән хис-тойғолар аша һуғыштың аяуһыҙ эҙемтәләре хаҡында һүҙ ҡуҙғата. «Бер һүҙем бар» шиғырында лирик герой йәш сағын иҫләй:

Һуғыш мәле. Ауыр.
Ә мин өйҙә.
Кескәйҙәргә әсәй, атай ҙа.
Атай ситтә.
Әсәй үлеп китте.
Үлгәндәр шул кире ҡайтмайҙар.
…Күпме талпынһам да, атай булып
Йыуата алмағайным ҡустымды…

Был һүҙҙәр кешеләргә иҫкәртеү булып яңғырай. Шағирә замандаштарына өндәшә:

Бер һүҙем бар: ғәзиз атайҙарҙы
Утҡа бирмә, бирмә, замана.
Атай, тиһә, атай ҡаршы сыҡһын,
Әсәй, тиһә, әсәй – балаға!

«Үҙем оҙаттым» шиғырында автор хәүефле күренештәр хаҡында фекер йөрөтә, яңы ғына башланып торған Афған һуғышы хаҡында ла әсенеп яҙа:

Ғибрәт өсөн генә етмәйме ни
Афғанстан һалған ҡайғылар,
Йөрәгемдә әсә зары илай:
«Улҡайымды утҡа һалдылар…»

Шулай итеп, К.Кинйәбулатованың граждандлыҡ лирикаһында илдәге, донъялағы төрлө юҫыҡта булған проблемалар сағылыш таба.

Совет осоронда ижад ителгән поэтик әҫәрҙәрендә шағирә башлыса тыуған ил, экология, һуғыш темаларына мөрәжәғәт итә, замандың төрлө актуаль проблемаларын күтәрә. Шағирәнең тарихҡа күҙ һалып, совет осоронда үҙе күргән кире һәм ҡанһыҙ күренештәрҙе яҡтыртыуы граждандлыҡ лирикаһын үҙенсәлекле итә.

Әҙәбиәт:

1. Килмөхәмәтов Т. Халыҡсанлыҡ көсө. Әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, ижади портреттар. – Өфө: Китап, 1998. – 464 бит.
2. Мортазин Ҡ. Тыуған яҡ йырсыһы // Ағиҙел. – 2004. – №10.
3. Самирханова Г.Х. Особенности образной системы башкирских басен // Вестник Башкирского университета. – 2011. – Том 16. – №3 (1). – С. 1043-1044.
4. Утяев А.Ф. Особенности лирического героя современной башкирской поэзии // Мир науки, культуры, образования. – 2010. – №5. – С. 40-42.

Латыпова А.А., 5-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Илишева Р.Х.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

Ф. БҮЛӘКОВТЫҢ «ШАЙМОРАТОВ-ГЕНЕРАЛ» ДРАМАҺЫНЫҢ ЖАНР ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт әҙәбиәтендә Бөйөк Ватан һуғышына арналған әҫәрҙәр айырым урын алып тора. Тарихи хеҙмәттәр куп булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт драматургияһында героик драма жанрында яҙылған әҫәрҙәр табыуы еңелдән түгел. Ә бына Флорид Бүләков Башҡортостанда хөрмәтле шәхес, Советтар Союзы геройы, легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы генерал-майоры Миңлеғәле Шайморатовтың тормош юлына мөрәжәғәт итергә батырсылыҡ итә. Үҙенең ҡыйыулығы һәм таланты арҡаһында яҙыусы милли әҙәбиәтте яңы, тарихи ваҡиғаларға тәрәнерәк иғтибар бүленгән әҫәр менән байыта. Бүләков төрлө художестволы-стиль сараларын һайлап ижад итә.

«Шайморатов генерал» драмаһының сюжет нигеҙенә Бөйөк Ватан һуғышында героик батырлыҡтар күрһәткән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яҙмышы ята. Ләкин драманың идеяһы дивизия һәм Шайморатов генерал яҙмышын, йәғни тарихты һүрәтләү генә түгел. Драманың жанры – реквием тип алынған. Реквием – хор өсөн

© *А.А. Латыпова, Р.Х. Илишева, 2020*

тәғәйенләнгән һәм яуҙар, афәттәр ваҡытында күпләп ҡырылған кешеләрҙе хәтерләүгә бағышланған, тантаналы, бер үк ваҡытта хәсрәтле музыка. Ф. Бүләковты Бөйөк Ватан һуғышында һәм унан башҡа Рәсәй, Башҡортостан тарихында булып үткән ҡан ҡойошло яуҙарҙа туған халҡының ҡырылыуы борсой, ул генофонд, үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты тураһында уйлана, яуҙа ҡорбан булған бик күп башҡорт яугирҙарын хәтерләп әрней. Пьеса нигеҙендә Ҡ. Даян һүҙҙәренә З. Исмәғилев яҙған йыр образы ята. Авторҙың төп маҡсаты булып һуғыш ваҡиғаларын ғына түгел, ә геройҙың күңел кисерештәрен күрһәтеү тора.

Әҫәрҙә Шайморатов ауыр яҙмыш кисереүсе булып күҙ алдына баҫа, әммә шул уҡ ваҡытта ул кешеләргә ҡарата тыныс һәм изгелекле. Бигерәк тә ул үҙенең һуғышсыларына иғтибарлы. Күңел төпкөлөндә ул кавалерияны авиация һәм танкыларға ҡаршы ебәреү – енәйәт, тип уйлай. Ләкин уларҙы ҡотҡара алмай. Башҡорттар яуҙан баш тартһа, халыҡ ни әйтер? Хатта приказ хата булған осраҡта ла, улар яуға инергә тейеш булып сыға, халыҡ ҡарашында хурлыҡҡа ҡалыу – үлемдән дә яманыраҡ. Ошо ҡаты һәм көсөргәнешле минутта һалдаттар үҙҙәре үлем тураһында уйламайҙар, улар еңеүгә ышана. Хатта дошман һөжүме алдынан да киләсәк тураһында хыяллана, шаяртып, бер-береһен көлдөрә. Йоҡлар алдынан һәр береһе үҙ ғаиләһе тураһында һөйләй: балаларына ниндәй исем ҡушырҙар, улар нимә эшләйәсәктәр, ниндәй йорт һалырҙар һәм башҡалар. Был бер ҡатлы хыялдарҙы тыңлау, иртәгә улар яуҙа ауасағын белгәнгә күрә, күңелгә ауыр.

Пьесаның финалында дүрт әле тыумаған малайҙар башҡарыуында «Саҡ-суҡ» бәйете яңғырай. Балалар бөтә кешелеккә мөрәжәғәт итә. Улар башҡа бер-береһе менән күрешә алмаған егет һәм ҡыҙҙар, улдарын юғалтҡан әсәләр, тормошҡа ашмаған хыялдар тураһында бәйән итәләр. Бәйет һуғыштың йәшәйешен сағылдыра.

Шулай итеп, Флорид Бүләковтың «Шайморатов генерал» драмаһында төп геройҙың трагик яҙмышы аша героизм, ҡаршылыҡтар аша үткән шәхестең күңел кисерештәре, патриотизм темалары асыҡлана. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы генерал-майоры Миңлеғәле Шайморатов бөтә ғүмере буйы яугилыҡ һөнәрен үҙләштергән, яугирҙарға өлгө, атай булырға булырға тырышҡан. Ләкин яуҙа ул улын, башҡа бик күп йәш егеттәрҙе юғалтыуҙы ауыр кисерә. Пьеса Йәмиләгә һәм уның йөҙөндә башҡа ил әсәләренә, улдарҙы һаҡлап ҡала алмағанға, партия машинаһы алдында көсһөҙлөгө өсөн, трагик характерҙағы монолог-өндәшеү менән барып бөтә.

Әҙәбиәт:

1. Бүләков Ф. Пьесалар. – Өфө: Китап, 2008. – 448 бит.

Мостафина А.И., 5-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Илишева Р.Х.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

Т. ҒИНИӘТУЛЛИНДЫҢ «БЫНА ҺУҒЫШ БӨТӨР ҘӘ» ПОВЕСЫНДА ЙӘШӘҮ ҺӘМ ҮЛЕМГӘ ГЕРОЙҘАРҘЫҢ ҠАРАШТАРЫ

Талха Ғиниәтуллиндың «Бына һуғыш бөтөр ҙә...» повесында Бөйөк Ватан һуғышының 1945 йылы һүрәтләнә. Беҙҙең һалдаттар, тыуған илдәрен фашистарҙан таҙарта барып, дошманды үҙ өңөнә ҡарай сигендереп, Германия сиктәренә, Померания ерҙәренә килеп еткәндәр. «Беҙ, һалдаттар, үҙебеҙҙең өй, йорт тураһындағы татлы хәбәрҙәребеҙҙә, һуғыштан һуң тормош ниндәй булырға тейеш тигән һөйләшеүҙәрҙә, унан килеп әсәйҙәргә, ҡатындарға, һөйгәндәргә яҙған хаттарҙа гел генә «Бына һуғыш бөтөр ҙә...» тигән өмөтлө һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләйбеҙ, яҙабыҙ...». Әҫәрҙә барлыҡ һалдаттарҙы ла бер уртаҡ тойғо берләштерә, дәртләндерә, киләсәккә өмөт менән ҡарарға өндәй: «Бына һуғыш бөтөр ҙә...». Бөтәһе лә һуғыштан арыған, тыныс тормошта йәшәүгә, эшләүгә сарсаған. Кешеләргә тыныслыҡта, мөхәббәттә, бәхетлектә генә йәшәргә ине: тормошта бөтмәҫ һуғыш бара һәм кеше бер һуғыш менән икенсе һуғыш арауығында ғына тыныс йәшәп ҡала... Герой юлда осраған ташҡа ҡарап уйлана. Таш образы аша ул кеше ғүмере ни тиклем ҡыҫҡа булыуын күрһәтергә теләй. Был донъя беҙ ҡунаҡ ҡына тигән төшөнсәгә таянып тормошто ығы-зығыһыҙ, тыныслыҡтың ғәҙерен белеп йәшәргә өндәй автор «Хәҙер һуғыш бөттө, тамам бөтмәһә лә оҙаҡламай бөтәсәк, шуға ла еңеүгә ике аҙым ҡалғас берәүҙең дә үлеп ятаһы килмәй. Был хаҡта һөйләшмәнек, әммә һәр кем тик ошо хаҡта ғына уйлағанын һәр кем белә. Һуғыш бөтөр алдынан ғына ғүмерҙәре өҙөлөүе ни тиклем үкенесле булмаһын, һалдаттар һуңғы яуға инә, сөнки һәр кем алда еңеү көткәненә, ә инде еңеүҙең тыныс, бәхетле тормош килтерәсәгенә ышана. Фронт юлдарының бөтә ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә күтәреүсе, шул һуғыштың эсендә ҡайнап йөрөгән Толяға яуаплы бурыс тапшырыла. Үлемгә табан үҙе китеп барғанын аңлап, бар күңеле менән ҡабул итеп, үҙ ғүмерен ҡорбан итергә әҙер. Яуҙа уның дуҫы һәләк була: «... уң битен ергә терәп йөҙтүбән ята; ныҡыраҡ эйелеп мин уның йөҙөнә ҡараным: күҙҙәре асыҡ, әммә үле. ...улы үлгән, бисәһе икенсегә сыҡҡан – ни мәғәнә йәшәүҙән? Кем белә, бәлки, мине, маңҡаны, йәлләгәндер...». Дуҫы

© *А.И. Мостафина, Р.Х. Илишева, 2020*

Сергейҙың үлемендә Тәлғәт үҙен ғәйепле һанай, минең урынынға Сережа һәләк булды, тип өҙгөләнә. Шул уҡ ваҡытта герой, дуҫы күңелендә барған кисерештәрен күреп йөрөгәнлектән, уның тормошоноң йәмен, йәшәүенең мәғәнәһен юғалтыуын, шуға ла үҙе теләп һуғыш бына-бына бөтә тип торғанда үлемгә ташланыуының сәбәбен йөрәге менән тойомлағандай була.

«Бер аҙ барғас, ҡылысты ҡынға тыҡтым да артыма боролоп ҡараным: трибуна янында, ат тояҡтарынан күтәрелгән һары саң араһында аттар, улар өҫтөндә кавалеристар һелкенә, ҡылыстар ялтлай һәм «ура» тулҡын-тулҡын булып ҡабатлана». Килә торғас, Тәлғәт көнсығышҡа йүнәлеш алғандарына төшөнә. Һуғыш башланғаны бирле һалдаттар беренсе тапҡыр көнсығышҡа китеп бара. Ә унда, көнсығышта, томанлы офок аръяғында, урмандар, ялан-туғайҙар артында, күп михнәттәр, хәсрәттәр күргән илебеҙҙә уларҙы тыныс тормош көтә. Өҙөлөп-өҙгәләнеп көткән тыныс тормош ишеген аса герой. Ниһәйәт, ул тыуған яҡтарына, туғандарына ҡайта.

Әҙәбиәт:

1. Ғиниәтуллин Т. Һин аҡ ҡайын янында тора инең... – Өфө: Китап, 2007. – 527 бит.

Мостафина А.И., 5-се курс
Ғилми етәксеһе – филол.ф.к., доцент Үтәев А.Ф.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНДА ДӘРҮИШ ОБРАЗЫ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Дәрүиш – донъяуи нәмәләрҙән ваз кисеп, күңелен бөтөнләй дингә һалып, алла бәндәһе булып йөрөгән кеше. Дәрүиш образын һүҙ сәнғәтенең башы булған халыҡ ижадында уҡ күҙәтергә мөмкин. Әйтәйек, «Дәрүиш ашауынан, бай йәшәүенән билгеле», «Ике дәрүиш бер балаҫҡа һыйыр, ике батша ер йөҙөнә һыймаҫ» кеүек башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә дәрүиштең йәшәү рәүешенә кинәйә яһала. «Дәрүиш ашауынан, бай йәшәүенән билгеле» тигән мәҡәлдә дәрүиш бай кешегә ҡапма-ҡаршы ҡуйылып, уның ярлы, ас ғүмер итеүенә баҫым яһала. «Ике дәрүиш бер балаҫҡа һыйыр, ике батша ер йөҙөнә һыймаҫ» мәҡәлендә дәрүиштәрҙең был донъяла бер нимәгә дәғүәләре юҡ икәнлегенә, уларҙың барына риза булып йәшәүенә иғтибар ителә.

© *А.И. Мостафина, А.Ф. Үтәев, 2020*

Халыҡ ижады ынйыларына ҡараған «Тау сере» риүәйәтендә дәрүиш кире образ булып кәүҙәләндерелә. Мосафир ҡарт үҙен «мин ил ҡыҙырып йөрөгән берәҙәк бер дәрүиш кенә түгел, бик алыҫтан, Әлхәссә тигән шәһәрҙән килгән бер суфый дәрүиш булам» тип таныштыра һәм артабан бәләкәйҙән суфыйсылыҡҡа бирелеүен, төрлө ғилемгә эйә булыуын, бик күп китаптар күсереп яҙырға тура килеүен, иҫке генә бер әсбаптың араһынан Яман соҡор эргәһендә барымтасылар алтын күмеп ҡалдырыуын хәбәр иткән һарғайып бөткән бер яҙыуға тап булыуын һәм хазина эҙләп башҡорт ерҙәренә килеүен бәйән итә. Суфыйсылыҡҡа, дәрүиш тормошона мөнәсәбәтен, уны бер ҡасан да өнәп бөтмәүен хикәйәләй. «Мине был суфый тормошо бер ҡасан да мөрхәтһендермәне. Унан мин үҙем өсөн бер ниндәй ҙә йән аҙығы тапманым. Һәр саҡ мин ғибәҙәтхананан ҡасып китергә уҡталдым…».

Риүәйәттәге мосафир сабырлыҡты, ҡәнәғәтлекте бөтә байлығы, тип иҫәпләгән, матди донъя күренештәре менән бәйләнешен өҙгән, тормош хәстәрҙәрен Алланан килгән рәхмәт булараҡ ҡабул иткән, илаһи ғишыҡ юлында сәйәхәт иткән дәрүиштәрҙән йыраҡ тора. Ике йөҙләлөккә, алдау-ялғанға, мәкер-хәйләгә, гонаһ шомлоғона ҡоролған көнитмеш хас уның характерына. «Дин телендә һөйләшеп, ижтимағи һәм мәҙәни тормошта хәүеф-хәтәр тыуҙырыусы көскә әүерелгән ағымдың аныҡ образы тыуҙырылған, дөйөмләштереү һәм типиклаштырыу оҫта ҡулланылып, уның реаль һыҙаттары баҙыҡланған, дөйөм картинаһы тыуҙырылған», – тип белдерә был хаҡта тикшеренеүсе [2; 161].

Дәрүиш образы башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә осрай. Әйтәйек, «Хан һәм дәрүиш» әкиәтендә кәләш эҙләп китеп барыусы ханға дәрүиш сетерекле мәсьәләләрҙе аңлатып бирә, күп нәмәләргә хандың күҙен аса. Мәҫәлән, хан юлда халыҡтың тырышып-тырмашып баҫыуҙан уңыш йыйыуын һәм шунда уҡ уны бер урынға өйөп яндырыуҙарын күрә, был күренешкә ниндәй баһа бирергә белмәй. Ә дәрүиш быны халыҡтың хан алдында эш күрһәтеүҙәрен, ә хандың боролоп китеүе менән эште урыҡ-һурыҡ ҡына башҡарыуы менән аңлата. Был әкиәттә дәрүиш ғилемле кәңәшсе, аҡһаҡал булараҡ сығыш яһай.

Е.С. Ефимованың «Башҡорт мифологик һүҙлеге»ндә «кеше ашаусы дәрүиш» (дервиш-людоед) тигән һүҙбәйләнеш тә осрай. Уға түбәндәгесә аңлатма бирелә: «Дервиш-людоед – злой колдун. Ходит среди людей под видом странника, дервиша в зелёном чапане и с зелёным посохом… Заманивает себе в гости людей, держит в плену в амбаре, проверяя, кто жирнее и съедая каждый день самого жирного…» [1; 56].

Шулай итеп, дәрүиш образы һүҙ сәнғәтенең шишмә башын тәшкил иткән фольклорҙа уҡ сағылыш таба. Халыҡ ижады жанрҙарында дәрүиш образы ыңғай ҙа, кире лә образ булып сығыш яһаған. Бер яҡтан, матди байлыҡҡа дәғүә итмәгән, бары белем эҙләп, ғилемдәрен халыҡҡа тараҡҡан мосафир һүрәтләнһә, икенсе яҡтан, тыштан ғына саф күңелле дәрүиш булып ҡыланған, ысынында иһә нәфсеһенә баш була алмаған кеше күҙ алдына баҫа.

Әҙәбиәт:

1. Ефимова Е.С. Башкирский мифологический словарь. – Уфа: Вагант, 2010. – 156 с.
2. Шәрәфетдинова Л. Башҡорт әҙәбиәтендә дәрүиш образы һәм уның рухи офоҡтары // Ватандаш. – 2006. – №11. – 146-164-се биттәр.
3. Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1965. – 356 бит.

Мөхәрәмов Р.Р.,
Ғилми етәксеһе – Әйүпова Д.Ғ.
Дыуан куп профилле колледжының Оло Ыҡтамаҡ филиалы

ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ «ЫРҒЫҘ» РОМАНЫНДА СИФАТТАРҘЫҢ СЕМАНТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕН АСЫҠЛАУ

Тикшеренеү эшенең маҡсаты: Хәҙерге башҡорт телендә үҙ аллы һүҙ төркөмө булараҡ сифаттарҙың структур-семантик үҙенсәлектәрен тикшереү; тикшерелгән материалды миҫалдар ярҙамында иҫбатлау һәм нығытыу маҡсатында Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы ҡаралды.

Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы ҙур ижад емеше һәм, ғөмүмән, бөгөнгө прозабыҙҙың оло ҡаҙанышы булараҡ, башҡорт әҙәбиәтенең данын күтәрҙе. Леонид Соболев: «Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын уҡымай тороп, башҡорт халҡының үткәнен аңлау, күреү мөмкин түгел» тигән юғары һәм хаҡлы бәйән бирҙе.

Романдың теле иҫ киткес бай. Авторҙың теле әҫәрҙә иң мөһим художестволы һүрәтләү ҡоралы, образдарҙы ҡороу сараһы, материалы булып хәрәкәт итә, уның лексик байлығы ла күҙ уңында тотола. Шулай уҡ романда сифаттарҙын ҡулланылышы һәм уларҙың семантик йөкмәткеһе бик үҙенсәлекле булыуын тел белгесе М.В. Зәйнуллин алты төрлө юл менән классификациялай.

© *Р.Р. Мөхәрәмов, Д.Ғ. Әйүпова, 2020*

Уларҙы түбәндәгесә ҡарарға була:

1. Предметтарҙың, әйберҙәрҙең, төрлө күренештәрҙең төҫтәрен белдереүсе сифаттар. Мәҫәлән: *аҡ, ҡара, һары, йәшел, ҡыҙыл, алһыу, һоро, көрән* һ.б.

Был өйҙөң түбәһе бейек, таҡта **иҙәне һап-һары** итеп ҡырып йыуылған. Уның бер яҡ мөйөшөндә өлкән **ап-аҡ** урыҫ мейесе.

Ошо рәүешле башҡорт телендә йылҡы малының төҫтәрен белдереүсе сифаттар үҫешкән. Мәҫәлән: *бурыл, ерән, кир, көрән, күк, ҡара, ҡоба, ҡола, саптар, сыбар, туры, һары, һоро.*

Шулай уҡ төп төҫмөрҙәрҙән башҡа йәнә аттың төрлө өҫтәлмә төҫмөрлөктәрен белдереүсе ҡушма сифаттары актив ҡулланыла. Мәҫәлән: *аҡ саптар, күк тарпан, ҡан ерән, сағыу ерән, тимер күк, һары ҡола, туры ҡола.*

Һ. Дәүләтшинаның романында ла йылҡы малының төҫтәрен белдереүсе сифаттарҙы осратырға мөмкин, мәҫәлән:

1. - Һайт, ***ҡара*** *юрға!*

2. - Һайт, ***ҡола байтал; Күк юрға!***

3. - Килһәң, ***ҡола атты*** *уйпатҡа тышаулап ҡалдырҙым.*

4. ***Туры ат*** *ҡапҡаға етеп туҡтағас, ул, һикереп төшөп, ҡапҡаны асты.*

2. Кешеләрҙең физик, социаль һәм рухи хәлен, характерын, холҡон, тышҡы ҡиәфәтен һәм башҡа сифаттарын белдереүсе сифаттар. Мәҫәлән: *аҡыллы, зирәк, матур, гүзәл, сибәр, белемле, тыныс, тиле, аҡһаҡ, бөкөрө, абруйлы, эскерһеҙ, йыуаш, уҫал, ҡомһоҙ, арҙаҡлы, ваҡсыл, үсексән, йонсоу, ҡыҙыу.*

1. Айбулатҡа ҡарағанда байтаҡ ***йәш, урта буйлы, йыуантыҡ*** *Асатай ат өҫтөндә лә дүрткел һымаҡ булып күренә.*

2. Айбулат, һалмаҡ атлап, тирмәләргә ыңғайланы. ***Уның мыҡты, төҙ, ҡупшы кәүҙәһе,*** *эңергә яҡынлаған аҡһыл тоноҡ яҡтылыҡта тағы ла төҙөрәк, тағы ла мыҡтыраҡ булып күренә.*

3. Кешегә ***алсаҡ, һүҙгә ипле*** *Ниязғолдоң* ***иң баҫалҡы, аҡыллы*** *ҡатыны тип һанала.*

4. Гөлйөҙөмдөң ***ап-аҡ йөҙө, ҡыйғас ҡара ҡаштары, нәҙек ҡыр танауы, бит урталарын нурландырып янып торған ҡыҙылдар, ыҡсым ҡупшы кәүҙәһе*** *егеттәрҙең күҙен төшөрөрлөк.*

3. Хайуандарҙың һәм башҡа йән эйәләренең төрлө билдәләрен һәм үҙенсәлектәрен (тышҡы ҡиәфәтен, холҡон һ.б.) белдереүсе сифаттар. Миҫалдар: *арыҡ мал, атар айғыр, сығынсы ат, ҡасҡалаҡ кәзә, аҙғын мал, абынҡы ат, арымтал ат, аҫау айғыр, баҙаған айғыр, асҡаҡ мал, бағымтал мал, быуаҙ һыйыр, теүләү һарыҡ, екке мал, юшан ат, ярау*

ат һ.б. *Унда алтын яллы, көмөш тояклы, елдәй елер, ҡоштай осор Аҡбуҙат йәшәй, ти.*

Һ. Дәүләтшинаның романында образдарҙың тышҡы ҡиәфәтен, холҡон белдереүсе сифаттар ҙа бар, мәҫәлән:

1. Баҫҡыстың әллә ҡайһы еренән абайламаҫтан ғына ***ҙур барак ауыҙлы ялбыр ҡара эт, уҫал күҙҙәрен алартып, осло тештәрен ыржайтып, ларҫ итеп өрөп,*** *ҡапыл уға ташланды.*

2. – Ул шайтан шикелле дөйәләр балаларға түгел, Сәйетҡол ағайҙың үҙенә лә баш бирмәйҙәр…. Бигерәк тә анау Нар дөйә, Моҡаш, ***күк дөйә биҙгәләк.***

3. Анау ***ҡыйыш мөгөҙ өлкән ала һыйыр уҫал*** *да инде.*

4. Бура кеүек эре йөҙәрләгән һыйырҙарын, ер ярып үкереп, яндарына яҡын ебәрмәй торған ***уҫал үгеҙҙәрен*** *яланға ҡыуырға кәрәк.*

5. Һыйыр һауғанда ер тырнап үкереп, һауынсыларҙы ҡурҡытып бөтә торған ***буралбай ҡоба үгеҙҙе*** *Айбулат таш һарайға айырып бикләне.*

4. Предметтарҙың, әйберҙәрҙең күләмен, формаһын, үлсәмен, бүтән төрлө тышҡы күренештәрен, эске билдәләрен предметтың урыны буйынса билдәһен белдереүсе сифаттар. Миҫалдар: *ҙур, бейек, киң, тар, бәләкәй, тәрән, яҫы, ауыр, еңел, оҙон, ҡыҫҡа, ҡалын, йоҡа, һай, түңәрәк, йомро, осло, кәкре, ҡыҫынҡы, арҡыры, төҙ, ҡыйыш, түбән, юғары, мурт, серек, шыйыҡ, ҡуйы* һ.б. Романдан алынған миҫалдар:

1. ***Бейек тауҙар*** *араһынан сығып, далаларҙа борғоланып-борғоланып шыуған* ***оло*** *аҡ йылан һымаҡ, наҙланып аҡҡан Ырғыҙ йылғаһы, Байсура тауҙың итәгенә тотҡан* ***киң*** *таҫма кеүек әйләнә лә, тағы ла әллә ҡайҙа ағып китә.*

2. Яҙ башында ***ҡалын*** *боҙҙар иреп ташҡандан бирле уның тыныслығын бер кем дә боҙғаны юҡ.*

3. Уның ***оҙон*** *буйы,* ***киң*** *яурыны, билбау урынына сүс еп менән быуған ялбырап бөткән* ***алама*** *көпөһө, алыҫтан ҡарағандаь, атлап килгән йәнле ҡараҫҡыны хәтерләтә.*

4. Кешегә ***ҡырыҫ «бупылдыҡ*** *Ғәзимә» ҡушаматы алған* ***быжыр*** *битле,* ***йәмшек*** *танаулы, уртансы бисә….Рәхимә йәш сағынан уҡ* ***һылыу*** *булып, әле лә төҫөн һалмаған,* ***буртлансыҡ битле, яҫы маңлайлы, ҡуңыр күҙле, ҡыр танаулы, йоҡа ҡыҙыл иренле*** *ҡатын ине.*

5. Мәғфүрә башынан шыуып сиселеп барған, иҫкереп уңып бөткән ***эре биҙәкле француз*** *яулығын ашығыс төҙәтеп бәйләне.*

6. Повозкала байбисәләр сумып ултырыуҙан уйылып ятҡан ***мамыҡ яҫтыҡ, ҡыҙыл биҙәкле аҡ кейеҙ, йәшел сатин юрғандарҙы***

ҡулына алып ҡаҡты ла, *Рәхимәгә кәңәш бирҙе. Мәғфүрә алып килгән нәмәләрен* ***ҙур һары ҡалайлы ялтыр һандыҡ*** *өҫтөнә таҫлап өйөп ҡуйҙы.*

5. Тәмде белдереүсе сифаттар телдә киң ҡулланылалар. Ғәҙәттә был төркөм сифаттар аҙыҡ-түлектең ниндәй тәмгә эйә булыуын белдерә: *тәмле, татлы, тәмһеҙ, әсе, сөсө, тоҙло, тоҙһоҙ, майлы, майһыҙ, ҡырҡыу, әскелт, сөскөлтөм, баллы, әсе-сөсө* һ.б. *Төшкөлөккә баллы ҡатыҡ менән йыуаса булды.*

1. - Сәйҙе һин яһа, Мәғфүрә килен, һинең ҡулыңдан сәй ***тәмле*** *була, - тине Рәхимә.*

2. Байбисәләр йыйылышып утырып, танауҙы ҡытыҡлаған ***яҡшы сәйҙең еҫен*** *күкрәктәренә тарттылар.*

3. - ***Бик һәйбәт һаумал*** *булған, килен, ҡымыҙың тамаҡҡа ярылып тора, - тип маҡтаны.*

4. Был ***бәлеш, күмәстәрҙең тәмле еҫтәре*** *Айбулаттың танауына килеп инәләр ҙә, ауыҙынан ҡара һыуын ҡоялар.*

5. – Әсәй, ҡара әле, Айбулат ағайым миңә ***еҫле*** *һабын алып ҡайтҡан*

6. Предметтарҙың һәм әйберҙәрҙең билдәһен ваҡыт һәм урын буйынса белдергән сифаттар. Ваҡытты белдереүсе сифаттар йыл миҙгелдәрен һәм тәүлектең конкрет ваҡытын күрһәтә. Мәҫәлән: *боронғо ваҡиғалар, алдағы бурыстар, һуңғы осор, тышҡы яҡ, йәйге төн, ҡышҡы кис, көҙгө һыуыҡ, яҙғы ташҡын, күктәге йондоҙҙар, тирә-яҡтағы урмандар, иртәнге томан, көндөҙгө аш һ.б Имән япраҡтарында иртәнге нурҙар һикерешеп уйнай. Хәҙер бына ошо фәжиғәле, ошо саф иртәлә кешенең беренсе һәм һуңғы ауазы минең рухымда бергә килеп ҡушылды.*

1. Шулай итеп, Айбулат, ***иртә яҙ башының*** *ала ҡарында шыя ярып килгән оло юл буйлап,* ***көҙгө ҡырпаҡ ҡарҙың йоҡа ғына йомшаҡ*** *көртөн ярып, өйөнә йүнәлде.*

2. ***Көҙгө көндөң арыу уҡ һалҡын елдәр өргөләй торған миҙгеле етте.***

3. Арҡаһына ***төнгө дымһыл һалҡын*** *бәрелгәндәй булғас, ул юрғанын ҡымтыңҡырап ябынды.*

4. Аяҡ аҫты, кисә көндөҙ иреп ҡалып, ***төнгө һыуыҡ*** *менән ҡатҡаҡланған.*

5. Ҡыш көнөнөң ***әсе һыуыҡтары*** *ине…*

6. ***Үткән яҙҙың матур шаян ҡояшлы төш ваҡыты*** *Айбулаттың күңелендә әле лә бөтә йылылығы менән һаҡлана*

Башҡорт әҙәби теленең лексикаһын һәм грамматикаһын нормалаштырыуҙа профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев,

профессор Николай Константинович Дмитриев, Ә.М. Аҙнабаев, В.Ш. Псянчин, М.В. Зәйнуллин, Э.Ф. Ишбирҙин, З.Ғ. Ураҡсин, Т.М. Ғарипов, М.Х. Әхтәмов кеүек күп кенә башҡорт тел ғалимдары ҙур хеҙмәт күрһәтте. Телсе-ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә сифаттарҙың лексик-грамматик һәм морфологик үҙенсәлектәре бик төплө тикшерелә.

Хәҙерге башҡорт телендә сифат һүҙ төркөмөн тел йәһәтенән тикшергәндән һуң һәм сифаттарҙың романда ҡулланылышын осраҡандан һуң, шундай һығымтаға килергә мөмкин: һүҙ төркөмдәрен өйрәнгәндә грамматик билдәләрҙе күҙәтеү, уларға хас үҙенсәлектәрҙе таныу һәм сағыштырып, айырма-оҡшашлыҡтарҙы күрә белеү – былар барыһы ла фекерләү ҡеүәһе менән тығыҙ мөнәсәбәттә хәл ителә. Был иһә уҡыусының таныпбелеүен, ижади фекерләүен активлаштыра. Йөҙәрләгән, меңәрләгән һүҙҙәрҙе төрлө грамматик формаларға ҡуйып, улар менән һөйләм, текстар төҙөү уҡыусының һүҙлек байлығын ишәйтеүгә, бәйләнешле телмәрен үҫтереүгә етди булышлыҡ итә.

Үҙ әсә телеңде, ундағы һүҙҙәрҙең төҙөлөшөн, үҙгәрешен, яһалышын тәрән белеү башҡа телдәрҙе еңелерәк, аңлыраҡ үҙләштерергә ярҙам итә. «Туған теленең грамматикаһын төплө белеү башҡа телдәрҙе өйрәнеүҙә нигеҙ һанала», – ти ғалим-тюрколог Ж.Ғ. Кейекбаев.

Әҙәбиәт:

1. Дәүләтшина Һ. Ырғыҙ. Роман. Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1977. – 496 бит.

2. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. – Өфө, 2002, 2005. – 387 б.

3. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт тел ғилеменең көнүҙәк проблемалары (Туған тел һәм әҙәбиәт: Ғилми-ғәмәли конференция материалдары. – Өфө, 1994. – 59-61-се бит.

4. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996. – 147 б.

Мырҙабулатова Ф.Ф., 2-се курс аспиранты
Ғилми етәксеһе – филол.ф.докторы, профессор Сәләхова З.И.
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы

ҺҮҘҘӘРҘЕ ҮҘЛӘШТЕРЕҮ ПРОЦЕСЫ ТУРАҺЫНДА БАШҠОРТ ТЕЛСЕ-ҒАЛИМДАРЫНЫҢ ФЕКЕРҘӘРЕ

Тормошта яңы һүҙҙәрҙең арта барыуы ул элек-электән йәшәйешкә килеп ингән яңы атамалар, әйберҙәр, төшөнсәләр аша барған. Беҙҙең осорҙа цивилизация алып килгән меңәрләгән сит тел һүҙҙәре беҙҙең телебеҙгә бик тиҙ үтеп инәләр. XX быуат башында күренекле дат телсеһе Х. Педерсон Европа һәм Азия киңлектәрендә йәшәгән халыҡтарҙың телдәрендә булған уртаҡлыҡтарҙы аңлатыу барышында «ностратик телдәр» төшөнсәһен ҡуллана. Латинса был һүҙ «беҙҙең» (noster) – «беҙҙеке» тигән мәғәнәне аңлата. Был ғалимдың эҙләнеүҙәренә ярашлы башҡорт теле бик күп «көнсығыш ностратик телдәр» системаһына ҡарай, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер дәрәжәлә афроазия, картвель, һинд-европа телдәре ингән көнбайыш ностратик телдәр менән дә бәйләнешле [10; 97]. Тимәк, улар аша килеп ингән һүҙҙәрҙе үҙләштереү бик оҙайлы процесс булған. Был процестың меңәр йыллыҡ тарихы барлығын Ж.Ғ. Кейекбаев [4], С. Ғәлләмов [1] һ.б. ғалимдар күрһәтә алған.

Башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәр буйынса егерменсе быуаттың 60-сы йылдарында уҡ профессор Ж.Ғ. Кейекбаев [4] эшләй. Ул телдең таҙалығын һаҡлап алып ҡалыуы өсөн телебеҙгә яраҡлаштырылған был һүҙҙәрҙе индереүҙә бик күп ҡағиҙәләрҙе яңынан ҡарап сыға һәм уларҙы телмәргә бик һаҡ индереүҙе һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ошо уҡ фекерҙе Ғ.Ғ. Ҡаһарманов [5], Д.С. Тикеев [6], Х.Ғ. Йосопов [3; 45], М.Ә. Әхтәмов [9; 1152], З.Ғ. Ураҡсин [7] һ.б. ғалимдар раҫлайҙар. Ғ.Ғ. Ҡаһарманов башҡорт һүҙҙәренең лексик-генетик сығанаҡтарын өйрәнә, уларҙың телдә йәшәү рәүешенә, килеп сығышы буйынса этимологик характеристика бирә [5]. Ҡәрҙәш булмаған телдәр менән тарихи киҫешеү арҡаһында килеп ингән һүҙҙәрҙе үҙләштерелгән һүҙҙәр тип атап, уларҙың башҡорт теленә йоғонтоһон билдәләй. Шуға башҡорт телендә XX быуаттың 60-80-се йылдарында тел ғилемендә үҙләштерелеп һүҙҙәрҙе үҙ лексик ҡоролошонда, тәржемәһеҙ ҡабул итеү алғы планға ҡуйыла. Ләкин йылдар үткән һайын, быңдай һүҙҙәр телебеҙҙә айырыуса күбәйеп, телдең үҙен ҡыҫырыҡлауға алып килә. Һөҙөмтәлә, беҙҙең тормошобоҙға килеп ингән яңы күренештәр,

---

© *Ф.Ф. Мырҙабулатова, З.И. Сәләхова, 2020*

атамалар бер ниндәй тәржемәһеҙ телмәребеҙҙә нығынып ҡала килә. Ғ.Ғ. Ҡаһармановтың билдәләүенсә, үҙләштерелгән һүҙҙәр башҡорт теле мөхитендә уның ҡанундарына буйһона, тамыры ғына сит булып ҡалған хәлдә структур-семантик йәһәттән «башҡортлаша», был телдең бөтә һүҙ үҙгәреш парадигмаһына йәлеп ителеп, уның һүҙъяһалыш системаһында актив ҡатнаша [5; 62].

Һәр бер тел башҡа телдәр менән бәйләнештә йәшәй һәм үҫешә, һөҙөмтәлә улар бер-береһен тулыландыра. Был хәл әлбиттә, телдең ярлылығынан килмәй, киреһенсә, тел үҙенең эске мөмкинлектәрен, генетик законлыҡтарын боҙмай, икенсе тел һүҙен үҙ эсенә ала. М.Х. Әхтәмов билдәләүенсә, «бер халыҡтан матди байлыҡ элементтарын алышҡанда, икенсе халыҡтан сәйәхәткә, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә, дингә, сауҙаға, һәм башҡа мөнәсәбәттәргә бәйле һүҙҙәр килеп ингән» [9; 71].

Рус теле аша инглиз һәм башҡа Европа телдәренең һүҙҙәре башҡорт теленә үтеп инеүе тәүге осорҙа телде байытыу күренеше булараҡ сығыш яһай. Ниндәйҙер асыш, уға бәйле предмет атамалары, неологизмдар булараҡ, телдә тарихи күренеш һанала. Тора бара улар неологизм булыуҙан туҡтап, актив ҡулланыу һүҙҙәре эсенә инеп китәләр. Бының асыҡ миҫалы булып космонавтика менән бәйле һүҙҙәрҙе алырға мөмкин. Ә инглиз теленән ингән «нейлон» һүҙе лә хәҙер инде неологизм түгел, ә шул туҡыманы уйлап табыу, сығарыуға бәйле тарихи һүҙгә әйләнеп ҡалған: фәнни – техник революция күтәрелеше осоронда, үткән быуаттың 30-сы йылдарында Америка фермаларының береһендә яңы синтетик туҡыма эшләйҙәр. Уны эшләүҙә Нью – Йорк һәм Лондон ғалимдары ҡатнаша. Туҡыма исеме бына ошо ике ҡала исеменең тәүге һүҙҙәренән яһалған New һәм Lon [8].

Профессор Н.К. Дмитриев [2] үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе актив һәм пассив төркөмдәргә бүлә. Актив ҡатламға ҡараған һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә айырылғыһыҙ бер өлөш булараҡ йәшәй һәм ҡулланыла. Пассив ҡатлам иһә дөйөм ҡулланылышлы түгел, тар ҡулланылыу өсөн һөнәр кешеләре өсөн термин рәүешендә йәшәйҙәр, шуға күрә уларҙы ҡулланыуҙа «осраҡлылыҡ, шартлылыҡ һәм ҡапма-ҡаршылыҡтар ҙа күҙәтелә» [5; 75]. Башҡорт теле күп быуаттар һуҙымында, төрлө бәйләнештәр һөҙөмтәһендә бик күп телдәр менән мөнәсәбәткә ингән һәм был бәйләнештәр телдә лә сағылыш тапҡан. Беҙҙең телебеҙгә ҡәрҙәш телдәрҙән дә, ҡәрҙәш булмаған телдәрҙән дә бик күп һүҙҙәр үҙләштерелгән. Рус теле аша беҙҙең телебеҙгә бик күп һүҙҙәр килеп ингән. Ләкин тора-бара үҙләштерелгән һүҙҙәр араһында

немец, француз, инглиз һәм башҡа телдәрҙән дә һүҙҙәр килеп инә башлай.

Шулай итеп, башҡорт теле, тарихы билдәле бер этностың теле булараҡ быуаттар һуҙымында йәшәгән, үҙенә йәнәш, хатта географик яҡтан алыҫ торған халыҡтар теленән дә һүҙҙәр үҙләштергән, ләкин был һүҙҙәр беҙҙең телебеҙҙең эске законлыҡтары нигеҙендә йомшатылып, үҙгәртелеп, һис юғында, ялғауҙар кимәлендә үҙгәртелеп ҡабул ителгәндәр. Яңы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәр туранан-тура (әҙер көйөнсә), ҡайһы саҡта аралаштырып һәм калькалаштырып телгә үтеп инәләр. Хәҙерге осорҙа Европа телдәренән, башлыса, инглиз теленән һүҙҙәр бик актив үҙләштерелә.

Әҙәбиәт:

1. Ғәлләмов С.А. Великий Хау Бен. – Уфа,1997.
2. Дмитриев Н.К. Строй тюркских языков: избранные труды. – М., 1962. .
3. Йосопов Х.Ғ. Башҡорт телендә оҡшатыу һүҙҙәре. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1971.
4. Киекбаев Дж.Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. – Уфа: Китап, 1996.
5. Ҡаһарманов Ғ.Ғ. «Башҡорт теленең лексикаһы һәм терминологияһы». – Стәрлетамаҡ: СДПИ, 2002.
6. Тикеев Д.С. Хәҙерге башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы. – Өфө: Ғилем, 2002.
7. Ураҡсин З.Г. Фразеология башкирского яыка. – М., 1975.
8. Энциклопедия. Наука. – М.: Росман, 1996.
9. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология. Фразеология. Лексикография. – Өфө: БДУ, 2002.
10. Языкознание: Большой энциклопедический словарь. – М., 1998.

Мурясова А.Р., 8 класс
Научный руководитель – учитель русского языка
и литературы Куклина Н.А.
МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева»
г. Стерлитамак

ГЕРОИ БОГАТЫРСКИХ СКАЗОК

Мне нравится читать национальный фольклор. Особенно самобытны богатырские сказки – наиболее древний эпический жанр тюркоязычных народов. Героями богатырских сказок являются люди, животные и сказочные существа.

The correlation between unvoiced and voiced fricatives is an absolute implicational universal. But there are also examples of statistical implicational universals. For instance, if a language typically places the main verb between the subject and the object, as in English The cat caught the mouse, its relative clauses usually follow the noun they modify, as in the cat that caught the mouse, but Chinese and a few other languages are exceptions, placing relative clauses before the noun they modify.

3. The practical part.

3.1. Comparative analysis of linguistic universals in English, Bashkir and Russian literature.

Comparative analysis of three languages of different structures has both theoretical and practical significance enables somebody to identify similar and distinctive features, find universals, helps to penetrate deeper into the inner workings of each of the compared languages and understand their national identity. The subject of our comparative analysis is linguistic universals in languages we study at school – Bashkir, Russian and English.

In the continued version comparative analysis of linguistic universals was made in such books: «Romeo and Juliet» tragedy of Shakespeare, «Руслан и Людмила» poem of Alexander Pushkin, «Оҙон – оҙаҡ бала саҡ» a short novel of Mustai Karim.

And based on our research, we've found the following linguistic universals.

1. These three languages have categories of person:

in the Bashkir language		in the Russian language		in the English language	
берлектә	күплектә	единственное	множественное	single	plural
1. Минтеремен 2. Сәбәләнмә! 3. шишмә сығып ята	1.Беҙ татыулашабыҙ 2. үләнгәлә аяҡ терәһегеҙ 3. нурҙар һикерешеп уйнай	1. Тому я дам ее в супруги 2. Руслан, лишился ты Людмилы 3. Руслан не слышит	1. Мы рады весь изъездить мир 2. Не знайте мира меж собой 3. «Я! я!» — воскликнули с Рогдаем Фарлаф и радостный Ратмир	1. I mean 2. Do you bite your thumb at us, sir? 3. A dog of the house of Montague moves me	1. Where shall we dine? 2. You follow thee 3. They must take it

2. These three languages have Category of Mood:

In the Bashkir language – Улайһа, рәхим итеп, тыңлағыҙ, мәрхәмәтле синьора!...

in the Russian language – Скажи, Зоил, скажи, предатель…

in the English language – Go, girl, seek happy nights to happy days.

3. These three languages have proper names:

Bashkir language	Russian language	English language
Миңлиямал, Вазифа, Аҡбуҙат, Ибрай, Шағиҙулла, Асхат, Искандер, Музафар.	Фарлаф, Рогдай, Руслан, Наина, Черномор, Людмила, Орфей.	Greg, Samp, Citizens, Cap, Montм, Juliet, Nurse, Romeo

4. These three languages have countable nouns, uncountable nouns:

Bashkir language	Russian language	English language
Һөт, аҡса, утын, сәс, тимер, бал, алтын, көмөш, шатлыҡ, ҡояш.	Честь, слава, мученье, юг, шум, обед, сон, пол.	Courage, beauty, fun, poverty, truth, cloth.

5.These three languages have comparative constructions:

Bashkir language	Russian language	English language
Имән тайшанып киткәндәй булды. ята. Ҡояш нурҙары, әйтерһең, керпектәремдән тартып, минең күҙҙәремде аса.	Как призраки, со всех сторон бегут — и скрылись. Свежа, как вешняя заря.	Ben. Tut, man, one fire burns out another's burning; One pain is lessened by another's anguish; Turn giddy, and be holp by backward turning;

6. These three languages have idioms we can't miss such an interesting universal and repeat it in the second part of our work too:

Bashkir language	Russian language	English language
Эт менән бесәй кеүек йәшәү, һыуҙан ҡоро сығыу, бер бите ай, бер бите көн	Там русский дух, там Русью пахнет .Дела давно минувших дней. Еду, еду, не свищу, а как наеду, не спущу. И струны громкие Баянов не будут говорить о нем!	A plague o'both your houses! Affliction is enamour'd of thy parts, And thou art wedded to calamity

7. These three languages have the Participle: in the Bashkir language – Һарайҙы томан баҫып,быларҙың һушы ҡасып, һарайҙа шау-шыу ҡубып, ике уртаға ярылып, Шүлгән, Зәркүм икеһе ер аҫтына осҡан, ти

in the Russian language – За древней книгой он сидит,

Ее внимательно читая. Вздохнув с улыбкою печальной,

Старик в ответ: in the English language – Check'ring the Eastern clouds with streaks of light.

8. These three languages have word-formation:

Bashkir language	Russian language	English language
Ыҙғыш-ҡырылыш, ашыҡмаҫтар, буласаҡһығыҙ	Неведомый, нетерпеливых, покраснела, сладострастная	Useless, usage, useful, careful, passage.

9. These three languages have applications:

Bashkir language	Russian language	English language
Өйгә һыйып бөткән байрам — байрам түгел ул.	Твой оскорбитель Волшебник страшный Черномор, Красавиц давний похититель, Полнощных обладатель гор.	We'll have no Cupid hoodwink'd with a scarf, Bearing a Tartar's painted bow of lath, Scaring the ladies like a crow-keeper; Nor no without-book prologue, faintly spoke

10. These three languages have prepositions:

Bashkir language	Russian language	English language
Кеүек, һымаҡ, шикелле, өсөн, менән	без, вокруг, для, из, от, у, к, благодаря, согласно, вопреки, наперекор, навстречу, по, сквозь, про, несмотря, через, в, на, под, за, над, перед, между, за, под, с, о, при, в, на.	At, on, about, above / Below, After / Before By, For, From, Of, Since, To, With

4. Conclusion.

In the course of this study, we have learnt the concept of linguistic universal, we have explored the classifications of linguistic universals, we

have made a comparative analysis of linguistic universals in English, Bashkir and Russian literature.

Based on the results of this study we have analyzed linguistic universals on the material of the English, Bashkir and Russian languages. As a result, we found out that these three languages have also such universals as:

- categories of person
- category of Mood
- proper names
- countable nouns, uncountable nouns
- comparative constructions
- idioms
- the Participle
- word-formation
- applications
- prepositions

To reach the result of the research I had to read the theory of linguistic universals and had to make a comparative analysis of linguistic universals on the material of the English, Bashkir and Russian languages. I found out that these three languages have numerous linguistic universals, I tried to give examples of the found universals.

Researchers need to continue to look for more linguistic universals in these three languages.

Bibliography:

1. Good, Jeff (ed.) 2008 Linguistic Universals and Language Change. Oxford: Oxford University Press.
2. William Shakespeare. Romeo and Juliet. [Электронный ресурс] – http://shakespeare.mit.edu/romeo_juliet/full.html
3. Scalise, Sergio, Elisabetta Magni and Antonietta Bisetto (eds.) 2009 Universals of Language Today.
4. Онлайн-учебник. Розенталь Д.Э., Джанджакова Е.В., Кабанова Н.П. Грамматика русского языка.
5. Усманова М.Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа: – Өфө: Китап, 2007.
6. Пушкин Александр. Руслан и Людмила. [Электронный ресурс] -http://lit-classic.ru/index.php?fid=1&sid=12&tid=91
7. Мостай Кәрим. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1981, – 296 бит.

II БҮЛЕК
УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ИЖАДИ ЭШТӘРЕ

Аканаев С.З., 8-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Саҙрисламова Г.Г.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө лицейы

МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ» ПОВЕСЫ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР

2019 йылда Башҡортостандың иң күренекле яҙыусыларының береһе булған Мостай Кәримдең 100 йыллыҡ юбилейы үткәрелде. Шуға күрә ҡыҙыҡһынып, мин уның балалар өсөн яҙылған «Беҙҙең өйҙөң йәме» повесын бер көндә уҡып сыҡтым. Геройҙарҙың һәм илдең яҙмышы әлеге көндә лә бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр.

Беҙҙең һүҙ оҫтабыҙ, республикабыҙ – баш йортобоҙҙоң «йәме» булған Мостай Кәрим әҫәрҙәрен ни өсөн уҡығы килеп тора икән? Ул нисек итеп уҡыусылар күңелен яуланы икән? Әҫәрҙәрен оҙон ғүмерле һәм уҡымлы итеүгә нимә булышлыҡ итте икән? – тигән һорауҙар борсоно.

Ошо һорауҙарға яуаптар эҙләгәндә, иң тәүҙә повестың ябай тел менән яҙылыуын һәм яҡты, һәйбәт тәьҫир ҡалдырыуын әйтеп үтер инем мин. Әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышы ваҡыты һүрәтләнһә лә, балалар донъяһы шатлыҡ, сафлыҡ, яҡшылыҡ менән һуғарылған ваҡиғалар тураһында бәйән итә. Өс быуын вәкилдәре тураһында яҙылған был әҫәр. Бер ғаиләлә йәшәгән кешеләрҙең бер-береһенә булған мөнәсәбәте тасуирланған. Ауыл кешеләре үҙенең тырыш хеҙмәте, түҙемле, кешелекле, дуҫ булыуҙары менән Еңеүҙе яҡынлаштырған.

Йәмилдең күңеленә һуғыш ваҡиғалары өләсәһенең һөйләгән әкиәттәре кеүек тәҫьир итә.Уның атаһы әкиәт геройы «аждаһа» фашистарға ҡаршы көрәшә. Бәләкәй Йәмилдең хыялы – тиҙерәк үҫеп етергә лә, дошмандарға ҡаршы көрәшергә. Атаһын тиҙерәк өйгә ҡайтарырға һәм элеккесә бергә йәшәргә, – тигән теләктәр менән йәшәй малай.

Уның эске уй-кисерештәре сафлыҡ, изгелек, кәрәк саҡта саялыҡ кеүек сифаттар менән үрелеп һүрәтләнгән. Шуның өсөн был әҫәр бик еңел уҡыла, яҡшы тәьҫир ҡалдыра. Туғанлыҡ, дуҫлыҡ кеүек мөнәсәбәттәр бөтә әҫәр аша үтә. Йәмилдең Оксанаға булған мөнәсәбәте

© *С.З. Аканаев, Г.Г. Саҙрисламова, 2020*

лә өлгө булырлыҡ түгелме ни? Беҙ уның нисек һеңлеһен ҡурсалағанын, йәлләгәнен, ауыр саҡта ярҙам иткәнен күрәбеҙ.

Өйҙә, бер урамда, бер ауылда, бер илдә йәшәүсе кешеләр ҡулға-ҡул тотоноп Еңеү өсөн бөтә көсөн һалалар, бер-береһенә ярҙам итәләр.

Хәҙерге ваҡытта ҡасандыр туғандаш булған Украинала ниндәй ваҡиғалар булып тора. Әйтерһең дә, СССР һәм был республика халыҡтары бергә фашистарға ҡаршы көрәшмәгән дә, бергә Еңеү яуламаған да кеүек. Повесты уҡып сыҡҡас, минең башыма күп төрлө уйҙар килде. Ғаилә, туғанлыҡ, дуҫлыҡ төшөнсәләре бөгөнгө көндә лә бик кәрәк – улар мәңгелек. Атай-әсәйемде, туғандарымды, дуҫтарымды ҡурсаларға, кәрәк саҡта ярҙам итергә, хөрмәтләргә бурыслы икәнемә төшөндөм. Уларҙың яҡты йөҙөн, иғтибарын бер ниндәй ҙә байлыҡ та, алтын һарайҙар ҙа алмаштыра алмай...

Был повесты уҡып сығыу менән, яҙыусының башҡа әҫәрҙәрен уҡырға теләк тыуҙы. Бигерәк тә миңә Йәмил менән Оксана оҡшаны. Ошо бәләкәй генә ҡыҙ – Оксана образы беҙҙең халыҡтар араһында булған дуҫлыҡ күперен яңыртҡан украин ҡыҙы булып ҡалһын ине...

Арыҫланғәлиев И.Р., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Зәйҙуллина М.И.
Туймазы ҡалаһының 7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ХАЛЫҠТЫҢ ҮЛЕМҺЕҘЛЕГЕ – УНЫҢ ТЕЛЕНДӘ

Башҡортостан… Ғәжәйеп хозур тәбиғәтле, ҡош-ҡортҡа, йәнлектәргә, үҫемлектәргә, ризыҡҡа бай төбәк, ата-бабалар йәшәү урыны итеп һайлаған тыуған ерем.

Башҡорт теле… Ҡурай һымаҡ моңло, сәскәләй нәфис, тыуған яғымдай йомарт, сәсәнеңдәй йор, Урал тауҙарындай олпат һин туған телем.

Тыуған ил һәм туған тел. Минеңсә, был ике төшөнсә айырылғыһыҙ. Сөнки тыуған ил атай булһа, туған тел әсәй ул. Ата-әсәһеҙ бала булмаған кеүек, илһеҙ, телһеҙ милләт булмай. Тел – милләтте милләт иткән төп шарт. Баланың туған теле әсә һөтө менән ҡанына һеңә. Әсә теле аша бала донъяны танып белә. Уның шул телдә фекерләү һәләте, зауығы үҫешә. Тел кешеләр менән аралашыу, быуынды быуынға ялғау сараһы. Туған тел аша кеше туған халҡының

© *И.Р. Арыҫланғәлиев, М.И. Зәйҙуллина, 2020*

мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, әҙәбиәте менән таныша, уның рухын һеңдерә.

Хәҙерге ваҡытта донъяла глобалләшеү һәм интеграция процесы бара. Халыҡтар һәм уларҙың мәҙәниәте бер-береһенә яҡыная, ҡушылыу яғына алып бара, коммуникацион мөмкинлектәр үҫә. Был осорҙа телдәрҙең кәмей барыуы күҙәтелә. Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда хәҙерге ваҡытта донъя халыҡтары 7 меңгә яҡын телдә аралаша. Шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр икенсеһе тиерлек онотола бара. Юнеско мәғлүмәттәре буйынса, донъяла һәр көн уртаса 15 тел вафат була. Бөгөнгө көндә йәшәп килгән телдәр араһынан XXI быуат аҙағына тик 8 мең тел генә ҡалырға мөмкин. Шулар иҫәбендә башҡорт теле лә юғалып барыусы телдәр исемлегенә индерелгән. Башҡорт теленең ЮНЕСКО тарафынан «юғалып барыусылар» исемлегенә индерелеүе, әлбиттә, бик аяныслы хәл. Шуға күрә туған телебеҙ – башҡорт телен һаҡлау – актуаль проблемаларҙың береһе булып тора.

«Тел ауылда ғына һаҡлана, ҡалала бөтә», тиҙәр. Әгәр ҙә бөгөнгө көндө ҡалала тыуып үҫкән баланың һөйләгәнен тыңлаһаң, был һүҙҙәр менән ризалашырға була. Ҡәҙим Аралбайҙың шиғри юлдары иҫкә төшә:

Ике һүҙҙең береһендә – ят һүҙ,
Ҡолағымды ярып бара, бөттө түҙем.
Ҡыйналғанмы, ҡыйланғанмы башҡорт теле?
Кем ғәйепле? Заманмы? Әллә үҙем…

– Замана түгел, үҙебеҙ генә ғәйепле! – тип яуап биргем килә шағирға. Ә тел бөтһә, милләт бөтөүгә бер генә аҙым ара ҡала бит. Йәштәр шуны аңлаһын ине, үҙ телендә һөйләшергә ынтылһын ине.

Беҙҙең республикабыҙ – күп милләт вәкилдәре йәшәгән төбәк. Ҡаламы, ауылдамы тыуып үҫкән, уға ҡарамай һәр милләт кешеһе үҙ туған телендә һөйләшергә, үҙ мәҙәниәтендә тәрбиәләнергә тейеш. Бының өсөн Республикабыҙҙа бөтә шарттар тыуҙырылған. Мәктәптәрҙә туған телде өйрәнергә мөмкинселек бар. Башҡорт телен өйрәнеү буйынса күп төрлө эштәр башҡарыла, уҡыусылар ҙа телде өйрәнеүҙә ҙур уңыштарға ирешкән. Туған башҡорт телен өйрәнеү беҙҙең мәктәбебеҙҙә лә системаға һалынған, ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Беренсе кластан алып туғыҙынсы класҡа тиклем бөтә балалар башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һәм туған тел булараҡ өйрәнә. Улар төрлө кимәлдә уҙғарылған фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, башҡорт теле буйынса олимпиадаларҙа, төрлө сараларҙа, байрамдарҙа әүҙем ҡатнашып, мәктәбебеҙҙең данын күтәрәләр. Уҡытыусылар уҡыусыларҙа тел аша эске матурлыҡҡа ынтылыш тәрбиәләй, тирә-яҡ мөхиткә, донъялағы төрлө ваҡиғаларға дөрөҫ баһа бирергә, үҙ аллы белем алырға өйрәтә.

Был эштә ата-әсәләр ҙә әүҙем ҡатнаша. Балалары башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнгән ата-әсәләр башҡорт теле кәрәкмәй, тигән атай-әсәйҙәр менән килешмәй, балалары башҡорт телен өйрәнеүен теләк менән күҙәтә, уларға ярҙам итә, ҡаҙаныштарына шатлана. Мәктәбебеҙҙә башҡорт телендә әҙәби китаптар күп, уҡыусылар етерлек кимәлдә дәреслектәр менән тәъмин ителгән. Улар китапханаға бик теләп йөрөй һәм башҡорт телендә әҙәби китаптар, гәзит-журналдар, энциклопедиялар алып уҡыйҙар. Китапханабыҙға яңы дәреслектәр, яҙыусыларыбыҙҙың яңы әҫәрҙәре әленән-әле ҡайтып тора. Шулай итеп, туған телде өйрәнергә шарттар булдырыла, мөмкинселектәр бирелә. Тимәк, туған телде өйрәнеү һәр кемдең үҙенән тора. Йөрәгендә Тыуған еренә, Тыуған иленә һөйөү йөрөткән кеше туған телен дә бик яҡшы белергә тейеш.

Һүҙебеҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтеп китәйек: рус телен барыһы ла белә, шулай ҙа туған телеңде өйрәнеү ул һәр кешенең бурысы. Минең уйымса, Башҡортостанда йәшәп тә туған башҡорт телеңде белмәү, йәки белергә теләмәү – хурлыҡ. Башҡа милләттәр араһында үҙебеҙҙе кәмһетмәйек, абруйыбыҙҙы төшөрмәйек тиһәк, башҡорт телен өйрәнергә, һаҡлап ҡалырға, башҡорт мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен юғалтмаҫҡа, киләһе быуынға мираҫ итеп ҡалдырға тейешбеҙ.

Арыҫланова Д., 9-сы класс
Етәксеhе – башҡорт теле, мәҙәниәте уҡытыусыһы
Рәжәпова Ә.Ғ.
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты

БӘХЕТЕ –ХЕҘМӘТТӘ
(очерк)

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренселәрҙән булып Ленин ордены алған Көйөргәҙе районы Яманһары ауылы һауынсыһы Ғәҙиләева Шәмсиә Яҡуп ҡыҙының бәхете – хеҙмәттә. 1923-1925 йылдарҙа хеҙмәт юлын кулактарға ялланып башлай. Хеҙмәт кенәгәһендә «Бала ҡараусы» булып эшләй тип яҙылһа ла, Шәмсия ауыл байының барлыҡ эштәрен дә эшләй: һыйыр ҙа һауа, керен дә йыуа, игенен дә ура, бесәнен дә әҙерләшә. 1929 йылда Ермолаевола «Көйөргәҙе» исемле совхоз төҙөлгәс, бер ауыҙ һүҙ русса белмәгән, ауылынан бер ваҡытта ла ситкә сыҡмаған Шәмсиә шунда барырға, эшләргә теләй. Әсәһе лә: «Хеҙмәт –

© *Д. Арыҫланова, Ә.Ғ. Рәжәпова, 2020*

батырлыҡ, ялҡаулыҡ – яуызлыҡ. Бәлиғ булған ҡыҙға өйҙөң ишеге һәр ваҡыт асыҡ. Уның тормошо ата-әсә өйө менән генә сикләнергә тейеш түгел», – тип ризалығын бирә. Тракторист булам тип барған Шәмсиә, шулай итеп, һауынсы булып эш башлай, ферманың комсомол ойошмаһы етәксеһе итеп тә һайлана. Совет власы дошмандарының үҙе кеүек бер төркөм ҡыҙҙар йәшәгән саман өйҙөң тәҙрәһен ватып китеүҙәре лә, активистарҙы үлтереү осраҡтары ла, ҡурҡытыуҙар, ҡотҡо таратыуҙар ҙа Шәмсиәне ҡурҡытмай. Бәләкәй буйлы, сибек кенә ҡыҙ тырышып эшләүен дауам итә, һәр һыйырҙан 4575 литр һөт һауа. Республика буйынса иң күп күрһәткес була был. 1936 йылда тырыш хеҙмәте Ленин ордены менән баһалана. Орденды Мәскәүҙә Калинин тапшыра, Сталинды ла күрә. Был ваҡытта тормош иптәше Белоруссияла хеҙмәт иткән була. Хәрби частан Шәмсиәне ҡунаҡҡа саҡырып телеграмма килә, ләкин Шәмсиә ирен уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаç өсөн бармай: ҡатыны күкрәгеген бит Ленин ордены биҙәй, ә иренекен – ябай значок ҡына. Ә Мәскәүҙә уҙғарылған комсомолдың X съезына делегат булып барғанда, иптәшен күрә, сөнки делегаттар менән хәрби частарҙа осрашыуҙар үткәрелә.

Ябай хеҙмәт кешеләренең эшен ошолай баһалау Шәмсиәне тағы ла ҡанатландыра. Уны тәүҙә район, һуңынан Өфө комсомол ойошмаһына делегат итеп тә һайлайҙар. Комсомол өлкә комитетының ағзаһы ла була ул.

Һыйырҙарының һәр береһенең холҡон белә. Бер ваҡыт Өфөлә конференция ваҡытында Шәмсиәнең ҡулына телеграмма тотторалар, ә унда яҙылған: «Березка» тигән һыйырың тыңламай. Тиҙерәк ҡайт! Шәмсиә юлға сыға, тура фермаға бара. Березкаһын иркәләй, наҙлай, таштай ҡатҡан елендәренә массаж яһай. Ул, шулай итеп, был һыйырының да һөтө кәмеүенә юл ҡуймай.

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем ауыл хужалығы техникумын тамалай, зоотехник һөнәрен алып сыға. Һуғыш башланғас, ферма етәксеһе итеп ҡуялар. Йәш кенә Шәмсиә көнө-төнө эшләй, халыҡ араһында агитация эше лә алып бара. Эште яҡшы ойоштороу арҡаһында һөттөң кәмеүенә лә юл ҡуймай, мал һанын да кәметмәй, халыҡтың да тамағы туҡ була. Тыуған ауылы Яманһарылағы «Совет» колхозына ферма мөдире итеп тәғәйенләнгәс, бында ла тырышып эшләй. 1942 йылда партия сафына инә. Халыҡты эшләтә белә йәш етәксе. Район үҙәгенә ултырыштарға ла бара. Йәйәүләп һуң ғына ҡайтыуына ҡарамаçтан, халыҡты йыя, фронт хәлдәре менән таныштыра, иртәгәһе көнгә бурыстар билдәләй.

Һуғыштан һуң да тырышып эшләй. Партия Үҙәк Комитетының 1947 йылдың февралендә булып үткән пленумы иген етештереүҙе

арттырыу мәсьәләһен ҡуя. Республикала сәсеүлек майҙандары ла, мал һаны ла арта. Тырыш Шәмсиә Яҡуп ҡыҙының хеҙмәте «Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү» миҙалы менән баһалана. Пенсияға сыҡҡансы ауылында эшләй. Бәхетен хеҙмәттә таба ул. 1970 йылда В.И. Лениндың 100 йыллыҡ юбилейына бәйле миҙалға лайыҡ була. Еңеүҙең 40 йыллығын байрам иткәндә лә «Тыл батырына» тигән миҙал тапшырыла.

Бөгөн хеҙмәт батырын хәтерләгәндәрҙең әҙе генә иҫән. Улар Шәмсиәне ябай, әҙ һүҙле, бик егәрле тип иҫкә алалар. Уның балалары булмай, аҫрауға етем Сәйфетдин тигән малайҙы алып тәрбиәләй. Ул да фермала һауынсы булып эшләй. Шулай итеп, бер кеше яҙмышында тотош ил тарихы сағылыш таба.

Вәлиев А.Р., 6-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ҡолдобаева Р.Д.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 19-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

САЛАУАТТЫ ТӨШТӘ КҮРҘЕМ БӨГӨН...

Салауатты төштә күрҙем бөгөн...
Эйәрләгән ерән саптарын.
Хайран ҡалып уға ҡарап ҡаттым,
Белһәң ине тиеп, уйҙарын.

«Һаумы, батыр!» – тиеп өндәшкәйнем,
«Сәләм! – тиеп кенә баш ҡаҡты. –
Минең ишле Тыуған илде һаҡлар
Уҙамандар бармы, тип ҡайттым!»

«Борсолма! – тим, – халҡым киләсәге
Аҫыл ир-егеттәр ҡулында.
Торатауым – Тыуған ил йөрәге,
Аралашам тыуған телемдә!»

Уяндым да төш кенә икән тип,
Яңы көнгә ихлас шатландым.
Башҡортостан – алтын бишегем һин!
Мәңге сәскә атыр Ватаным!

© *А.Р. Вәлиев, Р.Д. Ҡолдобаева, 2020*

Ғазина И.В., 6-сы класс
Етәксеһе – рус теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы,
башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Кинйәбаева Ф.И.
Баймаҡ ҡалаһының лицей-интернаты

БИРМӘЙЕК БЕҘ ТЕЛДЕ ЙОТОРҒА…

Башҡортостан – минең тыуған ерем,
Сәңгелдәгем – Урал ҡаялар.
Тик телемде тиргәп баҫыусылар
Күңелдәрҙе тәрән уялар.

Башҡорт теле – минең тыуған телем,
Бишек йырым – моңло һандуғас.
Унан бөйөк телдә юктыр кеүек,
Тәпәй баҫкан саҡтан аңлағас.

Һинең һаҡта торам, туған телем.
Башҡорт теле – наҙлы остазым.
Сит яҡтарҙа башым йөрөһә лә,
Онотмамын һинең моңдарың.

Мәктәптәрҙә ауыр күптән инде,
Телде ҡыҫып, мыҫҡыл итәләр.
Ғорур башҡортомды теҙләндереп,
«Телһеҙ бул, һин!» – тиеп әйтәләр.

Юҡ, башҡортом, бирешмәйек әле,
Бирмәйек беҙ телде йоторға.
Ижад көсө, моңло йырҙар наҙы,
Ярҙам итер ғорур булырға.
Бирмәйек беҙ телде йоторға…

© *И.В. Ғазина, Ф.И. Кинйәбаева, 2020*

Ғизәтуллина А.Р., 8-се класс
Етәксеһе – башкорт теле һәм әҙәбиәт укытыусыһы Шакирова Г.Ғ.
Октябрьский ҡалаһының 9-сы урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

АТЛЫ ШАҒИР – ЯУГИР
(поэма-бағышлау)

Башҡорт атлы дивизияһы һуғышсылары араһында 277 ашыу һалдат Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ батырлыҡтар күрһәткән. Тик дәһшәтле яу ҡырында ҡаһарманлығы өсөн ҡылыс менән бүләкләнгән кеше берәү – ул йырсы-шағир, атлы шағир-яугир Яҡуп Ҡолмой.

«Тәүге йыры» йөрәк тирбәтеп
Ергә тыуғанда,
Әле күктәр аяҙ булған,
Илдәр – туғандар.

Торатауы ҡалҡан булған,
Һәләүеге – йәншишмә.
Нисек түҙһен егет күңеле
Ижад үрҙәрен үтмәй?

«Тыуған төйәк» – моң шишмәһе
«Ҡанаҡайы» – сәңгелдәк.
Аҙым һайын йырҙар тыуа
Йәшлек яҙы – күңелсәк.

Илгә төшкән ҡара болот
Шағирҙы ла ҡалдырмай.
Ҡәләме һәм ҡылыс менән
Дошман ҡыра ул, тынмай.

Туптар ярылғанда окоптарҙа
Тыуған фронтовиктың уйҙары.
Уттар яуған, ләкин тынмаған
Ерен һөйгән һалдат йырҙары.

Толпар өҫтөндә замполит Ҡолмой

© *А.Р. Ғизәтуллина, Г.Ғ. Шакирова, 2020*

Мәскәү өсөн барған алышта,
Тыуған ерҙән бик-бик алыҫта,
Ерҙе ҡурсып дошман утынан,
Яраланып ауған атынан.

Тик ҡылысын батыр һалмаған
Ташламаған уны аты ла.
Йөрәгендә уның йыр тыуған
Боҙолмаған һалдат анты ла.
Илгә тоғро ҡалған Яҡубы
Эргәһендә торған аҡбуҙы.

Шундай шағир – яугир барында
Тыуған иле һәм йыр һағында
Дошман нисек кенә сыҙаһын?
Алған ул тейешле яҙаһын!

Алмас ҡылысы – рухы халҡымдың
Һис төшмәгән башҡорт ҡулынан.
Азатлыҡты үлмәҫ йыр итеп
Ишеткән ил батыр Ҡолмой улынан:

«Муйынына автоматын,
Билдәренә ҡылыс тағып,
Күкрәгендә ике йондоҙ
Күҙҙе ялмай уттай янып».

Тик был ҡылыс хәҙер инде
Ҙур иҫтәлек булып ҡалған.
Һуғыш өсөн кәрәк түгел
Оло бүләк – генералдан.

Яугир өсөн бындай бүләк
Нимәгә тиң? – әйтә алмайым.
Тик был оло ваҡиғаны
Яҙмайынса үтә алмайым.

Бәлки ҡылыс сыңлауында
Үткән йәшлек шауы барҙыр.
Яуҙа ятып ҡалғандарҙың,
Ере өсөн ауғандарҙың,

Көтөп алған аҫыл яҙҙың
Тәүге сыуаҡ наҙы барҙыр.

Бәлки ҡында ятҡан ҡылыс
Именлеккә аманаттыр?
Аманатҡа тоғро ҡалған
Ерҙе урап ҡайтҡан батыр!?

Дан таяуын – яу ҡылысын
Үбеп анттар иткән улың
Торатауға, Һәләүеккә
Бүләк итә йөрәк йырын:

«Күр һин хәҙер, илгә еңеү алып,
Оҙон ғүмер яулап үҙемә,
Яңы сыҡҡан ҡояш һымаҡ балҡып,
Ҡайтып киләм тыуған өйөмә».

Торатауҙа – таныш аҡ ҡайындар,
Һәләүектә – шаян тулҡындар.
Йырға һыуһап ҡайтҡан шағирға
Тыуған төйәк шундай яҡындар.

Һәләүектә, ана, ай йыуына,
Япраҡ һибә таныш тирәктәр.
Былбылдары моңон түгә ергә
Серләшәләр таңда йөрәктәр.

Йәшәү йәме – ғүмер сәскәләре
Мираҫ булып ҡалһын йәшлеккә.
Йәйғор нуры булып яна ерҙә
Аҫыл йыры – йыры киләсәккә:

«Йөрәгемде ҡылдай тирбәтә йыр,
Йыр бит – бер биҙәге халыҡтың
Киләсәккә уны мираҫ итеп,
Моңон һаҡлар моңло халыҡтың».

Ана шулай йыры һәм Ер менән
Бергә тибә шағир йөрәге.
Ҡылды ҡырҡҡа ярыр ҡылыс һүҙе,

Яҡты таңдар – уйы, теләге.

Ҡапыл сыңлап китте ҡылыс яманһыу
Өҙөлөп ҡалды күңел ҡылдары.
Тынды кәкүк, һүнде йәйғор ҙа,
Моңһоу яңғырай шағир йырҙары.

Мәңгелеккә ергә килмәгәнбеҙ:
Барыһы китә, ҡала йыр ғына.
Тик шағирҙы Ерҙән оҙатҡанда
Йырлайыҡсы йырын тын ғына:

«Көн үтә, йыл үтә,
Ғүмерҙәр үтә аҡҡан һыу һымаҡ.
Йәшәгән ерендә
Ҡалһын ине эҙең, йыр һымаҡ».

Йырсы – шағир, яугир яулап алған
Еңеү байрамына тиҙҙән – 75.
Яҡуп ағай Ҡолмой исемен,
Йырын онотмабыҙ һис.

Йыры менән бергә йәшәй үҙе
Ул бөгөн дә беҙҙең арала.
Ә ҡылысы ҡында ғорур тора
Тик тыныслыҡ нуры ғына урғыла.

Ғирфанова Г.Р., 8-се класс
Етәксеһе – башланғыс кластар укытыусыһы
Ғирфанова М.Р.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының Жәлил Кейекбаев исемендәге
3-сө гимназия

МИНЕҢ ОЛАТАЙЫМ – БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ВЕТЕРАНЫ

Олатайым миҙалдары
Сыңҡылдап сың-сың сыңлай.
Мин тыңлайым шул сыңдарҙы,

© *Г.Р. Ғирфанова, М.Р. Ғирфанова, 2020*

Һеңлем дә моңдо тыңлай.
Сың-сың сыңлайҙар,
Беҙ еңдек тип йырлайҙар…

Ысынлап та олатайымдың миҙалдары беҙ еңдек, тип йырлағандай. Ауылға ҡайтҡан һайын һағынып эргәһенә йүгерәм. Бигерәк тә иғтибарҙы өй түрендә, стенала миҙалдар эленеп торған костюм йәлеп итә. Ҡәҙерле кешем улар тураһында һағыш менән һөйләй. Бына бөгөн дә уның һуғыш хәтирәләрен тыңларға, тип көтөп ултырам. Минең олатайым Ризуан Шәйәхмәт улы Ҡунафин 1921 йылдың 20 октябрендә донъяға килгән. Атаһы ауылдың хәлле кешеләренең береһе була. Уның өйөр-өйөр йылҡы, һыйыр, һарыҡтары, ҡарағайҙан һалынған тимер ҡыйыҡлы йорто ла булған була. Ни бары ун бер йәштә саҡта атаһы ҡапыл ауырып китеп вафат була. Әсәләре дүрт бала менән яңғыҙ тороп ҡала. Бер апаһы һәм ике ҡустыһына терәк булыр өсөн, бәләкәй генә булһа ла, көтөү көтә башлай.

«Миңә ун ике йәш тулғанда илдә колхоз төҙөү осоро башланды,» – тип һүҙен башланы Бөйөк һуғыш ветераны. Мин тын да алмай ҡыҙыҡһынып тыңлайым. «Хәлле кешеләрҙең өйҙәрен, ҡиммәтле әйберҙәрен тартып ала башланылар. Беҙҙең дә өйөбөҙҙө күрше ауылға мәктәп итеп күсереп һалдылар, ерҙе, малдарҙы, эш ҡоралдарын колхозға тартып алдылар. Күп балалы ғаилә булһаҡ та, бер ус ашлыҡһыҙ, кейемһеҙ тороп ҡалдыҡ. Өйҙәге һуңғы кейеҙҙе алып сығып китеп барғанда, әсәйем илап йәбешеп тартып алып ҡалды. Ана шул кейеҙ һыуыҡтарҙа беҙҙе йылытты ла инде. Нисектер бер кәзәне лә ҡалдырған инеләр. Әсәйемдең тырышлығы менән яр буйына килеп талдан ситән үреп бәләкәй генә өй һалдыҡ, мейесен дә үҙе сығарҙы ул. Яғырға утын булмау сәбәпле, өйөбөҙ һәр ваҡыт һалҡын булды. Әсәйем кәзә һөтөнән май йыйып, Мәнәүез баҙарына алып барып һатып, бәләкәй ағас сана алып ҡайтып бирҙе беҙгә. Ике ҡустым менән туғайҙан тал утын ташый башланыҡ. Ауылда беҙҙе күрә алмаусылар бик күп ине. Бер көн шулай, утындан ҡайтып килә инек, колхоз активисы, урмансы Кәлимулла ағай балта менән санабыҙҙы сапҡылап ырғытты. Илай-илай туғандарым менән ҡайтҡан сағыбыҙ һаман да күҙ алдында. Әсәйемдең тырышлығы арҡаһында асҡа үлмәнек: сабата үреп һатһынмы, бийма төпләһенме... Бер эштән дә ҡурҡып торманыҡ, ҡулдан килгәнсә ярҙам итә торған инек», – тип хәтерләй олатайым. Ауырлыҡтар аша сынығып тырыш, егәрле булып үҫә ул. Буй еткереп тракторсылдар курсын тамамлап, һөнәр үҙләштереп ҡайтҡас та, уны 1941йылдың май айында армияға алалар. Хеҙмәт юлын Белоруссияла башлай.

Бер аҙ тынлыҡта ултырғандан һуң олатайым һүҙен дауам итте:

«Ял көнө. Автоматтарҙы һүтеп, бөтәбеҙ ҙә йоҡларға ятҡанбыҙ. Таңға табан самолеттарҙың моторының геүләгән тауышына уянып киттек. Көтмәгәндә һуғыш башланды. Мөмкин тиклем алыштыҡ, ләкин көстәр тигеҙ түгел ине. Беҙҙе ҡамап алып пленға алдылар, күбебеҙ беренсе көндә үк һәләк булды». Ветеран күҙ йәштәрен һөртә-һөртә һүҙен дауам итә. «Пленға алынғандарҙы Германияға оҙаттылар. Бернисә ҡасып ҡарағандан һуң фашист тырнағынан ысҡынырға насип булды. Совет һалдаттары яғына ҡушылып китеп, һуғышты Германияла тамамланыҡ», – тип һүҙен йомғаҡлап ҡуйҙы олатайым. Еңеүҙән һуң тағы бер йылдан һуң ғына тыуған яғына ҡайтып етә. Дошман яғында ҡалған аттарҙы ҡыуып ҡайталар улар.

Эйе, рәхимһеҙ һуғыш илебеҙҙең халҡына һанап бөтөргөһөҙ ҡайғы-хәсрәт килтерә. Тылда ҡалғандар ҙа һалдаттарға ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләйҙәр. Тырыш ҡыҙҙар техника менән дә эш итергә өйрәнәләр, ер һөрөп икмәк үҫтерәләр. Шулар рәтендә минең өләсәйем дә була. Һуғыш йылдарында ла, унан һуң да ун йылдан ашыу комбайнсы булып эшләй. 1947 йылда олатайым Миннур Әсәҙулла ҡыҙы менән өйләнешәләр. Ете бала үҫтереп, алтын туйҙарын үткәргәндән һуң өләсәйем мәңгелеккә китеп барған. Тыуған ауылына тоғро олатайым колхозда 63 йыл эшләй. Хаҡлы ялға сыҡһа ла эшен дауам итә ул. Оло йәштәге аҡһаҡал булһа ла һаман дәртле, шәп. Абҙары тулы мал-тыуар, ҡош-ҡорт, баҡсаһы тулы емеш-еләк. Бесәнен дә саба, баҡсаһын да утай. Бер ваҡытта ла ауырлыҡтар алдында һынмаған олатайымды тик өлгө итеп ҡуйырға була. Уға иҫәнлек-һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйбеҙ.

Һуғыш бик күп ғаиләләргә ҡайғы, әсе күҙ йәштәре килтерә. Ләкин халыҡтың тырышлығы бушҡа китмәй. Күп юғалтыуҙар кисергәндән һуң Еңеү көнө килә. Был көн халҡыбыҙ күңелендә мәңге онотолмаҫ көн булып уйылып ҡалған. Беҙ йыл һайын 9 майҙа Бөйөк Еңеүгә бағышланған байрам парадын ҡарарға барабыҙ. Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны – олатайым Ризуан Шәйәхмәт улы ла был көндө түҙемһеҙләнеп, тулҡынланып көтөп ала. Балалар алдында сығыш яһай, Тыуған илде ҡәҙерләргә өйрәтә. Донъяның бөтә әсеһен-сөсөһөн татыған хөрмәткә лайыҡлы ауылдың аҡһаҡалы беҙгә һәр ваҡыт тыныс күк йөҙө, башҡа бер ваҡытта ла һуғыш булмаһын тип теләй. Һуғыш тураһында иҫтәлектәр бер ҡасан да иҫкермәй һәм онотолмай. Беҙгә тыныс матур тормош бүләк иткән яу батырҙарын онооторға хаҡыбыҙ юҡ.

Дан, һеҙгә дан, хөрмәтле ветерандарыбыҙ!

Ғирфанова Г.Р., 8-се класс
Етәксеһе – башланғыс кластар укытыусыһы
Ғирфанова М.Р.
Стәрлетамаҡ ҡалаһы Жәлил Кейекбаев исемендәге
3-сө гимназия

ӨҘӨЛГӘН МӨХӘББӘТ
(Миннур өләсәйемдең һөйләгәндәренән. Бәйет)

Дим буйҡайында
Бар матур ауыл
Тамъян-Таймаҫ
Күргән онота алмаҫ.

Ошо ауылдан
Сыҡҡан бер яҙмыш.
Тыңла, дуҫҡайым,
Һөйләмәм яңылыш.

Матур ғаиләлә
Һылыу ҡыҙ тыуа.
Икенсеһендә
Батыр ул була.

Үҫәләр уйнап
Бергә тәгәрәп.
Йәштәр колхозда
Эшләй бергәләп
Ике йәш йөрәк
Бергә типтеләр.
Өйләнешергә
Һүҙ бирештеләр.

Тик көтмәгәндә
Һуғыш башланды.
Тыуған илемә
Дошман ташланды.

© *Г.Р. Ғирфанова, М.Р. Ғирфанова, 2020*

Беренсе көндән
Мәжит һуғышта
Ә Миннурҡайы
Китте уҡырға.

Хат аша ғына
Улар һөйләште.
Ҡауышырбыҙ, тип
Вәғәҙәләште.

Миннур, күҙ нурым,
Көт мине, тине.
Еңмәйенсә мин,
Ҡайтмамын, тине.

Комбайнсы ҡыҙ
Тырышып эшләй.
Ҡаһарман һалдат
Ҡурҡыуҙы белмәй.

Ленинград фронтын
Илбаҫар ҡамай.
Еңеү, тип, батыр
Үҙен аямай.

Немец пуляһы
Ғүмерҙе киҫте
Һөйгән йәркәйен
Бәхетһеҙ итте.

Һуғыш бөткәс тә,
Көттө һөйгәнен.
Мәжитем, тиеп
Түкте күҙ йәшен.

Ҡәһәрле һуғыш
Яҙмыш емерҙе.
Бөтмәҫлек һағыш
Күңелгә тулды.

Дим буйҡайында

Бар матур ауыл
Тамъян-Таймаç
Күргән онота алмаç.

Өҙөлгән хыял,
Өҙөлгән яҙмыш
Булған тарихты
Яҙманым яңылыш.

Дуçтар, туғандар,
Ҡәҙерен беләйек.
Илебеҙҙә һуғыш
Башҡа күрмәйек!

Ғөбәйҙуллина Ә., 9-сы класс
Етәксеһе – юғары категориялы башҡорт теле
һәм әҙәбиәте укытыусыһы Ғатина С.С.
Стәрлетамаҡ калаһының 32-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ИЛДЕ ТОТҠАН ТЕЛЕМ, ҺҮҘЕМ БАР

Туған тел – йөрәк ҡаны кеүек, кеше шәхес булып формалашһын өсөн төп шарт. Ул тыумыштан бирелә. Әсәйҙәрҙең бишек йыры күңелебеҙгә моң булып һеңешә. Донъялағы иң саф йыр – ул әсәйҙәрҙең бишек йыры.Әсә тыуған телдә балаһына тик бәхетле, изгелекле, яҡшы кеше булып үçеү кәрәклеге тураһында һөйләй һәм көйләй.

Әсә телебеҙ ниндәй бай, яғымлы, серле. Бына бәпембә үләненең генә лә ун ете төр атамаһы бар: бәмбәләк, бағүлән, бағаяҡ, бағанаҡ, бағымбаҡ, баҡбаҡа, туҙҙырыҡ, туҙғанаҡ, көнөнөк, аҡбабай, бабайбаш, бабай үләне, салмабаш, ауымбаҡ, аҡбаш, бабаҡ үләне, апанау. Күңелдә үҙенән-үҙе йыр тыуа:

Өйрәнәйек башҡорт телен,
Әсәйҙәрҙәй күрәйек!
Ғәзиз һүҙҙәр гөлләмәһен
Йөрәктәргә үрәйек!

Бала әсә телендә тәрбиәләнергә тейеш. Башҡорт теленең дәүләт теле итеп иғлан ителеүе ҡайһылай ҡыуандырҙы. Башҡортостанда

© *Ә. Ғөбәйҙуллина, С.С. Ғатина, 2020*

йәшәүебеҙҙе тағы ла иҫбатлағандай, иғландар, тапшырыуҙар саф башҡорт телендә яңғыраһа, йөрәктәргә йылы булып китә.

Ҡасандыр һуңғы башҡорттоң һуңғы башҡорт ҡәберендә ҡурай уйнарына өмөт итәләр ине…

Юк! Йотолманы, киҫелмәне.
Телем еңде ҡәберҙе,
Башҡорт теле! Ниндәй ғорур.
Һәр бер һүҙе ҡәҙерле!

Минең йырлар йырым – гүзәл Башҡортостаным. Дәүләт етәкселегенең Башҡортостанда йәшәүсе һәр милләттең теленә, мәҙәниәтенә ихтирамлы, иғтибарлы булыуы йөҙләгән милләт вәкилдәренең һыйышып, дуҫ, татыу йәшәүен тәьмин итә. Беҙҙең синыфта ғына ла ун милләт вәкиле уҡый.Сәскә гөлләмәһенең йәйғор төҫтәре менән балҡыуы тип сағыштырыр инем мин уларҙы. Беҙ дуҫлыҡ менән көслө.Мәктәбебеҙҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнәләр, үҙ туған телдәрен, мәҙәниәтен дә өйрәнергә мөмкинлек бар. Мәктәптә үткәрелгән сараларҙа урыҫ, башҡорт, татар, сыуаш, мари һәм башҡа телдәрҙә яңғыраған йырҙар тыңлап, бейеүҙәр ҡарап кинәнәбеҙ.

Гөрләтеп «Шәжәрә байрамдары» уҙғарабыҙ. 2020 йыл Республикабыҙҙа Бөтә донъя фольклориядаһы үткәрелергә әҙерләнеү үҙе ни тора?

2020 йыл – беҙҙең республикабыҙҙа Башҡорт теле йылы тип иғлан ителде! Ниндәй мөмкинлектәр асыла минең туған телем алдында! Йәшә туған телем!

Башҡорт теле ул – Республикабыҙға исем биргән тел. Уның Республикабыҙҙың һәр мәктәбендә, уҡыу йортонда өйрәнелергә тейешлеге бер ниндәй ҙә бәхәс тыуҙырырға тейеш түгел, минеңсә. Дуҫлыҡ гөлләмәһенең иң сағыу сәскәһе – башҡорт теле булырға тейеш. Бер ниндәй ҙә ҡара болот шәүләһе уны төҫһөҙләндермәһен.

«Тел үҙенең ҡулланыу өлкәһе ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, йәмғиәттең иң ҡиммәтле хазинаһы һанала», – тигән күренекле тел белгесе, ғалим, яҙыусы Жәлил Кейекбаев.

Бәхәс ҡупһа телем өсөн
Йәшәрме ул, ҡорормо тип,
Тел һаҡларға ҡалҡан булып,
Текә үрҙә торормон мин,
Ҡаршы уҡты борормон мин.

Эйе, телебеҙ яҙмышы, тел киләсәге һинән, минән тора. Беҙ туған телебеҙҙә һөйләшһәк кенә, атай-олатайҙарҙан ҡан менән күскән рухи байлыҡҡа эйә була алабыҙ. Тел – ул аралашыу ҡоралы ғына түгел. Телкешенең тәрбиәле булыуын да күрһәтә, белемен дә сағылдыра.

Үҙ телемә һөйөү мине журналистика өлкәһенә әйҙәй. Мораҙыма ирешә алһам, мин өлгө булырҙай яҙмыштар, тел байлығын аҡтарыусы ғалимдар, әсә ҡанатына һыйынған бәхетле бала саҡ тураһында яҙыр, Бабич думбыраһы моңдарын һәр кемгә бүләк итер инем.

«Беҙҙең тел барыбер бөтә «тимә,
Тел – мәңгелек, үлмәç, йәш,сикһеҙ…
Туған тел бит һинән элек тыуған,
Һинән һуң да йәшәр, һис шикһеҙ!
Әсхәл Әхмәт-Хужа.

Ғүмәров С., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Абдрахманов Ә.М.
А.В. Доставалов исемендәге Волга буйы федераль округының башҡорт кадет корпусы

ЕР ЯҘМЫШЫ – БЕҘҘЕҢ ҠУЛДА

«Мәҙәк итеп ҡарап торҙом
Кескәй генә ҡырмыçҡаға:
Йөк күтәреп сығып бара
Азиянан Европаға»
Европа һәм Азияға
Был донъяны
Кем һуң бүлгән?
Урал түбәһендә
Баçып тороп,
Мостай ағай
Шулай тигән.

Мостай ағай, бүлделәр шул,
Телгесләнде донъялар.
Сәйәсмәндәр арыу белмәй
Ер-әсәне һуялар.

Бер юрғанды тартышалар
Европала үҙ-ара.
Был сәйәсәт, мәҙәниәт
Азияны йотоп бара.

© *С. Ғүмәров, Ә.М. Абрахманов, 2020*

Туймаҫ шакал кеүек ырғый
АҠШ тигән яныуар.
Эй талай, өйәнәкле,
Бына-бына ул быуар.

Йыраҡ китмәй күҙ һалайыҡ:
Украина – ни дошман?
Ниңә килеп ошо заман,
Донбассты баҫты томан?

Россиянин ине украин да,
Һинең менән мин кеүек.
Хәҙер инде килә тороп
Туғанлыҡ ебе өҙөк?

Йәмил менән Оксананың
Ауыр берҙәм үткәнен,
Киләсәген, бөгөнгөһөн
Күҙәтәбеҙ бөткәнен.

Йөнтәҫ ҡулдар тартҡыслайҙар
Йолҡослайҙар Ер шарын.
Көт тә тор был шакалдың
Боғаҙыңды ашарын.

Сәйәсәтең ары торһон.
Йөрәкте телдермәйем!
Мостай ағай һүҙҙәрен
Мәңгелеккә иҫләйем.

Ҡырмыҫҡаға ни сәйәсәт?
Ул – Алланың бер ҡоло.
Сиктәр менән ҡапланмаған
Ҡырмыҫҡайымдың юлы.

Урал тауы – сик түгел ул –
Берләштереүсе көсөм.
Азия, Европа – туган ил
Минең башҡортом өсөн.

Бер аяғым Азияла,

Икенсеһе Европала
Азиянан Европаға
Йөрәгем ҡанды ҡыуа.

Айырманы башҡортом
Бер ҡасан да милләтте.
Кәрәк саҡта Ер шарын
Үҙе тотоп һелкетте.

Башҡорт уғы Парижда
Гета шағир өйөндә...
Фашистарҙы ерләнек:
Ҡалдырманыҡ йөйөн дә.

Һелкетерлек шакалдарҙы
Көс-дарман ташып тора.
Европаға, Азияға,
Сәйәсмәнем, бүлеп ҡара!

Нуриевтар, Вәлидиҙәр
Мостай Кәрим кеүектәр...
Башҡортомдоң күңелен
Тотор тиһеңме сиктәр?

Беҙҙең йөрәк – Урал рухы.
Уралҡайым – Ер-кендек.
Донъя зарын, донъя нурын
Ҡаныбыҙға һеңдерҙек.

Бер һыртында Азия,
Европа – икенсеһе.
Ныҡ тор инде, Уралҡайым
Тыныслыҡтың илсеһе.

Уйҙар... уйҙар... Мин бит кеше...
Беҙгә был сиктәр ниңә?
Тырыш ҡырмыҫҡа менән
Йөрәктәр бергә тибә!

«Уҡ юғалыр, ҡылыс һыныр
Тимер һабан тутығыр.

Телде тере тел һаҡлаһа,
Һүҙҙе сабый ҡабатлаһа,
Бәләнән тел ҡотолор.
Телдән төшкән тел юҡ булыр,
Телдәге тел ныҡ торор.
Р. Бикбаев» номинацияһына.

ТЕЛҺЕҘ БАШҠОРТ

Һаумы, башҡорт, ситлектәрҙә
Күпме сыбыртҡыны күргәнһең!
Яу башлаған өсөн Ак батшаға
Ете тамуҡ ҡаты үткәнһең!

Һаумы башҡорт, йырла әле миңә
Һинең көсөң миңә бирелһен,
Күңелемдә булған ҡаты яра
Шәбәймәһен, йәнә терелһен.

Мин яралы, зәғиф рухым менән
Һиңә килдем бөгөн, ҡабул ит.
Илем, телем, тиеп үлгән башҡорт!
Телһеҙ башҡортоңдо ғәфү ит.

Телһеҙ ҡалдым яңы заманала.
Юҡ, аҫмайҙар хәҙер башҡортто.
Тик ил өсөн йән биреүҙең
Йәштәр нимә икәнлеген онотто.

Телһеҙ үҫтем, батыр, ярлыҡасы,
Һин ас миңә рухын серҙәрен:
Телем, илем тиеп янып йәшәү,
Йырлап йөрөү башҡорт көйҙәрен…

Ни булды һуң, ниңә яуап юҡсы?
Тик күҙ йәше тама башҡортттоң.
Йәлләп, ҡарығып, рәнйеп… Ниңә илай?
Һин бер хәҡиҡәтте оноттоң.

Өн сығармаҫ башҡорт ситлектәрҙә:
Телен йолҡҡан зәһәр батшалар.

Тәнгә генә яра һалмай улар.
Башҡорт рухын дарға аҫалар.

Тик еңелмәй башҡорт. Теле юҡтыр,
Ләкин моңо сыға түгелеп.
Күңел моңон булмай асып дарға,
Күңел моңо төшмәй өҙөлөп.

Ә һин килеп, уға бәлә һөйлә….
Түгелһеңдер башҡорт, егетем.
Ҡасан беҙҙең ирҙәр һинең кеүек
Илап торған тиһең, меҫкенем.

Телһеҙ ҡалдым, тиеп илап килдең.
Кем ҡырҡты һуң һинең телеңде?
Арҡаң тулы сыбыртҡылар эҙе?
Мөһөр яндырҙымы битеңде?

Тик һин үҙең аҫтың дарға телде,
Үҙ рухыңды үҙең үлтерҙең,
Зиһенеңде һыра менән быуҙың,
Ошо хәлгә үҙең еткерҙең.

Ҡотҡаралмаҫ һине бер ни батыр,
Йәшәйешең үҙең ҡулыңда.
Ауыр булыр, тик еңелмә, егет,
Тел тергеҙеү тигән юлыңда.

Иҫлә, егет, һаҡла әсә телен.
Аҫма башҡа дарға рухыңды.
Палач булма үҙ телеңә, егет.
Быума, егет, ғүмер юлыңды.

Һаҡла әсә телен, йәнең итеп.
Йәшәйешең унһыҙ бөтөсәк.
Һәм тағы ла батыр рухын эҙләп,
Маңҡорт илап бында киләсәк.

Ғәбитова Н.Ә., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Муллағолова М.З.
Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылының
дөйөм белем биреү мәктәбе

НИМӘ УЛ БӘХЕТ?
(Сәсән-шағир Мифтахетдин Акмулланың «Нәсихәттәр» шиғырына эйәреп яҙған шиғыр)

Бөгөн мин Миәкә еренең йәмле Дим буйындағы Туҡһанбай ауылында тыуған, ауыр тормош юлы үтеүгә ҡарамаҫтан, саф күңелле булып ҡалған, белемле булыуҙы байлыҡ тип һанаған – яҡтылыҡ йырсыһы Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмуллаға бағышлап бик шатланып инша яҙам.

Мифтахетдин Аҡмулла рус халҡының Пушкины, татар халҡының Тукайы һымаҡ, халҡымдың яҡты йондоҙо булып тора. Халыҡтың наҙан булыуын күреп бик ныҡ әсенә. Ҡараңғылыҡтан сығыу юлын белем алыуҙа күрә. Күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе,сәсән. Ул үҙ шиғырҙарында кешелекте борсоған проблемаларҙы күтәреп сыға. Улар ике шиғыр миҫалында асыҡ күренә.

«Нимә һуң ул бәхет?» Был турала уйланмаған кеше юҡтыр. Кемдер бәхетте матди байлыҡта, кемдер матур итеп кейенеүҙә, кемдер ашауҙа һ.б. күрә. Ә бөйөк шәхес бәхетте нимәлә күрә һуң? Шағирҙың»Бәхет» исемле шиғырын ҡарайыҡ:

Заманыңды яманлап,
Беҙҙәй ғәрип табылмаҫ,
Үҙ буйыңды төҙөй бир,
Йөмлә шәриф табылмаҫ.

Һәр замандың үҙ ҡыйынлыҡтары ла, яҡшы яҡтары ла булалыр. Заман насар булғанға беҙ бәхетһеҙ, тип ултырыуҙан фәтүә юҡ. Аҡмулла бында замананың насарлығына һылтанып ултырмаҫҡа, ә үҫеүеңде дауам итергә, алға барырға өндәй, минеңсә. Беҙгә лә унан фәһем алырға кәрәктер.

Хакимыңды яманлап,
Ғәҙел ҡайҙан табырһың,
Хужаларың яманлап,
Артығын ҡайҙан табырһың.

© *Н.Ә. Ғәбитова, М.З. Муллағолова, 2020*

Ысынлап та, хаҡ был һүҙҙәр. Кешене яманлап һөйләгәнсе, үҙеңдең насар яҡтарыңды күреп төҙәтһәң, яҡшыраҡ түгелме? Хакимыңды яманланың ти, уның урынына бүтән хаким килеп, унан да яманыраҡ булһа, ни тиерһең? Йәки кешене яманлағансы, үҙең хаҡим булып ҡара.

Алған йәрең яманлап,
Матурын ҡайҙан табырһың?

Был юлдар инде кешенең йәрен үҙенекенән артыҡ күргән кешегә ҡағылалыр. Халыҡ телендә ҡыҙыҡ итеп «Күршенең тауығы ла өйрәк кеүек» тиҙәр бит. Яҡшы менән яманды, хаҡлыҡ менән нахаҡты айыра белергә өйрәтеү өсөн халыҡсан һүҙҙәр ҙә ҡулланған.

Үҙ башыңды ҙур итеп,
Тиңдәш ҡайҙан табырһың.

Был юлдар оло вазифаға үрләгән кешеләргә ҡарата әйтелә. Ысынлап та, ябай кеше түрә булып китһә, маһая, иптәштәрен онота, үҙен барыһынан да өҫтөн ҡуя. Был осраҡта дуҫ – иптәш, туғандарыңды юғалтып, бер үҙең ҡалыу ҡурҡынысы тора. «Байлыҡ – бер айлыҡ» тиҙәр. Ул бөгөн бар, иртәгә юҡ. Ә дуҫтар, туғандар һәр ваҡыт кәрәк. Шуға ниндәй генә эштә эшләмә, кем генә булма, кешелеклелек сифаттарын юғалтмаҫҡа кәрәк.

Бәхете уянған ирҙәрҙең
Һәр бер эше уң булыр,
Дәүләте көнгә артылып,
Ни ҡылһа ла шул булыр.

Ошо юлдарҙы укығандан һуң уйға ҡалаһың. Хәҙерге заманда күп кенә ирҙәр үҙ бәхеттәрен үҙҙәре тапай түгелме? Замана сире «эскелек», «тәмәке» уларҙың күбеһен быуып алған. Бәхетле булыр өсөн ошо сирҙәрҙән арынырға, яҡшы тормош өсөн көрәшергә кәрәк.

Был донъяла ҡунаҡ һин,
Дәүләт, бәхет таптым, тип,
Ни бирһә лә – алла, тип,
Шөкөрлөгөң ташлама.

Ысынында ла кеше был донъяла ҡунаҡта булған кеүек кенә. Кеше ғүмере – бер миҙгел генә. Шуға күрә ҡәҙерен белеп, яҡшы итеп, үрнәк булып, барына шөкөр итеп йәшәргә кәрәк. Шөкөр итеп йәшәй белеү – үҙе ҙур бәхет.

«Нәсихәттәр» шиғырын икенсе төрлө «Бәхет өсөн нимә ҡамасаулай?» тип аңларға ла була. Бында Аҡмулла иман, күңел, аҡыл, шөкөр, әҙәп,сабыр,ихлас хас яҡшы һыҙаттар менән килешеүен белдерә. Әҙәмдең иман шарттарын өйрәнмәүсене Иван тип атауы, боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ булыуын, аҡылһыҙҙың иманын көфөрлөккә

һатыуын, сабырһыҙлыҡтың башҡа бәлә һалыуын, ихласһыҙҙың эше ҡабул булмауын асыҡ итеп әйтеп биргән инде.

Етенсе ҡиммәт нәмә – ихлас ,тигән,

Ихласлыҡтың эше ҡабул булмаç, тигән,

Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:

Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас – юлдаш тигән.

Ниндәй мәғәнәле тәрән һүҙҙәр. Шағир кешеләрҙе уянырға, наҙанлыҡ ҡараңғылығынан ҡотолорға, ғилем – һөнәргә эйә булып, ғүмерҙе файҙалы итеп үткәрергә саҡыра.

Мин 9-сы класта уҡыйым. Үҙ телемде ныҡлап өйрәнгән һайын, телебеҙҙең ҡиммәтлеген аңланым. Уҡытыусыбыҙ Аҡмулла тураһында эш иғлан иткәс, мин ҡыуанып риза булдым.

Аҡмулла фотоһүрәтенә оҙаҡ ҡына ҡарап ултырғас, куҙ алдыма урта буйлы, мыҡты кәүҙәле, ҡараштары алыçҡа төбәгән бик уйсан, аҡыллы кеше баçты.

Аҡмулланың исеме лә күңелгә ятышлы. Боронғолар әйтмешләй, исеме – есемендә. Мулла төшөнсәһенә «Аҡмулла» иң элек ғалим кеше, ғилем, аҡыл эйәһе тигән мәғәнә һала.

Мулламын тигән кеше иң әүәл донъяуи ғилемгә, һөнәргә эйә булырға һәм йәш быуынды ла шул рухта тәрбиәләргә тейеш. Аҡмулла үҙе лә сәсән-шағир ғына түгел, слесарлыҡҡа, столярлыҡҡа, тегенселеккә һәм башҡа донъя кәрәк-яраҡтары яһау оçталығына эйә булған. Балаларҙы үҙ туған телендә заманса укытырға һәм тәрбиәләргә тырышҡан. Шуға дуçтары уға «Аҡ мулла» тигән исем ҡушҡандар. Был ҡушамат (псевдоним) шағирҙың изге күңелле, саф йөрәкле, ғилемле һәм һөнәрле кеше икәнен аңлата.

Динен дә, намыçын да, вәғәзен дә Аҡмулла бер ваҡытта ла онотмаған. Башҡа дин әһелдәрен дә ул үҙе һымаҡ алдынғы ҡарашлы итеп күрергә теләгән. Бының сәбәбе лә бар.

Шулай итеп, М. Аҡмулла, үҙ шиғырҙарында кешеләргә нәфселәрен тыйырға, бәхет таптым, тип артыҡ шашынмаçҡа өгөт-нәсихәт бирә. Бәхет табыу юлын аныҡ күрһәтә. Был проблема бөгөнгө көндә лә актуаллеген юғалтмаған.

Иншамды мин дә үҙемдең Аҡмуллаға эйәреп яҙған шиғырым менән тамамлағым килә.

Нәсихәттәр

Минең өсөн ҡиммәт нәмә – илем, тигән

Ерһеҙҙәрҙең барыр юлы таҡыр, тигән,

Ил өçтөндә сәпсек үлмәç иле булһа,

Ил яҙмышын, эй дуçҡайым, ҡайғырт, тигән.

Минең өсөн ҡиммәт нәмә - белем, тигән,

Белемһеҙҙән йырак йөрө,балам,тигән.
Белемһеҙҙәр дүрт аяклы малға окшаш,
Якын барма,йыракка кас унан, тигән.
Иң кимматте минең өсөн башкорт телем
Тел булмаһа милләтебеҙ юктыр, тигән.
Арабыҙҙа телһеҙ маңкорт йөрөһә әгәр,
Башкорт телен һиндә уға өйрәт, тигән.
Минең өсөн кәрәк нәмә – акыл, тигән,
Акылһыҙҙың мейеһендә сүбәк, тигән.
Акыл менән эш иткәндәр йортон-ерен,
Һаклап калыр үҙ халкының динен, тигән.
Телһеҙ, илһеҙ йәшәү мөмкин түгел, тигән.
Йәшәр ерең, һулар һауаң булһын, тигән,
Үҙ илеңде,үҙ телеңде һаклап, яклап,
Ер өҫтөндә гел якшылык калдыр, тигән.

Үҙемдең ошо нәсифәттәрем менән халкыма өндәшер инем. Әйҙәгеҙ, белемде күберәк алайык! Үҙ бәхетебеҙҙе табайык! Мифтахетдин Акмулла ла бит бәхетте белем алыуҙа күргән.

Ибраһимова Р., 10-сы класс
Етәксеһе – башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Ғатина С.С.
Стәрлетамак калаһының 32-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

РУХ АСЫЛЫ МИҢӘ БӨГӨН КӘРӘК
(уйланыу)

Акылыбыҙ алмашмаһын,
Рухыбыҙ алдашмаһын.
Нигеҙебеҙ булһын Урал,
Кулыбыҙҙа булһын курай.

Беҙ, башкорттар – бәхетле милләт. Сөнки беҙҙең телебеҙ шундай бай, курай моңобоҙ шундай күркәм. Күпме кобайырҙар, йырҙар яҙылған был телдә. «Урал батыр» эпосы ғына ни тора! Ә халык йырҙары… Йөрәктәрҙе тетрәтерлек моңо, һүҙҙәре менән айырылып тора улар. Әлбиттә, бөтә милләттәр үҙ телдәрен һөйә, мактай. Шулай ҙа бөтәһе лә беҙҙең тылсымлы курай моңон хайран калып тыңлайҙар.

© *Р. Ибраһимова, С.С. Ғатина, 2020*

Салауат Юлаев тыуған еренә бағышлап йырҙар йырлаған, Мостай Кәрим үҙ уй-тойғоларын шиғыр итеп һөйләгән был телде һөймәй мөмкин түгел.

Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,

Иле юктың ғына теле юк!

тип яҙған бит бөйөк шағирыбыҙ Рәми Ғарипов.

Халҡыбыҙ арҙаҡлы улдары Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм башҡа күптәрҙең фиҙакәр көрәше һөҙөмтәһендә милләтен, туған телен һәм тыуған төйәген һаҡлап ҡала алды. Ҡобайыр юлдары беҙгә уларҙың аманаты булып яңғырай:

Һаҡлағыҙ башкорт илен тим,

Ҡояш илен, заң илен,

Башҡорт илен!

Һаҡлағыҙ башҡорт телен,

башҡорт илен!

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостаным ғорур баҫып алға атлай. Уның үҫешенә, ҡаҙаныштарына ҡарап хайран ҡалам. Нисә быуат азатлыҡҡа сарсаған халҡым суверенлыҡ яулап алды һәм донъя кимәленә күтәрелде. Был йәһәттән ең һыҙғанып эшләүсе ил ағаларына ҙур рәхмәт.

Республикабыҙҙа төрлө милләт кешеләре дуҫ йәшәй. Һәммәһе лә ябай һәм асыҡ кеүек: барлыҡ милләттәр һәм халыҡтар дуҫ һәм татыу йәшәргә тейеш. Һәр бала, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең телен, үҙенең тыуған яғының, республикаһының тарихын белергә тейеш. Нәҫелен, тамырҙарын, телен, мәҙәниәтен яҡшы белгән кеше генә башҡа милләт вәкилен аңлай, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен хөрмәт итә. Берәүгә лә милләт-ара ыҙғыш кәрәкмәй. Кеше туған тел ярҙамында үҙенең тирә-яғындағы төрлө төшөнсәләр, атамалар менән таныша, кешеләр менән аралаша. Әхлаҡ төшөнсәләрен әсә телендә аңына һеңдерә, күңеленә һала. Туған теле арҡаһында ул үҙ халҡының күңел хазинаһын – илаһи йырҙарын, мөғжизәле әкиәттәрен, тәрән аҡыллы мәҡәл-әйтемдәрен, серле йомаҡтарын белеү бәхетенә ирешә. Туған тел кешегә үҙ яҙыусыларының әҫәрҙәрен еткерә, композиторҙарының операларын ишеттерә. Туған тел кешене белемле, аҡыллы, фекерле, тәрбиәле, ғилем донъяһына ынтылыусан итеп тәрбиәләй. Кешенең үҙ иленең патриоты булыуы ла туған телгә бәйләнгән. Туған телендә иркен һөйләшә белеү юғары мәҙәниәткә эйә булырға ярҙам итә.

Туған телде һаҡлау – хәҙерге ваҡытта иң актуаль проблемаларҙың береһе. Һуңғы йылдарҙа ил кимәлендә туған телдәр өҫтөндә ҡуйырған ҡурҡыныс болоттар телдәр, милләттәр, хатта халыҡтар юҡҡа сығыуға килтереүе бар бит. Нисек быға юл ҡуйырға мөмкин һуң?

Башҡортостанда йәшәп тә, милләте буйынса башҡорт булып та, башҡорт телен белмәгәндәр бар. Ҡайһы бер йәш ата-әсәләр балаларына туған телде өйрәтеп тә тормай. Был дөрөҫ түгел. Мин ундайҙарҙы, шағир әйтмешләй, урмандағы кәкүктең һандуғас булып һайрарға маташауы менән сағыштырыр инем. Үҙенең теленә вайымһыҙ ҡараған кеше – ул ҡырағай кеше. Ул үҙенең асылы менән зарарлы кеше. Әсә теленә ҡарата ғәмһеҙлек үҙ халҡының үткәненә, хәҙерге хәленә һәм киләсәгенә ғәмһеҙ ҡарауға килтерә.

Тайфур Сағитовтың «Иман» романы ошондай уйланыуҙар менән башлана:

Кеше!

Туҡтасы әле, кеше!

Ниңә шулай ашығаһың?

Аҡ-ҡараны күрмәй, ҡайҙа сабаһың?

Мәңге эҙләгәнде табырғамы, әллә тапҡаныңды юғалтып эҙләйһеңме?

Туҡта әле бер аҙға, хәл йый, яҡ-яғыңа ҡаран, уйланып тор! Ни булды был тормошҡа?!….

Эйе, яҙыусы бер ваҡытта ла хуш күңелле, барыһынан ҡәнәғәт һәм риза булып йәшәй алмай, сөнки ул йәмғиәттең күҙе һәм ҡолағы, намыҫы һәм әхлағы.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов та ҡасандыр:

Был кешелек ҡайҙа бара һуң ул?

Белһә әгәр ҡайҙа барғанын,

Тарихи бер бәхет һанар ине,

Ярты юлда туҡтап ҡалғанын.

Белмәй һаман: үҙен-үҙе алдай,

Арта ялған, арта вәхшилек.

Аҡыл эшләй аҡылһыҙлыҡ өсөн,

Һәләкәтен даулай кешелек –

тип әсенеп яҙған.

Ә инде Ҡәҙим Аралбаевтың «Рух асылы миңә бөгөн кәрәк» шиғыры юлдары һәр беребеҙ өсөн оран булып яңғырай кеүек:

Миңә рух асылы бөгөн кәрәк,

Үҙемә һәм бөлгән халҡыма.

Бөгөн кәрәк! Сөнки заманаһы

Ҡалайыраҡ алған алҡымдан...

Беҙҙең туған телебеҙгә ҡағылышлы замана проблемалары хөкүмәт кимәлендә хәл ителергә тейеш. Һәм хәл ителә башланы! Быйылғы йыл-Башҡорт теле йылы!

Мин ышанам: телебеҙҙе мыҫҡыллауға, һанға һуҡмауға юл ҡуйылмаясаҡ. Сөнки туған тел ул:

Әсәләрҙең күкрәк һөтө менән
Йөрәктәргә ингән туған тел,
Ҡаныбыҙға һеңгән туған тел,
Бөтәбеҙгә беҙҙең иң ҡәҙерле,
Бөтмәҫ байлыҡ булып ҡалған тел.

Иманғолов А.Р., 5-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Муллағолова М.З.
Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Асҡар муниципаль
дөйөм белем биреү мәктәбе

ТЫУҒАН ЯҒЫМ, МИНЕ ҒӘФҮ ИТ...
(асыҡ хат)

Һаумыһығыҙ, минең йыраҡта тороп ҡалған кендек ҡаным тамған тыуған тупрағым Башҡортостаным, тәүге тәпәй эҙем ҡалған Әлшәйем, ҡалҡан тауым Сатыртауым, сер һаҡлаған Сусағым, ожмах гөлөм Ҡыпсағым!

Һеҙгә был хатты ғүмер буйы үҙенең тыуған илен яратыусы, һағынып төштәрендә күреүсе, бер минут та уйынан сығармаған, Ҡаҙағстан илендә йәшәүсе Тимерхан Сәлимов Аҙнабай улы яҙа.

Үҙем Ҡаҙаҡстан далаларын да йәшәһәм дә, атайымды «кулак» тигән исем тағып, тыуған иленән айырылған Башҡортостан егетемен.

Хуш, ауылым Ҡыпсаҡ-Асҡар,
Сатыртауҙарың менән.
Йәшәргә форсат бирмәнең
Бер туғандарым менән.
Сатыр ғына тауҙың башынан
Төшөп килә ауыл көтөүе.
Йән биреүҙән дә ауыр булды
Әлшәйемде ташлап китеү

Был минең атайымдың ғүмере буйы яратып йырлаған йырҙарының береһе.

Ҡаҙаҡ малайҙары араһында үҫкән саҡта тел өсөн көрмәкләшкән, һуғышҡан саҡтар булманы түгел, бөтәһе лә булды.

© *А.Р. Иманғолов, М.З. Муллағолова, 2020*

Атайымды «кулак» итеп илдән ҡыуып ебәргән ваҡытта миңә 12 йәш ине. Шул ваҡыттан әлеге көнгә тиклем мин уйым менән һеҙҙең менән йәшәнем. Беҙ 5 бала, яҙмыш ҡушыуы буйынса «кулак балалары» тигән исем тағып, һеҙҙән айырылып йәшәргә насип булдыҡ. Мин иң ҙур бала булараҡ 10 йәшлек Мәхәмәтханға, 8 йәшлек Гөлсөмгә, Сафияға, Буранбайға һеҙҙең хаҡта онотоп ҡуймаһындар тип һөйләп, бына ошондай тау бар тип, Сатыртауымдың һүрәтен төшөрөп күрһәтә торғайным.

Атай-әсәйемдә әллә ҡасан гүр эйәләре булып бөттөләр инде. Туғандарым да хәҙер төрлөбеҙ төрлө яҡҡа таралдыҡ. Үҙ-ара хаттарҙы ла, телефон аша ла башҡорт телендә аралашабыҙ, телебеҙҙе онотманыҡ, ейән-ейәнсәрҙәрем дә минең башҡорт телемдә һөйләшәләр.

Мин ғүмеремдең һуңғы көндәрен йәшәйем, 96 йәш. Башҡортостанға ҡунаҡҡа ҡайтып киткән саҡта Сатыртауымдан фатихалар алмай китмәнем, башҡорт телемде лә онотманым, илемде алыштырһам да телемде алыштырманым, ҡаҙаҡ далаларын да йәшәһәм дә ҡаҙаҡ балалары үҫтермәнем, үҙемдән һуң да дауам итерлек башҡорт телен яратҡан башҡорт балалар ҡалдырам.

Мин ғүмеремдең һуңғы көндәрем йәшәйем Минең бәхетле баласағымда балыҡ тотҡан Күгиҙелем-Димем ни хәлдә икән, Сатыртауым-ҡалҡан тауым ни эшләй икән?

Ғүмерем буйына һеҙҙе һағыныусы, ҡаҙаҡ далаларын да ғүмеремдең һуңғы минуттарын үткәреүсе, һеҙҙән бәхиллек һорап хат яҙыусы Тимерхан тигән улыңды иҫләйһең ме икән?

Юҡ, Башҡортостаныма, Әлшәйемә, Сатыртауыма, Сусағыма, Күгиҙелем-Димемә, башҡорт телемә мин бер ҡасан да хыянат итмәнем. Ошо көнгә тиклем мин башҡорт телен яратҡан башҡортмын.

Ҡәберем Ҡаҙағстан ерендә булыр инде, был хәлдә мин Башҡортостаныма ҡайта алмам, сөнки минең балаларым бында. Ә шулайҙа мин йәнем, күңелем менән һеҙҙең янда.

Хатым һеҙгә барып еткән саҡта мин яҡты донъялар ҙа булмаҫмын моғайын. Һуңғы тапҡыр ҡайтып киткән саҡта Сатыртауыма «минең ризығым һиндә булмаһа ла, ҡәберем һиндә булыр» тип һүҙ биреп киткәйнем.

Ҡайта алманым, Сатыртауым, тыуған яғым, һин мине ғәфү ит, ҡәберем сит ерҙә ҡалһа ла, йәнем һинең менән булыр.

Тыуған ерем – Әлшәйем, Сатыртауым – ҡалҡан тауым, Кугиҙелем – Димкәйем, тыуған илем – мине ғәфү ит.

Минең ҡулымда йыраҡтан килгән хат ята. Ул төрлө уйҙар һала. Хатты өләсәйемдең ағаһы Тимерхан Сәлимов Азнабай улы

Ҡаҙаҡстандан яҙып ебәргән. 12 йәштә иленән айырылған үҫмерҙең 96 йәшенә тиклем сит ерҙә йәшәп, башҡорт телен яратҡан ошондай кешегә һоҡланмай мөмкин түгел...

Камалова Ю.К., 11-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Хәлилов Ә.Н.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се лицей-интернаты

ТУҒАН ТЕЛЕҢДӘН СИТЛӘТЕЛМӘ, БАШҠОРТОМ!
(мәҡәлә)

Бөгөнгө көндә «Башҡортостанда туған телеңдә мәктәптәрҙә уҡытылыуы мотлаҡмы?» – тигән һорау интернетта, социаль селтәрҙәрҙә ҡуйырып китте... Ошо һорау минең дә күңелемде телгеләй. Мин дә, Башҡортостандың төп милләте вәкиле буларaҡ, үҙ фекеремде, әйтеп үтергә теләйем. Башҡорт ғаиләһендә, милли мөхиттә тәрбиә алып үҫкән башҡорт балаһы мин. Сабый саҡтан өләсәйемдән, олатайымдан, ата-әсәйемдән башҡорт булғаным өсөн ғорурланып һөйләрлек сифаттарҙы үҙ йөрәгемә һеңдергәнмен. Иң беренсе тапҡыр ҡулыма «Аҡбуҙат» журналын алғаным бөгөнгөләй хәтерҙә. Хәҙер иһә, әҙәбиәт аҡһаҡалы Мостай Кәримдең, яратҡан шағирҙарым Рәми Ғарипов, Шәйехзада Бабич ижад иткән эҫәрҙәрҙе яратып уҡыйым. Бәләкәй саҡтан уҡ мин башҡорт халыҡ йырҙарын яратам. Бөгөнгө йырсыларҙан Радик Юльяҡшин, Гөлсинә Мөхәмәҙиева, Роза Мораҙымова башҡарған йырҙарҙы яратып тыңлайым.

Һәм күңелемде телгеләгән һорауға, минең яуабым бер: «Әлбиттә, башҡорт теле – туған телебеҙ һәр мәктәптә мотлаҡ уҡытылырға тейеш!» Төптән уйлап ҡараһаҡ, башҡорт теленең яңғырашы нәзәкәтле, һүҙҙәренең әйтелеше бай һәм уны урыҫ теленә тәржемә итһәң, матурлығы, үҙенсәлеге юғала. Шуның өсөн дә миңә туған телемдә аралашыу, туған телемдә һөйләшеү еңел, рәхәт, яҡын.

«Урал Батыр» эпосы башҡорт халҡының үҙе бер рухи байлығы. Йәшишмәнең тере һыу тураһында барған өҙөктәрен уҡыһаҡ, уйлап ҡараһаҡ, Йәншишмә – ул туған тел. Йәншишмә кипһә, беҙҙең телебеҙ ҙә, милләтебеҙ ҙә юғалыр ине. Мәҫәдән, туған телемде белмәү минең өсөн хурлыҡ. Күпселек тиҫтәрҙәремә ҡарайым да шаҡ ҡатам. Ни өсөндөр үҙенең телмәрҙәрендә урыҫ, инглиз телдәрен ҡыҫтырып һөйләшкән булалар. Ошо сит һүҙҙәрҙең һөйләшеүебеҙгә килеп инеүе,

© *Ю.К. Камалова, Ә.Н. Хәлилов, 2020*

телебеҙҙе йылдан-йыл ярлыландыра бара. Был хаҡта хатта һыҙланып яҙған шәхесебеҙ Мәрйәм Бураҡаеваның бик актуаль шиғыры:

Әйтсе, Башҡорт!
Нисек ҡулың барыр ғаризаға
«Балам урыҫ» тиеп яҙырға?
Үҙ ҡулдарың менән ғәзиз милләтеңә
Тере көйө ҡәбер ҡаҙырға?
Урыҫ дуҫың һинең манҡортоңдо
«Урыҫым» тип ҡабул итерме?
Милләтенән ситләтелгән башҡорт
«Бәхетлемен» тиеп әйтерме?

Беҙ – йәштәр, күпселегебеҙ башҡорт йырҙарын тыңларға яратабыҙ. Минеңсә, йәштәр тыңлаған йырсылар башҡорт теленең модала икәнен үҙҙәренең ижадында, социаль селтәрҙәрҙә күтәрһәләр, тиҫтерҙәрем үҙ туған теле менән ғорурлана алыр ине, ғорурлана башлар ине.

ТАРИХ ЯҘЫРМЫ ИКӘН АЛЬП ТАШЫ?..
(хат)

Әсәй, өләсәй һәм олатай, һеҙгә сәләмәтлектәр теләп Альп тауҙары түбәһенән уландарығыҙ Йәнмырҙа менән Йәноҙаҡ. Ауылдаштарыбыҙға, Ҡыҙыл йылғаһына, Ирәндек түбәһенә беҙҙән күптин-күп сәләм!

Беҙҙең хәлдәргә килгәндә, тамаҡтарыбыҙ туҡ, өҫтәребеҙ бөтөн, иҫән-аманбыҙ, һеҙгә лә шуны теләйбеҙ! Саҡ менән Суғығыҙ юғалмаған, улар фашистарҙы таштар араһынан күҙәтәләр, уларҙы берәм-берәм сүпләйҙәр. Полкта беҙҙе: «Урал һунарсылары», – тип, йөрөтәләр. Әммә, танау сөйөргә ваҡыт юҡ. «Ирәндек бөркөттәре» тиһәләр, һәләк шәп булыр ине лә бит.

Беҙ алғы һыҙыҡтабыҙ, үҙебеҙ – разведчиктар, үҙебеҙ – снайперҙар. Суворов ғәскәре уҙған һуҡмаҡтан Совет һалдаттарын дошман рубежына уҙғарырға ярҙам итәбеҙ. Винтовкаларыбыҙ ауырыраҡ, әммә йыраҡ һәм төҙ ата. Таштан таҫҡа һикереп Ирәндек түбәһенә менеп өйрәнгәнгә, беҙгә Альп түбәһе ҡурҡыныс түгел. Иңдәребеҙҙә винтовка урынына уҡ-һаҙаҡтар булһа, хәтәр шәп булыр ине лә бит. Ә мылтығыбыҙ тауышы ҡаяларҙы һиҫкәндерә, дошманды уяу тота, шуныһы ғына насар...

Һеҙ унда ни эш бөтөрәһегеҙ? Олатай, һин лесхоз, тип, пилорамда ҡаймыҡҡан билең менән йөрөйһөңдөр инде, бүрәнә күтәреп. Өләсәй, һин унық биленә кейеҙ ҡайышын үҙең тағып ебәр, онота ла ҡуя!..

Өләсәй, һин йөн иләйһеңдер инде, ә әсәй, һин безгә ойоҡбаш бәйләйһеңдер, эйеме?

Атайыбыҙҙан хат киләме? Ул да беҙҙең кеүек Берлинға ашығалыр. Беҙҙең өсөн борсолмағыҙ, һалдат шинеле йылы, бутҡаһы тәмле. Ирәндегебеҙҙе ныҡ һағындыҡ шул. Бында ла бөркөттәр, саңҡып-саңҡып осалар, тик беҙҙекеләр саяраҡтар. Беҙ урынлашҡан ауылда фашистар юҡ. Венгрҙар йәшәй унда. Һөйләштәре беҙҙең телгә яҡын кеүек, йырҙары оҙон, моңло. Олатайым йырлаған йырҙы һуҙһаҡ, улар безгә ҡушылып йырларға маташалар:

«...Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй

ир-егеткәй менән ат башы...».

Их, тарих яҙырмы икән һуң Альп ташы?!.

Венгрҙар шул тиклем ихластар, ҡунаҡсылдар, уңғандар. Ауылға ҡайтһаҡ уларҙыҡынса ҡыйығыбыҙҙы ябырбыҙ, ҡапҡаларҙы күтәрербеҙ. Олатай, беләһеңме, венгр ҡыҙҙары матурҙар, зәңгәр күҙлеләр, ҡап-ҡара толомлолар! Тик беҙҙең күршекәйҙәребеҙ – Сәлимә менән Сәриә уларға ҡарағанда сибәрерәктәр, һомғолдар. Уларға беҙҙән ҡосаҡ-ҡосаҡ сәләмдәр еткерегеҙ! Был яҡтарҙың һандуғастары һағышлыраҡ һайрай, кәкүктәре һағышлыраҡ саҡыра. Нисек һағындырҙы һеҙҙең барығыҙҙы ла! Был фашистың ояһына тиҙерәк барып етеп, дөмөктөрөп, тиҙерәк ҡайтаһы ине тыуған яҡтарға.

Әсәй, өләсәй, олатай, үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, беҙҙең кеүек, иңде-иңгә терәп кенә йөрөгөҙ!.. Атайыбыҙҙы, Берлиндың үҙендә күрәсәкбеҙ, алла бирһә, күп ҡалманы.

Ауылдаштарға күп сәләмдәр еткерегеҙ. Иҫән ҡайтһаҡ, гөрләтербеҙ әле ауылды! Ирәндектең түбәһенә менеп йыр һуҙырбыҙ...

Киләһе яҙылыр хатыбыҙға тиклем хуш булығыҙ!

Йәнмырҙа менән Йәноҙаҡ уландарығыҙ.

Альп ҡаялары. Иштува (Иштуған) ауылы.

Апрель,1945 йыл.

Кәримов Д.Д., 7-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Муллағолова М.З.
Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Аскар ауылы
дөйөм белем биреү мәктәбе

БАТЫРҘАРҘАН ЯҠТЫ ЭҘ ҠАЛА
(эссе)

Һуғыштың мин ни икәнен беләм,
Ҡан ул, ут ул, үлем, яралар.
Күҙ йәштәре, ҡайғы- хәсрәт, аслыҡ.
Тол ҡатындар, йәтим балалар.
(М. Садри)

Уйҙар, уйҙар... Уйҙар менән бергә күпме хәтирәләр, иҫтәлектәр бергә үрелеп бара. Күпме уйлаһаң да осона барып сығырлыҡ, булғандарын оноторлоҡ та түгел икән был донъя ....

Мин күршем 90 йәшлек Ғибәҙуллина Ғәшиә Кәлимуллина ҡыҙының нисәмә йылдар тәҙрәһенән ҡарап, уйҙарға бирелеп ултырғанын күрәм.

– Бына тағы иҫән булғас, Аллаға шөкөр, 90-сы яҙымды ҡаршылайым. Нисә ҡышты, нисә төрлө көҙҙө, нисә төрлө йәйҙе, нисә төрлө яҙҙы күрергә тура килде. Башҡа яҙҙарҙы ныҡлап иҫләмәһәм дә, 1941 йылғы яҙҙы үҙ ғүмеремдә лә иҫемдән сығарманым.

Бына тағы гөрләп яҙҙар килә. Өйөмдөң тәҙрәһенән туп-тура ғына күренеп торған Сатыртауым тағын ҡарҙан әрселә башланы. Тау ҡарҙан асылы башлау менән «МИР» тип яҙылған таштар күренә башлай. Ошо яҙма ҡарҙан әрселә башлағас та, минең дә йөрәгемдәге ошо тарих әрселә лә. күҙ йәштәремә әүерелә.

Һуғыш... Ниндәй ауыр, ҡаһәрле, шомлы, ҡурҡыныс һүҙ ул! Ул нисә миллион кешенең ғүмерен өҙгән, күпме баланы йәтим иткән, әсәләрҙе тол ҡалдырған...

Һуғыш... Меңләгән ҡалалар емерелгән, ер йөҙенән гөрләп торған ауылдар юкка сыҡҡан, шау сәскәгә күмелгән баҡсалар янып көлгә әйләнгән.

Ул йылдарны нисек онотаһың,
Ил яҙмышы ҡылыс йөҙөндә.
Ир-егеттәр китте яу ҡырына,

© *Д.Д. Кәримов, М.З. Муллағолова, 2020*

Алып көстө тойоп үҙендә...

Беҙҙең ауылдан күпме бына тигән ир-егеттәребеҙ китте бит һуғышҡа. Ауылыбыҙҙы ҡалҡан кеүек һаҡлап торған Сатыртауға килеп хушлашмайынса, фатиха алмайынса һуғышҡа берәү ҙә китмәне. Типһә тимер өҙөрлөк баһадирҙай егеттәребеҙ: Ғималетдинов Ғәлләм Гималетдин улы, Ғәзизов Илмырҙа Ғәзиз улы, Заманов Муллабай Минибай улы, Иманғолов Шәйәхмәт Иманғол улы, Салимов Арғынбай Сәлим улы, Ханнанов Сафа Халик улы, Султанов Аҫылгәрәй улы һуғышҡа китергә хәбәр алғас, «Әйҙәгеҙ, таштан «МИР» тип яҙайыҡ, тыныслыҡ булһын, һуғыш бөтһөн, беҙҙең ҡайтҡанды көтөп торһон Сатыртау», тинеләр. Изге теләктәр теләй-теләй яҙып китһәләр ҙә, ошо ете егеттең береһенә лә тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырға насип булманы. Егеттәребеҙ ҡайта алманы, ә 75 йыл буйына улар яҙып киткән яҙма илемдә, Сатыртауымда, Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында тыныслыҡ һаҡлай.

Улар илебеҙҙе генә түгел, бөтөн донъяны фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарҙы. Һуғыш ауырлығын бөтөн ил, бөтөн халыҡ менән берҙәм күтәргәнгә генә еңеү таңын күрергә насип булды.

Нисә йылдар үтһә лә, һуғыш китергән тәрән хәсрәт, күңел яраһы онотолмай. Күпме сабый атайһыҙ, күпме әсә балаһыҙ, күпме ҡыҙҙар, күпме ҡатындар тол ҡалды ул йылдарҙа. Әле хәҙер ҙә улар юғалтҡан кешеләрен көтөп йәшәйҙәр.

Йылдар үтеү менән күп ваҡиғалар хәтерҙән онотола. Әммә беҙ тарихтағы ҡайғылы көндәрҙе онотορға тейеш түгелбеҙ.

Йылдар уҙа, донъяға яңы быуындар килә. Әммә ҡан ҡойғос һуғыштар тураһында онотορға беребеҙҙең дә хаҡыбыҙ юҡ. Азатлыҡ өсөн көрәштә ғүмерҙәре өҙөлгән батырҙарҙың иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлайыҡ. Уларҙың исеме, онотолмаҫ эштәре, яҡты маяҡ булып, быуындарҙан быуындарға күсһен! Ҡәберҙәргә, һәйкәлдәргә һуҡмаҡ өҙөлмәһен.

Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәтле йылдары йыраҡая барһа ла, кешеләр күңелендәге йәрәхәттәр, яралар һаман да төҙәлмәй. Шуға күрә был байрам – һағышлы ла, моңһоу ҙа.

Бер ваҡытта ла ерҙә һуғыштар, ҡан ҡойоуҙар булмаһын ине.

Килдебәков Э.Р., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Ғөбәйҙуллина Р.И.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө башҡорт лицей-интернаты

ЯҠТЫЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ АҠМУЛЛАҒА

Данлы башҡорт ерендә,шанлы башҡорт илендә,
Миәкәлә Тукһанбайҙа тыуып үҫкән Аҡмулла.
Әсәнән йәтим ҡалған, атаһы булған мулла.
Белем юлын ҡыуғанлыҡтан, ер-һыу гиҙгән Аҡмулла.
Әнәс, Мәнәүезтамаҡ, Ырымбур һәм Стәрлебаш,
Троицк мәҙрәсәһендә белем алған Аҡмулла.
Уҡып белем алырға башҡорт халҡын саҡырған,
Башҡорт, ҡаҙаҡ, үзбәктәрҙә балта оҫтаһы(ла) булған.
Ғәҙел һүҙле, аҡыллы, укымышлығы өсөн,
Халыҡ ҡушҡан исеме булған уның Аҡмулла.
Шиғыр һәм өләңдәрен халыҡ тиҙ отоп алған.
Ҡомһоҙ бай, наҙан мулланы тәнҡитләгән Аҡмулла.
Петропавловск, Ҡаҙағстан, Күксәтау һәм Кустанай,
Себер, Урал башҡортонда фекерҙәштәр тапҡан ул.
Ризаитдин Фәхретдин, Мөхәмәтсәлим Өмөтбай,
Шиһабетдин Мәржәни булған уның остазы.
Белем, мәғрифәт юлы яҡтылыҡҡа илтер тип,
Бар михнәттәр наҙанлыҡтан киләлер, тип уйлаған.
Аң-белемгә саҡырған сәсән телле был шағир.
Күпме йылдар үтһә лә халыҡ уны иҫкә(а)лыр.
Миәстән йыраҡ түгел Златоуст ерендә,
Бай ҡуштандары ҡулынан ғүмеркәйе өҙөлә.
Илгиҙәр тормошҡайы фажиғәле бүленә,
Миәс зыяратында аҫыл заты күмелә.
Поэтик мәктәбеңдең интернацональ көсө
Данлай бөйөклөгөңдө, мәғрифәтселегеңде.
Сатираға гражданлыҡ яңғыраш(ы) биргәнеңде,
Халыҡтарға аң-белемде тараттың, белгәнеңде.
«Башҡорттарым, укыу кәрәк!» тигән үлмәҫ һүҙҙәрең,
Оран булып яңғырайҙар бар халыҡтың телендә.
Ай, Аҡмулла, Аҡмулла, исемең ҡалды илеңдә.
Мәңге балҡыр яҡты нур һин халыҡтар күңелендә.

© *Э.Р. Килдебәков, Р.И. Ғөбәйҙуллина, 2020*

Күп халыҡтың Аҡмуллаһы-башҡорт улы Аҡмулла!
Уйҙарың да аҡ була, эштәрең дә аҡ була,
Йөҙҙәрең дә пак була, һүҙҙәрең дә хаҡ була.
Ай, Аҡмулла, Аҡмулла, ғорур рухлы Аҡмулла!!!

БАШҠОРТОСТАН
(100 йыллыҡ юбилейына арнала)

Ғәзиздәрҙән-ғәзиз, тыуған ерем!
Тамырҙарым һиңә тоташҡан.
Һинән һуттар алып мин үҫәмен
Ата-әсәм ошонда ҡауышҡан.
Атайсалым минең – Башҡортостан,
Тыуған ерем минең – күк Урал.
Һинән гүзәлерәк ерҙәр юҡтыр,
Эҙләһәң дә күпме ер урап.
Урғылып та аға йылғаларың,
Шишмәләрең аға сылтырап.
Ғорур Ағиҙелкәй аға йырлап
Зәңгәр күлдәр ята йылтырап.
Мәғрүр ҡаяларың һаҡлай һымаҡ,
Тәбиғәттең сихри хозурын.
Һандуғастар һиңә бағышлайҙар,
Йырҙарының иң-иң матурын.
Болондарҙа үҫә сәскәләрең,
Бал ҡорттарың геүләй, гөж килеп.
Ҡыңғырауҙар сыңлай, аттар саба,
Ҡолонсаҡтар уйнай деү елеп.
Яландарҙа шаулай туҡ башаҡтар,
Урмандарың һаҡлай елдәрҙән.
Башҡортостан кеүек аҫыл илдәр
Юҡтыр ҙа ул башҡа ерҙәрҙә.
Халҡым төҙөй юлдар һәм ауылдар,
Матурлана шаулы ҡалалар.
Янып эшләй,ял да итә халҡым,
Шат-бәхетле сая балалар.
Мәңге йәшә, балҡы, Тыуған илем
Данлаһындар һине улдарың.
Кәрәк булһа, йәлләмәҫтәр улар
Һулҡып торған йөрәк ҡандарын.
Йырҙарымды һеҙгә бағышланым,

Тыуған ерем минең – табынған.
Атам-әсәм, илем, телем, Ватан,
Йөрәгемә уйып яҙылған!!!

Ҡаһарманова Л.Ф., 1-се курс магистранты
БашДУ

ТӘРЖЕМӘЛӘР
(К.М. Симоновтың һуғышҡа арналған шиғырҙарына
рус теленән башҡортсаға тәржемәләр)

ЙЫЛДЫҢ ИҢ ОҘОН КӨНӨ

Болот әҫәре булмаған
Тап шул оҙон көнө йылдың,
Киләһе оҙон дүрт йылға
Барыбыҙға ҡайғы ҡылдың.
Ышанмай тере ҡалғандар
Һуғыш бөткән, юҡлығына.
Егерме, утыҙ йылдан да,
Имен-аман ҡалғанына.
Ҡағыҙ туплап, үлгәндәрҙе
Һаман эҙләй яҡындары...
Был да юҡ тип исемлеккә
Өҫтәй ваҡыт тулҡындары.

КӨТ МИНЕ

Көт мине, һәм мин ҡайтырмын,
Бары көт инде.
Көт, ямғырҙан һуң һағыштар
Баҫһа күң(е)леңде.
Өйөрөлөп ҡарҙар яуһа,
Йәйге эҫелә
Көт, кемделер *көт*мәһәләр,
Онотоп кисә.
Көт, алыҫ, урау юлдарҙан
Хаттар булмаһа,
Көт, хатта сит кешеләрҙә

© *Л.Ф. Ҡаһарманова, 2020*

Түҙем ҡалмаһа.

Көт мине, һәм мин ҡайтырмын,
Яҡшылыҡ ҡына
Теләмә, онот *инде*, тип,
Торғанға янда.
Улым, әсәйем ышанһын
Минең юҡлыҡҡа.
Дуҫтарым, көтөүҙән ялҡып,
Килһен усаҡҡа.
Иҫкә алып күтәрһендәр,
Әйҙә, шарапты.
Ә һин эсергә ашыҡма,
Көт мине бары.

Көт мине, һәм мин ҡайтырмын
Үлемгә үсле.
Көтмәгәндәр һөйләнһендәр:
«Булған ғүмере».
Ундайҙар аңламаҫтар шул
Эсенән уттың
Нисек һин көтөүең менән
Ҡотҡарып алдың.
Нисек мин тере ҡалғанмын –
Сере икәүҙең.
Башҡаларҙан айырмалы
Һин көтә белдең.

ДАН

Биш минутта епшек аҡ ҡар менән
Ҡапланды бар шинель өҫтө.
Ул тупраҡта, ҡулы менән сөйә
Хәҙер йәнһеҙ, булмаҫ көстө.

Ул бит үлек. Бер кем белмәй уны.
Ә беҙ бары ярты юлда.
Үлгәндәр данынан дәртләнәләр
Кемдәр бара әле алда.

Беҙҙә ҡырыҫ ҡына азатлыҡ бар:

Әсәне йәшкә сылатып,
Халҡыбыҙға ғүмер алабыҙ,
Йәнебеҙ, ғүмерҙе һатып.

Ҡотлобирҙина Ә., 5-се класс
Етәкселәре – башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Ғилманова З.Н.,
башланғыс класс уҡытыусыһы Ҡотлобирҙина А.Р.
Стәрлетамаҡ калаһының 5-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

БЕҘҘЕҢ ОЛАТАЙҘАРЫБЫҘ

Күптән түгел беҙҙең мәктәптә «Шәжәрә байрамы» уҙғарылғайны. Был кисәлә беҙ уҡыусыларҙы, ҡунаҡтарҙы үҙебеҙҙең ғаилә тамырҙары менән таныштырып үттек. Дәүләтгәрәйева Зарина һәм Вәлитова Светлананың олатайҙары тураһында сығыштары мине айырыуса ныҡ тетрәндерҙе. Уларҙың яҙмышы, баһалап бөтмәҫлек батырлыҡтары мине тәрән уйға һалды. Әкиәт батырҙары баһадирлығы, сикһеҙ көсө, кешелектең киләсәген үҙендең ғүмереңдән өҫтөн ҡуйыу – барыһы ла улар тураһында. Хәтер әле көслө. Яралар уңалмаған... Ә бит уйлап ҡараһаң, һуғыш бөтөүгә 75 йыл була. Эйе, халыҡ хәтере көслө. Ул тыуған иленең киләсәген һаҡлап алып ҡалыр өсөн, ләхеткә үҙ баштарын һалған батырҙарын бер ҡасан да онотмаясаҡ. Яу яланында, тылда күрһәткән батырлыҡтары тураһында уларҙың нәҫеле – шәжәрә сәскәләре һөйләгәндә, был хәлдәрҙең ысын булғанлығына шаңғып тыңлап ултыраһың.

Дәүләтгәрәйева Заринаның олатаһы мәшһүр шағирыбыҙ Мостай Кәримдең яҙмышын ҡабатлаған – Смоленск янындағы ҡаты һуғышта яраланған. Ярсыҡ уның йөрәгенә 1 сантиметр ғына барып етмәй туҡталған. Табиптар ярсыҡҡа тейергә ҡурҡҡандар, сөнки ул йөрәккә бик яҡын урынлашҡан була. Ошо ярсыҡ менән һуғыш ветераны Дәүләтгәрәйев Кинйәбай Дәүләтгәрәй улы 93 йәшкә тиклем тыуған яғы – Әлшәй районы Туҡтар ауылында йәшәй һәм бик мәғәнәле күркәм тормош юлы үтә.

Вәлитова Светлананың олатаһы Хәсәнов Сафа Хөзәм улына ла яҙмыш ауыр һуғыш йылдарын кисерергә насип итә. Йәш кенә көйө, саҡ Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеткә, 1941 йылда яңынан сафҡа баҫырға тура килә. Тыуған яғы – Стәрлебаш районы Елембәт ауылын ҡалдырып, ошо дәүерҙең барлыҡ совет йәштәре

© *Ә. Ҡотлобирҙина, З.Н. Ғилманова, А.Р. Ҡотлобирҙина, 2020*

кеүек, ҡулына ҡорал алып, Тыуған ил һағына баҫа. Кесе лейтенанттар курсын тамамлап, хәрәкәт итеүсе армияға ҡушыла, оҙон дәшһәтле һуғыш юлын аҙағынаса үтә. Күп батырлыҡтар күрһәтеп, тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Хәсәнов Сафа Хөзәм улына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Яҡташтары үҙҙәренең данлы улын онотмай – Стәрлебаш ауылының үҙәк урамдарының береһендә уға һәйкәл ҡуя. Уның тураһында китап та яҙылған. Иң мөһиме – ул халыҡ хәтерендә, яҡташтары йөрәгендә урын алған.

Минең дә тамырҙарымда батырҙар ҡаны. Мин быны менән сикһеҙ ғорурланам. Данлы яугир бабайым – Ҡотлобирҙин Ҡотдус Хөббөлислам улы һуғышҡа йәш кенә көйө китә. Ул да, Вәлитова Светлананың олатаһы кеүек, лейтенанттар әҙерләү курсын уҡып, пулемет взводы командиры вазифаһында, һуғыш юлын башлай. Үҙен батыр, тәүәккәл командир итеп таныта. Уның взводы Днепр йылғаһын дошмандарҙан аҙат итеүҙә һәм тағы бик күп алыштарҙа ҡатнаша. Бабайым күп тапҡыр яралана, ул Бөйөк Еңеүҙе лә госпиталдә ҡаршылай. Уның миҙалдары, ордендары бихисап, яуҙа күрһәткән батырлыҡтары архив документтары менән дәлилләнә. Тыныс тормошта ла бабайым үҙенең ғүмерен хәрби хеҙмәткә бағышлай. Ул Мәскәү ҡалаһында төпләнә һәм Хәрби Академияны тамамлап, полковник дәрәжәһендә отставкаға сыға.

Был хәтирәләрҙе мин тиктән генә яҙмайым. Шәжәрә байрамында һөйләгән тарихи ваҡиғалар, иҫтәлектәр беҙгә – яңы быуын вәкилдәренә ишара. Улар беҙҙе киләсәктә үҙебеҙгә нисек дөрөҫ тормош ҡорорға, ғәҙел, батыр, тырыш булырға өйрәтә. Беҙҙең тамырҙар ошо батыр ветерандарға барып тоташа бит. Беҙ – оло бәһлеүәндәр нәҫеле. Ошо яугир олатайҙарыбыҙ барыһы ла башҡорт балалары, һәм улар ниндәй батырлыҡтар эшләгәндәр! Уларҙың йөрәктәрендә башҡорт рухы, илһөйәрлек тойғоһо ни тиклем көслө булыуына хайран ҡалаһың! Ғөмүмән, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәр яугир тураһында ла был һүҙҙәрҙе әйтеп булаҙыр, тип уйлайым. Кемдәрҙеңдер батырлыҡтарын, бәлки, беҙ белмәйбеҙҙер ҙә. Шуға ла мин бөтә һалдаттар алдында баш эйәм, сөнки улар беҙгә тыныс күк аҫтында йәшәү мөмкинселеге биргән. Беҙҙең бурыс – олатайҙарҙан ҡалған мираҫты һаҡлап ҡалыу, уны үҫтереү һәм киләсәк быуынға тапшырыу!

Олатайҙар штык күтәреп баҫҡан
Ҡаршы килгән фашист танкына.
Башҡорт рухы биргән оло көскә
Тимер аттар хатта бойһона!

Яу күтәрер көстө биргән телем,
Әсә назы, атай терәген дә.
Башҡорт теле дауға өндәгән бит
Башҡорт ҡаны дөрләп йөрәгендә.

Мәңге иҫтә булыр бәһлеүәндәр:
Ятып ҡалған, кире ҡатҡандар.
Сал ветеран менән йәш егеттәр ҙә
Баҡыр һындар булып ҡатҡандар.

Һындар ғына ҡала. Хәтирәләр...
75 йыл... йәшкә – ҡайтауаз.
Ә тыныслыҡ өсөн, кешелеккә
Ваҡыт сиге быңдай бик тә аҙ.

Иҫле булһын илем, аңлы булһын.
Тетрәмәһен башҡа Еркәйем.
Олатайҙар! Һеҙ түләгән һаҡты
Онотманым. Һеҙҙе иҫләйем.

Ҡунафина А.Ю., 6-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Ҡунафина Э.С.
Ғафури районының Н.А. Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты

ОЛАТАЙЫМ

Олатайым минең һалдат булған,
Тоғро ҡалған биргән антына.
Ингән утҡа, еңгән фашисты ул,
Имен сыҡҡан яуҙан аты ла.
Һуғыш – яуыз. Күпме дуҫ-иптәшен
Олатайым яуҙа юғалтҡан.
Бирешмәгән, алға сабып барған,
Яуызлыҡҡа ҡарап ук атҡан.
«Тормош матур, ҡәҙерен белегеҙ, – тип
олатайым һыйпай башымдан. –
Эйәрҙә нык ултыр, ҡолап ҡалма,

© *А.Ю. Ҡунафина, Э.С. Ҡунафина, 2020*

Ярһып сапҡан заман атынан».

БӨЙӨК ШАҒИР

Минең яратҡан шағирым –
Мостай олатай була.
Уның шиғырҙары беҙгә,
Ышаныс һәм көс бирә.
Мин дә бөйөк шағир кеүек,
Шиғырҙар яҙғым килә.
Илемдең һәр мөйөшөн
Нурлап биҙәгем килә.

БӘХЕТ

Нимә ул бәхет? Был һорау
Һәр кемде уйға һала.
Минең өсөн ҙур һаулыҡ-
Йәшәүгә өмөт бирә.
Яҡшы уҡыу, һөнәр алыу,
Тыуған илем, халҡыма
Кәрәкле кеше булыу,
Тағы ла иң олоһо ул –
Матур, тырыш ҡыҙ булыу.

МӘҢГЕ ЙӘШӘР БАШҠОРТ ТЕЛЕМ

Мин башҡортмон. Саф башҡортса
Һөйләшәмен атай менән,
Әсәйем дә наҙлап һөйә,
Баштан һыйпап ошо телдә.
«Алтынай» тип миңә дуҫтар
Тик башҡортса өндәшәләр.
Әхирәттәр ҙә һәр ваҡыт
Саф башҡортса әйтәләр.
Ап-аҡ яуған йомшаҡ ҡар ҙа,
Төндә йөҙгән ап-аҡ ай ҙа,
Күк йөҙөндәге ҡояш та,
Үҙ телемдә серләшәләр.
Нур һибәләр, күҙ ҡыҫалар,
Минең менән шаяралар,

«Әйҙә, бергә уйнайыҡ», – тип
Шаян ҡыҙҙай һүҙ ҡушалар.
Тарихҡа бай ауылым да,
Саф күңелле халҡым да,
Минең менән һәр ваҡытта
Һөйләшәләр тик башҡортса.
Мин ғорурмын: үҙ телемдә
Гимназиям бирә белем.
Аңлап үҫәм бер телдән дә
Кәм түгелен туған телем.
Башҡортостан йәшәй икән,
Йәшәй икән Урал илем,
Ағиҙелем аға икән
Мәңге йәшәр әсә телем –
Туған телем – башҡорт телем.

Минһажева Г.И., 8-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Зәйҙуллина М.И.
Туймазы ҡалаһының 7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – КӨНӨ БАР

Башҡортостан – ҙур, бик ҡеүәтле республика. Бында бик күп милләт кешеләре йәшәй. Ошо ҙур территорияла йәшәүсе халыҡтарҙың бәхете – тыныслыҡта һәм татыулыҡта. Ә ошо халыҡтарҙың үҙенсәлеген һаҡлау өсөн, һис шикһеҙ, һәр халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, үткәнен белеп, хөрмәт итеп, тарихты онотмайынса, хаталарҙы ҡабатламайынса йәшәргә кәрәк. Әгәр халыҡ үҙ тарихын белә һәм баһалай икән, уның киләсәге лә буласаҡ. Быуаттар буйы туплап килгән зиһен көсө, рухи ҡиммәттәре һәм аҡылы хәтергә һалынып нәҫелдән-нәҫелгә күсә һәм уны туған тел аша ғына асып була.

Туған тел! Был һүҙ һәр кем өсөн дә ҡәҙерле, ғәзиз! Ул телдә кеше донъяны, уның матурлығын белә башлай. Минең туған телем – йырҙай моңло башҡорт теле. Ата-әсәбеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ, Салауаттар, Һәҙиәләр, Зәйнәптәр, Рәмиҙәр, Мостайҙар, Таңсулпандарҙың һутлы теле. Тыуғас та әсәйемдең наҙлы итеп «Балам!» тигән һүҙен туған телемдә ишеткәнмен, уға «Әсәкәйем!», тип туған телендә өндәшкәнмен. Өләсәйемдең бишек йырҙарынан, әкиәттәренән туған

© *Г.И. Минһажева, М.И. Зәйҙуллина, 2020*

телемдең матурлығын, ҡиммәтен аңлап үҫтем. Бөгөнгө көндә уны мәктәбемдә туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә тырышып өйрәнәм. Был телдә кинәнеп һөйләшәм. Ләкин ҡайһы бер класташтарым үҙ туған телендә һүҙ ҙә әйтергә ояла, урамда русса һөйләшергә маташалар, мәктәптә лә уҡытыу күпселектә рус телендә алып барыла. Уҡыусылар туған телен өйрәнмәйенсә, сит телдәрҙе өйрәнеүҙе хуп ҡуя, имтихан тапшырырға кәрәк тигән һылтау менән юғары кластарҙа рус төркөмдәренә күсә башлайҙар. Әлбиттә, был осраҡта башҡорт телен һаҡлау бик ҡыйынға төшә. Матбуғат биттәрендә, теле тапшырыуҙарҙа, ата-әсәләр сығыштарында тел мәҫәләһе буйынса һөйләшеү көнүҙәк проблема булып тора. Унда башҡорт теле дәрестәрен ҡыҫҡартыу, түңәрәктәрҙә генә өйрәнеү, йә булмаһа бөтөнләй өйрәнмәү буйынса һорауҙар күтәрелә. Минең уйымса, быларҙың береһе лә дөрөҫ түгел. Ғалимдарҙың күҙаллауҙары буйынса, әгәр ҙә бөгөнгө кимәл менән барһаҡ, башҡорт теле бөтөүгә табан бара. Телде бер ни тиклем кимәлдә һаҡлап булһа ла, ул кәрәкле кимәдә үҫешмәйәсәк, сөнки беҙ көнкүрештә ябай телмәр ҡулланабыҙ. Башҡортостаныбыҙҙың тарихын да, шәхестәрен дә өйрәнеп етә алмаясабыҙ һәм нисәмә йылдар уҡылып килгән китаптар китапханаларҙа саңға күмелеп ятасаҡ. Яңы әҫәрҙәр тураһында уй ҙа булмаясаҡ. Был яңы кинофильмдарға ла, шиғырҙарға һәм сәнғәт өлкәһенә лә ҡағыла. Әгәр беҙ үҙебеҙҙе, еребеҙҙе, тарихыбыҙҙы хөрмәт итәбеҙ икән, был хәлгә юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Сөнки беҙ, башҡорттар, телебеҙҙе үҙебеҙ ҡәҙерләмәһәк, беҙҙе кем хөрмәтләр?

Нимә эшләргә һуң? Әлбиттә, милләтебеҙҙе юғалтмаҫ өсөн беҙ иң тәүҙә ғаиләлә башҡортса һөйләшергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә рәхәтләнеп башҡортса аралашабыҙ, башҡортса гәзит-журналдар уҡыйбыҙ, башҡорт фильмдарын ҡарап, кесе йәштәге балаларҙы башҡортса йәнһүрәттәр, башҡортса тапшырыуҙар аша тәрбиәләйбеҙ икән, беҙҙең телебеҙҙең киләсәге буласаҡ.

Беҙ үҙ илебеҙҙә, үҙ еребеҙҙә ҡурҡмайынса башҡорт телендә һөйләшәйек. Башҡортса һөйләшмәһәк, башҡорт китаптарын уҡымаһаҡ, мәҙәниәтебеҙҙе белмәһәк, үҙебеҙҙе тыуған еребеҙҙең патриоты тип ауыҙ тултырып әйтә алмаясаҡбыҙ. Кешенең иң изге хистәренең береһе – туған телгә ғәмле, хөрмәтле булыу. Теле барҙың – көнө бар. Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр!

Һүҙемдең аҙағында бөтә кешеләргә лә Ирек Кинйәбулатовтың шиғри юлдары менән өндәшкем килә:

... Яҙмышыбыҙ – тел яҙмышы,
Беләм уның хаҡында:
Әгәр телем йәшәй икән,

Йәшәйәсәк халҡым да.

Петрова Р.А., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Солтанғолова Р.Р.
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты

БАШҠОРТ ТЕЛЕ
(хикәйә)

Йәйге каникул көндәрендә бик ҡыҙыҡлы ваҡиғаның шаһиты булырға тура килде. Бөтә ғаиләбеҙ менән Франциянан ҡунаҡтар ҡаршыларға әҙерләндек.

Атайымдың бер туғаны Мәүлит бабайым менән Миләүшә инәйемдең ҡайтыуы минең өсөн ҙур шатлыҡ булды. Эйе, туғандарыбыҙ менән кәрәҙле телефон, скайп аша аралашып торабыҙ. Туғандарыбыҙ ауылыбыҙға утыҙ йыл ҡайтмаған, шуға күрәлер улар үҙ телендә бик ауыр аралаша. Улар июль айында ҡайтып төштөләр. Бер-ике көн үтеүгә, Мәүлит бабайым менән инәйемде эйәртеп Көйөргәҙе буйына алып төшөп киттем. Ҡунаҡтарым иҫтәре китеп тирә-яҡ тәбиғәткә һоҡланды, ҡырағай ҡарағат ашап кинәнделәр, һыу инеп тә алдылар. Туғайлыҡта ишетелгән моңло йыр беҙҙе һағайтып ебәрҙе, оло кеше йырлай, кем булыр икән? Аяҡтарҙы һаҡ ҡына баҫып алға ыкталдым, аҡлан уртаһындағы йәм-йәшел үлән өҫтөндә ултырышҡан инәйҙәрҙе, кескәй балаларҙы күргәс, ҡыҙыҡһыныуым тағы ла артты. Эй, үҙебеҙҙең урам инәйҙәре икән дә баһа. Милли кейемдәрен кейеп алған Ғәлимә, Аҡйондоҙ әбейҙәр, Кәримә инәй менән Фатима апай, тағы ла үҙебеҙҙең мәктәп укыусылары. Иҫемә төштө, кисә генә күрше Кәримә инәй: – Ямғыр теләү йолаһын балаларға күрһәтәбеҙ, йолаларыбыҙҙы белеп үҫһендәр, – ти ине. Шатлығымдан ҡыҫҡырып ебәрҙем:

– Мәүлит бабай, Миләүшә инәй, әйҙәгеҙ, тиҙерәк килегеҙ, шәп байрамға эләктек бит!

Беҙҙең яҡынлашып килеүебеҙҙе күргәс, балалар ҙа, инәйҙәр ҙә шатланып киттеләр, ҡулдарын болғай-болғай беҙҙе саҡырып алдылар. Инәйҙәр ямғыр теләү йолаһын атҡарҙылар, изге доғаларын укып, юғары көстән ямғыр яуыуын һоранылар. Еҙ самауыр ҡайнап сығыуға барыбыҙ ҙа сәй эсергә ултырҙыҡ. Мәүлит бабайым ауылдаштары менән күрешеүгә бик шатланды, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтмәһә лә инәйҙәр менән иҫе

© *Р.А. Петрова, Р.Р. Солтанғолова, 2020*

китеп башҡорт телендә һөйләште, уларға ҡушылып йырлап та алды. Тик бабайымдың күҙҙәре генә моңһоуланды. Кәримә инәй Мәүлит бабайыма үҙенең ҡыҙыҡһындырған һорауын бирмәй ҡала алманы:

– Мәүлит, Америкала мәңгелеккә тороп ҡалмайһыңдыр бит инде, ауылға күсеп ҡайтырға уйың юҡмы?

Мәүлит бабайым һорауға яуап ҡайтарырға теләп, моңһоу ҡараштарын алыҫтан күгәреп күренгән тауҙарға төбәне:

– Ҡайтабыҙ, әле бына ауылдан йорт һатып алырға һөйләштек, сит ерҙәр үҙ ереӊ, сит тел үҙ телеӊ була алмай, ҡайһылай һағынғанмын башҡорт телен! Һеҙҙең һәр әйткән һүҙегеҙҙән ынйы бөртөгө тама кеүек. Эйе, күпме көттөм мин ошо мәлде. Ғүмер буйы яҡташым, яҡын туғаным, шағир Баязит Бикбайҙың «Туған тел» шиғыры иҫемдән сыҡманы, яттан һөйләй-һөйләй йоҡлап киткән саҡтарым да булды, – тип һүҙен тамамланы ул.

Эйе, сит ерҙең гөлөнән үҙ ереңдең дегәнәге лә артыҡ шул...

Рәхимова Э., 8-се класс
Етәксеһе – башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Ғәббәсов Р.М.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 12-се һанлы лицей

РӘМИ ҒАРИПОВТЫҢ «ТУҒАН ТЕЛ» ШИҒЫРЫ БУЙЫНСА ИНША

Кешеләр донъяла меңләгән телдә һөйләшә. Улар ниндәй генә телдә һөйләшмәһендәр, әммә туған телдән дә яҡыныраҡ та һәм яғымлыраҡ та башҡа телде таба алмаç. Минең туған телем – башҡорт теле, телем «әннә», «әттә» тигән һүҙҙәр менән асылған. Ошо һүҙҙәр миңә тел асҡысына әүерелгән. Шуға ла хәҙер инде үҙ телемдә рәхәтләнеп һөйләшәм, укыйым, йырҙар йырлайым. Бөгөнгө иншамды ла Рәми Ғариповтың «Туған тел» шиғырына бағышлап, кинәнеп әсәм телендә яҙам.

Был шиғырын Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов 1957 йылда яҙған. Алтмыш йылдан ашыу элек яҙылған «Туған тел» шиғыры әлеге ваҡытта ла әһәмиәтен юғалтмай.

«Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да – йәнле ынйыларҙан

© *Э. Рәхимова, Р.М. Ғәббәсова, 2020*

Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын», – тигән шиғри юлдары менән шағир халҡыбыҙҙың боронғо шөғөлө – умартасылыҡ менән башлап ебәрә. Бал ҡорттары нисек егәрле булһа, халҡым да шундай тырыш һәм эшсән. Уның ҡулынан килмәгән эш юҡ, һәр яҡлап булдыҡлы булып ҡала. Шағир ошо шиғри юлдарына, бал ҡорттарындай, һүҙҙәрҙең иң тәмлеләрен генә һайлап яҙған.

«Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:

Бер телдән дә телем кәм түгел –

Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,

Кәм күрер тик уны кәм күңел!..» – тип дауам итә шиғырын Рәми Ғарипов. Ҡарап торған да ябай ғына шиғри юлдар. Ләкин йөкмәткеһенә күҙ һалһаң, унда кеше ҡосағы етмәҫлек, диңгеҙҙәрҙән дә тәрәнерәк, Урал тауҙарынан да бейегерәк, йыһан киңлектәренән дә киңерәк мәғәнә һалынған. Минең башҡорт телем дә, башҡа Рәсәй халыҡтары теле һымаҡ, бөйөк тә, юғары ла. Шуның өсөн дә телемдең бөгөнгөһө уның юғары кимәлдә тороуын күрһәтә. Телем, рус теле менән бер рәттән, Башҡортостанда дәүләт теле итеп иғлан ителгән. Тимәк, шағир әйтеүенсә, ул – көслө лә, бай ҙа, яғымлы ла. Дәүләт теле статусына эйә булыуҙа телемә күпме бәхәстәр, күпме низағтар күрергә, күпме йәберләүҙәргә дусар булырға тура килгән. Кәм күңелле бәндәләргә телемде юҡ итеү, кәм күреү бәхете теймәне. Шуның өсөн дә Башҡортостаным – гөлбөстаным күгендә үҙ флагы елберҙәй, төрлө тарафтарға үҙ гимны яңғырай, батыр Салауаты кәүҙәләндерелгән сағыу гербы ла бар. Үткән быуаттың урталарында Рәми Ғарипов ижад иткән «Туған тел» шиғыры егерме биш йылдан ашыу тантана итеүен дауам итә, халҡыма йәшәүгә дәрт өҫтәп алға вә алға әйҙәй.

Бөйөк шағирыбыҙ ошолар тураһында киләһе шиғри юлдарында ҡыйыу һәм үткер һүҙҙәре менән бәйән иткән:

«Халҡым теле – миңә хаҡлыҡ теле,

Унан башҡа минең илем юҡ

Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,

Иле юҡтың ғына теле юҡ!»

Ысынлап та, Рәсәйҙең башҡа республикалары араһында Башҡортостаным беренселәрҙән булып мөстәҡиллек яулап дәүләтселек нигеҙҙәрен төҙөнө. Һәм республика етәкселегенең дөрөҫ йүнәлештә аҡыллы сәйәсәт эш итеүе арҡаһында халҡым киң күкрәген киреп ғорур йәшәүен дауам итә.

«Әсәм теле миңә – сәсән теле,

Унан башҡа минең халҡым юҡ,

Йөрәгендә халҡы булмағандың

Кеше булырға ла хаҡы юҡ!»

Шағирҙың «Туған тел» шиғырының һәр бер һүҙе, һәр бер юлы тәрән һәм төплө мәғәнәгә эйә. Был шиғыр туған телгә, Ватанға, Башҡортостанға ҡарата һөйөү, башҡорт милләтенә ҡарата хөрмәт тәрбиәләй. Рәми Ғарипов үҙен башта бал ҡортондай ынйыы йыйыусы итеп күрһәтһә, шиғыр аҙағында башҡорт халҡы итеп кәүҙәләндерә.

Шиғырҙы уҡығанда алыҫ-алыҫтан башҡорт халыҡ йыры, сәсәндәр зары, әсә моңо ишетелә һымаҡ. Бигерәк тә шағирҙың:

«Әсәм теле миңә — сәсән теле,

Унан башҡа минең халҡым юҡ...» – тигән һүҙҙәре күңелгә үтеп инә. Эйе, телем йәшәй, тимәк, илем дә йәшәй һәм йәшәйәсәк! Ошо шиғри юлдар шағирҙы Ватанының ысын патриоты, Тыуған иленең ысын улы икәнлеген күрһәтә, ә шиғыр үҙе уҡыусыларҙа илһөйәр тойғолары тәрбиәләй. Шуның өсөн Рәми Ғарипов шиғырҙың икенсе, өсөнсө, дүртенсе куплеттарын өндәү билдәһе менән тамамлай.

Поэтик әҫәрҙең шиғри юлдары «ҡанатлы» булып китте:

«Әсәм теле – сәсән теле»,

«Халҡым теле – миңә хаҡлыҡ теле,

Унан башҡа минең илем юҡ».

Уларҙы гәзиттәрҙең беренсе битендәге өндәү юлдарында, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарындағы плакаттарҙа күрергә мөмкин. Йөкмәткеһе менән шиғыр тәрән философик һәм әхлаҡи мәғәнәгә эйә. Шағир туған телде «көслө», «бай», «яғымлы» кеүек эпитеттары ярҙамында һүрәтләй. Ә шиғырҙы Рәми Ғарипов шундай юлдар менән тамамлай:

«Йөрәгендә халҡы булмағандың

Кеше булырға ла хаҡы юҡ!»

Ошонда, минеңсә, әҫәрҙең төп идеяһы сағыла. «Туған тел» шиғырының һәр юлы матур мәрйенгә теҙелгән ынйыға тиң. Шуға ла был шиғырҙы халыҡ шағиры Рәми Ғарипов беҙгә, ғорур башҡорт халҡына, киләсәк быуынға мираҫ итеп ҡалдырған.

Сафина Г.С., 8-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Вәлиева Ә.С.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 20-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ОЛАТАЙЫМА ХАТ

Ҡәҙерле, һөйөклө олатайым... Бына инде һуғыш бөткәнгә 75 йыл... Олатайым, һине бер ҡасан да күргәнем булмаһа ла, мин һине бик ныҡ яратам, һинең менән ысын күңелдән ғорурланам. 1941-1945 йылдарҙағы ҡурҡыныс һуғыш ваҡиғаларын, үҙеңдең тормош сәхифәләренең күпмелер өлөшөн һөйләгәндәреңде мин атайым, атайымдың атаһы – олатайым аша ғына беләм, белгәндәремде ҡәҙерләп кенә яҙып һаҡлайым. Еңеү еңел бирелмәгәнен беҙ, балалар, оноторға тейеш түгел.

Олатайым, һуғышҡа кергәндә һиңә ни бары 17 йәш кенә булған. Уға тиклем әле ауыл мәктәбендә йәш уҡытыусы булып эшләп, аҙаҡ әрмелә хеҙмәт итеп, әрменән һуң тура һуғышҡа китәһең. Йәш кенә көйө һин үҙ иңдәреңә ҙур яуаплылыҡ алғанһың. Матур ваҡыт, күңелдәрең иләҫ-миләҫ кенә саҡта снарядтар ярсығы, бомбалар шартлауы аҫтында Тыуған илең, тыуған ереӊ, халҡың өсөн йән атҡанһың, немец илбаҫарҙарына ҡаршы көрәшкә сыҡҡанһың. Көндөҙ ҙә, төндәрен дә һеҙгә һуғышты дауам итергә, фронтты тоторға, ышанып тапшырылған һуғыш ҡоралын ҡулыңдан ысҡындырмай фашистарға ҡаршы туктауһыҙ яуап уты яуҙырырға кәрәк була.

Һуғыштың башынан алып аҙағына тиклем, еңеүгә тиклем бара минең олатайым. 1943 йылда 467-се гвардияла миномет полкында, 1944 йылда 323-сө Ҡыҙыл байраҡлы Брянск дивизияһында, 1945 йылда 1402-се артеллерия полкында һуғышып, еңеүгә килеп еткән. 1946 йылда ла әле ул Алыҫ Көнсығыш хәрби округының 66-сы айырым батальонында хеҙмәт итә.

Һуғыш ваҡытында атакаға барғанда, олатайымдың эргәһендә снаряд шартлап, аяғы ҡаты яралана. Шул ваҡытта, янында йүгереп барған һалдаттың да башы өҙөлөп осҡан... «Аяғымдың онталғанын да һиҙмәй, шул иптәштең башын алып кәүҙәһенә ҡуйып ҡарайым. Иҫемде юғалтҡанмын ... Иҫемә килгәс, фронтты ҡыуып етер өсөн өс көн, өс төн үлән, емеш-еләк ашап, күләүектән һыу эсеп, шыуышып барҙым. Иҫтән яҙып ятҡан саҡта һалдаттар табып, госпиталгә оҙатҡандар», –

© *Г.С. Сафина, Ә.С. Вәлиева, 2020*

тип һөйләгән олатайым. Һауыҡҡас, ул тағы ла һуғышҡа китә. Кёнинсберг, Трутенау, Зидлунг ҡалаларын алыуҙа ла ҡатнаша.

Олатайымды фронтташтары «Урал һандуғасы» тип йөрөткәндәр, сөнки ул гел йырлап йөрөгән, гармунда ла өҙҙөрөп уйнаған.

Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул ике Ҡыҙыл йондоҙ ордены, дүрт «Батырлыҡ өсөн» («За Отвагу») миҙалдары менән бүләкләнгән.

Һуғыштан иҫән-һау ҡайтыуыңа ҡыуанам, олатай. Ҡайтып, өйләнеп, алты балаға ғүмер биргәнһең, уларҙы яҡшы итеп тәрбиәләп, белемле иткәнһең. Һуғышта алған яраларың һыҙлап, ҡаҡшаған һаулығың менән яфаланыуың үткән һуғыш юлын иҫләтеп торғандыр ҙа, бәлки, шуғалыр ҙа һин һуғыш тураһында һөйләргә яратмағанһыңдыр.

Беҙҙең быуын ветерандарҙы, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ысын патриоттарҙы күреп ҡалыусы һуңғы быуындыр. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, хәҙерге йәш быуын вәкилдәре уларҙың батырлыҡтарының бөйөклөгөн, әһәмиәтен аңлап бөтмәйҙәр. Улар өсөн геройҙар бик тар мәғәнәлә – мультфильм геройҙары, хәҙерге заман фильмдары геройҙары булып ҡабул ителә.

Ә минең өсөн ысын герой һин – олатайым! Һинең тормошоң – үрнәк булырлыҡ! Һинең хәтирәләреңде, күрһәткән батырлыҡтарыңды мәктәбемдә лә, өйҙә лә һөйләйем, һеңле-ҡустыларымдың да күңелдәренә һалырға тырышам. Беҙ, йәш быуын вәкилдәре, ветерандарыбыҙ, олатайҙарыбыҙҙың үлемһеҙ батырлыҡтарын ҡәҙер итергә, һулаған һауабыҙ, һәр бер яҡты көнөбөҙ, ошо иректе, матур, бәхетле тормошта йәшәүебеҙ өсөн уларға рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

Ҡәҙерле олатайым, үҙем тураһында ла яҙып үтәйем. Мин һинең дүртенсе быуын ебен дауам итеүсе ейәнсәрең булам. Исемем – Гөлназ. Рус мәктәбендә уҡыһам да үҙ телемде онотмайым – башҡорт телен ныҡлы өйрәнәм. 8-се класта уҡыйым, яҡшы билдәләргә генә өлгәшәм. Класс, йәмғиәт эштәрендә лә актив ҡатнашырға тырышам, өйҙә атай-әсәйемә лә ярҙам итәм. Мине бәләкәйҙән атай-әсәйем ярҙамсыл, яҡшы кеше булырға өндәнеләр. Изгелеккә ынтылып, булғандың ҡәҙерен белеп йәшәргә өйрәтәләр. Был тәрбиә һинән дә килә лер, олатайым. Һин дә бит кешегә ярҙамсыл, ябай, оҫта ҡуллы булғанһың. Һине бар ерҙә лә ихтирам итеп, ололап торғандар.

Һинең менән ғорурланам, олатайым! Һинең турала бөтә белгәндәремде мин үҙемдең балаларыма ла еткерәсәкмен. Улар ҙа минең кеүек ғорурлыҡ тойғоһо кисерерҙәр. Һинең һуғышта күрһәткән батырлыҡтарың мәңгегә беҙҙең күңелдә ҡалыр, ҙур иҫтәлек булып...

Рәхмәт, олатай, Еңеү өсөн! Һин мәңгегә минең күңелемдә һәм йөрәгемдә.

Һине яратыусы Гөлназ ейәнсәрең.

Сәләмова А.И., 11-се класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Вәлиева А.Р.
Әлшәй районы Раевка ауылының М. Буранғолов исемендәге башҡорт лицейы

ТИК КӨСЛӨЛӘР ҒҮМЕРҘӘРҘЕҢ ҺӘР МИҘГЕЛЕН ЙЫР ИТӘ

Ул ғәҙәттәгесә, таң һарыһы менән уянды. Тәҙрә пәрҙәләрен асып, тышҡа күҙ һалды. Бәй, әле кистән генә күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғы ине, төндә ҡар яуып, тирә-яҡ ап-аҡ юрғанға төрөнгән. Уның ғүмерендә тағы ла бер көн үтеп китте. Шул турала уйлай-уйлай, ул эшкә йыйына башланы. Ләкин ниндәйҙер бер тойғо туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Шул саҡта ғына Мәрфүғә хаҡлы ялда икәнлеген иҫенә төшөрҙө…

Ябай ауыл ҡатыны. «Ҡулынан да килә, теленән дә килә», тиҙәр уның кеүек кешеләр тураһында. Күпте күрергә, күпте кисергә тура килә уға. Мәктәпте тамамлаған ваҡытта ҡыҙыҡай ҙа йәштәштәре кеүек киләсәккә яҡты хыялдар ҡора. Тик яҡшы билдәләренә генә өлгәшкән уҡыусыға уҡытыусылары ла яҡты юл юрай. Ләкин көтмәгәндә барыһы ла селпәрәмә килә. Мәрфүғәнең атаһы донъя ҡуя, береһенән-береһе бәләкәй һигеҙ бала етем ҡала. Ҡыҙ, ғаиләлә олоһо булараҡ, туғандарын ҡарауҙы үҙ өҫтөнә алып, әсәһенә ныҡлы терәккә әйләнә. Мотлаҡ юғары уҡыу йортонда белем алырға тейеш Мәрфүғә ауыл фермаһына һауынсы булып эшкә бара.

Кистәрен бик ныҡ арып ҡайтыуына ҡарамаҫтан, имтихандарға әҙерләнә ул. Тиҙҙән ситтән тороп Аксен ауыл хужалығы техникумына, зоотехния һөнәре буйынса уҡырға инә. Эшендә лә көндән-көн оҫтара бара Мәрфүғә, юғары һауымдарға өлгәшә, коллективта абруй ҡаҙана. Хеҙмәт һөйөүсән, тәүәккәл һәм үтә лә талапсан ҡыҙ эште яйға һалыр тип колхоз идараһы уны ферма мөдире итеп ҡуйырға тәкдим итә. Ун туғыҙ йәшлек һылыу етмешкә яҡын эшсегә, етмәһә, үҙенән күпкә өлкән һауынсы апайҙарына, малсыларға етәкселек итә башлай.

© *А.И. Сәләмова, А.Р. Вәлиева, 2020*

Ҡыҙ ҙур теләк һәм дәрт менән яңы эшкә тотона. Үҙ бурыстарын еренә еткереп башҡарған етәксе башҡаларҙан да шуны уҡ талап итә. Уңыш оҙаҡ көттөрмәй. Артта ҡалған ферма әкренләп алға сыға, һауымдар, малдар һаны арта. Ауылдаштары йәш ферма мөдирен ауыл Советына депутат итеп күрһәтә.

Мәрфүғә Тәүәтәй фермаһын алдынғылыҡҡа сығарған осорҙа, мәктәптә ҡыҙға йәшереп кенә хаттар яҙған Ҡыпсаҡ-Асҡар егете Мөнир Шәйхетдинов Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Хәҙер инде ул оялсан малай түгел, ә тәбиғәт тарафынан бирелгән моңло тауышы менән күптәрҙең күңелен яулаған һомғол буйлы, баһадир егет. Ҡайнар хис-тойғолары ваҡыт һынауын үткән йәштәр өйләнешә.

Йәш ғаилә Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында төпләнә. Мәрфүғә район хужалыҡтары араһында бар эш күрһәткестәре буйынса ла беренсе рәткә сыҡҡан Тәүәтәй фермаһынан китергә мәжбүр була. Тирә-яҡҡа даны таралып өлгөргән йәш белгесте бында ла колхозды артҡа һөйрәгән фермаһына етәкселек итергә саҡыралар. Мәрфүғә Йәлил ҡыҙы Шәйхетдинованың өс тиҫтә ғүмере тап ошонда, тынғыһыҙ хеҙмәттә үтә. Ул етәкләгән ферма районда ғына түгел, бар Башҡортостанда билдәлелек яулай.

Республиканың башҡа фермалары араһында күп тапҡыр еңеү яулаған комсомол-йәштәр бригадаһы һәм уның мөдире тураһында гәзит-журналдарға яҙалар, радио һәм телевидениеға төшөрәләр. Тәжрибә уртаҡлашыр өсөн бында күрше ауылдарҙан ғына түгел, башҡа райондарҙан да киләләр. Ҡыпсаҡ-Асҡар һауынсылары үҙҙәренең юғары хеҙмәт күрһәткестәре өсөн ҡиммәтле бүләктәр, шифаханаларға, сит илдәргә путевкалар менән бүләкләнә. Һәр малсы яҡшы хеҙмәт хаҡы алып берҙәм, ярышып эшләй. Мәрфүғә Йәлил ҡыҙына «Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған малсыһы» тигән маҡтаулы исем бирелә, ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән бүләкләнә, КПСС-тың XXVII съезына делегат итеп һайлана. Депутат булараҡ та, оҙаҡ йылдар ҙур йәмәғәт эше алып бара. Бер юлы бер нисә райондың хеҙмәт коллективы уны СССР-ҙың халыҡ депутатлығына кандидат итеп күрһәтә.

Хеҙмәттә уңыштарға өлгәшеп, тыныс ҡына донъя көткәндә яҙмыш уға оло һынау ебәрә. Бергәләшеп донъя ҡорған, балалар үҫтергән, ғаиләнең ныҡлы тераге, клуб сәхнәләрендә күңелдәргә үтеп инерлек моңло тауышы менән күптәрҙе һоҡландырған һөйөклө тормош иптәше бәләгә тарый. Типһә тимер өҙөрлөк ир көтмәгәндә ғәрип булып ҡала. Ләкин Мәрфүғә ҡайғынан бөгөлөп төшмәй, ятраҡан кешеһен иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап ала. Сөнки ҡыйынлыҡтарҙы бергәләп кенә еңеп сығасаҡтарына бөтә күңеле менән ышана ул. Мәрфүғәнең тырышлығы менән ире яйлап аяҡҡа баҫа башлай.

Ғүмер итеү – йылға кисеү түгел, был һүҙҙәрҙе Мәрфүғә Йәлил ҡыҙы бик яҡшы аңлай. Тормошонда көслө ханымдың төрлө хәлдәр була, ләкин ул ғүмеренең һәр миҙгелен йырға тиңләй. Ниндәй генә юғары исем бирһәләр ҙә, ул ябай башҡорт ҡатыны булып ҡала. Мәскәү Кремлендә абруйлы кешеләр менән дә, фермала ябай малсылар менән дә аралаша белде ул. Һәр ваҡыт ваҡиғалар уртаһында, халыҡ араһында була, бөгөн дә улар менән йәшәй, ҡайғы-шатлыҡтарын бүлешә. Шуның өсөн дә ауылдаштары уны ихтирам итә. Хеҙмәт барҙа, хөрмәт бар, тип бик дөрөҫ әйткән боронғолар.

Усманов Ф.И., 7-се класс
Етәкселәре – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Тимерғәлиева Р.Х., тарих уҡытыусыһы Шартдинова Ф.М.
Беренсе Иҫке Балтас урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ҺУҒЫШ ҠАТЫН-ҠЫҘ ЗАТЫНАН ТҮГЕЛ…

Минең тыуған Балтас ауылында, үҙәк майҙанда, халҡымдың фашистик Германияны Бөйөк еңеүе хөрмәтенә мемориаль һәйкәл төҙөлдө. Мемориаль үҙәгендә – һағышлы-әсә ҡатын-ҡыҙ фигураһы, ә уның артында – мәрмәр таҡталарҙа беҙҙең райондан һуғышҡа киткән һәм һәләк булған кешеләр исемлеге. Был мемориал комплекстың иҫтәлекле таҡтаһында нигеҙҙә ир-ат исемдәре исемлеге, ә һәйкәлдә үҙәк фигура – ҡатын-ҡыҙ. Ни өсөн?

Ҡатын-ҡыҙҙар. Был яғымлы, матур, йомшаҡ һүҙҙе ишетеп, һәр ваҡыт тыуған йорт, йылылыҡ, төрлө тәмле әйберҙәр, туғандар, яҡын кешеләр тураһында һәм, иң элек, әсәй тураһында уйлайһың. Һине һәр саҡ яратҡан, һәр саҡ аңлаған һәм, әгәр кәрәк булһа, әрләгән, әммә һәр саҡ хуплап, үҙ яурындарын ҡуйған Әсәй тураһында. Ҡатын-ҡыҙ уҡытыусы ла, табип һәм, хатта, космонавт та була ала, әммә Әсәй, минең ҡарашҡа, ҡатын-ҡыҙ булыуы менән бөйөк. Ҡатын-ҡыҙ һәм тормош – был төшөнсәләр бер-береһе менән айырылғыһыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙар беҙгә ғүмер бирә, һаҡлай һәм яҡлай. Быны тарих та иҫбатлай, сөнки һәр заманда ҡатын-ҡыҙҙар бала үҫтереп кенә, улын, ирен, туғандарын һуғышҡа оҙатып ҡына ҡалмағандар, ауыр минуттарҙа улар менән бергә булғандар.

Ҡатын-ҡыҙҙар борон-борондан, граждандар һуғышының Ҡыҙыл армия сафында, күпселектә, шәфҡәт туташы булғандар. Ә күп ҡатын-

© *Ф.И. Усманов, Р.Х. Тимерғәлиева, Ф.М. Шартдинова, 2020*

ҡыҙҙарға XX быуаттың иң ҡурҡыныс һуғышы һалдаттары булырға тура килә. Бөтә Европа буйлап, уны буйһондороп, фашистар үтә. Уларҙа меңләгән пушкалар, танктар һәм самолеттар. Улар ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ҡарттарҙы, балаларҙы һәм яралыларҙы аталар, аҫалар, яндыралар, ағыулайҙар. Дошман Совет Рәсәйенә юлдар еңел булыр тип иҫәпләй. Тик улар уйлағанса килеп сыҡмай. Беҙҙең ерҙең бөтә ерендә лә фронт үтә – алғы һыҙыҡта ла һәм алыҫ тылда ла. Бөтәһе лә һуғыша – ир-аттар, ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡотҡарыусы, яраларҙы бәйләүсе генә түгел, атыусы ла, «төҙ атыусы ла», бомбаға тотоусы ла, күпер шартлатыусы ла, разведкаға йөрөүсе лә, «тел» алыусы ла. Тәбиғәттә тормош яратылмышы булған ҡатын-ҡыҙҙар – үлтереүсе. Ҡанһыҙлыҡ менән уның еренә, уның өйөнә, уның балаларына ябырылған дошманды үлтерә. «Үлтереү – ҡатын-ҡыҙ эше түгел», – тине һуғышта ҡатнашыусыларҙың береһе. Икенсеһе рейхстаг стенаһына былай тип яҙған: «...Берлинға һуғышты үлтерер өсөн килдем». Шулай булғас, улар ниндәй була һуң?

Үҙ ерҙәрен, үҙ халҡын фашистарҙан һаҡлаусы иң матур, нескә күңелле, яғымлы һәм шул уҡ ваҡытта көслө, батыр, ҡыйыу ҡатын-ҡыҙҙар араһында беҙҙең райондаштар ҙа бар. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылағанда беҙ, минең менән бергә класташым, проекттар өҫтөндә эшләп, «Бөйөк Ватан һуғышы осоронда беҙҙең районда ҡатын-ҡыҙҙар» темаһы буйынса күп кенә материалдар тупланыҡ: был һуғышта ҡатнашҡан беҙҙең район ҡатын-ҡыҙҙарының тулы исемлеген төҙөнөк, улар тураһында фронттағы һәм тыныс тормоштары хаҡында мәғлүмәттәр йыйҙыҡ.

Беҙҙең Балтас ере 87-90 ҡатын-ҡыҙҙы һуғышҡа оҙатҡан. Төрлө сығанаҡтарҙағы – район хәрби комиссариаты һәм район архивы – документтарҙы өйрәнеп, беҙ был мәғлүмәтте үҙгәртеп, 106 тиклем арттырҙыҡ. Уларҙың хеҙмәт, фронт, тормош юлын өйрәндек. Уларҙың хәтирәләрен, улар тураһында хикәйәләрҙе тыңлау, фронттағы гәзит яҙмаларын, хәрби һәм тыныс ваҡыттағы журналдарҙы уҡыу бик тулҡынландырғыс булды. Шул материалдарҙы өйрәнгәндә күҙ йәшен тыйып булмағандары менән уртаҡлашырға рөхсәт итегеҙ.

Фазылбәкова (Шәрипова) Мөнәүәрә, Иҫке Ураҙай ауыл биләмәһенән саҡырыла. Фельдшер һөнәрен ала, эш тәжрибәһе була, уның әһәмиәтен аңлай, һәм, хатта, үҙенең халыҡ менән үҙ азатлығы өсөн бөйөк һуғышта ҡатнашырға кәрәклеген белдереп, күп тапҡыр район военкоматына мөрәжәғәт итә һәм фронтҡа китә. Ул тыуған еренә еңеү менән ҡайтыуына ышана. Әммә ҡайтырға насип булмай уға. Егермеһе лә тулыр-тулмаҫтан, Фазылбәкова Мөнәүәрә батырҙарса һәләк була. Туғандарына уның тураһында А. Кулагина хатында былай

тип хәбәр итә: «Ростов янындағы Скацерк ауылы янында, 1942 йылдың 25 август көнөндә һуғыш яланынан яралыларҙы алып, инде үлгән пулеметсы Павел Васильчиковҡа ярҙам күрһәтергә тырышҡанда, уның алдында немец танкыһы – юлбарыҫ күренде. Танк туранан-тура яралылар ятҡан ергә бара ине. Оҙаҡ уйлап тормай, пулемет янында ятҡан гранатаны алып, танк аҫтына ташлана, башҡаларҙы ҡотҡара. »

Тағы ла геройҙарыбыҙ – фашист концлагеры әсирҙәре. Зайдуллина Нурания Хәйрулла ҡыҙы, Текән ауылында тыуған. 1945 йылдың 27 ғинуарында совет ғәскәрҙәре Польшалағы Освенцимды азат иткәндән һуң һул ҡулындағы 77997 номерлы тамға менән әйләнеп ҡайта. Нурғәлиева Йәннәт Солтанғәли ҡыҙы Үрге Ҡарыш ауылынан, Германияның Равенсбрюк концлагеры крематорияһынан ҡотолоп, 1946 йылдың ноябрендә генә ҡайта. Улар беҙгә тормоштарындағы ҡурҡыныс осор тураһында хәтирәләрен көндәлектәрендә яҙып ҡалдырғандар. Беҙ уларҙың көндәлектәрен китап итеп эшләнек. Улар менән минең башҡа йәштәштәрем дә таныша ала .

Ғәниҙә Миңлевәли ҡыҙы, Түбән Сикияҙ ауылында тыуған, илен яҡлап, хәбәрһеҙ юғалған һөйгәне өсөн дошмандан үс алыу теләге менән фронтҡа китә. Ул Сталинград, Курск дуғаһы, Днепр кисеүе, Черкасск ерҙәре, Польшаның Краков, Катовица ерҙәрен үтә, еңеүҙе Одер йылғаһы ярында ҡаршылай. Ул концлагер әсире түгел, әммә өйгә ҡайтып киткәнсе Освенцимда булырға тура килә. Көслө ҡыҙ әсе күҙ йәштәре менән илай һәм оҙаҡ йылдарҙан һуң былай тип яҙа: «Үлем лагерҙарын күреп оноторға мөмкин түгел. Дошманды еңгәндән һуң беҙ унда булдыҡ һәм үҙ күҙҙәребеҙгә ышанманык... Әсирҙәрҙе яндырып, көлөн тоҡтарға һалалар һәм һуңынан ашлама итеп ҡулланалар. Келәттәр матрас эшләү өсөн ҡатын-ҡыҙ сәсе менән, кеше тиреһенән эшләнгән бирсәткә, сумка, ҡул сатыры менән туп-тулы». Ул үҙенең һуңғы көнөнә тиклем үҙ халҡына, үҙ еренә хеҙмәт итте, ерҙә тыныслыҡ һаҡлау өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләне.

Иң ғәжәбе, был быуынды, бөтә ҡыйынлыҡтарға, ул ваҡыттағы ҡанһыҙлыҡҡа ҡарамаҫтан, әхлаҡи ҡиммәттәр һәр ваҡыт тулҡынландырған.

Һуғыштан һуң, ХХ быуат аҙағында, герой-ветерандар күңеле киләсәк тураһында уйлай. «Хәҙер тынысһыҙ тормош. Әхлаҡи ҡиммәттәр түбән. Хәҙерге йәштәребеҙ ҙә үҙ геройҙарын белмәй, һәм киләсәк томанлы», – ти улар уйлап, улар өсөн тыныслыҡты алып биргән яңы быуын тураһында хәстәрлек күреп.

«Күп нәмә юҡҡа сыға, эҙһеҙ ирей, онотола. Әгәр һуғышты онота алмаһаң, күп нәфрәт уяна, ә әгәр һуғыш онотолған булһа, яңыһы башлана», – тип һөйләгән боронғолар.

Беҙ XXI быуатта йәшәйбеҙ һәм хәҙер барыһы ла тыныс юл менән хәл ителергә тейеш, әммә хатта хәҙер ҙә һуғыш бара. Уйланығыҙ, кешеләр! Үҙегеҙҙе, был донъяға әле килмәгән, әммә киләсәктәрҙе ҡыҙғанығыҙ! Ерҙә тормошто юҡ итмәгеҙ! Әле тыумаған, әсәй ҡарынында булғандарҙы ҡыҙғанығыҙ! Был донъяға ул зәңгәр күк йөҙөн, сағыу ҡояш нурын күрер, рәхәтен тойоу өсөн тыуа. Ә һеҙ уға нимә ҡалдырырға теләйһегеҙ? Ҡан, көл, ҡара, киләсәктән мәхрүм ерҙе? Тағы ла ҡатын-ҡыҙға йортон һәм ғаиләһен һаҡлап ҡулына ҡорал алырға мәжбүр итмәгеҙ! Әйҙәгеҙ ҡатын-ҡыҙ – Әсәне данлайыҡ, бөтмәҫ – еңелмәҫ тормош биргән сығанаҡ!

Яҙмамды беҙҙең районның Ҡарғалы ауылынан һуғыш ветераны Фидай Ғафуровтың шиғри юлдары менән тамамлайым:

«Есть женщины в русских селеньях», –
Тип кем яҙған? Шуны беләһегеҙме?
Тәржемәһеҙ-ниһеҙ аңлашыла
Ошо һүҙҙҙәр… Уны һиҙәһегеҙме?
Мин дә менә сал башымды эйәм
Ғорурланып һеҙҙең батырлыҡҡа.
Түҙемлек бар һәм дә саялыҡ та,
Һис ят түгел һеҙгә матурлыҡ та…»

Фәткотдинова Г.Г., 5-се класс
Етәксеhе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Рәхимова М.М.
Ғафури районының Н.А. Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты

ЯУГИР ҠАРТАТАЙЫМ

Ул Ватанын һөйҙө, ут эсендә
Уның данын, намыҫын яуланы,
Ул йығылды, ләкин башҡаларға
Ғүмер бирҙе, юкҡа ауманы.
М. Харис.

Беҙ, һуғыштан һуң тыуған балалар, һуғышты күреп белмәһәк тә, был 9 май көнө яҡынлашҡан һайын, йөрәктә ниндәйҙер ғорурлыҡ та, тулҡынланыу ҙа кисерәбеҙ. Ватанды һаҡлау ир-егеттәрҙең изге бурысы икәнен дә аңлайбыҙ. Башҡорт егеттәре борон-борондан һәр яуҙа

© *Г.Г. Фәткотдинова, М.М. Рәхимова, 2020*

ҡаһармандарса алышҡан һәм үҙ исемен тарих биттәренә мәңгелеккә яҙған. Тыуған иле өсөн йәнен, тәнен аямаған – көрәшкән.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тыуған илде һаҡлау бурысы минең олатайымдың атаһына ла тура килә. Ул йәштән үк ҡыйыу, ҡурҡыу белмәç ир-егет була.

Ҡартатайым Бәхтейәр Хужиәхмәт улы Шәйәхмәтов 1908 йылда урман-тау ҡуйынында, сылтырап аҡҡан Еҙем йылғаһы, Башҡортостандың гүзәл Ғафури районында урынлашҡан Талпар ауылында, ғаиләлә беренсе бала булып донъяға килә. 21 йәш булғанда Ҡаранйылға ауылының беренсе һылыуы Сәбиләне кәләш итеп ала. Ике баһадир тәрбиәләп үçтерә улар. 1940-1941 йылдарҙа олатайым леспромхоз артелендә эшләй. Шулай бер ҡайғыһыҙ йәшәп ятҡанда, ҡот осҡос һуғыш башлана. Ҡартатайым, Бәхтейәр Хужиәхмәт улы, 1941 йылдың ноябрендә ҡулына ҡорал алып, Тыуған илде һаҡларға һуғышҡа китә. Яу яланында батырҙарса алыша. Уның яҙған хаттарында Тыуған илде яратыу тойғоһо көслө була. «Был яҡтар шыҡһыҙ, ҡола ялан, күҙ күреме тигеҙлек. Үҙебеҙҙең илкәйҙәр әйтеп бөтөргөһөҙ матур икән!» – тип яҙа. Хат һайын һағыныу, һағыштарға түҙеүҙең ҡыйынлығы күренә. Тыуған илде бер нимә менән дә алыштырып булмағанлығын әйтә. 1943 йылда Тбилиси ҡалаһындағы алышта аяғына снаряд ярсығы тейгәнсе, ҡарт олатайым йәнен аямай дошманға ҡаршы һуғыша. Уң аяғы ҡаты яраланғас, ул госпиталгә эләгә. Унда аяғын тубыҡтан ҡырҡып, «хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ» тип ҡайтарып ебәрәләр. Шулай итеп, ҡартатайым 1943 йылда ағас аяҡ менән тыуған еренә ҡайтып төшә.

Ҡартатайым яралары уңалыр-уңалмаçтан ең һыҙғанып эшкә тотона. Тылдағы бала-саға, ҡатын-ҡыҙҙарҙы алмаштырып, колхозда эшләй башлай. Бар ауыр эштәрҙе уға ышанып тапшыралар. 1943 йылда ҡартатайымды Талпар ауылы Советы рәйесе итеп ҡуялар. Яуаплы эште 1951 йылға тиклем намыçлы башҡара. Ауыл халҡына ҡулынан килгәнсә ярҙам итә.

Һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда, «ҡайғы ағас башынан түгел, кеше башынан йөрөй тигәндәй», ҡарт атайымдың Сәбилә кәләше, ауырып, донъянан китеп бара. Ҡарт олатайым был ҡайғыны бик ауыр кисерә, ләкин бөгөлөп төшмәй, артабан йәшәүен дауам итә. Башын баçып тырышып эшләй. 1949 йылда ҡарт олатайым Юлыҡ ауылы һылыуын, 27 йәшлек Раҡыя өләсәйемде алып ҡайта. Бөтәһе 9 балаға ғүмер бүләк итеп, бөтәһен дә уҡытып, оло тормош юлына баçырға ярҙам итәләр. Улар ауыл халҡын һоҡландырып, 36 йыл бергә тормош көтә.

Тыныс тормошта ҡарт олатайым һуғыш һәм хеҙмәт ветераны исемен лайыҡлы йөрөтә. Уны һәр байрамда ололап, хөрмәтләп,

мәктәпкә төрлө осрашыуҙарға саҡыралар. Ул һуғыш михнәттәрен хәтерләп һөйләр булған. Бер телем икмәкте бергәләп ашап, бер йотом һыуҙы бүлешеп эскән яуҙаштары, һуғыш яланында батырҙарса һәләк булған йәш кенә һалдат дуҫтарының ошо матур донъяла йәшәй алмағаны өсөн йөрәге әрнеп гел илар булған.

Ҡартатайымдың һуғышта күрһәткән батырлыҡтары, тыныс тормоштағы намыҫлы хеҙмәте өсөн бик күп наградалар менән бүләкләнә. 1985 йылда, 77 йәшендә, ветеран олатайым гүр эйәһе була, яҡты донъя менән хушлаша.

Ҡартатайымды күреп белмәһәм дә, уның менән хаҡлы рәүештә ғорурланам. Уның кеүек йәшлектәренең иң матур сағын ҡәһәрле һуғыш урлаған яугир һалдаттар, беҙгә шулай тыныс тормош яулап биреүегеҙ өсөн беҙ һеҙҙең алдығыҙҙа мәңге бурыслыбыҙ!!!

Шаһиев У.Р., 11-се класс
Етәксеһе – юғары категориялы башҡорт теле
һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғөбәйҙуллина Р.И.
Стәрлетамаҡ калаһының 3-сө башҡорт лицей-интернаты

МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНА МИНЕҢ ҠАРАШЫМ
(эссе)

Мостай Кәрим! Ниндәй зат һин?
Уйлап ҡуям ҡабат-ҡабат,
Бер быуатҡа бер тыуалыр
Һинең кеүек оло талант.

Ут йөрәкле шағир бит һин,
Күкрәккәйең тулы ялҡын.
Шул ялҡында дөрләп янған
Һәр бер һүҙең гүйә алтын.

1989 йыл «Башҡортостан» гәзитендә «Шағир йөрәгенең йылыһы» тигән мәҡәләлә ҡалмыҡ шағиры Давид Кугультдинов М. Кәримде Салауат Юлаев менән сағыштыра: «Мостай ижадында милли һыҙаттар бөтә тәрәнлеге, нәфислеге, бөйөклөгө менән күрһәтелә. Уны атаһы-әсәһенән тыш, заман, тыуған халҡы тыуҙырған. Ә ундай шәхестәр йыл һайын тыуып тормай. Тиҫтәләрсә йылдар, хатта быуат һуҙымы талап ителә. Бына ни өсөн мин уны Салауат менән сағыштырыр инем.

© *У.Р. Шаһиев, Р.И. Ғөбәйҙуллина, 2020*

Салауат үҙендә халыҡ рухын һаҡлағаны, ижадында шуны йырлағаны өсөн мәңгелек». Ниндәй ғәҙел баһа! Шуның өсөн мин шатланып та, ғорурланып та ҡуям. Прометей ҙа беҙҙең Салауат кеүек батыр. Ут менән кешеләрҙең тормошон еңеләйтә, ерҙәге бәхетле тормош өсөн ҙур тән ғазаптарына дусар ителә. Мостай Кәрим 1984 йылда «Ташлама утты, Прометей!» драмаһы һәм «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы өсөн Ленин премияһына лайыҡ була. Уның әҙәби офоҡтары бик киң, һәр трагедияһы үҙенсәлекле, һәр әйтелгән һөйләм тос фекерле, үҙе бер мәҡәл кеүек. Милли батырыбыҙ Салауат әбей батшаны ла бәхәстә еңеп сыға, уны «ҡол» тип атай. Тәне имгәтелеп, ҡырҡылып, ҡурылып бөтһә лә уның рухы азат. Яуҙа ла, һорау алғанда ла, ике ҡулын күтәреп диңгеҙ төбөнә инеп киткәндә лә. Диңгеҙ – халыҡ хәтере, ә халыҡ хәтере мәңге тере. М. Кәрим үҙенең бала сағын һүрәтләгән повесында Оло инәйҙе Афродитаға тиңләй. Ниндәй тапҡыр, хайран ҡалырлыҡ сағыштырыу. Үҙе оло кеше, ә күңеле 17 йәшлек ҡыҙҙарҙыҡы кеүек саф, керһеҙ. Юғары мәҙәниәтле кеше йәш әсәләргә өлгө булырға тейеш, ул бөтә балаларға бәхет һәм «үҙ яртыларын» табыуҙарын теләй. Уның әйткән һүҙе, фатихаһы, холоҡ-фиғылы фәһемле һәм ҡәҙерле. Ул кешеләр яҙмышы уртаһында баҫып торған имән һымаҡ бирелә. Унан гел изгелек, иман нуры бөркөлә. Кендеккә ул күпме тормош һабағы бирһә, беҙгә лә шул тиклем аҡыл, фәһем тарата, тәрбиәләй, йөрәк йылыһын бирә, донъяла йәшәүҙең тәртибен, халҡыбыҙҙың изге йолаларын, әҙәп ҡағиҙәләрен башлап күндерә.

Ә «Ярлыҡау» әҫәре… Ваҡиғалар һуғыш ваҡытында барһа ла, М. Кәрим кешене күккә күтәрә торған матур һөйөү тураһында яҙа. Мария Тереза менән Любомир Зухтың мөхәббәтенә нисек һоҡланмаҫһың. Инсафлы Мария бөтә батарея һалдаттарын тыйнаҡлығы, әҙәплелеге менән әсир итә. Нәҡ шундайҙар өсөн заманында батшалар яу асҡан, батырҙар баш һалған. Был үкенесле мөхәббәт ҡәһәрле һуғышҡа нәфрәт уята, һуғыш кешеләрҙең бәхетен урлай, яҙмыштарҙы селпәрәмә килтерә.

«Айгөл иле» драмаһындағы Айгөлдө оноторлоҡмо һуң? Ниңә ул әсәһе менән Италияға китмәй? Тыуған илһеҙ ул йәшәй алмаясаҡ. Айгөлдөң тылсымлы иле әсир итерлек. Унда тик яҡшылыҡ һәм изгелек кенә йәшәй. Ә тормош ваҡлыҡтары, яуызлыҡ, нәфрәткә урын юҡ. Айгөл, Моратшин, Ричард Галин, эш менән күңел баҫыусы тол ауыл ҡатындарының рух ныҡлығы, күңел байлығы һоҡландырғыс.

М. Кәримдең һәр һүҙе йөрәк түренән, ихлас әйтелә. «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!», «Башҡорт халҡына яуап хаты», «Вәғәҙәләр бирмә» кеүек шиғырҙар быға миҫал.

«Беҙҙең өйҙөң йәме» повесында ҡот осҡос һуғыштың ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә татыған, ҡайғы-хәсрәттәрен үҙенсә кисергән яҡты хыялдар, изге теләктәр менән ҡанатланған Йәмил, Оксана образдары бала саҡтағы ысын дуҫлыҡтың асылын асып ҡына ҡалмайҙар, ә изгелек, миһырбанлыҡ, шәфҡәтлек орлоҡтарын сәсәләр.

Күп яҡлы талант эйәһе Мостай Кәрим! Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим! Башҡортостаныбыҙҙың ғорурлығы, заманыбыҙҙың оло шәхесе Мостай Кәрим!

Шиғриәттә – яҡты йондоҙ, прозала – талант эйәһе, драматургияла – сәнғәт иленең оҫтаһы Мостай Кәрим! Уның ил һәм халыҡ алдындағы хеҙмәттәре – Ленин һәм С. Юлаев Дәүләт премиялары, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, «Халыҡтар дуҫлығы», «Почет Билдәһе», К.С. Станиславский исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы, 1972 йылда русса сыҡҡан «Йылдар эҙенән» шиғырҙар йыйынтығы өсөн СССР Дәүләт премияһы,1978 йылда сыҡҡан «Хәбәр көтәм» тигән китабы өсөн Г.Х. Андерсен исемендәге Халыҡ-ара Почетлы диплом, 1979 йылда Социалистик Хеҙмәт геройы, 1963 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исемдәр менән билдәләнде. Әҙиптең әҫәрҙәре рус, украин, татар, грузин, ҡаҙаҡ, ҡумыҡ һәм башҡа телдәргә тәржемә ителеп, айырым китаптар булып баҫылып сыҡты. Уның шиғырҙары сит ил телдәренә лә тәржемә ителде. Шулай итеп, уның ижады бөтә ил, бөтә донъя күләмендә киң танылды. Уның исеме бөтә донъяла билдәле. Мостай Кәримдең ниндәй генә әҫәрен уҡыһаҡ та, улар гел ысын кеше булырға, тыуған илде, халҡыңды яратырға, ғәҙел, намыҫлы кеше булырға өйрәтә.

Бөгөн беҙ ғорурлыҡ менән инглиздәрҙең Шекспиры, немецтарҙың Гетеһы, урыҫтың бөйөк Пушкины, ә беҙҙең Мостай Кәримебеҙ бар, ул беҙҙең милли әҙәбиәтебеҙҙе донъя кимәленә сығарҙы, тип әйтә алабыҙ. Ул башҡорт халҡының рухи байлығының ҡиммәтле бер өлөшө. М. Кәримдең ижады бөтә башҡорт халҡының рухи ҡаҙанышы, милли ғорурлығы. Уның поэзияһының һәм драматургияһының иң яҡшы өлгөләре башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондын тәшкил итә, уның ижады күп милләтле илебеҙҙең совет осоро әҙәбиәтенә лә ыңғай йоғонто яһаны. Милләтебеҙҙең ғорурлығы булған Мостай Кәрим беҙҙең йөрәктәрҙә яҡты эҙ ҡалдырған халыҡ шағиры булып, мәңге йәшәй һәм йәшәйәсәк!

Шәрипова Г.Ш., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Солтанғолова Р.Р.
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика
гимназия-интернаты

ТУҒАН ТЕЛЕМ

Туған телем – әсәм теле
Йәндәремә ингән тел.
Башҡортостан тип атала
Беҙ йәшәгән нурлы ил.
Бәхетлемен, үҙ телемдә
Бик теләп белем алам.
Халҡымдың йолаларын
Өйрәнәм, өлгө алам.
Башҡорт теле көнөн дә
Шатланып көтөп алдыҡ.
Моңло йырҙар йырланыҡ
Хатта бейеп тә алдыҡ.
Туған телем – әсәм теле
Ҡәҙерле, яҡын миңә.
Ҡояш төҫлө йәшәүемә
Яҡтылыҡ нурын һибә.

ҠАРТАТАЙЫМ

Яуҙарҙы күргән ҡартатай,
Бик оло йәштә инде.
Дошман менән алышҡанда
Йәндәр алҡымға килде.
Хәтерләргә яратмай ул
Һуғыштың ауыр юлын.
Болотло көндәр булғанда
Һыҙлана, һулҡый ҡулы.
Йәшләй генә был һуғышҡа
Киткән минең ҡартатай.
Ул саҡта бишектә генә
Ҡалған бит минең атай.

© *Г.Ш. Шәрипова, Р.Р. Солтанғолова, 2020*

Һағышланып Еңеү көнөн
Ҡартатай ҡаршы ала.
Һуғыш уның күңеленә
Һалғандыр ауыр яра.
Фотоһүрәттәргә ҡарап
Иҫкә ала дуҫтарын.
Һалдат булып үтәгән ул
Тыуған иле ҡушҡанды.
Ҡартатайым оло инде
Миҙалдар түшен биҙәй.
Ҡартатайым бар донъяға
Тыныслыҡ ҡына теләй.
Маңғайына һырҙар яҡкан
Ҡартатай күпте күргән.
Ҡаты һуғыштар мәлендә
Бик күп дуҫтары үлгән.
Ҡартатайым минең өсөн
Яҡын, ҡәҙерле кеше.
Алтын ҡуллы ҡартатайым
Балҡып тора һәр эше.
Еңеү көнөн ҡаршыларға
Әҙерләнә беҙҙең ил.
Ҡартатайым - тере тарих
Иҫән- һау йәшәһен гел.

МӘҢГЕЛЕК УТ

Күмертауҙың Үҙәк урамында
Мәңгелек ут яна талпынып.
Әйтерһең дә яуҙа үлгәндәрҙең
Йән йылыһы тора саҡырып.
Ҙур байрамдар ошо ерҙә үтә
Еңеү көнө була йыл һайын.
Байрамдарҙың тере шаһитылай
Шаулап үҫә бында аҡ ҡайын.
Ал сәскәләр үҫә тирә – яҡта
Мәңгелек ут – хәтер сатҡыһы.
Мәңгелек ут яуҙа үлгәндәрҙең
Йөрәгенең сағыу яҡтыһы.
Күҙен текәп ошо янған утҡа
Туҡталып та ҡалған бер инәй.

Ҡыбырлаған алһыу ирендәре
Таш һәйкәлгә икән ни һөйләй?
Яуҙа ятып ҡалған яҡындарын
Хәтерләйҙер яңғыҙ был инәй.
Йөрәгемде ошо минуттарҙа
Һағыш, әрнеү тойғолары биләй.
Күмертауҙың Үҙәк урамында
Мәңгелек ут яна талпынып.
Кешелекте тыныс йәшәргә
Һәйкәл тора төҫлө саҡырып.

Шәрипова Э.К., 6-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Абдрахманова Э.Ғ.
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 17-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ЯҠТАШТАРЫМА ХАТ

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле яҡташтарым! Һеҙгә Стәрлетамаҡ ҡалаһы 17-се урта мәктәбенең 6-сы класс уҡыусыһы Шәрипова Элина исемле ҡыҙ хат яҙа. Хат яҙыуымдың сәбәбе шул: бөгөнгө көндә туған телемдең яҙмышы. Ни өсөн башҡорттар үҙ туған телендә һөйләшмәй икән? Башҡорт булып, урыҫ телендә аралашҡан булалар. Бына, мәҫәлән, беҙҙең мәктәптә башҡорт милләтле уҡыусылар бик күп, әммә ләкин улар үҙҙәренең туған телен белмәйҙәр һәм белергә лә теләмәйҙәр, туған телдә аралашмайҙар, әсә телен бөтөнләй хөрмәт итмәйҙәр. Ә бына мин шарлатып башҡорт телендә һөйләшәм, туғандарым менән аралашам, туған телемдә гәзит-журналдар алдырам, тапшырыуҙар ҡарайым. Мәктәп, ҡала кимәлендә башҡорт теленән үткәрелгән барлыҡ сараларҙа ҡатнашырға тырышам.

Мин үҙемдең туған телемә, тыуған яғыма, уның тәбиғәтенә һоҡланып бағам. Тыуған ерем Башҡортостан – иҫ киткес матур һәм бай республика ул. Үҙебеҙҙең тыуған яғыбыҙ булыуы менән генә түгел, ә тәбиғәттең байлығы, матурлығы, күҙ яуын алырлыҡ сәскәләрҙең наҙы, йылға-күлдәренең күплеге, һыуҙарының муллығы һәм башҡа әллә күпме үҙенсәлектәре менән һоҡланам. Ошондай сихри гүзәллек батшалығында тыуыуыма, йәшәүемә шатланам, башҡорт балаһы булыуым менән ғорурланам.

© *Э.К. Шәрипова, Э.Ғ. Абдрахманова, 2020*

Хөрмәтле милләттәштәр. Мин әле 6-сы класта уҡыйым, уҡыу йылы башында «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслеген ҡулыма алыу менән башынан аҙағына тиклем күҙ йүгертеп, ҡыҙыҡлы урындарын уҡып сыҡтым. Талантлы шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙҙың иҫ китмәле, бай йөкмәткеле әҫәрҙәре менән таныштым.

Туған тел, Тыуған ил тураһындағы мәғлүмәт тәңгәленә еткәс, ҡыҙыҡһыныуым бигерәк тә артты. Башҡорт халҡы, башҡорт иле, башҡорт теле өсөн янған яҙыусы – шағирҙарыбыҙҙы хөрмәт итәм! Республикабыҙҙың заманса үҫешенә шаһит була алмауҙары ғына бик йәл!

Баш ҡалабыҙ беҙҙең – Өфө. Йәмле һыу буйҙарында, сағыу сағылда балҡыған ҡалабыҙ беҙ яратҡан башҡорт йырҙарында данлана. Ул тау башында урынлашҡан. Өфө эргәһендә Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары ҡушыла. Унда һәйкәлдәр, парктар, театрҙар, кинотеатрҙар бар. Өфө театрҙарында башҡорт телендә спектаклдәр ҡуйыла.Тимер күперҙе сыҡҡан саҡта йылғала аҡ пароходтар тирбәлә. Яр башында ике мөһабәт һәйкәл тора. Береһе – башҡорт халҡы менән урыҫ халҡының дуҫлығын данлай. Икенсеһе – милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған. Салауат батыр текә сағылда ат өҫтөндә илен һаҡлап тора. Бөгөнгө Өфө – гүзәл ҡала. Өфөлә һәм республикабыҙ территорияһында бөгөн күп милләт халҡы көн күрә. Улар үҙ телдәрендә лә, рус телендә лә иркен аралаша. Төрлө милләт кешеләре дуҫ һәм татыу йәшәй. Беҙ тыуған еребеҙ һәм уның эшһөйәр халҡы менән ғорурланабыҙ. Күптән түгел уҙған ШОС һәм БРИКС саммиттары ҙур мәртәбә генә өҫтәне баш ҡалабыҙға. Төрлө илдәр менән осрашыуға әҙерләнеү һөҙөмтәһендә Өфө тағы ла матурланды, төҙөкләндерелде, күркәмләнде.

Бөгөнгө тормошобоҙҙа, планшет, кеҫә телефондары, компьютер модаға инеп киткән заманда, туған телде һәм милли йолаларҙы һаҡлауҙа, үҫтереүҙә ғаилә лә бик ҙур роль уйнайҙыр, тип уйлайым. Бигерәк тә замандың кире яҡтары ла юҡ түгел – тәмәке тартыу, һыра, спиртлы эсемлектәр ҡулланыу, наркомания, «снюс» һәм башҡалар. Минеңсә, бындай шарттарҙа беҙҙең кеүек йәш быуынға дөрөҫ юл һайлау еңелдән түгел. Шуның өсөн дә һәр ғаиләлә тәрбиә иң беренсе урында булырға тейеш. Туған тел ҡәҙерен аңлаған һәр ғаилә үҙ балаһына туған телен бишектән өйрәтергә тейештер, тигән уйҙамын. Туған телдә бишек йырҙарын көйләп, әкиәттәрен ишетеп, тыңлап үҫкән бала, үҫә төшкәс милли йолаларҙы күрә, өйрәнә, ҡыҙыҡһына һәм хөрмәт итә башлай.

Бына, мәҫәлән, әсәйем беҙгә йыл һайын йәштәр өсөн сыҡҡан «Аманат» журналын яҙҙыра, үҙҙәренә «Башҡортостан «гәзитен алдыра.

Беҙ шул баҫмаларҙы бергәләшеп уҡып сығабыҙ. Ял көндәрендә ғаиләбеҙ менән башҡорт телендә тапшырыуҙар ҡарайбыҙ.

Хөрмәтле туғандар, яҡташтар! Туған телендә һөйләшкән бала ғына – бәхетле бала. Сөнки ул туған телендә аралаша, халыҡ араһында йәшәй, милли йолаларҙа тәрбиәләнә. Бындай кешенең киләсәге лә өмөтлө була түгелме!? Ә туған телен өйрәнмәгән, туған телендә һөйләшмәгән, тел биҙәктәрен күрмәгән кеше – ярлы кеше. Тимәк, ғаиләлә туған телгә ныҡлы иғтибар биреп, балаларға кесе йәштән тел ҡәҙерен аңлатыу мотлаҡ. Бигерәк тә халҡыбыҙҙың тарихын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йырҙарын, милли аштарын, үҙ ырыу-шәжәрәнде, языусылар ижадын һәм халыҡ ауыҙ ижадын өйрәнеү кәрәк. Киләсәгебеҙ өмөтлө булһын тиһәк, һәр бер бала әсә телендә үҙ халҡының әҙәби мираҫын, күңел байлығын, үҙенә һеңдереп үҫергә тейеш, минеңсә. Сөнки, туған телгә милли үҙаң нигеҙҙәре һалынған, халыҡтың милли традициялары һәм ата-әсәнең тәүге һүҙҙәренең йылыһы һаҡланған, бары тик туған тел аша дөйөм кешелек фәнен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә юл асыла. Юҡҡа ғына халыҡта: «Тел белеү – кеше йөрәгенә юл һала», – тип әйтмәгәндәр. Шуның өсөн баланы әсә телендә һөйләргә һәм фекерләргә өйрәтеү һәм уның аша бала күңеленә халыҡ аҡылының тәрәнлеген еткереү – ата-әсәләрҙең һәм уҡытыусыларҙың төп бурысы. Ғаиләләрҙә милли йолаларыбыҙ дауам итеһә – туған телебеҙ һаҡланыр, үҫер, ә милли йолаларыбыҙ дауам итер.

Йәш быуынға туған телде өйрәтеү һәм үҫтереү өсөн мәктәптә туған телдәр буйынса дәрестәр ойошторолған, төрлө саралар уҙғарыла, ваҡытлыса матбуғат биттәре, радио һәм телевидениелағы мауыҡтырғыс тапшырыуҙар, интернет селтәре, китапханала йөкмәткеле китаптар бар. Ә балаларға туған телгә һөйөү тәрбиәләү тәү сиратта ғаиләгә ҡайтып ҡала. Ғаиләлә кеше тәрбиәләү тураһында ғалим В. Сухомлинскийҙың атай-әсәйҙәргә мөрәжәғәтендә бындай юлдары бар: «Донъяла тиҫтәләгән, йөҙләгән һөнәрҙәр бар. Кемдер тимер юлдар төҙөй, икеселәре йорттар һала, өсөнсөләре икмәк үҫтерә, тик иң универсаль, иң ҡатлаулы, иң маҡтаулы, һәр кем өсөн кәрәкле, үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ эш бар – ул да булһа ғаиләлә кеше тәрбиәләү», – ти. Шуға күрә һеҙгә өндәшәм, хөрмәтле милләттәштәр! Туған телегеҙҙе яратығыҙ, өйрәнегеҙ, хөрмәт итегеҙ, һаҡлағыҙ! Сөнки, теле юҡтың – иле юҡ, иле юҡтың – көнө юҡ!

Һау булығыҙ, хөрмәтле яҡташтар.

Әхмәҙиева М.М., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Шакирова Г.Ғ.
Октябрьский ҡалаһының 9-сы урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ҮЛЕМ МЕНӘН ЯУЛАНҒАН ҮЛЕМҺЕҘЛЕК
(эссе)

«Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов генерал...»
Юйылмаҫ эҙ
Ташҡа уйып, ҡая күкрәгенә
Шайморатов исеме яҙылған...."
Рифғәт Алғушаев.

Яратҡан йырсым Радик Юльяҡшин башҡарыуында Шайморатов генерал йырын тыңлап ултырам...

Ат уйнатып алдан бара Шайморатов генерал... Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө тарихсылар ҙа, журналистар ҙа Шайморатовты ат өҫтөндә ҡылыс болғаған килеш кенә күрһәтә. Ә уның ниндәй зирәк, аҡыллы, алдан күрә белеүсе етәксе, хәрби хәрәкәттәр оҫтаһы икәнен күҙҙән ысҡындыралар. Шайморатовтың үлеме лә серле ваҡиғаға әйләндерелеп, оҙаҡ йылдар исеме лә телгә алынмай.

Атлы яугирыбыҙҙың үлем менән яуланған үлемһеҙлек хәҡиҡәтенең асылы ҡайҙарға барып тоташа икән?

Журналист Фәрит Вәхитовтың яҙмалары буйынса, 1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылына яһалған рейдтың һуңғы көнөндә, Шайморатовты күрә алмаған, уны үҙенең конкуренты итеп күргән комкор Борисовтың күрәләтә хаталы, хәрби яҡтан бер нисек тә нигеҙләнмәгән бойороғо арҡаһында юғары хәрби әҙерлекле, ҙур тәжрибәле башҡорт генералы үҙ яугирҙарын, разведка яһау мөмкинлеге бирелмәгәс, фашистар биләгән позицияларға табан йүнәлтергә мәжбүр була. Ни өсөн ул үҙе алдан төшкән һуң?

Минеңсә, Миңлеғәли Шайморатов алдан эшләнмәгән разведканы үҙе башҡарған, дошман утын иң беренсе үҙенә алған. Һуғыш һуғыш инде, унда үлемдән бер кем дә ҡурсаланмаған, әммә башҡорт генералы үҙ тәне менән арттараҡ килгән яугирҙарын ҡаплап, батырҙарса һәләк булған.

© *М.М. Әхмәҙиева, Г.Ғ. Шакирова, 2020*

Ҡыҙғаныսҡа күрә, ҡайһы берәүҙәр, комдив Шайморатовтың фашистар тарафынан әсир ителеп, немецтарға хеҙмәт иткән карателдәр ҡулына тапшырылыуы, вәхшиҙәрсә язалап үлтерелеүе хаҡында уйҙырмаға ҡоролған мәғлүмәт тарата башланы. 2012 йылдың 18 мартында В. Мырҙагәрәевтың «Генерал Шайморатовтың һәләк булыуы. Билдәле булмаған сығанаҡтар» тигән мәҡәләһендә тарихсы А.А. Масловтың АҠШ-та һәм Украинала баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәренә таяна. Әйтергә кәрәк, А.А. Маслов яҙмаларында генерал М.М. Шайморатовтың фажиғәле үлеменә бәйле материалдар ысынбарлыҡты уйҙырма менән бутап бирелгән. Ошондай һығымта яһар өсөн тейешле ерлек бармы һуң? Әлбиттә, бар.

Беренсенән, А.А. Маслов Шайморатов Беренсе Юлино хуторы янындағы бәрелештә ауыр яраланып, немецтар һәм улар яғында һуғышҡан Дон казактары тарафынан әсирлеккә алынды, тип раҫлай. Ысынбарлыҡта Шайморатов Беренсе Юлино хуторы янында түгел, ә Штеровка ауылынан саҡрым ярым ерҙә дошман засадаһына юлыға. Комдив Шайморатов, яугирҙарын ике колоннаға бүлеп, ҡуҙғалырға бойороҡ бирә, үҙе бер төркөм штаб офицерҙары һәм һаҡсы взводы яугирҙары менән алға, Штеровка ауылына табан йүнәлә. Немецтарҙың засадаһы тап ошонда булған. Бынан беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҡар ярып барған асыҡ ялан ус аяһындағылай күренеп тора. Ошондай хәлдә засадаға эләккәндәрҙең иҫән-һау ҡотола алыуына хәрби эште аҙ ғына булһа ла белгән кеше һис ышанмаясаҡ.

Икенсенән, Маслов әфәнде яҙғанса, фашистар яралы генералды шунда уҡ карателдәр ҡулына тапшыра. Был бөтөнләйе менән немец офицерҙарының фронт ҡағыҙәләренә, инструкцияларына тап килмәй. Әсир алынған генералдар, яралы булған хәлдә лә атып үлтерелмәй, улар һаҡ аҫтында немецтарҙың ҡыр госпиталдәренә алып кителә. Ҡыҙыл Армияның әсирлеккә эләккән генералдарының исемдәре кисекмәҫтән Берлинға ебәрелә, улар махсус баҫмала иғлан ителә, пропаганда алып барыу маҡсатында файҙаланыла.

Өсөнсөнән, Масловтың уйҙырмаларында карателдәрҙең Шайморатовты Штеровка ауылының бер өйөнә индереп һалып, уны язалап үлтереүе, шунан һуң уның адъютантының һәм әсир алынған кавалеристарҙың комдивты ат һарайында ерләүе хаҡында һөйләй. Йәнәһе, яҡын тирәлә туктауһыҙ атыш барған, пулялар һыҙғырып осоп торған, шуға командирҙы башҡа ерҙә ерләй алмағандар икән. Теге карателдәр был саҡта ни эшләне икән һуң, генералды язалағас, уның адъютант офицерын да шундай уҡ яҙмыш көтөргә тейеш ине лә баһа. Имеш, һуғыштан һуң ошо өйҙөң хужабикәһе лә, тере ҡалған адъютант

та ошоларҙы раҫлап, аңлатма биргән. Хужабикәнең дә, адъютанттың да исемдәре аталмай! Сәбәбе бер – былар тик уйҙырма ғына.

Эйе, ошо ваҡиғаларҙан һуң күп йылдар үтте, заманалар ҙа үҙгәрҙе. «Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме ҡала», тиҙәр халыҡта. Туған Башҡортостаныбыҙҙа ла, алыҫ Донбасс ерендә лә генерал Шайморатовтың исеме берҙәй ҡәҙерләп иҫкә алына. Яҙҙар еткән һайын Петровское ҡалаһының урындағы халыҡ «Генерал Шаймортов майҙаны» тип атап йөрөткән иҫтәлекле урынындағы туғандар ҡәберлеге аллы-гөллө сәскәләргә күмелә.

Минеңсә, Башҡортостан, башҡорт халҡы менән Дон казактары араһындағы дуҫлыҡ, теләктәшлек Ватаныбыҙ азатлығы өсөн йәндәрен аямаған меңәрләгән батырҙарыбыҙҙың изге ҡандары менән нығытылған.

Әгәр Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров генералыбыҙға Советтар Союзы Геройы исемен бирҙертә алһа, ҡаһарман генерал Миңлеғәли Шайморатовтың йондоҙо, күңел күктәребеҙҙе яҡтыртып, мәңге балҡып торасаҡ!

Әхмәҙуллин Т.А., 9-сы класс
Етәксеһе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы
Мөкимова Г.Х.
Балтаҫ районының Иҫке балтаҫ ауылы 1-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

«Быуаттарға ялғап быуындарҙы,
Илде тоткан телем, һүҙем бар»
(Р. Бикбай)

...Мин юлымда телһеҙ кешене осраттым. Ҡоштар йырына ҡушылманы ул. Мин ҡушылып йырланым. Һәм үҙемдең нindәй бәхетле икәнлегемде тағы ла бер тапҡыр тойҙом. Яҙмыш миңә тыуған еремдә туған телемдә аралашыу бәхете бүләк иткән. Был бүләге өсөн яҙмышыма рәхмәтемде нисек еткерергә тейеш һуң мин?

Йәшәргә, бары тик яҙмыш бушҡа биргән бүләктең ҡәзерен белеп, уның бәҫен төшөрмәй, киреһенсә, артттырып йәшәргә тейешмен! Сөнки мин туған халҡымдың улы. Халҡым миңә телен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын биргән. Мине телен, илен, халҡын һөйәр кеше итеп тәрбиәләй. Шуның өсөн дә минең бурысым – туған халҡымдың өмөттәрен аҡлау, уның намыҫлы, эшсән улы булыу.

© *Т.А. Әхмәҙуллин, Г.Х. Мөкимова, 2020*

«Иле барҙың – теле бар», – ти халык мәҡәле. Башҡорт халҡы борон-борондан үҙ ере, үҙ теле өсөн көрәшкән. Туған телебеҙҙе данлап, туған телебеҙгә һоҡланып, сәсәндәр генә түгел, төрлө быуын шағирҙары ла шиғырҙар ижад иткән. Рәми Ғарипов, Баязит Бикбай, Зәйнәп Биишеваның тел тураһындағы шиғырҙарын ятлап, күңел түрҙәренә һалып, тәсбих итеп әйтеп йөрөрлөк.

Тарихтан белеүебеҙсә, илгә яу килгәндә йәки ил-йорт эсендә ниндәйҙер мөһим мәсьәләләр килеп тыуғанда сәсәндәр шиғри һүҙ кобайыр менән йыйындарҙа халыҡҡа мөрәжәғат итер булғандар. Батырша, Салауат Юлаев, Байык сәсән, Аҡмулла, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич... һәм ошо исемлеккә Рауил Бикбайҙы ла кертер инем. Ул бер тиҫтә йыл элек яҙылған «Халҡыма хат» шиғырында туған телебеҙҙең ҡороп барыуы хаҡында хафаланып уйлана, башҡорт балаларының үҙ телдәренән яҙып, әсә телен белмәй үҫеүенә борсола. Ә туған телен белмәгән бала туган халҡын да танымаҫ моңһоҙ, телһеҙ бәндәгә әүерелә. Әсә теле бөткән ерҙә Тыуган ил, халык та бөтөүе ихтимал. Шуға «был донъяла телдең ҡороуҙары, яманыраҡ даръя ҡороуҙан», – тип юҡҡа ғына әйтмәй шағир.

Әсә телен белмәүсе кеше үҙенең тамырын онота, милли аңын, милли рухын да юғалта бара. Быньдай хәл халыҡ, милләт яҙмышы өсөн оло хәүеф. Әсә теле бөткәндең милләте лә бөтә, милләте бөткәндең иле лә бөтә. Шуға ла телде белмәү фажиғаһенең төп сәбәбен ғаиләнән эҙләргә кирәк. Иң тәүҙә өйҙә әсә теленә һөйөү тәрбиәләнергә тейеш:

Сабыйҙарҙың күҙенә ғәмһеҙ ҡарап,
Упҡын ситтәренә еткәнбеҙ,
Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең, – тип шағирҙың әсә теленә ғәмһеҙ ҡараусы ата-әсәләрҙе иҫкәртеүе лә бтк тә урынлы.

Илһеҙ, телһеҙ милләт булмай. Әсә телендә беҙ донъяны танып беләбеҙ. Шул телдә беҙҙең фекерләү культурабыз, зауығыбыҙ үҫә. Тел кешеләр менән аралаштыра, белем, ғилем бирә. Туған тел – үҙ байлығыбыҙ, беҙҙең яҙмышыбыҙ. Телдең дә, илдең дә йәшәүе – беҙҙең кулда. Беҙҙең һәм киләсәк быуындың телендә мәңге шулай ғорур яңғыраһын ине башҡорт теле. Телебеҙҙе әле һаҡлап ҡалмаһаҡ, аҙаҡтан һуң булыуы ихтимал.

Туған тел – ул әсәнең теле генә түгел, туған халҡымдың да теле. Туған халҡымдың кеүек уның да меңәр йыллаған тарихы бар. Шул тарихты һөйләр батыр улдары, һылыу кыҙҙары менән ғорурланыр, илдәр, халыктар араһында үҙен-үҙе таныттыр, донъяларҙы, күңелдәрҙе матурлар гүзәл, ғәзиз туған тел ул. «Халҡыма хат» шиғырының да фәһемле саҡыру һүҙҙәре менән тамамланыуы осраҡлы түгел:

Туғанынан яҙған – ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән,
Уян, халҡым, ҡуҙғал милләтем!

«Тупланығыҙ, йәштәр, изге сафҡа, иртәгәһен илдең һаҡлайыҡ!» – тип йәш быуынға ла мөрәжәғәт итә.

«Барыһы ла беҙҙең уяулыҡта, беҙҙең эштә, беҙҙең намыҫта», – ти Рауил Бикбай. Был ысынлап та шулай. Әсә теле аша халкыңдың рухи хазинаһына эйә булаһың, уның тарихын, фольклорын, әҙәбиәтен беләһең. Телде, тимәк, халыҡты һаҡлап ҡалыуҙа беҙ, укыусылар ҙа, яуаплы.

Яуаплылык, әлбиттә, беҙҙең алдыбыҙға бурыстар ҙа куя. Һәр башҡорт үҙ телендә һөйләшһен, укыһын, яҙа белһен. Телде үҫтереүгә иғтибарҙы тағы ла көсәйтергә кәрәк. Үҙ телеңдән, халҡыңдан оялырға түгел, ә уның менән ғорурланырға кәрәк. Насар ғәҙәттәрҙе бөтөрөргә, кесе йәштән милли рухлы булып үҫергә... Бөтә көстө халҡыбыҙҙы йәшәтеү өсөн бирергә кәрәк. Ошо бурыстарҙы тормышҡа ашырыу өсөн мин дә үҙ өлөшөмдө индерә алһам ине. Был минең алдыма ҡуйған иң ҙур маҡсаттарымдың береһе. Сөнки мин башҡорттарға иң беренсе булып өндәмә менән мөрәжәғәт итеүсе мәғрифәтсе мулла Батыршаның тыуған ерендә йәшәйем һәм белем алам. Мин – Батыршаның яҡташы. Ул йөрөгән юлларҙан йөрөйөм, ул эскән һыуҙы эсәм. Батырша күреп һоҡланған урмандарға, болон-ҡырҙарга ҡарап кинәнәм. Минең туғандарымдың, дуҫтарымдың олатай-өләсәйҙәре – Батыршаның яратҡан халҡы булған.Ул шул халыҡтың көйөктәрен, иҙелеүҙәрен, бәхетһеҙлектәрен үзенекеләй йөрәгенә яҡын алған, ҡыҙғаныс тормоштарын күреп янып-әрнеп йәшәгән. Күңеленең тулып ташҡан сағында ана нисек тулҡынланып яҙған ул өндәмәһен! Ғаиләһенең әсе яҙмышка дусар буласағын, яратҡан улының бер гонаһһыҙ үлемен, өндәгән күтәрелештә шәкерттәре, меңдәрсә халҡы ҡырыласағын, ауылдар яндырыласағын күҙ алдына ла китермәгәндер олуғ хәҙрәт... Алдан күреү һәләте булһа ла, үзен-үҙе ауыҙлыклап, Яныштар яҡлы булып, халҡым, динем тип янған йөрәккәйен тыйып йәшәй алыр инеме һуң? Ә беҙ?! Минең йәштәштәрем уның кеүек батыр йөрәкле, көслө рухлы, үткер һүҙле, тәүәккәл, һуңғы һулышына тиклем халҡына һәм диненә тоғро була алыр инеме? Ун ай буйына ҡасҡын булып йөрөп, тотолғас, конвой аҫтында Ырымбур, Һамар, Арзамас, Муром, Владимир, Мәскәү аша ғазаплы юл үтеп, Петербургҡа килтерелеп, төрмәгә ташланғас, аяныс хәлендә лә батшабикәһенә үзен һәм халҡын яҡлап хат яҙа бит ул! Был мөрәжәғәтендә өҫтәмә яһаҡтар һалыу, бушлай ылау ҡыуыу, үҙ атың-ҡоралың менән линия хеҙмәтен үтәү,

урындағы түрәләрҙең, төрлө старшиналарҙың баш-баштаҡлыгы арҡаһында халыҡтың ауыр хәлендә йәшәүе, төрлө йәбер-яфалар, иҙелеүҙәр халыҡты баш күтәреүгә килтергән төп сәбәптәр икәнен асып һала. Эй, саф күңелле, аҡ ышаныслы, бер ҡатлы, һуңгы һулышына тиклем халҡым тип янған Батырша...

Уралтауҡай емерелмәһә, Ағиҙел, Таныптар ҡоромаһа, тел, милләт тип янып йөрөүсе уҡытыусылар бөтмәһә, илен, иркен, үҙ ҡиммәтен һаҡлар аҫыл улдарын тыуҙыра, үҫтерә торор халыҡ ғүмер-ғүмергә! Халыҡ – ул мәңгелек.

Р. Бикбай әйткәнсә:

Юлдарыбыҙ, беләм, еңел булмаҫ,
Юлды быуар ташҡын, булыр боҙ.
Юлыбыҙҙан барыбер тайпылмабыҙ,
Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ!

Әгәр ҙә беҙ, укыусылар, белемле, йыйнаҡ фекерле, тотанаҡлы, милли рухлы булып үҫһәк, Башкортостаныбыҙҙың киләсәге лә матур һәм өмөтлө булыр. Беҙ бының өсөн тырышырға тейешбеҙ.

III БҮЛЕК
УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ ҒИЛМИ-МЕТОДИК ХЕҘМӘТТӘРЕ

Аҫылаева З.З.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Борай районының
дөйөм белем биреү «Шабай ауылы мәктәбе»

Ж. КЕЙЕКБАЕВТЫҢ «ОМОРҘАҠ БАБАЙ» ХИКӘЙӘҺЕ БУЙЫНСА ДӘРЕС КОНСПЕКТЫ

Маҡсат:

1. Уҡыусыларҙы Ж. Кейекбаевтың ҡыҫҡаса тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу;
2. «Оморҙаҡ бабай» хикәйәһенең йөкмәткеһен үҙләштереү; әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау;
3. Уҡыусыларҙың яҙыу һәм телмәр мәҙәниәтен үҫтереү;
4. Башҡорт халыҡ ижадына, тарихына ихтирам тәрбиәләү;
5. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын, фекерләү ҡеүәһен, телмәрен, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ тойғоларын үҫтереү.

Йыһазландырыу: компьютер, экран, презентация, таратма материал (тест).

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу өлөшө.

– Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле уҡыусылар.

Хәйерле көн, алһыу таңдарға,
Хәйерле көн, һайрар ҡоштарға,
Хәйерле көн, зәңгәр күктәргә,
Хәйерле көн, яҡын дуҫтарға.

2. Өйгә эште тикшереү.

3. Яңы теманы аңлатыу.

Уҡытыусы: – Уҡыусылар, таҡтаға иғтибар итегеҙ. Унда мәҡәлдәр яҙылған. Уҡып сығығыҙ ҡысҡырып.

Уҡыусылар сылбыр тәртибендә уҡыйҙар.

1. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.
2. Ағас емеше менән, кеше эше менән матур.
3. Ағасты япраҡ биҙәй, кешене хеҙмәт биҙәй.
4. Аҡыллы ир – ил ағаһы.
5. Аҡыллы ирҙең эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр.

© *З.З. Аҫылаева, 2020*

6. Ғилем – аҡылдың яртыһы.
7. Һөнәр – ирҙең ҡанаты.

Уҡытыусы: – Был мәҡәлдәр нимә тураһында?

Уҡыусы: – Хеҙмәт, аҡыл, һөнәр, ғилем тураһында.

Уҡытыусы: – Әйе, был мәҡәлдәрҙә барған һүҙ беҙ бөгөн дәрестә өйрәнәсәк шәхескә туры килтереп, атап әйтелгән кеүек. Нисек уйлайһығыҙ, кем тураһында һөйләшәсәкбеҙ дәрестә?

Уҡыусы: – Жәлил Кейекбаев тураһында.

Уҡытыусы: – Жәлил Кейекбаев – яҙыусы, ғалим, тел белгесе. Дәфтәрҙәрегеҙҙе асығыҙ, датаны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ. (Слайдтарға таянып, Ж. Кейекбаевтың тормош юлы менән ҡыҫҡаса танышып китеү).

Уҡытыусы: Өйҙә һеҙ әҫәрҙе уҡып килергә тейеш инегеҙ. Тикшереп китәйек. Өҫтәлдәрегеҙҙә ятҡан тестарҙы алып, әҫәрҙең йөкмәткеһенә ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирегеҙ. (Эште башҡарырға 5 минут ваҡыт бирелә).

Тест һорауҙары:

1.Оморҙаҡ бабайҙың ейәненең исеме:

а) Хәлил

б) Хөрмәт

в) Кәрим

2. Оморҙаҡ бабайҙың эш төрө:

а) балыҡсы

б) игенсе

в) һунарсы

3. Оморҙаҡ бабай ысынлап та аждаһа күргәнме?

а) әйе

б) юҡ

4. Геройҙар йәшәгән ауылдың исеме:

а) Ташбатҡан

б) Таштүбә

в) Ташлыҡ

5. Аждаһа тигәне нимә булып сыҡҡан?

а) быҙауҙар көтөүе

б) аттар көтөүе

в) һарыҡтар көтөүе

Уҡытыусы: – Эштәрегеҙҙе партала ултырған иптәштәрегеҙ менән алашып, тикшереп сығығыҙ. Бер дөрөҫ яуапҡа бер балл ҡуйығыҙ. (Дөрөҫ яуаптар интерактив таҡтала күрһәтелә).

Әҫәрҙең жанрын билдәләп китеү.

Уҡыусы: – Хикәйә.

Уҡытыусы: – Ни өсөн улай тип уйлайһығыҙ?

Уҡыусы: – Күләме буйынса, геройҙарҙың һаны, ваҡиғаларҙың һаны буйынса был әҫәр хикәйә жанрына тура килә. Сюжеты артыҡ ҡатмарланмаған.

Уҡытыусы: – Был әҫәрҙә Ж. Кейекбаев бер мәкәлде ике тапҡыр ҡулланған. Шул мәкәлде табып уҡығыҙ.

Уҡыусы: – Ҡурҡканға ҡуш күренә, таҡыр ерҙә аты һөрөнә.

Уҡытыусы: – Һеҙ был мәкәлде нисек аңлайһығыҙ? (Уҡыусыларҙың яуаптары).

Уҡытыусы: – Хикәйәнең геройҙары ҡурҡаҡмы, түгелме, һеҙҙеңсә?

Уҡыусы: – Оморҙаҡ бабай ҡыйыу. Мәҫәлән, ул үҙ ғүмерендә етмешләп айыу алған, йөҙҙән ашыу бүре һуҡкан. Төлкө, һуҫар, бурһыҡтарҙың һанын үҙе лә иҫәпләй алмай.

Уҡытыусы: – Ә Хөрмәт ҡыйыумы?

Уҡыусы: – Ул да ҡыйыу. Мәҫәлән, урманға барып еләк-емеш йыйып ҡайтҡан.

Уҡытыусы: – Жәлил Кейекбаев телде, телдең нескәлектәрен бик яҡшы белгән. (Һүҙлек эше).

Класс ике төркөмгә бүленә. Беренсе төркөмгә хикәйәнән тәбиғәт күренештәренә бәйле һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе табып күсерергә. Икенсе төркөмгә – һунарсылыҡҡа бәйле. (Тикшереү, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итеү).

Ролләп уҡыу.

Образдарға инеү. Хөрмәт ҡыҙыҡһыныусан, өлгөр, етеҙ, күпте белергә теләй. Уҡығанда ошо сифаттарын сағылдырырға кәрәк.

Оморҙаҡ бабай йәштәрсә етеҙ, уңған, булдыҡлы, аҡыллы, зирәк.

Уҡытыусы: Әгәр ҙә һеҙ рәссам булһағыҙ, Оморҙаҡ бабайҙы нисек итеп һүрәтләр инегеҙ?

Оморҙаҡ бабайға ҡылыҡһырлама биреү (телдән).

Мәҫәлән. Бейек тауҙың урта бер өлөшөндә Оморҙаҡ бабай баҫып тора. Ул ҡулдарын ҡаш өҫтөнә ҡуйып ҡарашын йыраҡҡа төбәгән. Йөҙө етди. Хәрәкәттәре ышаныслы. Ҡурҡыуһыҙ күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу, нимәлер көтөү сағыла.

Уҡытыусы: – Оморҙаҡ бабайға шаярыу хисе хасмы?

Уҡыусы: – Эйе. (Миҫалдар килтерәләр).

Һөйләгәндәргә таянып Оморҙаҡ бабай образы буйынса схема төҙөү. (Интерактив таҡта ҡулланып).



4. Таблицаға арҡаланып бер уҡыусы һөҙөмтә эшләй.

5. Үҙ-үҙеңде баһалау.

Уҡыусылар үҙҙәренә үҙҙәре баһа ҡуя. Дәрестең башында эшләгән тестың балдарын да иҫәпкә алырға.

6. **Өй эше биреү** (Бер эш төрөн һайлап алып эшләргә).

1) Хикәйәнең планын төҙөргә.
2) Хеҙмәт тураһында мәҡәлдәр яҙып килергә.
3) Хикәйәнең эстәлегенә тура килгән рәсем эшләргә.

7. Рефлексия.

Байымова А.М.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө лицейы

АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫН ӨЙРӘНГӘНДӘ ЗАМАНСА АЛЫМДАР ҠУЛЛАНЫУ

Заман башҡа – заң башҡа, тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәгән. Бөгөн яңыса уҡытыу – заман талабы. Беҙ, башҡорт теле уҡытыусылары, яңы технологиялар, компьютер, кеҫә телефондары беҙҙең тормошҡа әүҙем килеп кергән ваҡытта, баланы һөйләргә, аралашырға өйрәтергә, уның күңеленә һүҙ аша асҡыс та таба белергә тейешбеҙ. Беҙгә башҡорт халыҡ ижады өлгөләре ярҙамға килә.

Ә ваҡыт үҙе телебеҙ, һүҙ көсө, тел экологияһы тураһында борсолорға мәжбүр итә. Бөгөн, дөйөм алғанда, экономика ғына түгел, ә тәрбиә лә көрсөккә терәлеп килә. Шуға күрә тема бик **актуаль**. Бер һүҙ менән әйткәндә, халыҡ ижады – тәрбиә сығанағы.

Беҙҙең алда һауаны бысраныуҙан һаҡлаған кеүек телде лә һаҡлап ҡына ҡалыу түгел, ә байытыу **маҡсаты** ла тора.

Бөгөнгө көн уҡытыусыһы ФДББ шарттарында заман менән бергә атлап, уҡытыуҙа отошло юлдар эҙләргә һәм табырға, туҡтауһыҙ камиллашырға, уҡыусыларҙы һәр ваҡыт яңы технологиялар менән тәьмин итергә, яңы асыштарҙы тормошҡа ашырырға **бурыслы**.

Шулай уҡ йәш быуынды Рәсәй гражданы, уның патриоты итеп тәрбиәләү **бурысы** ла тора.

Конфуций һүҙҙәре менән әйткәндә: «Кем тарихты өйрәнеп, яңылыҡ асырға, заман менән бергә атларға һәләтле, шул уҡытыусы булырға хаҡлы».

© *А.М. Байымова, 2020*

Ә **С. Галин** «БХИ – халыҡтың күңел түрендә быуаттар буйы һаҡланып килгән һәм уның тарихын, тормош – көнүрешен, уй – теләктәрен поэтиклаштырған гүзәл хазина» тип билдәләй.

Телде өйрәнгәндә уны ҡоро күнегеүҙәр менән генә өйрәтеү артыҡ ҙур һөҙөмтәләр бирмәй. Хәҙерге заман балаларының шәхси үҫешен, ҡараштарын иҫәпкә алып лексик теманы заманса алымдар ҡулланып грамматик темаға үреп алып барыу – һәр дәрестә ҡуйылған маҡсатҡа ирешергә ярҙам итә.

3-сө лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары мәҡәл, йомаҡ, экиәттәрҙе өйрәнеү өлгөләрен айырым бер йыйынтыҡҡа тупланы.

Мәҫәлән, мәҡәлдәрҙе ошондай эш төрҙәре аша ҡабул итергә була: мәҡәлдә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡуй; мәҡәлдәрҙе хәрәкәттә күрһәт; алфавит тәртибендә мәҡәлдәрҙе уҡы; мәҡәлдең икенсе өлөшөндә, антонимдарҙы тап; төшөп ҡалған һандарҙы ҡуй; ребусты сисеп, мәҡәлдәрҙе уҡы, һүрәт буйынса мәҡәл уйла һ.б.

Йомаҡтар сискәндә, яуабын күплектә әйт, антонимдарын, синонимдарын тап, шул һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө; хәреф һәм һандар менән бәйле һ.б. йомаҡтарҙы сисеү.

Серле экиәт донъяһына алып инеү өсөн экиәтте дауам ит; был юлдар ниндәй экиәттән; иллюстрация эшлә; синквейн төҙө; һүрәттәр буйынса экиәттең исемен асыҡлау кеүек эш төрҙәрен файҙаланырға була. Ошо ҡарап үткән эш төрҙәренән башҡа үҙемдең дәрестәремдә **«Ләм – мим өндәшмәй ҡош телендәй хат-хәбәр ебәреү»** ысулын да ҡулланам.

Барыбыҙға ла интернет селтәрендә ҡулланылған хештег, мем, твит кеүек популяр төшөнсәләр билдәле. Ҡолаҡҡа ятышлы булмаған үҙләштерелгән һүҙҙәр булыуына ҡарамаҫтан, балалар көндәлек тормошта ошо һүҙҙәрҙе, билдәләрҙе ҡуллана, аңлай, үҙен заман ағышында хис итә. Ошо төшөнсәләрҙе мин дәрескә алып индем.

Мәҫәлән, хештег Инглиз һүҙе(hashtag – hash – символ «рәшәткә» + tag – билдә). # билдәһе йәки символы, аҫҡыс һүҙ йәки фраза. Башҡорт теленә **һаштамға, һаштамғалы һүҙ**тип тә тәржемә эшләргә мөмкин.

Ә мем үҙеңдең ҡарашыңды, кисерештәреңде популяр фраза йәки персонаж аша асып бирә. Инглиз телендәге мим яңғырашлы һүҙ рус теленә мем булып килеп инә. Башҡорт телендә лә ләм-мим тигән төшөнсә бар. Мәҫәлән, ләм-мим өндәшмәү. Һаштамғалы һүҙҙәрҙе (белешмәне) уҡыусылар бер-береһе менән алыша, иң уңышлыһы тип табылғандарын билдәләп мемдар ярҙамында үҙҙәренең ҡараштарын белдерәләр.

Твиттер шулай уҡ инглиз һүҙе. Уның тәржемәһен башҡортсалап әйтһәк, ҡош телендәй хат-хәбәр тигән төшөнсәгә яҡын.

Ошо яңы төшөнсәләрҙе ҡулланып эшләп булған бер-нисә генә әҙер яуаплы миҫал килтерәм. Мәҫәлән, шул уҡ мәҡәл, йомаҡ, әкиәттәр өйрәнгәндә ошондай эш төрҙәрен алырға мөмкин. Мемдар ярҙамында мәҡәлде дауам ит, мәҡәл – мемдар менән эш, әкиәттең йөкмәткеһе, һүрәт буйынса һаштамғалы һүҙ яҙыу, һаштамға ярҙамында текст төҙөү. Бер әҫәрҙең йөкмәткеһен иҫтә ҡалдырыу өсөн хештег төҙөү йәки һаштамғалы һүҙ яҙыу бик отошло. Ә икенсе дәрестә ошо бер нисә асҡыс һүҙҙәр аша йөкмәткене иҫкә төшөрөүе уңайлы. Ә уны яҙыу өсөн мотлаҡ йөкмәткене белеү кәрәк. Өйгә ошондай эш төрҙәрен биргән ваҡытта эшләмәй килеүсе бала бик һирәк, йөкмәтке буйынса һаштамғалы һүҙ яҙыу ҙа бер ни тормай.

Мемдар эшләү – иң яратҡан эш төрө, ундағы яҙыуҙар мотлаҡ башҡорт телендә. Хатта дәрес аҙағында уҡытыусыға бирергә алдан әҙерләп киләләр, үҙҙәре үк тәҡдим итәләр. Ә уҡытыусы тарафынан БИК ЯҠШЫ, АФАРИН тигән яҙыулы мемды эләктереү өсөн улар артабан да тырышып эшләй. Геройҙарға ҡылыҡһырлама биргәндә уйынлы – ысынлы ошо мемдар шулай уҡ ярҙамға килә. Айырыуса күп һөйләргә яратмаған, фекерен асыҡ итеп әйтеп бирә алмаған балаларға, төркөмдәрҙә эшләгәндә был эш төрө оҡшай.

Сығышымдың һуңында тырышлыҡ бушҡа китмәй тип әйтер инем. Быны мин үҙемдең уҡыусыларымдың уңыштарында күрәм. Төрлө конкурстарҙа йылдан – йыл еңеүселәр, призерҙар, төрлө сараларҙа ҡатнашырға теләк белдереүселәр һаны ла арта бара.

Халыҡ ижады өлгөләрен уҡыу эшмәкәрлегендә файҙаланғанда бала туған телен генә белеп ҡалмай, мәҙәниәтле, халыҡсан булып үҫә. Телде һаҡлап алып ҡалыу өсөн башҡа телдәрҙәге аралашыу алымын инҡар итеү ярамай.

Беҙгә лә, башҡорт теле уҡытыусыларына, тормош менән бергә атларға, бер төрлөлөктән арынырға, балалар теленә күсеп, уларға аңлайышлы алымдар ҡулланып, дәресебеҙҙе йәнләндереп ебәрергә, ҡыҙыҡһыныу уятырға бурыслыбыҙҙыр тигән фекерҙә ҡалам.

Байсламова А.М.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Благовещен районының Новонадеждено ауылы урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНДӘ: ПРОБЛЕМАЛАР ҺӘМ ПЕСРПЕКТИВАЛАР

Хәҙерге информацион быуат осоронда бер генә тел дә үҙенең милли сиктәренә генә бикләнеп йәшәмәгән һәм улай йәшәү мөмкин дә түгел. Интернет, замана технологиялары килеү менән милли телебеҙ ҙә глобаль донъя киңлегенә сыға.

Интернет һәм тел – бөгөн был мәсьәлә көн үҙәгенән төшмәй. Хәҙерге башҡорт теленең интернет донъяһына үтеп инеүе, уның виртуаль киңлектә йәшәй башлауы үтә мөһим. Мәсьәләнең педагогик торошон өйрәнеү үтә актуаль.

Информацион быуат заманында йәшәйбеҙ. Интернет-технологиялар телебеҙҙе өйрәнеүгә ныҡлы үтеп инә. Белеүегеҙсә электрон дәреслектәр, китаптар, электрон көндәлектәр, журналдар барлыҡҡа килде. Дәрестәрҙә төрлө сайттар, виртуаль энциклопедиялар материалдарын ҡулланыу заман талабына әүерелде.

Туған телебеҙгә өйрәтеүҙә интернет-ресурстар уҡытыуҙың иң мөһим бурыстарының береһе – уҡыусыла предметҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята. Улар ҙур теләк менән дәрескә йөрөй, һәр береһендә компьютер менән эшләү, яуап биреү теләге тыуа. Интернет ярҙамында төҙөлгән тест, викторина, сканворд, анаграмма кеүек эш төрҙәре, төрлө сайттарҙағы башҡорт халҡының мәҙәниәте, теле тураһындағы материалдар уҡыусыларҙың белем кимәлен тәрәнәйтеү өсөн дә уңайлы.

Интернеттың иң мөһим педагогик әһәмиәте – уларҙың балаларҙың уҡыу мотивацияһын һәм ҡыҙыҡһыныусанлығын уятыуҙарында, донъяуи белемдәрен арттырыуында. Әммә шул уҡ ваҡытта интернет-ресурстар бөгөнгө педагогика фәнендә информацион-предмет мөхите тыуҙырыу сараһы булып ҡаралып, коммуникатив һәм лингвистик компетенцияны үҫтереү алымы тип та билдәләнә. Интернетҡа мөрәжәғәт иткән баланың танып-белеү эшмәкәрлеге активлаша, телдең грамматик төҙөлөшөн буйынса белеме арта, материлды эҙләү һәм уҡыу, уны анализлау барышында телмәр эшмәкәрлегенең үҙенсәлекле формалары барлыҡҡа килә [3; 16].

© *А.М. Байсламова, 2020*

Дидактик йәһәттән хәҙерге педагоигкала интернет-ресурстар ике мөһим компонентты үҙ эсенә ала: телеккомуникация һәм информацион ресурстар [2; 41-59].

Телекоммуникация формаһына балалар уҡытыу практикаһында ҡулланыу мөмкинлегенә эйә электрон почта, уҡыу чаттары, видео һәм веб-конференциялар ҡарай. Видеоконференцияла ҡатаншҡан балалар дәрестә телмәр эшмәкәрлеге алып бара, телекоммуникация формалары башлыса коммуникатив компетенцияны үҫтереү маҡсатында ҡулланыла [4; 61].

Информацион ресурстар интернет селтәрендәге төрлө текст, аудио һәм видеоматериалдарҙан тора. Улар төрлө телдә булыуы бар һәм уҡыусыларҙы ҡыҙыһындырған мауыҡтырғыс тематикалы материалдарҙы туплай. Интернет-ресурстарҙың уҡыусылар тарафынан башҡорт теле дәресендә ҡулланыу мөмкинлеге булған иң бай төрө – башҡорт википедияһы. Уҡыу мәсьәләһенә бәйле интернет-ресурстар башҡорт теле дәресендә бик бай хеҙмәт үтәй. Интернет-ресурстарға бәйле материалдарҙан башҡорт теле буйынса электрон уҡыу әсбаптарын күрһәтергә була. Улар балаларҙың төрлө интернет-сайттар һәм материалдар менән даими эшләүен үҙәккә ҡуя [4; 6].

Телгә өйрәтеүҙә интернетты ҡулланыу тәрбиәүи процесты камиллаштыра барырға тейеш. Бала шәхесенең үҫешенә йүнәлеш биреү – уҡытыусы алдында торған иң мөһим бурыс.

Башҡорт теленә өйрәтеүҙә интернет файҙаланыу балаларҙың ҡыҙыҡһыныусанлығын арттырыу сараһы, дәрестең яңы замана талаптарына тап килеүен күрһәтә.

Телекоммуникацион саралар менән хәҙерге замана балаһы бала саҡтан таныш була, төрлө Skype, үҫмерҙәр өсөн социаль селтәрҙәр, электрон почта менән уҡыусылар өйҙә үк таныш булалар. Башҡорт теле дәрестәрендә бындай телекоммуникацион сараларҙы файҙаланыу буйынса методик кәңәштәр әлегәсә юҡ.

Электрон почта ҡулланыу – уҡыусыларҙың уҡытыусы менән хеҙмәттәшлеген ойоштороу һәм өйгә эштәрҙе уңайлы тикшереү алымы. Электрон почтаны ҡулланыуҙың бер алымы – балалар араһындағы хеҙмәттәшлектең ойошторолоуы. Телекоммуникацион сара ике баланың үҙ-ара хат алышыуы формаһында башҡарыла ала. Мәҫәлән, «Хат яҙыу» темаһын өйрәнгәндә, балалар парҙарға бүленә, уларға бер-береһенә өлгө формала хат яҙыу эше йөкмәтелә. Уҡытыусы электрон почта буйынса слайд формаһындағы өлгөнө тарата.

Телмәр үҫтереү дәресендә урта кластарҙа балалар менән чат ярҙамында уйын эшмәкәрлеген ойошторабыҙ.

Уҡыусылар персональ компьютерҙар йәки мәктәптә ҡабул ителгән бәләкәй моноблоктар, улар булмаған осраҡта кеҫә телефондары ярҙамында чатта бәйләнешкә инә. Мәҫәлән, Алдан башҡорт шрифтары программалары интернет селтәренән алына. Уҡыусыларға һүҙҙәр өлгөләре бирелә: Урал, Ҡурай, Башҡортостан, заман, интернет, башҡорт теле. Балалар чатта бер-бер артлы һөйләмдәр төҙөп яҙа, диалогтар төҙөү эше ойошторола. Иң актив ҡатнашыусы һәм чатта һөйләмдәр яҙған уҡыусы билдәләнә. Чатта иң аҡыллы фекер йәки текст төҙөгән уҡыусы һайлана. Балаларҙың аралашыу өлгөләре электрон проекторҙа күрһәтелә, уҡыусылар менән хаталар өҫтөндә эш башҡарыла.

Интернетты файҙаланып, башҡорт теле дәрестәрендә байтаҡ уҡытыу-тәрбиә бурыстарына өлгәшергә мөмкин. Хәҙерге көндә интернет селтәрендә төрлө сайттарҙа башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы, теле тураһында байтаҡ материалдар тупланған, электрон китапханалар бар. Улар барыһы ла уҡытыуҙың һәр этабында ҡулланыла ала.

Мәҫәлән, бөгөнгө интернет селтәрендә башҡорт әҙәбиәте теге йәки был кимәлдә яҡтыртҡан байтаҡ сайттар йәшәп килә. Шулар араһында милли гәзит-журнал сайттары ҙур урын биләй. «Шоңҡар.ру.» башҡорт йәштәре журналының рәсми сайты. Әлеге ҡиәфәттә донъяны солғаған интернет селтәрендә сабый ғына кеүек, әммә йөкмәткеһенең байлығы, Башҡортостан, Рәсәй һәм донъя яңылыҡтарынан артта ҡалмауы йәһәтенән саф башҡортса «һөйләшеүсе» сайттар араһында алдынғылар сафында. Сайттың тарихына килгәндә, әлбиттә, ул элек тә бар ине. «Мәғлүмәтле, тимәк, ҡоралды» тигән ҡараштан сығып эш итә, сайтты төҙөүселәр. Сайттың әҙәби даирәһе лә киң: шиғырҙар, очерктарҙан өҙөктәр, әҙәби яңылыҡтар һәм башҡалар.

«Йәшлек.ру» сайты 2008 йылда асылды. Әлеге көндә сайт үҙенең режимында эшләй. Ҡағыҙ битендә сыҡҡан бөтөн материалдар сайтта ла онлайн рәүешендә шунда уҡ көн күрә. Бынан башҡа, сайтта конкурстар үткәрелә, ҡыҙыҡ мәҡәләләр уҡырға була. Улар араһында әҙәби тормошҡа арналған материалдар ҙа етерлек.

Туған телебеҙгә өйрәтеүҙә социаль селтәрҙәрҙәрҙәге төркөмдәргә таянып була. «Вконтакте.ру» сайтында башҡорт әҙәбиәтенә арналған киң популяр байтаҡ төркөмдәр һәм блогтар йәшәп килә. Шуларҙың береһе «Асылым-шиғриәт» тип атала һәм башҡорт телендәге бөтә шиғриәт һөйөүселәрҙе үҙендә туплаған. Был төркөмдә хәҙерге шиғриәт тураһында фекер алышыуҙар үткәрелә, уҡыусылар үҙ шиғырҙарын урынлаштыра, яраткан шағирҙар тураһында әңгәмәләр алып барыла.

Үкенескә ҡаршы, был төркөмдә бик күп халыҡ торһа ла, унда актив эш алып барыла тип әйтерлек түгел.

«Вконтакте.ру.» сайтында тағы ла бер популяр бит – ул Рәми Ғарипов ижадына арналған төркөм. Был төркөм хәҙерге әҙәбиәт һөйөүселәр араһында иң попауляр булыуын билдәләргә кәрәк. Блогта Рәми Ғариповтың шиғырҙары урынлаштырылған, уларҙың төрлө статус сифатында социаль селтәрҙә таралып китеүе лә блогтың популярлығын тағы ла арттыра.

Социаль селтәр битендә төрлө милли гәзит-журналдарҙың шәхси блогтары ла бар. Уларҙа йыш ҡына әҙәби тормош тураһында фекер алышыуҙар үткәрелә.

Шулай итеп, бөгөн телебеҙҙең йәшәйешен һәм киләсәген интернет селтәренән башҡа күҙ алдына ла килтереүе мөмкин түгел. Киләсәктә интернет селтәренең һәм социаль биттәрҙең халыҡ тормошондағы урынын иҫәпкә алғанда, башҡорт теле замана менән бергә атлап был яңылыҡтарға ылығырға тейеш. Хәҙерге интернет селтәрендә гәзит-журнал сайттары һәм милли порталдар туған телебеҙ менән таныштырыу яғынан ҙур әһәмиәткә эйә. Был сайттар бөгөнгө көндә популяр булыуына килгәндә, уларҙың телебеҙҙе пропагандалауҙағы өлөшө иң ҙуры тип әйтергә мөмкин. Әммә башҡорт теленә арналған энциклопедик пландағы сайттарҙың етмәүе күҙгә ташлана. Уҡыусылар өсөн белем биреү порталдарын булдырыу мәсьәләһе көнүҙәк проблема булып ҡала килә.

Әҙәбиәт:

1. Башҡорт телен уҡытыуҙа яңы методтар, алымдар һәм информацион технологиялар. – Өфө: БМКИ, 2005. – 187 б.
2. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу (методик ҡулланма). – Өфө, 2008. – 128 бит.
3. Сысоева П.В., Евстигнеев М.Н. Использование современных интернет-ресурсов в обучении языку и культуре // Вестник МГУ. – 2010. – №3. – 26 с.
4. Трофимова Г.Н. Языковой вкус Интернет-эпохи в России. – М.: Изд-во РУДН, 2004. – 254 с.

Вәхитова З.С.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Салауат ҡалаһының 25-се Башҡорт гимназияһы

Ш. БАБИЧТЫҢ «ҠАНДАЛА» БАЛЛАДАҺЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт әҙәбиәтендә Ш. Бабич ижады айырым урын алып тора. Шағирҙың барлыҡ әҫәрҙәре тыуған илгә, халҡына, телгә һөйөү менән бәйле. Яҙыусы күтәргән проблемелар бөгөнгө көндә лә актуаллеген юғалтмай. Был йәһәттән Ш. Бабичтың «Ҡандала» балладаһы айырым иғтибарға лайыҡ.

Балладаның төп идеяһы кешенең рухи азатлығын асыуға ҡайтып ҡала. Ҡандала образы аша автор уғры, ҡан эсеүсе кешеләрҙе һүрәтләй. Башҡорттарҙы наҙанлыҡтан, бер-береһенә ҡарата яуызлыҡ күрһәтеүҙән ҡасырға өндәй.

Әҫәрҙең сюжеты ҡатмарлы түгел – ҡандала һәр төн һайын үҙенә ҡорбан эҙләргә, ҡан эсергә һунарҡа сыға. Тән буйлап йөрөй, башына менә, маңлайҙан шыуыша, ҡашҡа менә, керпеккә төшә һәм күҙҙәр янына килә. Күҙҙәр йомолғас, ҡандала үҙ маҡсатына барып етә һәм күҙ ҡабағынан ҡанды эсә башлай. Ауыртыуҙан күҙҙәр уяна, тик бер нимә лә ҡаршы эшләмәйҙәр. Шул ваҡыт ҡул хәрәкәткә килә, ҡандала ҡасыу яғын ҡарап, керпектәр араһына инеп йәшенә. Бына ҡулдар һелтәнә, эҙләй, тик ҡандаланы таба алмағас тынысланалар. Ҡан эсеүсе артабан маңлай буйлап китә, үҙе ҡурҡа. Осоп китерҙәй еренән иҙәнгә барып ҡолап, эсен яра, тирә-яҡҡа ҡан сәсрәп китә һәм үҙен ҡотҡарыуын үтенә. Ҡул уның үтенесен ишетә, йәки кеше ҡанын эсеп йөрөгән өсөн ярҙамға ашыҡмай. Ҡулдар унан көлә, ләкин күҙҙәр генә моңһоу.

Ш. Бабич күҙҙәр образы аша донъяға битараф, маҡсатһыҙ ҡараған, моңһоу кешеләрҙе һүрәтләй. Үҙҙәренең фекере булмаған кешеләр, бер өнһөҙ башҡалар ҡотортоуына бирелеп, фажиғағә бара. Ҡандала күҙҙәрҙең матурлығын һурып, тормошто ҡара төҫтәргә биҙәй, ә үҙе бәхетле булып ҡала. Ҡулдар, киреһенсә, тырыш, эшлекле кешеләрҙе символлаштыра. Башҡорт халҡында «күҙ – ҡурҡаҡ, ҡул – батыр» мәҡәле әҫәрҙең идеяһын тулыһынса аса.

Шулай итеп, Ш.Бабич «Ҡандала» балладаһында рухи яҡтан азат, көслө рухлы кешеләрҙе данлай.

Әҙәбиәт:

1. Башҡорт шиғриәте антологияһы. – Өфө: Китап, 2008. – 350 бит.

© *З.С. Вәхитова, 2020*

2. Ризаитдин Фәхретдин, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич / Төҙөүсеһе И.Ә.Шарапов – Өфө: Китап, 2007. – 382 бит.

Галимова И.А.,
учитель башкирского языка и литературы
МАОУ «СОШ № 7» г.Стерлитамак

В ГОСТЯХ У СКАЗКИ
(сценарий внеурочного занятия)

Цель: ознакомить обучающихся с башкирскими сказками, вызвать интерес к чтению.

Задачи:

- закрепить представления детей о сказках (вспомнить названия любимых сказок, героев);
- формировать запас литературных художественных впечатлений, личностную позицию;
- научить детей инсценировать (драматизировать) знакомые произведения;
- воспитать интерес к художественной литературе;
- воспитать умение детей дружно и согласованно работать в небольшом коллективе;
- пробудить в детях интерес к театрализованной игре, развивать интонационную выразительность речи, формировать умение строить диалог между сказочными героями,
- обоготить словарный запас детей;
- вызвать положительный эмоциональный отклик, желание принять участие в командных соревновательных играх развивающего характера.

Воспитательные технологии:

Технология сотрудничества – развивать умения правильно анализировать и делать выводы, формулировать и задавать вопросы, умение общаться со своими сверстниками.

Игровая технология – развивающие игры: развитие внимания, памяти, речи, мышления, умений сравнивать, сопоставлять, находить аналогии, воображения, фантазии, творческих способностей.

Оборудование:

1. Рисунки сказочных героев.
2. Сундучок со сказочными вещами.

© *И.А. Галимова, 2020*

3. Выставка книг.
4. Мультимедийное оборудование.
5. Декорации.

Ход занятия:

- Здравствуйте, ребята! Посмотрим, видео (отрывок из передачи «Сәңгелдәк»).

- Откуда это видео?

- А что за передача «Сәңгелдәк»?

- Вы смотрите «Сәңгелдәк»?

- Кого или что вы увидели на видео?

- Акбузат герой какого произведения?

- И еще какие образы увидели и из каких произведений? (легенда «Семь девушек», танец).

- Кто расскажет легенду? (Дети рассказывают легенду).

- Дети, наш курс внеурочной деятельности называется «Бабушкин сундучок». Я сегодня на урок принесла настоящий бабушкин сундук. Вы все в каникулы, выходные ездите в деревню, кто-нибудь видел в деревне такой сундук?

- Что хранят ваши бабушки в этих сундуках? (Сундук готовили родители невесты и складывали туда приданное невесты)

- А как вы думаете, что находится внутри нашего сундука?

- Бабушки любят шить, вышивать, вязать. А когда они вяжут и рядом с ними вы, что они любят вам рассказывать? (Сказки).

- Ну, конечно сказки.

- А вот внутри нашего сундука находятся сказочные герои (открываю сундук, достаю куклы).

- Это кто?

- Они, все, из какой сказки? (Кот, петух и лиса).

- А как вы думаете, чему будет посвящено наше занятие? О чем мы будем на уроке говорить?

- Правильно, наш урок мы сегодня посвятим сказкам и назовем его «В гостях у сказки».

- Ребята, вы любите сказки? А почему?

-А с чего начинается сказка? (с зачина).

- Чем заканчивается? (концовкой).

- На какие три вида делятся сказки?

- Почему говорят народные сказки?

- Какие русские народные сказки вы знаете?

- Какие башкирские народные сказки вы знаете?

- Молодцы, вернемся к нашей сказке. Этих персонажей сказок как мы их называем?

- Таких кукол, где можно встретить?

- Правильно, в кукольном театре.

- А люди, которые руководят ими, как мы их называем? (кукловоды).

- Когда же появились первые куклы, и какие виды кукол бывают? Давайте, посмотрим на экран. Слайд 1

В кукольном театре используются такие куклы. Слайды 2-9

- Как известно, 2019 год в РФ назван годом Театра.

- А вы любите посещать театры?

- Я вам предлагаю сегодня на уроке создать свой кукольный театр и инсценировать башкирскую сказку «Как собака нашла себе хозяина». Для этого я группам раздам эскизы, вы из них при помощи клея, ножниц, скотча должны сделать куклы, а потом выбираете кукловода, по сценарию организуем кукольный театр. А одна группа займется оформлением сцены.

Работа по группам. Организация кукольного театра. Инсценирование сказки.

- Молодцы! Кукольный театр вам понравился?

- Что нового узнали сегодня на занятии?

Ғатин М.К.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Стәрлетамаҡ ҡалаһының КСДББМ ДБМУ-ның 3-сө филиалы

БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ УРМАН КӘСЕБЕ ЛЕКСИКАҺЫ: ӨЙРӘНЕҮ ТАРИХЫ ҺӘМ ТИКШЕРЕҮ ЮҪЫҠТАРЫ

Билдәле булыуынса, кәсеп-һөнәр лексикаһы профессиональ лексика өлкәһенә ҡарай. Шуға ла беҙгә был йәһәттән «профессиональ лексика», «профессионализм» тигән терминдарҙың йөкмәткеһенә асыҡлыҡ индереү дөрөҫ булыр. Мәҫәлән, телсе-лексикограф Г.Д. Зәйнуллина ошондай ҡарашты яҡлағаны билдәле: «… **профессионализм**. Төрлө профессия өлкәһендә эшләгән кешеләрҙең телмәрендә ҡулланылған махсус һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр …» [2; 117].

Телсе-лексиколог М.Х. Әхтәмов: «Профессионализмдар – теге йәки был профессия өлкәһендәге предметтарҙың ошо һөнәр кешеләре араһында таралған ярым рәсми атамаһы» [12; 117] тигән ҡараш яғында. Әлбиттә, уның, билдәләмәһендә бер мөһим яңылыҡ бар: ул – *ярым рәсми атамаһы*, тигән һүҙҙәрҙә [12; 108]. Тимәк, профессионализмдар

© *М.К. Ғатин, 2020*

ҡулланылышы яғынан бик тә сикле булып сыға, сөнки улар тик ошо даирәлә генә эш иткән шәхестәрҙең телмәренә хас күренеш. Олуғ телсебеҙ профессионализмдар менән терминдарҙың икеһенең ике күренеш икәнен айырып күрһәтә.

Эйе, бөгөнгә тиклем башҡорт тел ғилеменең тарихында урман кәсебе лексикаһын тикшереү буйынса махсус, йәғни монографик тикшеренеүҙәр булманы. Был йәһәттән бер генә эште айырып күрһәтергә була: ул А.И. Йәрмөхәмәтов тарафынан төҙөлгән «Урман эше терминдары һүҙлеге» (Өфө, 1954) [11].

Унан һуң 1966 йылда беҙҙең бөйөк телсебеҙ Ж.Ғ. Кейекбаев үҙенең «Хәҙерге башҡорт теле лексикаһы һәм фразеологияһы» исемле дәреслегендә, ундағы 42-се «Профессиональ лексика йәки кәсеп-һөнәр лексикаһы» параграфына «Урман кәсебенә ҡараған профессиональ һүҙҙәр» төркөмөн индерә: *«... Башҡорт АССР-ының ярты территорияһы тиерлек тау-урман менән ҡапланған һәм уның рельефы бик төрлө. Шуға күрә ер өҫтө рельефтәренең атамалары башҡорт телендә бик ныҡ үҫкән. Мәҫәлән, тик бер тау төрҙәренең генә башҡорт телендә ун биштән артыҡ атамаһы бар. Юғарыла әйтелгәнсә, ҡайһы бер ағастарҙы ике-өс исем менән атау характерлы бер үҙенсәлек һанала (Ҡайын, сауыл һәм сауҡа).*

Урман кәсебенә ҡараған һүҙҙәр: бүрәнә тартыу, бүрәнә ҡыуыу, бүрәнә әрсеү, бүрәнә башы (иҫәпләгәндә), бүрәнә һалыу, ... дегет баҙы, ҡайын дегете, дегет үртәү (ҡайнатыу) ...һ.б.». Автор уҡыусыларға бөтәһе – 56 берәмек һүҙ тәҡдим иткән [3; 152-156].

Урман кәсебенә ҡағылышлы лексика беҙҙең телсе-диалектологтарыбыҙ тарафынан үҙҙәренең монографияларында ла ныҡлы урын алды.

Билдәле телсе-диалектологыбыҙ Н.Х. Мәҡсүтованың «Башҡорт теленең көнсығыш диалекты» монографияһында түбәндәге һүҙҙәр килтерелә: а) Әй һөйләше (*сауыл* «ағас, урман» – әҙ.т. *йәш сауҡа* (семантик диалекттары); *балаҡуш* «һөйрәтке» (рус.т.) һ.б.) б) Арғаяш һөйләше (*һал* «һөйрәтке») – әҙ.т. *һал*; һыу транспорты (семантик диалектизм), һ.б.); в) Салйоғот һөйләше (*ағас* – арба; *ҡуһыҡ* – тарантас (лексик диалектизмдар); *арыш* «тәртә» – әҙ.т. *арыш* (бойҙай культураһының бер төрө); *дулгуша* «тарантас», *сидилка* «ыңғырсаҡ» (рус.т.) һ.б.; г) Мейәс һөйләше (*тәгәс* – әҙ.т. *сынаяҡ* «лексик диалектизм»); д) Ҡыҙыл һөйләше (*айаҡ* «сынаяҡ» (лексик диалектизм); *шур* «ҡайын һуты» - әҙ.т. *минераль һыу* (семантик диалектизм) һ.б.) [4; 67, 70, 158, 164, 205, 206, 244, 245, 287].

Хәҙер С.Ф. Миржанованың «Башҡорт теленең көньяҡ диалекты» (1979) исемле монографияһына күсәйек: а) Эйек-Һаҡмар (*драндас*

«тарантас», *можға* – әҙ.т. *моҙға*; *йуныскы* – әҙ.т. *юнышҡы* һ.б.) [5; 24 - 30]; б) Урта һөйләш (бында урман эшенә ҡараған 187 лексик, фонетик, морфологик диалектизмдың булыуы хаҡында әйтелә; уларҙың 26-һы ошо бүлексәлә («Урман эше терминдары») бирелә – *әрҙенә/әрҙенә ҡырҡыу* (әҙ.т. *ағас ҡырҡыу*), *киҫек* (әҙ.т. *киҫелгән ботаҡ*), *дүмҫә – түңкәк – төпҫә* (әҙ.т. *төп*), *тәгәрмәс бүкәне* (әҙ.т. *көпсәк*), *таҙа дегет* (ҡайын дегете) һ.б.) [5; 156-157]; в) Дим һөйләше (был өлкәгә бөтәһе 187 термин ҡарай; шуларҙың 19-ы лексик-семантик һәм фонетик диалектизмдар рәүешендә сығыш яһай – *лагун* (әҙ.т. *дегет күнәге, силәге*); *әрәмә* (әҙ.т. *бешәлек*); *тапыҡ, табыҡ* (әҙ.т. *тап*), *туйыҙ* (әҙ. т. *туҙ*) һ.б.) [5; 232].

Урман кәсебенә ҡараған лексика башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында ла әүҙем ҡулланыла: *улә* (1) ҡабыҡтан эшләнгән ҙур ҡоҫҡо;2) ҡабыҡтан эшләнгән ҡумта; 3) ҡабыҡтан эшләнгән сана, *керәж, керәш* (бүрәнә). Был миҫалдар Ҡариҙел һөйләшенән алынды [6; 68]. Танып һөйләшенән өлгө: *әртәнә* – әҙ.т. *әрҙәнә* (фин-уғыр телдәренән үҙләштерелгән һүҙ) [6; 120]. Түбәнге Ағиҙел – Ыҡ һөйләшенән алынған миҫалдар: *матрус* – әҙ.т. *урман ҡарауылсыһы* (лексик), *пшәлек* – әҙ.т. *бешәлек*, *чөй* – әҙ.т. *шына*, *түмәркә* – әҙ.т. *түмәр*, *тәгәрмәй* – әҙ.т. *тәгәрмәс*, *ҡурыз* – әҙ. т. ҡурыҙ һ.б. [6; 185].

Ғәйнә һөйләшенән миҫалдар: *ылып* «туҙҙан эшләнгән кәрзин», *эргәк/кәртағач* [6; 277].

Шулай итеп, беҙең тарафтан килтерелгән миҫалдар урман кәсебе лексикаһының һаман да системалы итеп тикшерелмәүен тағы ла бер тапҡыр иҫбат итә.

Системалы тикшереү лексик-семантик яҡтан тулы анализ эшләү менән бәйле. Лексик-семантик төркөмдәрҙең нигеҙендә – реаль ысынбарлыҡтағы конкрет күренеш йәки эшмәкәрлек ята.

Әлбиттә, тағы ла ошоно өҫтәр инек: терминдарҙың лексик-семантик классификацияһына күсер алдынан тематик классификацияларҙы ла байҡап сығырға кәрәктер, моғайын.

Совет этнографияһы тарихында беренсе булып был проблемаға билдәле ғалим-этнограф С.И. Руденко (1985-1969) үҙенең «Башкиры: историко-этнографические очерки» (Өфө, 2006) исемле монорафияһында мөрәжәғәт итә: ул башҡорттарҙың урман кәсебе менән бәйле предметтарҙы, эшмәкәрлекте «Йорт-ҡуралағы етештереү эштәре («Домашнее производство»)» [10; 128-133], «Торлаҡ һәм төҙөлмәләр («Жилище и постройки») [10; 172-210] бүлектәрендә ҡарай.

Ғалим-этнографтар Н.В. Бикбулатов менән В.В. Пименов «Народы мира: историко-этнографический справочник» (М., 1988)

исемле белешмә-китапта урынлашҡан «Башкиры» мәҡәләләрендә урман кәсебе тураһында «… ... *урман һәм урман-дала башҡорттары йорттарын буранан һалған…*» [1; 93], тип яҙған. 1997 йылда донъя күргән «Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия» тигән хеҙмәттә этнограф М.Ғ. Муллағолов «Урман промыслалары» мәҡәләһендә урман ҡырҡыу, һал менән ағас ағыҙыу, шулай уҡ ағастан көнкүреш һәм хужалыҡ әйберҙәре яһау тураһында бәйән итә [7; 589-590].

Урман кәсебенә (йәғни, урман промыслаларына) бағышланған тәүге монографик хеҙмәт М.Ғ. Муллағолов тарафынан 1994 йылда нәшер ителә; ул – «Лесные промыслы башкир», тип атала [9].

Был китап 2000 йылда башҡорт телендә «Башҡорттарҙың урман кәсебе» исеме аҫтында донъя күрҙе [8]. Автор башҡорттарҙың был хужалыҡ өлкәһенә ошонда баһа бирә: «*Халыҡ кәсептәре, атап әйткәндә, ағас эшкәртеү һәм ағас материалдарын эшкәртеү, этнографияның традицияға әйләнгән тикшеренеү өлкәһе булып һанала*» [8; 5].

Ошоларҙан сығып, ул урман кәсептәре төрҙәрен алтыға бүлә һәм уларҙы алты бүлек эсендә ҡарай: а) «I бүлек. Ағас һәм ағас материалдарын әҙерләү»; б) «II бүлек. Дуға, сана табандары, тәгәрмәс туғыны бөгөү. Транспорт ҡорамалдары әҙерләү»; в) «III бүлек. Һауыт-һаба яһау. Мискә эшләү»; г) «IV бүлек. Төрлө нәмәләр үреү, арҡан ишеү, әйбер һуғыу»; д) «V бүлек. Туҙҙан һәм ҡабыҡтан яһалған әйберҙәр»; е) «VI бүлек. Ағас материалдары эшкәртеү» [8; 92-191].

Тимәк, ошоларҙан сығып, «Урман кәсебе» лексик-семантик төркөмө түбәндәге тематик төркөмдәргә тарҡала: 1) ағас һәм ағас материалдарын әҙерләү лексикаһы (был тематик төркөм үҙенең составы буйынса бик бай булып сыҡты; уның эсендә генә ете (7) төркөмсә барлыҡҡа килде: а) ағас әҙерләү эштәре лексикаһы; б) ҡыуғын лексикаһы: тыранса һәм ағас материалдары әҙерләү лексикаһы; в) транспорт ҡорамалдары әҙерләү өсөн ағас материалдарын етештереү лексикаһы; г) йорт-кәрәк-яраҡтары етештереү өсөн материалдар лексикаһы; д) мискә етештереү өсөн материал әҙерләү лексикаһы; е) кәрзин үреү өсөн сеймал етештереү лексикаһы; ж) ҡабыҡ, ҡурыс, сей йүкә, һалабаш әҙерләү лексикаһы; ағас ҡабығы әҙерләү лексикаһы); 2) дуға, ағас табандары, тәгәрмәс туғындарын бөгөү лексикаһы. Транспорт ҡорамалдары әҙерләү лексикаһы (Билдәле, урман кәсептәренең башҡа төрҙәре һымаҡ уҡ, транспорт ҡорамалдары етештереү һөнәрҙәре, яҡшы сифатлы урмандар булған ерҙәрҙә айырыуса ныҡ таралған күренеш. Әммә бындай һөнәр менән төбәктең урманлы-таулы яғында йәшәгән халыҡ ҡына шөғөлләнгән тигән һүҙ түгел. Ундай һөнәрсе-белгестәр

Башҡортостаныбыҙҙың урманлы-далалы өлөшөндә лә булған, әлбиттә [8; 52-53]. Был бүлек ун бүлексәнән тора); 3) һауыт-һаба яһау лексикаһы. Мискә эшләү лексикаһы (Түбәндәге төркөмсәләргә тарҡала: а) ағасты тошлай соҡоп һауыт-һаба етештереү лексикаһы; б) ағасты соҡоп яһалған төбө ҡуйылмалы һауыт-һаба етештереү лексикаһы; в) мискә һәм көбө етештереү лексикаһы; 4) төрлө нәмәләр үреү, арҡан ишеү, әйбер һуғыу лексикаһы (Хәҙер был урман кәсебен тулыһынса аңлатып бирәйек: борондан билдәле ки, башҡорт һөнәрмәндәре, ағас материалдарын төрлөсә файҙаланып, төрлө нәмә эшләүгә өлгәшкән [8; 128]. Шуны ла аңларға кәрәк: үреү эше ғәҙәттә *кәрзинкә, ҡурыс, сабата, ыңғырсаҡ* һәм башҡа нәмәләр эшләүгә, *ишеү-бау, арҡан* әҙерләүгә, *һуғыу-септә* һәм *ҡап* еткерергә туранан-тура бәйле була; 5) туҙҙан һәм ҡабыҡтан яһалған әйберҙәр лексикаһы (Был төркөмдөң төҙөлөшө ошо төркөмсәләрҙән ғибәрәт: а) сеймалдың атамалары (*туҙ, ҡабыҡ*); б) ҡабыҡтан эшләнгән ҡаралтыларҙың атамалары (*шоман, ҡабыҡ аласыҡ, ҡулаша*); в) ҡабыҡты ҡуптарыу өсөн ҡулланған ҡоралдарҙың атамалары (*балта, һәргәү, ҡыйғаҡ*); г) туҙҙы һыҙырып алыу өсөн ҡулланған ҡоралдарҙың атамалары (*балта, бысаҡ*); д) туҙҙан эшләнгән һауыт-һабаның, башҡа кәрәк-яраҡтың атамалары (*бал ҡорто ҡашығы, алыуыс, ҡаяҙ, туҙаяҡ, тырыз, төйөҙ, туҙ ҡомған*); е) ҡабыҡтан яһалған предметтарҙың атамалары (*шыуман, аласыҡ, моҙға*, *тубал, мәрке*) һ.б.); 6) ағас материалдары эшкәртеү (Билдәле булыуынса, күмер үртәү, ыҫмала, дегет етештереү ҙә урман төбәктәрендә үҙ аллы кәсеп булып һанала [8; 175]. Шуға ла бында өс төркөмсәнең булыуы көн кеүек асыҡ).

Ғилми анализыбыҙҙың икенсе юҫығын урман кәсебенә ҡараған лексиканың яһалыш үҙенсәлектәре менән бәйләр инек.

Урман кәсебе терминдары араһында аффиксация юлы менән яһалған һүҙҙәр йыш осрай. Ундайҙарҙа юғары продуктив аффикстар ярҙамында яһалғандары өҫтөнлөк итә. Ғәҙәттә, уларҙың рәтенә *-лыҡ/-лек, -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк; -сы/-се, -со/-сө; -ыш/-еш, -ош/-өш, -ш; -ма/-мә; -ҡыс/-кес, -ғыс/-гес, -ғос/-гөс, -ҡос/-көс* аффикстары инә.

Мәҫәлән, *кәсепсе, һөнәрсе, урмансы, һалсы* һүҙҙәрендә *-сы/-се* аффикстары кешенең шөғөлөн, профессияһын, башҡарған эшен белдерә. Был һүҙҙәрҙең ҡалыбы ошолай була: *кәсеп+се, һөнәр+се, урман+сы, һал+сы.*

Хәҙер *-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк* аффиксына күсәйек: мәҫәлән, *ҡыуғынсылыҡ* һүҙе. Был осраҡта *ҡыуғынсы* һүҙе, нигеҙ булараҡ, билдәле эшкә, һөнәргә, кәсепкә, шөғөлгә эйә булған шәхесте белдерә.

Тимәк, *-лыҡ* аффиксы ҡушылыу менән билдәле бер профессияның атамаһы килеп сыға.

Төй-гөс, шыуҙыр-ғыс, бута-ғыс, ал-ғыс, эл-гес, бор-ғос һүҙҙәре лә аффиксация ысулы менән барлыҡҡа килгән: *төй-, шыуҙыр-, бута-, ал-, эл-, бор-* (ҡылымдан килгән нигеҙҙәр); *-гөс, -ғыс, -гес, -ғос* аффикстары, инструмент мәғәнәһен биреп, атама барлыҡҡа килтерә.

Быс-ҡы, һыҙыр-ғы, һөжөр-гө һүҙҙәренең яһалышында ла ошо юл ята: а) *быс* (ҡылым нигеҙ) *+ҡы* (инструмент мәғәнәһе аффиксы); б) *һыҙыр* (ҡылым нигеҙ)+*ғы* (инструмент мәғәнәһе аффиксы); в) *һөжөр* (ҡылым нигеҙ)+*гө* (инструмент мәғәнәһе аффиксы).

Санаса, түмәрсә һүҙҙәре лә аффиксаль юл менән барлыҡҡа килгәндәр:был осраҡта *-са* аффиксы предмет мәғәнәһен бирә, әммә ләкин ул предметтарҙың бәләкәй формалы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Башҡорт телендә *-ма/-мә* аффикстары конкрет мәғәнәгә эйә булған предметтарҙы, ысынбарлыҡ күренештәрен аңлатып бирәләр: мәҫәлән, *ҡаптыр+ма.*

Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышы килгәндә, улар бер-нисә юл менән барлыҡҡа килә.

Уларҙың беренсе варианты ошоларҙан ғибәрәт: 1) ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе компоненты исем менән килә (мәҫәлән, *туҙаяҡ* (*туҙ+аяҡ*); *ҡулаша (ҡул+аша*); һауыт-һаба һәм махсус ҡорамалдарҙың атамалары); 2) ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе компоненты сифат булған осраҡта (мәҫәлән, *сеймал (сей+мал), ҡарағас* (*ҡара+ағас) һ.б.*); 3) ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе компоненты рәүеш булғанда *(*мәҫәлән, *ҡушкәмә (ҡуш+кәмә) һ.б.*); 4) ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе компоненты һан булғанда (мәҫәлән, *өстаған (өс+таған) һ.б.*).

Икенсе вариант бер-нисә һүҙ теҙмәһенән яһалған осраҡ менән бәйле.

Беренсе ҡалып ошолай башҡарыла:исем+эйәлек формаһының 3-сө затында тороусы исем (мәҫәлән,*ҡарағай төпһә-һе, дегет баҙ-ы, күмер иләг-е, тырыз төб-ө, бал ҡорто ҡашығ-ы, һалабаш шәлкем-е, утын суҡмар-ы* һ.б.).

Икенсе ҡалыптың төҙөлөшө: төп килеш формаһындағы исем (төп компонент), ә уның алдында, беренсе компонент булып, аныҡлаусы функцияһында йә исем (мәҫәлән,*тимер балта, транса яргыс, шыршы таҡта, йүкә түмәрсә, ағас беҙ* һ.б.), йә сифат (мәҫәлән, *япраҡлы ағас, ылыҫлы ағас, сей ағас, йәш ағас, оҙон арба, сей йүкә, йомшаҡ йүкә, йомро кәмә, кәкре йышҡы, көрән һағыҙ, ҡыҙыл һағыҙ, аҡ һағыҙ, ҡара һағыҙ* һ.б.).

Күреүебеҙсә, бында икенсе ҡалыпҡа миҫалдар ҡырҡа күберәк: тимәк, был факт урман кәсептәренең төрлөлөгөнә ишара яһай.

Шулай итеп, башҡорт теленең урман кәсебе лексикаһы телебеҙҙең тармаҡ лексикаһының бер өлөшөн тәшкил итә.

Әҙәбиәт:

1. Бикбулатов Н.В., Пименов В.В. Башкиры // Народы мира: историко-этнографический справочник / Н.В. Бикбулатов, В.В. Пименов / Отв. ред. Ю.В. Бромлей. – М.: Сов. энциклопедия, 1988. – С. 93-94.
2. Зәйнуллина Г.Д. Русса-башҡортса лингвистик терминдар һүҙлеге / Г.Д. Зайнуллина. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 184 б.
3. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы: Уҡыу әсбабы / Ж.Ғ. Кейекбаев. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1966. – 274 б.
4. Максютова Н.Х. Восточный диалект башкирского языка (в сравнительно-историческом совещании) / Н.Х. Максютова. – М.: Наука, 1976. – 292 с.
5. Миржанова С.Ф. Южный диалект башкирского языка / С.Ф. Миржанова. – М.: Наука, 1979. – 272 с.
6. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние) / С.Ф. Миржанова. – Уфа: Башкирское книжное изд-во, 1991. – 296 с.
7. Муллағолов М.Ғ. Урман промыслалары // Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Урыҫсанан тулыландырылған һәм төҙәтелгән тәржемәһе / М.Ғ. Муллағолов / Баш мөхәррир Р.З. Шәкүров. – Өфө: «Башҡорт энциклопедияһы» дәүл.ғилм. нәшр., 1997. – 589-590-сы б.
8. Муллағолов М.Ғ. Башҡорттарҙың урман кәсебе: Монография / М.Ғ. Муллағолов. – Өфө: Китап, 2000. – 208 б.
9. Муллагулов М.Г. Лесные промыслы башкир: Монография / М.Г. Муллагулов / УНЦ РАН. – Уфа, 1994. – 180 с.
10. Руденко С.И. Историко-этнографические очерки. – С изм. и доп. / С.И. Руденко. – Уфа: Китап, 2006. – 376 с.
11. Урман эше терминдәре һүҙлеге: Русса-башҡортса / Төҙ. А.И. Ярмөхәмәтов / Т.С. Двожеский, Т.Ғ. Байышев реакцияһында. – Өфө: Башгосиздат, 1954. – 68 б.
12. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле: Лексикология, фразеология, лексикография: Уҡыу ҡулланмаһы / М.Х. Әхтәмов. – Өфө: БашДУ, 2002. – 208 б.

Ғималова Г.Р.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 23-сө урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

БАШҠОРТОСТАН. ЯҢҒЫҘЛЫҠ ҺӘМ УРТАҠЛЫҠ ИСЕМДӘР
(дәрес планы)

1.Ойоштороу мәле (3 мин)

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
- Ултырығыҙ!
- Бөгөнгө дәресте беҙ бергә үткәрәсәкбеҙ!
- Минең исемем Гөлнар Римовна.
- Хәлдәрегеҙ нисек?
- Хәлдәр яҡшымы? Кәйефтәр нисек? Бер беребеҙгә яҡшы кәйеф теләп дәресте башлайыҡ. Әйҙәгеҙ әле, дәрескә көйләнер өсөн фонетик күнегеү эшләп алайыҡ. Хәреф күрһәткән предметты күрһәтеп барайыҡ (ике команда, кем яҡшыраҡ был эште башҡарып сығыр). **АЛФАВИТ – видео**

2.Теманы асыҡлау.

- Афарин, уҡыусылар!

Телдәрҙе шымартып алдыҡ. Тимәк беҙ башҡорт теле дәресенә әҙер. Бөгөн беҙ Рәсәй Федерацияһындағы бер республика тураһында белербеҙ. Уҡыусылар, бөгөнгө дәрестең темаһы ниндәй икән? Бына ул, һеҙҙең алда. Был нимә, уҡыусылар? Был – QR-код. QR-код Нимә өсөн кәрәк?

- Эйе, дөрөҫ. Мәғлүмәт, информация табыу өсөн. Ә уны нисек уҡып була икән? телефондан мөмкин. Һеҙҙең алда планшеттар ята. Әйҙәгеҙ әле, шуларҙы алып, QR-кодты уҡыйыҡ. (QR – сканерҙы асайыҡ). Был республика майҙаны буйынса Таджикстан менән бер, ә баш ҡалаһы Париждан 7 тапҡыр ҙурыраҡ. Тимәк, бөгөнгө теманы кем әйтә?

- Дөрөҫ, беҙ бөгөн Башҡортостан тураһында һөйләшәбеҙ. **(слайд-Башҡортостан картаһы).**

ИНСТРУКТАЖ

- Уҡыусылар, ҡарағыҙ әле! Бөгөнгө дәресебеҙҙә экран һәм ябай таҡтанан башҡа, һеҙ тағы ике бәләкәй таҡта күрәһегеҙ. Улар нимәгә кәрәк икән?

© *Г.Р. Ғималова, 2020*

Ниәт	Эш бара	Әҙер

Бөгөнгө дәрестә һәр бер команда үҙенең эшен ошо таҡтала күрһәтеп бара.

- **Кем яҡшы эш хаҡы алып эшләгеһе килә?** Миңә һәр команданан бер **ярҙамсы** кәрәк. Һеҙ был таҡтаның хужалары, йәғни, скрам-оҫталары. Һеҙҙең бурыс – команданың эш барышын ошо таҡтала күрһәтеп барыу.

- Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, дәрестең темаһын асыу өсөн ниндәй эш төрҙәре башҡарырға кәрәк?

СТИКЕРҘАР (таҡтаға эләбеҙ).

- Уҡып, дәреслектән, энциклопедиянан, интернеттан белә алабыҙ.

- Рәсәйҙең ҡайһы ерендә урынлашҡанын белеү кәрәкме?

СТИКЕР *Картанан, глобустан республиканың географик урынын билдәләйбеҙ.* Бер төркөм икенсеһенекен тикшерә.

- Афарин.

Дәреслектән Башкортостан тексын уҡыу (бүлеп уҡыу), 68-се бит, №6.

Һорауға яуап. Яҙабыҙ. Эште һәр береһе башҡара. Икенсе команда һораузы уҡый.

1 группа	2 группа
Башҡортостанда ниндәй милләттәр йәшәй? Башҡортостанда тауҙар, урмандар бармы? Күпме? Урман-тауҙарҙа ниндәй йәнлектәр йәшәй? -ҡуян, бүре, төлкө йәшәй	Башҡортостанда ниндәй тауҙар бар? Тауҙарҙы атап үт. Ямантау, Ирәмәл Башҡортостанда ниндәй йылғалар бар? Ниндәй күлдәр бар?

- Афарин, уҡыусылар! Киләһе эште башҡарһаҡ, беҙ Башҡортостаныбыҙҙы тағы ла нығыраҡ беләсәкбеҙ. Республикалағы иң ҙур тауҙы белгегеҙ киләме?

Пазлдар менән эш. (Клей). Группаға 2-шәр һөйләм.

II. Башҡортостандың баш ҡалаһы – Өфө.

Ямантау – иң бейек тау.

Иң ҙур күл – Асылыкүл.

Иң оҙон йылға – Ағиҙел (из пазлов).

Икенсе төркөмгә һорау бирәбеҙ.

Грамматик теманы аңлатыу.

III. – Уҡыусылар, беҙҙең Башҡортостан бик матур һәм мөғжизәле. Беҙгә тағы бер спринтты үтергә кәрәк. Һорауҙарға яуап бирер өсөн видео ҡарайбыҙ. Хәҙер һеҙҙең алда ятҡан планшеттан видео яҙманы

ҡарайбыҙ. Унан һеҙ тыуған еребеҙҙе данлаған мөғжизәләр менән танышырһығыҙ.

Видеояҙма. Иғтибарҙы туплағыҙ сөнки ике төрлө видео буласаҡ.

- Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе – Шүлгәнташ. Ул ҡайҙа урынлашҡан? Яуап бирәбеҙ. Группанан бер кеше.

Нығытыу: - Дәресте йомғаҡлап, хәҙер ике команданың алға сығыуы һорала. Бөгөн һеҙ дәрестә бөтә белемде үҙегеҙ таба алдығыҙ. Ә хәҙер һүҙҙе скрам оҫталарына бирәбеҙ. Группалағы иптәштәрегеҙ нисек эшләне? Улар төркөмдәге эште баһалар. Ниәттәр үтәлдеме? Скрам таҡтаға ҡарайыҡ. Бер ниәт үтәлмәне. Ул – уйын «Башҡортостанға – 100 йыл». **Һорауҙарға яуап биреү.**

- Уҡыусылар, бөгөнгө дәрестә актив ҡатнашҡанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Ә хәҙер бөгөнгө дәрес материалын нығытыу өсөн уйнап алайыҡ. Календарҙарҙы алып бер-берегеҙгә тапшырығыҙ. Ни өсөн былай эшләнек. Бөгөнгө дәрестә һеҙ бер-берегеҙгә белем бирҙегеҙ. Информацияны бүлешкәндән һеҙҙең белем арта ғына барасаҡ.

Ғирфанова М.Р.,
башланғыс кластар уҡытыусыһы
Стәрлетамаҡ ҡалаһының Жәлил Кейекбаев исемендәге
3-сө гимназияһы

КҮП МӘҘӘНИӘТЛЕ МӨХИТТӘ МӘКТӘП ТЕЛЕВИДЕНИЕҺЫ АША ТУҒАН ТЕЛГӘ ЗАМАНСА ҠАРАШ

Беҙҙең телебеҙ тарихыбыҙ кеүек бөйөк, оло яҙмышлы. Тик үҙ телен белгән кеше генә уның моңон аңлай, ишетә. Сабый донъяға килеп ниндәй телдә теле асылһа, ҡартайғансы шул телдә фекерләй. Ата-әсәһе башҡорт булып, бер-береһе менән башҡортса аралашһа ла, күп осраҡта, балалары телде аңлаһалар ҙа, һөйләшә белмәйҙәр. Быға тирә-яҡ мөхите йоғонто яһай. Телевизор, радио, телефондағы уйындар, улар ҡараған йәнһүрәттәр – барыһы ла рус телендә. Балалар башҡорт телен белһен, уға ҡарата ихтирам менән ҡараһын тиһәк, иң беренсе ғаиләнән, балалар баҡсаһынан башларға, унан һуң мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында дауам итергә кәрәк. Туған тел аша бала тормош ҡанундарын аңлай, олатай-өләсәйҙәренең васыяттарын йөрәк түрендә һаҡлай. Быуындан-быуынға күсеп килгән милли мираҫтарыбыҙҙы, дөрөҫ тәрбиәбеҙҙе киләсәк быуынға еткерәсәктәр. Тик үҙ телендә

© *М.Р. Ғирфанова, 2020*

һөйләшә, фекер йөрөтә белгән бала был тормошта юғалып ҡалмай, үҙ урынын таба.

2019 йылда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы тарихта ҡалырлыҡ хәл булды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙ сығышында балаларҙы нисек башҡорт теленә өйрәтеү, уны уҡытыу буйынса ниндәй алымдар индереү һәм уҡытыуҙы нисек модалы, заманса итергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, үҙ телебеҙҙе һаҡлап, яҡлап алып ҡалырға өндәне.

Был йәһәттән республикабыҙҙа ғалимдар, уҡытыусылар, журналистар һәм башҡалар төрлө проекттар, алымдар, методикалар өҫтөндә тәрәнерәк эшләй башланы.

Үрҙә әйтелгән фекерҙәргә таянып, шуны билдәләп үтергә мөмкин: киләсәк быуындың бөтә яҡлап та камил шәхес булып үҫеүе мөһим. Мәктәпте тамамлағас та тормош алдында һынмай, юғалып ҡалмай, фекерен туплап, кәрәк саҡта үҙ аллы ҡарар ҡабул итеү һәләтенә эйә булып, тейешле һығымталар яһай белергә тейеш.

Хәҙерге ваҡытта телевидение киң үҫешкән тармаҡ тип һанала. Уның кешегә оператив мәғлүмәт еткереү алымдары йылдан-йыл камиллаша бара.

Мәғлүмәт технологиялары үҫешкән заманда бер мәктәп эсендә телевидение ойоштороу әллә ни ауырлыктар тыуҙырмай. Ләкин мәҡәлә яҙыу, йә, иһә, эфир сығарыу укыусыларҙан профессиональ кимәл талап итә.

Һәләтле балаларҙы үҫтереү, тыуған илгә, туған телгә һөйөү тәрбиәләү маҡсатында беҙҙең гимназияла быйылғы укыу йылында өлкән кластар өсөн «Арғымаҡ ТВ» телестудияһы булдырылһа, башланғыс кластар өсөн «Шаян ТВ» эшләй башланы.

«Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереү» дәүләт программаһы сиктәрендә Республика «Тамыр» балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы һәм Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолған «Тамыр селтәре» проектының ярты йыллыҡ интенсив-тренингтарында ҡатнашып «Арғымаҡ ТВ» телестудияһы I Дәрәжә лауреат дипломы һәм телевизор менән бүләкләнде. Телестудия етәксеһе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы С.И. Тимерғәлиеваға Башҡортостан Республикаһы Мәғариф Министрлығының Рәхмәт хаты тапшырылды.

«Шаян ТВ» түңәрәгенә йөрөүсе балалар, бәләкәй булыуҙарына ҡарамаҫтан, диктор, хәбәрсе, режиссер, оператор, ҡораусы булып үҙҙәрен һынап ҡаранылар. Уҡыусылар тележурналистика нигеҙҙәрен теләп һәм ҡыҙыҡһынып, стиль һәм жанрҙар, телесюжеттар әҙерләү

закондары менән танышалар. Эш барышында видеоаппаратура менән эшләү алымдары һәм видеофайлдарҙы эшкәртеү буйынса программа тәъмин ителеше формалаштырыла. Балалар видео, тауыш, фотоларҙы эшкәртеү нигеҙҙәренә өйрәнәләр.

Башланғыс класта ғына уҡыһалар ҙа, Уҡытыусылар көнөнә, Яңы йылға арналған видеояҙмалары, Мостай Кәримдең «Ҡайын япрағы тураһында» флешмоб видеояҙмаһы барыһының да күңеленә хуш килде.

Мостай Кәримдең 100 йыллығына арналған республика видеороликтар конкурсында «Шаян ТВ» түңәрәгенә йөрөүсе Әптиҡова Яҙгөлдөң «Билдәһеҙ һалдат» шиғырын яттан һөйләгән видеояҙмаһы III урынға лайыҡ булды. Был беҙҙең өсөн беренсе еңеү.

Гимназиябыҙҙа, ҡалабыҙҙа үткәрелгән төрлө сараларҙан ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ. Мәҫәлән, күптән түгел башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҙғарылған төбәк-ара олимпиадала беҙҙең гимназиянан ике уҡыусыбыҙ призер булды. Улар тураһында уҡыусылар сюжет яһаны. «Ҡышҡы уйындар», «Пионерҙар сафына ҡабул итеү» кеүек сюжеттарҙы ла балалар яратып эшләнеләр.

Балаларҙы экранда эшләргә, мәҡәлә яҙырға, ижади эҙләнергә өйрәткән был шөғөл, әлбиттә, киләсәктә үҙ һөҙөмтәһен бирәсәк. Улар йәшәргә, кешеләр менән аралашырға, теге йәки был хәлдә үҙеңде нисек тоторға, башҡаларға ҡарата иғтибарлы, ихтирамлы булырға, кеше күңелен яраламаҫҡа, йәмғиәттә үҙ урынын табырға өйрәнә.

Мәктәп телевидениеһы түңәрәге дәресендә ҡулланылған бер нисә эш төрө:

1. Телгә артикуляцион күнегеү эшләтеү.

Тиҙәйткестәр, тел төҙәткестәр һәм тел шымарҡыстар өндәрҙе дөрөҫ әйтергә, хәтерҙе үҫтерергә ярҙам итә

Ға-ға-ға – әйҙә киттек урманға,

Шә-шә-шә – урманда еләк бешә.

Ле-ле-ле – ауыҙ итәйек әле,

Ге-ге-ге – ниндәй тәмле еләге.

2. «Башҡортостан хәбәрҙәре» уйыны.

Һәр дәресте уҡыусылар әҙерләп килгән «Стәрлетамаҡ яңылыҡтары», йә «Башҡортостан яңылыҡтары» уйынынан башлайбыҙ. Балалар оло бер түңәрәк яһап баҫалар һәм әҙерләп килгән яңылыҡтар менән таныштыралар. Бер дәрес шундай алым менән башланһа, икенсеһендә «ысын дикторҙар» һымаҡ камераға ҡарап яңылыҡ уҡыйҙар. Был уйын бик әһәмиәтле, сөнки шул ваҡытта уҡ телевизор аша үҙҙәренең сығыштарын ҡарап, һығымта яһайҙар, үҙҙәре ебәргән хаталар өҫтөндә эшләйҙәр.

3. Мәҡәлдәр – халыҡтың тормош тәжрибәһен, зиһенен һынай торған жанр. Уның эсендә серле уй ята. Мәҡәлдәр ҙә, йомаҡтар ҙа балаларҙы ҡыҙыҡһындыра, уйландыра. Шул маҡсат менән дәрестә улар менән төрлө эш алымдары ҡулланырға була. Мәҫәлән:

а) Мәҡәлдәрҙе дауам ит:

Йөҙ һум аҡсаң булғансы, ... (йөҙ дуҫың булһын).

Теле барҙың – ... (иле бар).

Бер төкөрһә – ни була, ил төкөрһә – ... (күл була).

б) Шиғырға рифмалар табып дауам ит.

Быңдай уйын төрө балаларҙың һүҙлек запасын байыта. Ул үҙен шиғыр ижад итеүсе итеп һынап ҡарай:

Ерҙә беҙгә ни кәрәк?
– Атай һәм әсәй кәрәк.
Ерҙә беҙгә ни кәрәк?
–Беҙ йәшәгән өй кәрәк
Ерҙә беҙгә ни кәрәк?
– Беҙ һөйләшкән тел кәрәк.
Ерҙә беҙгә ни кәрәк?
– Тыуған-үҫкән ил кәрәк.

4. Ролле уйын «Йәнһүрәт».

Йәнһүрәттәге геройҙарҙың тауыштарын ролдәргә бүлеп башҡарыу. Был эш төрөн балалар ҡыҙыҡһынып үтәйҙәр. Туған башҡорт телебеҙҙә төрлө билдәле йәнһүрәттәрҙең геройҙарын йәнләндерәләр.

Туған телебеҙҙә уҡыусыларҙың сығыштарын тыңлау, сюжеттарын, видеороликтарын, флешмобтарын ҡарау – үҙе бер ҡыуаныс. «Шаян ТВ» түңәрәгенә йөрөгән балаларҙың киләсәккә пландары ҡоролған да инде. Ҡала, республика, Рәсәй күләмендә үткәрелгән төрлө мәртәбәле конкурстарҙа ҡатнашып, танылыу яуларға хыяллана улар. Әлеге ваҡытта Бөйөк Ватан һуғышының 75 йыллығына арналған ижтимағи ролик төшөрәләр. Төп геройыбыҙ Самира Вәхитова балаларға икмәк ҡәҙерен аңлата. Ябай өс минутлыҡ роликта ниндәй тәрән мәғәнә ята. Төшөрөрбөҙ ҙә, ҡорорбоҙ ҙа, гимназиябыҙ уҡыусыларына күрһәтербеҙ ҙә. Ошо алты йөҙҙән ашыу балаларҙың яртыһы ғына үҙенә фәһем алып, нимәгә булһа ла өйрәнһә, тимәк, беҙ дөрөҫ юлда.

Мәктәп белем үҙәге генә түгел, тәрбиә биреү һәм алыу урыны ла. Бөгөнгө тормош үҙе балаларҙан йәштән инициативалы, ҡыйыу һәм һәр өлкәлә лә һөнәрмән булыуҙарын талап итә. Шуның өсөн дә:

Уҡытайыҡ,

Ҡыҙыҡһындырайыҡ,

Ышаныс үҫтерәйек,
Тәрбиәләйек,
Ылыҡтырайыҡ,
Уйландырайыҡ,
Сәмләндерәйек,
Ысын кеше булырға өйрәтәйек.

Тик шул ваҡытта ғына үҙ иле, теле өсөн янып йәшәгән лайыҡлы шәхестәр үҫтереүебеҙҙә шигебеҙ юҡ. Атаһы таңдарыбыҙ тыныс, киләсәгебеҙ ышаныслы, өмөтлө булыр.

Зәйҙуллина М.И.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Туймазы ҡалаһының 7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ЭТНОМӘҘӘНИ КОМПОНЕНТЫ АША РУС ТЕЛЕНДӘ БЕЛЕМ АЛҒАН БАШҠОРТ БАЛАЛАРЫН ТУҒАН ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ПРЕДМЕТЫН ӨЙРӘНЕҮГӘ ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ ҮҪТЕРЕҮ

Бөгөнгө көндә, беҙ йәшәгән донъяла, кеше аныҡ ориентирҙар эҙләргә мәжбүр. Бер бөтөнлөк эҙләгән, белемгә ынтылған саҡта ул үҙен бөгөнгө менән генә түгел, үткәне менән дә бәйләй, ҡарашын тарихҡа йүнәлтә. Әгәр халыҡ үҙ тарихын белә һәм баһалай икән, уның киләсәге лә буласаҡ. Быуаттар буйы туплап килгән зиһен көсө, рухи ҡиммәттәре һәм аҡылы хәтергә һалынып нәҫелдән-нәҫелгә күсә һәм уны туған тел аша ғына асып була.

Милли үҙаңы булған, халҡының менталитетын үҙенә алған, телен яратҡан, уның менән ғорурлана белгән, телгә һәм халыҡҡа тоғролоҡло ижади шәхес тәрбиәләү, һис шикһеҙ, туған тел дәрестәренән башлана. Милләте башҡорт, ләкин рус телендә һөйләшеп үҫкән уҡыусыларҙы башҡорт теленә ылыҡтырыу барышында күп төрлө эштәр эшләргә тура килә. В.А. Сухомлинский: «Дәрес – ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм әхлаҡи инаныуҙар факелын тоҡандырыусы осҡон», – тигән. Шул осҡондо тоҡандырыу, бала телде ҡыҙыҡһыныу, теләк менән өйрәнһен өсөн уҡытыусыға һәр дәресендә заманса технологиялар, уҡытыу методтары ҡулланырға тура килә. Баланы дөрөҫ яҙырға, уҡырға өйрәтеү, матур, төҙөк һөйләмдәр, текстар ҡулланырға өйрәтеү, һүҙ байлығын арттырыу эше бер генә этаптан торорға тейеш түгел, тигән фекерҙе әйтә тел ғалимы Л.Г. Саяхова. Башта һүҙҙәрҙе темаларға төркөмләү, күреп-

© *М.И. Зәйҙуллина, 2020*

танышыу, яҙыу, өҫтәлмә эштәр ҙә булырға тейеш. Уларҙы тарихи, психологик күҙлектән сығып аңлатыу, грамматик яҡтан төрлөсә тикшереү һ.б. кәрәк.

Дәрестәрҙә этномәҙәни материалдар ҡулланыу ҙа телде теләк менән өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетында йыйылған рус, татар, башҡорт һәм башҡа милләт халыҡтарының тормошо һәм көнкүреше буйынса тарихи материалдар, фильмдар, әҙәбиәт, тикшеренеү, проект эштәрен ҡулланыу балаларҙа коммуникатив компетенцияны формалаштырыуҙа ҙур роль унай. Улар аша уҡыусыларыбыҙҙың күңеленә күпме рухи аҙыҡ һалып була! Дәрестәребеҙҙә мәҙәниәтебеҙҙе күрһәткән төп күрһәткестәргә – телдәге һүҙҙәргә, фразеологизмдарға, мәҡәлдәргә, әйтемдәргә ҡарата тарихи белешмәләр биреү иғтибарҙан ситтә ҡалырға тейеш түгел. Был һүҙҙәрҙә башҡорт халҡының тормош-көнкүреше, йолалары, йәшәү рәүеше, милли һыҙаттары, тарихи факттары сағыла. Халыҡтың ауыр тормошоноң, көрәшенең шаһиты булараҡ, был һүҙ уның күңелендә бер ҡомартҡы булып һаҡлана. Методик яҡтан дөрөҫ төҙөлгән эштәр генә уҡыусыларҙың лингвокультурологик компетенцияһын формалаштыра ала.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә этномәҙәни компонентты ҡулланыу эшен ойоштороуҙа уҡыусыларға ошондай темалар тәҡдим итәм: «Тыуған ерем – Башҡортостан», «Республикабыҙҙың баш ҡалаһы – Өфө», «Тыуған яғымдың тарихы», «Башҡортостандың яҙыусылары һәм шағирҙары» һ.б. Этномәҙәни материалдарҙы төрлө ерҙән табырға тырышабыҙ: музейҙарға, төрлө күргәҙмәләргә, мәсеттәргә эксскурсияға барып, төрлө кешеләр менән осрашып, тарихи әҫәрҙәр уҡып һәм анализлап материалдар йыябыҙ. Һуңынан күргән, ишеткән мәғлүмәттәрҙе тәртипкә килтереп, хикәйә, инша, реферат, доклад, статья, тикшеренеү һәм проект эштәре эшләйбеҙ, уларҙы дәрестәрҙә, кластан тыш сараларҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа башҡаларға еткерәбеҙ.

Әлбиттә телде өйрәнеү өсөн, иң тәү сиратта шул телдәге һүҙҙәрҙе өйрәнергә кәрәк. Телде аңлау, ул телдә һөйләү, уйлау туранан-тура телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерергә ярҙам итә, уны камиллаштыра.

Халҡы мәҙәниәте кимәлен билдәләй торған иң мөһим компоненттарҙың береһе булып, телмәр этикеты тора. Үҙ-ара аңлашыуға өлгәшелһен һәм әңгәмә уңышлы барһын өсөн башҡорттарҙа аралашыу ҡағиҙәләренә айырым иғтибар бирелә. Мин дәрестәрҙә төрлө тормош ситуацияларында осраған диалогтар ҡулланырға тырышам: сәләмләү, хушлашыу, туғандарға мөрәжәғәт итеү, рәхмәт белдереү, үтенес, теләктәр, ғәфү үтенеү һ.б. Милли – мәҙәни компонентлы актив

ҡулланылышлы лексика башҡорт халыҡының мәҙәни мираҫы тураһында уҡыусыларҙың белемен киңәйтергә һәм тәрәнәйтергә ярҙам итә. Башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытыуҙы этномәҙәни компоненты ҡулланыу аша ойоштороу бөтә йәһәттән дә уңайлы, тип иҫәпләйем. Сөнки башҡорт мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеүгә бирелгән дәрестәрҙе ҡыҫҡартыу кеүек бөгөнгө көндәге күңелһеҙ күренештәр булғанда, уҡыусылар өсөн өҫтәлмә мәғлүмәттәр алыу сараһы ла ул был йүнәлеш. Тәжрибә буйынса этномәҙәни компонентын дәрестәргә индереү ысынлап та, ыңғай һөҙөмтә бирә. Ата-бабаларыбыҙ ҙур хазина итеп ҡалдырған туған телебеҙ халҡыбыҙҙың матур сифаттарын, азатлыҡҡа ынтылышын, тәбиғәтенең гүзәллеген, йырҙарының моңон, йәшәү йәмен, рәүешен сағылдыра икән, ошоларҙы уҡыусы күңеленә еткереү үҙебеҙҙән тора. Тел, халыҡ, еребеҙ яҙмышы тик беҙҙең ҡулда. Үҙ тарихыңды белеү мөһим, сөнки үткәнен, шәжәрәһен, нәҫел-нәсәбен белгән кеше генә ата-бабаларының изге йолаларын дауам итә, тап шундайҙарҙа яуаплылыҡ хисе күпкә көслөрәк була. Быңдай халыҡ бер ҡасан да ер йөҙөнән юғалмаҫ.

Әҙәбиәт:

1. Тикеев Д.С. Башҡорт телен уҡытыуҙың лингвокультурологик нигеҙҙәре. // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 1999. – №9.
2. Саяхова Л.Г. Лингвокультурологическая концепция обучения русскому языку. – Уфа, 2006. – стр.16-27.
3. Этнокультурное образование: опыт и перспективы: Сборник материалов Всероссийской научно-практической конференции, 20 ноября 2008года, г. Саранск / Сост.: Т.В. Самсонова; З.И. Акимова; МО РМ, МРИО. – Саранск, 2009. – 352с.

Касимова Р.Р.,
учитель изобразительного искусства
МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева»
г.Стерлитамак

МЕТОДЫ ПРОЕКТОВ В ОБРАЗОВАНИИ ОБУЧАЮЩИХСЯ

Современный процесс обучения предлагает строить обучение, используя методы проектов. Именно проекты стали неотъемлемой частью школьной программы. Введение методов проектов как одного

© *Р.Р. Касимова, 2020*

из основных методов обучения дает школьникам дополнительный шанс исследовать, придумывать, по-новому решать проблемы, создавать предмет труда, испытывать его и оценивать в реальных условиях.

Метод проектов тесно связан с формированием общей культуры. Только овладев общей культурой, которая включает в себя три составляющие – гуманистическую, научную и технологическую, – обучащиеся смогут определить свою личную и социальную идентификацию, принять мир, адаптироваться к нему и активно участвовать в его жизни.

Среди условий, необходимых для успешного внедрения методов проектов следует выделить три.

Во-первых, это социальная поддержка, эффективная информация, а также постоянный контроль выполнения работы.

Во-вторых, следует помнить, что проектирование – это сложный, длительный процесс.

В-третьих, важно учитывать адекватность уровня методической компетентности учителей. Автономность учреждений не позволяет учителю с узким технократическим мышлением и однопредметным набором знаний и навыков в серьез претендовать на выполнение задачи, которая усложняется и становиться комплексной (интегрированной). Учитель должен стать лидером, а не ментором в совместной работе со своим подопечным по определению индивидуального «образовательного пути». Для этого следует выстроить следующую «образовательную траекторию»:

- вовлечь обучащегося в процесс решения проблемы, используя при этом основные научные методы, в первую очередь – метод контроля качества обучения;

- поделиться обучащимися информацией, благодаря которой возникнет мотивация к творческой деятельности, ведь при педагогическом подходе «сверху вниз» резко возникает желание учиться;

- развивать умения и навыки работать в коллективе, которые помогут решать проблемы и выходить из конфликтных ситуаций, проявляя при этом терпимость и уважение к интересам своих товарищей;

- нормой должно стать не снисходительное отношения с учащимися, а партнерские, следует научиться уважать позицию ребенка, предоставить ему самостоятельность и разрешать рисковать, проявляя при этом справедливость и понимание.

Работая над проектами, учителю следует выбирать по-настоящему интересные для учащихся темы. Действительно, необходимо перейти от концепции «обучение чему-либо» к изучению конкретных вещей, «интересных учащимся».

Рәжәпова Ә.Ғ.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,
Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте уҡытыусыһы
Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика
лицей-интернаты

ДӘРЕСТӘРҘӘ, КЛАСТАН ТЫШ САРАЛАРҘА ЯҢЫ ТЕХНОЛОГИЯЛАР ҠУЛЛАНЫУ НИГЕҘЕНДӘ УҠЫУСЫЛАРҘА ҮҘ АЛЛЫ БЕЛЕМ АЛЫУ КҮНЕКМӘЛӘРЕ ТӘРБИӘЛӘҮ ҺӘМ УҠЫУ СИФАТЫН КҮТӘРЕҮ

(эш тәжрибәһе тураһында мастер-класс)

-...Тәбиғи һәләттәр-ҡырағай үҫемлек кеүек һәм фәнни шөғөлләнеүҙәр ярҙамында үҫеүгә мохтаж...(Ф. Бэкон).

-...Талант – тәбиғи һәләттәрҙең үҫеше...(О. Бальзак)

-...Мин тырышлыҡһыҙ бер талантҡа ғына ышанмайым. Сүллектә ҡороған шишмә һымаҡ, ул да ҡороясаҡ... (Шаляпин)

Ошо күренекле шәхестәрҙең фекерҙәре минең уҡыусыларға булған мөнәсәбәтемә лә ҡағылған кеүек. Һәр бала был донъяға ниндәйҙер һәләт менән тыуа. Ошо тәбиғәт биргән бүләкте табыу, асыу, үҫтереү – ата-әсәләрҙең, уҡытыусыларҙың бурысы. Ошо асҡыс табылһа, бала мәктәпкә байрамға барған кеүек бара, ҡыҙыҡһынып уҡыу, үҙенең баһаһын белә, үҙ аллы белем дә ала, буласаҡ һөнәре тураһында тәүге мәғлүмәттәр ҙә туплай, киләсәктә әүҙем тормош алып барған, креатив ҡарашлы шәхес тә булып үҫәсәк.

Уҡытыу процесында тәрбиә беренсе урында тора. Тәрбиәле уҡыусы яҡшы ла уҡыясаҡ, тормош ауырлыҡтарын да еңеп сығыуҙың юлдарын табасаҡ.

Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте дәрестәренең, кластан тыш сараларҙың телде өйрәнеүҙәге әһәмиәте, тәрбиәүи роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Эште бер-нисә йүнәлештә алып барам: эҙләнеү эштәре, проблемалы уҡытыу, компьютер технологияһы, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген булдырыу, ерле материалдар менән бәйләп уҡытыу, матбуғат менән бәйләнеш, блоклап уҡытыу, радиотапшырыуҙар

© *Ә.Ғ. Рәжәпова, 2020*

әҙерләү һәм сығыштар яһау, балалар телестудияһында эш, Рәсәй, Халыҡ-ара, республика конкурстарында, олимпиадаларҙа ҡатнашыу. Технологияларҙың бер-нисәһенә генә туҡталам.

Мәҫәлән, блоклап уҡытыу, презентациялар эшләү теманы бөтөн итеп, бөтә тулылығында системалы рәүештә аңларға ярҙам итә. Өй эштәрен дә тест, викторина формаһында тикшергәндә лә уңайлы: яуаптар яҙылған слайдар буйынса үҙ-үҙҙәрен дә тикшерәләр, хаталар өҫтөндә эшләйҙәр, баһалар ҙа ҡуялар.

«Хәбәр-ньюс» исемле балалар телестудияһына радиотапшырыуҙар әҙерләү аша тура эфирҙың нимә икәнен үҙ елкәләрендә татыған уҡыусыларҙан телестудия төркөмө ойошторолдо. Бер тапшырыу әҙерләү 13 этаптан тора. Уҡыусылар күп ваҡыттарын интернет артында уҙғара. Ә тапшырыу әҙерләгәндә уҡыусы кәрәкле мәғлүмәттәр йыя, интернетты файҙалы ҡулланырға өйрәнә. Беҙ тема һайлайбыҙ, уға ярашлы мәғлүмәттәрҙе интернеттан да, матбуғат баҫмаларынан да туплайбыҙ. Был мәғлүмәттәрҙе башҡорт теленә тәржемә итәбеҙ, сценарий яҙабыҙ. Текстарҙы логик баҫым ҡуйып, дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәнәбеҙ. Камера алдында үҙен иркен тотһон өсөн психологик яҡтан да әҙерләйбеҙ. Тапшырыу сыҡҡас, күмәкләп ултырып ҡарайбыҙ, анализлайбыҙ. Тел дә шымартыла, үҙ аллы белем дә алына, һөнәр һайлауға йүнәлеш тә бирелә. Башҡортостанда кинорежиссерҙар әҙ. Бәлки ошо гимназистар араһынан башҡорт киноларын донъя кимәленә танытҡан күренекле кинорежиссерҙар, операторҙар сығыр. Беҙҙең бай тарихыбыҙ, үҙенсәлекле йолаларыбыҙ тураһында әлегә иҫ китерлек киноларыбыҙ төшөрөлмәгән. «Тәбиғәтте һаҡлау», «Башҡортостандың тәбиғи һәйкәлдәре», «Яңы йыл», «Уҡытыусылар көнө» һ.б. тапшырыуҙарыбыҙ бар. Уларҙы Интернет аша Про-Лайф исемле тапшырыуҙар аша ҡарарға була. Тапшырыуҙарҙы тәнәфестәрҙә коридорҙа балалар йүгерешеп йөрөмәһен өсөн дә күрһәтәбеҙ.

Илебеҙҙә, Республикабыҙҙа барған үҙгәрештәр матбуғатта сағыла. Ике уҡыусының һәр дәрескә яңылыҡтар алып килеп, уҡыусылар алдында сығыш яһауҙары ла тормош менән бергә атларға, киң мәғлүмәтле булырға ярҙам итә. Ошолай эшләү үҙен аҡлай. Йыл һайын башҡорт мәҙәниәте буйынса республика олимпиадаһында уҡыусылар еңеү яулайҙар. Республика балалар матбуғаты үткәргән конкурстарҙа яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәбеҙ. 2019 йылда 11-се класс сығарылыш уҡыусыһы Гайсина Г. Булат Солтангәрәев исемендәге республика иншалар конкурсында еңеүсе булды. Халыҡ-ара «Славян туғандар» конкурсында болғар халыҡ әкиәттәрен башҡорт теленә тәржемә иттек һәм еңеүсе булдыҡ. Мәскәүҙә уҙғарылған «Леонардо уҡыуҙары»нда ла

ҡатнашып, лауреат булдыҡ. Ошо тормош һабағы үткән Захарова Ирина, Түләкова Флүзә, Юлаева Илнаралар Башҡортостан юлдаш телевидениеһында эшләйҙәр. Еңеүҙең 65 йыллығына арнап китап та сығарҙыҡ. Гимназистар һуғышта ҡатнашҡан олаталары, тыл батырҙары тураһында мәғлүмәттәр тупланылар. Бөгөн Еңеүҙең 75 йыллығына ла мәғлүмәттәр туплайбыҙ.

Саляхова З.И.,
доктор филол.наук, профессор
Стерлитамакский филиал БашГУ

КОЛИЧЕСТВЕННОСТЬ ИМЕН СУЩЕСТВИТЕЛЬНЫХ В БАШКИРСКОМ И КАЗАХСКОМ ЯЗЫКАХ

Имена существительные и в башкирском языке, и в казахском языке представляют собой наиболее многочисленную категорию слов с общими семантическими и грамматическими признаками и являются названиями предметов в самом широком смысле слова. Имя существительное обозначает названия социальных явлений, явлений природы, названия действий и движений, одушевленных и неодушевленных предметов, а также обозначают в качестве предметов любые состояния, свойства, отношения. В башкирском языке значение предметности имен существительных выражает: 1) категория падежа (килеш категорияһы); 2) категория числа (һан категорияһы); 3) категория принадлежности (эйәлек категорияһы); 4) категория сказуемости (хәбәрлек категорияһы); 5) категория определенности и неопределенности (билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы). В казахском языке значение предметности имен существительных выражает: 1) категория падежа (септік категориясы); 2) жекелік және көптік категориясы (категория мн.числа и лица); 3) категория принадлежности (тәуелдік категориясы).

В башкирском и в казахском языках имена существительные подразделяются на существительные единственного числа и множественного числа. Любая форма существительного обязательно относится к единственному или множественному числу. Морфологические значения единственного и множественного числа отражают внеязыковые различия единичности и не единичности называемых существительными предметов.

© *З.И. Саляхова, 2020*

Как в башкирском, так и в казахском языке форма единственного числа не имеет специальных показателей. За единственное число принимается обычно нулевая форма существительного. Например, в башкирском языке: *бакса, урман, сәскә, ҡыҙ, егет, атай, китап, дәфтәр, ҡәләм, йыр, бейеү, һүҙ* и др. В казахском языке: *бала, қалам, жігіт, әке, тіл, күл, тау, адам, жігіт* и др.

Множественное число имен существительных в башкирском языке образуется путем прибавления к корню (основе) аффиксов: *-лар / -ләр, -тар / -тәр, -дар / -дәр, -ҙар / -ҙәр.* Например: *йылға – йылға-лар (река – реки), алма – алма-лар (яблоко-яблоки), атай – атай-ҙар (отец-отцы), кәмә – кәмә-ләр (лодка – лодки), ялан – ялан-дар (поле-поля), күл – күл-дәр (озеро – озера), урман – урман-дар (лес – леса), ҡыҙ – ҡыҙ-ҙар (девушка – девушки), уҡыусы – уҡыусылар (ученик – ученики), ир – ир-ҙәр (мужчина – мужчины).*

В казахском языке множественное число имен существительных образуется путем прибавления к корню (основе) аффиксов (зат есімдердің көптік жалғауы): *-лар/-лер, -дар/-дер, -тар/-тер.* Например: *бала-лар – дети, қалам-дар – ручки, жігіт-тер – джигиты.* Чередование гласных в окончаниях определяется правилами сингармонизма: если последний слог слова – твердый, то прибавляются суффиксы *-лар, -дар, -тар.* Например: *ана-лар, қыз-дар, жас-тар.* Если последний слог слова – мягкий, то прибавляются суффиксы *-лер, -дер, -тер.* Например: *әке-лер (отец-отцы), тіл-дер (язык – языки), жігіт-тер (парень – парни), дос-тар (друг – друзья), мектеп-тер (школа – школы), қала-лар (город – города).* Чередование согласных в суффиксах множественного числа определяется законами прогрессивной ассимиляции.

В башкирском языке аффикс множественности получают даже те заимственные существительные, которые в русском языке не изменяются, например, *пальто-лар, такси-ҙар, кафе-лар* и другие.

В тех случаях, когда перед существительным стоит количественное числительное, то в и башкирском и в казахском языках они употребляются в единственном числе. Например, в башкирском языке: *ике китап (две книги), ун тоҡ (десять мешков), ете йорт (семь домов)* и т.д. В казахском: *екі кітап (две книги), алты үй (шесть домов), биш ҡыз (пять девушек)* и т.д.

Таким образом, в башкирском и в казахском языках имена существительные подразделяются на существительные единственного числа и множественного числа. Любая форма существительного обязательно относится к единственному или множественному числу. Как в башкирском, так и в казахском языке форма единственного числа

не имеет специальных показателей. За единственное число принимается обычно нулевая форма существительного. Множественное число имен существительных и в башкирском языке и в казахском языке оформляется специальными аффиксами.

Әҙәбиәт:

1. Балақаев М. Қазіргі қазақ тілі: сөз тіркесі мен жай сөйлем синтаксисі. – Б.м.: Ана тілі, 1992. – 247 б.
2. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология: монография. – Өфө: БДУ РНҮ, 2013. – 353 б.

Стодольникова В.Г.,
учитель математики
МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева»
г.Стерлитамак

ФОРМИРОВАНИЕ ФИНАНСОВОЙ ГРАМОТНОСТИ В ШКОЛЕ

В современных условиях дети рано включаются в экономическую жизнь семьи, сталкиваясь с деньгами, рекламой, ходят за покупками в магазин с родителями, участвуют в процессе купли-продажи товара, тем самым овладевая экономической информацией на бытовом уровне, чаще всего в искаженном виде. Неправильно полагаться на стихийное усвоение экономической стороны жизни, так как в процессе познания дети сталкиваются с такими этическими понятиями, как богатство, деньги, кредиты, долги, бедность и другое. В этих понятиях заключен большой нравственный смысл, в котором отражаются социальные ценности: честность, доброта, трудолюбие, взаимопомощь и многое другое.

Таким образом, в наше время обучать ребёнка основам финансовой грамотности – это как учить навыкам самовыживания. Чем лучше он знаком с денежно-экономическими отношениями, тем успешнее может быть его жизнь.

Формирование финансовой грамотности является результатом финансового образования и сформированной экономической культурой школьников. Экономическая культура школьника – это качественная характеристика его личности, включающая в себя первоначальные экономические знания, умения и навыки простейшей

© *В.Г. Стодольникова, 2020*

экономической деятельности, элементы экономического мышления и сознания.

Воспитывать финансовую грамотность можно как на уроках, так и во внеклассной и внеурочной деятельности.

Во время учебных занятий решаются расчетные задачи на экономию воды и электричества, на проценты – скидка, на работу, на стоимость предмета. Также дети на уроках могут составлять проекты, например, «Семейный бюджет».

Внеклассная работа включает в себя проведение классных часов, просветительских родительских собраний на заданную тематику, проведение ярмарок, экскурсии на предприятия, командные игры-путешествия, выпуск стенных газет, конкурсы рисунков и поделок из вторсырья.

Во внеурочной деятельности применяются активные методы учения: деловые и ролевые игры («Мир профессий», «Фирма», «Строительство домов», «Безработные и предприниматели»), компьютерные и настольные игры («Жизнь или кошелек», «Монополия», «Банкир»), дискуссии на проблемные экономические темы, конкурсы («Самая экономная хозяйка», «Конвейер», «Знаешь ли ты цены», «Аукцион знаний» и другие).

В старших классах организуются встречи с представителями банков, где они знакомят детей:

- «Депозит? Риски и доходность».
- «От чего зависят ставки по процентам?».
- «Как определить: сможет ли семья вернуть кредит (ипотеку?)».
- «Кредит и его условия».
- «Как не стать жертвой финансовых мошенников?»
- «Инвестиции. Ценные бумаги»
- «Наличие и безопасное использование пластиковых карт».

В старших классах проводят курсы по финансовой грамотности, где знакомят с основными понятиями экономики и решаются задачи. В конце года дети выступают со своими бизнес-планами.

Учащиеся 10-11 классах посещают мастер-классы по решению экономических задач на кредит, депозит и оптимальный выбор.

Учащиеся участвуют в вебинарах по финансовой грамотности.

Таким образом, деятельность, направленная на воспитание финансовой грамотности школьников, может быть проведена в разных формах. Эти мероприятия способствуют формированию у учащихся общих, и в то же время достаточно цельных представлений о процессах, связанных с экономикой, бизнесом, ресурсами и их

разумным потреблением, формированию успешной личности каждого ученика.

Литература:

1. Дугарова Д.И. Экономическая грамотность – необходимое условие профориентации. // Математика в школе. – 2015. – №5. – С.16-17.
2. Финансовая грамотность и финансовая компетентность: определение, методики измерения и результаты анализа в России // Вопросы экономики. – 2015. – № 8. – С.129-132.
3. Национальная стратегия повышения финансовой грамотности 2017-2023 [Электронный ресурс] Режим доступа: https://www.minfin.ru/ru/ document/118377 (Дата обращения 20.05.2018).
4. Письмо Министерства образования и науки РФ от 07.08.2014 г. N08-1045 «Об изучении основ бюджетной грамотности в системе общего образования» [Электронный ресурс] Режим доступа: http://base.garant.ru/70750730/ (Дата обращения: 20.05.2018).
5. Рутковская Е.Л. Факторы формирования финансовой грамотности школьников / Е.Л. Рутковская // Отечественная и зарубежная педагогика. – 2017. –№2 (37). – С.22-29.

Сәйетколова Л.Ф.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 29-сы урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВТЫҢ «ТУҒАНДАР ҺӘМ ТАНЫШТАР» РОМАНЫНДА ТЕЛ МӘҘӘНИӘТЕ КҮРЕНЕШТӘРЕ

Хәҙерге көн проблемаларына ярашлы, башҡорт телен лингвокультурологик нигеҙҙә өйрәнеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе. Был йәһәттән, Л.Х. Сәмситова тарафынан төҙөлгән «Башҡорт фольклоры концептосфераһы» һүҙлеге бар. Һүҙлек лингвокультурология мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныусыларға әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлауҙа әһәмиәтле һәм башҡорт халҡының телендә сағылған донъя картинаһын тергеҙеүгә булышлыҡ итә [2; 4]. Был мәҡәлә тел мәҙәниәте күренештәренә бағышлана. Ж. Кейекбаевтың

© *Л.Ф. Сәйетколова, 2020*

«Туғандар һәм таныштар» романы Сәмситова Л.Х. һүҙлеге нигеҙендә өйрәнеледе һәм маҡсатҡа ярашлы ҡулланма итеп алынды. Һүҙ байлығын тәшкил иткән материал төп дүрт төркөм (Кеше. Йәмғиәт. Тәбиғәт. Мифологик образдар.) тирәһенә тупланылды. Концепт һүҙҙәргә аңлатмалар биреү маҡсаты ҡуйылманы, миҫалдар ғына килтерелде. Шулай уҡ, мәҡәләләге материал романдың тәүге бүлегенән булыуын да әйтеп үтергә кәрәктер.

Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романы лингвокультурология өлкәһе өсөн тере бер һәйкәл. Бындағы хәл-ваҡиғалар халыҡсан телдә хикәйәләнә, йәшәйеш ысынбарлыҡтағыса теремек һәм хикмәтле, һәр образдың үҙ ҡиммәттәре бар, автор уҡыусыны халыҡтың бай тормош тәжрибәһе менән таныштыра. Романда халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, әҙәп-хлаҡ нормалары, көнкүреше, аңы, донъяға ҡарашы, меналитеты, тарихы, фекерләү кимәле күҙаллана. Лингвокультурология үҙәгендә тел менән мәҙәниәтте бәйләп өйрәнеүсе кеше тора, шунлыҡтан, тәүҙә романдың геройҙарына иғтибар итәйек.

1. Геройҙарҙың шәхси сифаттары, эске донъяһы, мөнәсәбәттәре, социаль функцияһы, туғанлыҡ бәйләнештәре.

Кеше концепты шәхси сифаттарҙа, мөнәсәбәттәрҙә, һ.б. Романда көнүҙәк мәсьәләләрҙә ҡарттарҙың тормош тәжрибәһе, әйткән һүҙе хәл иткес урын биләй, быға түбәндәге миҫалдарҙы килтерергә була: «... Ике ауыл обществоһын бергә ҡушыу тураһында эш ҡағыҙлатыуға барып еткәс, киткән ғауға, ыреш-талаш, хатта йәшерәк кешеләр яғалаша ла башлағандар. Уларҙы ҡарттар нисек кәрәк әрсәләп алған. Шунан Ташбатҡан ауылынан килгән ҡарттар: «Юҡ, булмаҫ. Был эш низағ менән башланды, ахыры ла шулай уҡ барып бөтәр бынын. Кире булайыҡ, ҡарттар», – тип, ҡағыҙға тамғаларын һалмай, кире ҡайтып киткәндәр.

Ауылдаштары, Япон һуғышы бөткәндән һуң дүрт йыл буйы пленда йөрөп ҡайтҡан Әхмәҙигә оло хөрмәт күрһәткәндәре тураһында: «Пленда ҡайтҡас, Әхмәҙиҙе ун биш көн буйы ҡунаҡта йөрөттөләр. Уны яҡын туғандары ла, алыҫы ла, байы ла, ярлыһы ла күршеләре лә саҡырҙы. Сәйгә лә, ашҡа ла, балға ла саҡырҙылар».

Кеше концепты фразеологизмдарҙа: әлепте таяҡ тип белмәһә лә (белеме булмаһа ла), таштан йүкә һуйылды (ҡормош кешенең нимәлер /сепаратор/ алыуы), тупрағы ситкә яҙғандыр (мәрхүм булғандыр), тел асҡысы шымарып китте (күп һөйләй башланы), итәк тулы бала (балалары күп), итәге-еңе ҡыҫҡармаҫ ине (байлығы кәмемәҫ ине), бүреһе олоно (асыуы килде), талағы ташты (шашынды), хан заман

(күптән булған), ҡаны ҡыҙған, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, кеше ҡоторогона бирелде.

Кеше концепты мәҡәл, әйтемдәрҙә. Бәлә-ҡаза ағас башынан йөрөмәй, кеше башынан йөрөй. Илаһаң һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға. Үлмәктән ҡалмаҡ юҡ, Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрә килер. Ил өҫтөндә имән сөй. Аяғы менән киткән ҡайтыр, арҡаһы менән киткән ҡайтмаç. Һаулыҡ – байлыҡ. Улдың бер күҙе юҡ, ҡолдоң ике күҙе юҡ. Һүҙҙең ҡыçҡаһы, арҡандың оҙоно яҡшы. Оҙон һүҙ китапҡа яҡшы.

Йырҙарҙа: «Әй-й-й… Ир балалар ҡайта хеҙмәт иткәс, Ҡыҙ балалар ҡайтмай бер киткәс…»

2. Йәмғиәт концептын билдәләүсе һүҙҙәр.

Йәшәйештә ауыл концепты. Ауылдың өлөштәргә бүленеше: өс мәхәлләле, баҙарлы, үзбәк аймағы.

Легендала. Ташбатҡан ауылының түбәнге, Ғөмәр ауылы *яҡ* осонда (хәҙер, ниңәлер, ошо һүҙ урынына ҡулланылышҡа *яны* тигән һүҙ ингән, мәçәлән, ҡала яны автобустары – быны минең аҡыл бер ҙә ҡабул итмәй /шәхси фекерем/) ҙур бер һаҙлыҡ бар. Ул һаҙ упҡынлы, күтерле. Уның ситенәрәк барып баçһаң, упҡыны алыçтан һелкенеп тора. Унда ҡайһы саҡ быҙау, башмаҡ-фәлән батып ята. Элегерәк шул һаҙҙың кәнт уртаһында ҙур бер таш булған, имеш, тип, һөйләйҙәр. Берҙән-бер көндө шул , һаҙға батып, ғәйеп булған. Шунан бирле ул һаҙҙы «Ташбатҡан һаҙы» тип йөрөтә башлағандар. Ауылдың исеме лә шунан ҡалған.

Диалект һүҙҙәр: яҙатайым – аңғармаçтан, кәнт уртаһында – ҡап уртаһында, эштең әрәсәһенә төшөнөү – эштең айышына төшөнөү. Аңлашылып етмәгәндәре лә бар: ҡөлдәһенә сыҡты – (?), ҡурыз – (?).

Кәсепселек өлкәһе. Ташбатҡан ауылы халҡы урман кәсебе менән көн күрә: йәй көнө, йүкә ағасы ашҡаяҡ саҡта, улар бөтә ауыл менән һалабаш төшөрәләр, тау араларында баҙ ҡаҙып, ҡайын дегете үртәйҙәр; ҡатын-ҡыҙ, хатта аяҡтан баçҡан бала-сағаға тиклем, имән, тал ҡайыры һуйырға йөрөйҙәр. Көҙ ауыл халҡы һалабаш һыҙыра; ә ҡыш улар туғын сабалар (?), бүрәнә ҡырҡалар, сана яһайҙар, арҡан, дилбегә ишәләр, күнәк, көрәгә (?), янтау (тәгәрмәс туғыны), көрәк кеүек донъя кәрәк-яраҡтары яһайҙар; яҙ көнө инде ҡыуғынға йөрөйҙәр, бүрәнә һаллайҙар. Улар ағас тауарҙарын игенгә, онға алмаштыра, баҙарҙарға йөрөй, ҡалаға бара. Игенде, һолоно …атына ашатырлыҡ ҡына, «бутҡалыҡ» тигән булып, тары сәсә, тиреселек менән алыпһатарлыҡ итә, ташҡында ҡыуғын ҡыуалар, һал һаллайҙар.

Халыҡтың йор һүҙҙәре, шаянлығы айырым ихтибарға лайыҡ: ике ҡәләмде белә – ике телдә яҙыша белә, «Рахманғолдоң руссаһы бик һай … хатта үҙенең фамилияһын да аҙағына тиклем яҙа белмәй … «Алаб»

тип фамилияһының яртыһын ғына яҙа ала һәм «л» хәрефенең береһен төшөрөп ҡалдыра. Шуға күрә … Рахманғолға «Алап» тип лаҡап исем таҡҡандар»; күҙе бөтәшә яҙған – һимеҙ; түрә булырға бик килештерә; ҡабыҡ алап кеүек, ҙур кәүҙәле, һонтор кеше – ҡаҡса оҙон кәүҙәле; «Староста булып һайланғас, Ғариф бигерәк фартауайға әйләнеп китте».

Фразеологизмдар: атаң артағы – атаңдың артыҡ балаһы, һалҡын алып инделәр – саф һауаға сығып килделәр.

Дини лексика: алланан да оят, кешенән дә оят; шәриғәт алдында барығыҙ ҙа тигеҙ; гонаһ шомлоғо; (малды …) бүлеү тейеш, шәриғәт буйынса; әлхасыл; бәхилләштерергә; хоҙайҙың биргәненә шөкөр; мираҫ бүлешеү – шәриғәт эше.

3. Романда тәбиғәт һүрәтләнеше.

Тауҙар һүҙе романда коннататив мәғәнәлә – халыҡтың тыуған илен, йәшәгән урынын сағылдыра: Урал башлана, ауыл өҫтөнә ҡолай яҙып тора, тауҙарҙың бүлкәттәре, тәпәшәк биләндәр, һыҙма тауҙар, теҙмә тауҙар, тәрән уялар, ҡая-таштар, тумалаҡ юл, таш юл, уйпат, шырлыҡ; кешегә хас сифаттары – тау мороно, сейәле түбәләр, һырттар; тауҙарҙы һүрәтләгәндә автор уларҙы төйәк иткән хайуандарҙы, үҫемлектәр атамаларын, бөжәктәр, ошо ергә хас кәсепселек кеүек нәмәләрҙе бар байлығы менән һынландыра, бик күп ҡая, тау, үркәс атамалары телгә алына: Ташкиҫкән, Аҡъегет, Элеш ҡырлаһы, Аласыҡбурған, Ҡалмаҡтар һырты, Ҡорағай-йорт, Сауҡа-йорт.

Йылға концепты кеше тормошонда социаль, эмоциональ, интеллектуаль яҡтарын, ваҡыт бәйләнешен когнитив аңлау, дауалау, хәстәрләү, хәрәкәт кеүек коннотатив мәғәнәләргә эйә: Ташбатҡан ауылын һуғарып, йырындарға тармаҡлана, ҡая таштарға бәрлегә, яҙ ярҙан таша, бөгөлдәр яһай, урыны менән, тирәктәр тирәһенән талғын аға, әрәмәләргә йәйелеп китә, упҡынлы, һаҙлыҡлы, күтерле, түбән ағыш, өйөрөлмәк. Кешеләргә хас сифаттары: ашҡынып аға, яҙын һөрөнтө ағас килтереп өйә, ҡолаҡтарға бүленә. Был бүлектә хәл-ваҡиғалар Үҙәште йылғаһы тирәһендә бара, Ҡамайылға, Ситйылға тигән атамалар ҙа бар .

Ат малы тураһында ҡулланылған лексика: Ғариф … Ҡатай яғынан нәҙек билле, киң яурынлы, ялбыр яллы, аҡ бәкәл, яра-ҡашҡа ерән бер һәүерәк алып ҡайтты. Санаға йә кырандасҡа еккән саҡта, ерәнсәй уйнаҡлап бейегән һымаҡ тыпырсынып, сапсынып, йөрәге түҙмәй, бауырһынып торор ине. Ә инде ултырып, дилбегәне бер ҡағыу менән, ул, туп кеүек тәгәрләп, йән-фарман сүкетеп сығып китер ине; уның артынан буран сығып ҡала торғайны. …ернәнсәйҙе маҡтап бөтә алманылар …: түшенең яҫылығына ҡарағанда йүгерек булырға оҡшай; әх, менеп суммала бүре һуғырға; бер-ике һикерһә бүренең өҫтөнә баҫа

ла ҡуя инде; ҡар ярыуға бик шәптер был хайуан; Аласабыр нәҫеленәнтер был… Ерәнсәй ерһене – Ерәнсәйҙе төрлөсә әмәлләп ҡаранылар, ауырыуы хаҡында төрлөсә юранылар: йылан ҡараҡ булғантыр; сысҡансыҡ булған; күҙ тейгәнтер мыңа, күҙеккән; төкө бултымы икән; берәй зәһәрле йылан саҡҡантыр мыны; йылан арбаусы әбейҙе килтерәләр. Ул әбей ерәнсәй эргәһендә, мөгөр-мөгөр уҡынып, хайуанды өшкөрөргә тотондо: «Зәңке, зәңке, зәңке йылан. Зәңке башлы ҡара йылан. Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан. Ағын һыуҙан етеҙ йылан. Һин-һин йылан, һин йылан, һинән яман мин йылан… көшөффф…», андыҙ тамыры ҡайнатып эсерәләр һ.б. атты дауалау ысулдары тураһында яҙыла.

Ат концепты мәҡәлдәрҙә. Андыҙ бар ерҙә ат үлмәҫ. Ябағаны хурламағыҙ, яҙға сыҡһа тай була. Атай малы – ҡатай малы. Баш һау булһа, мал табылыр. Маллы байҙан, уллы бай. Ике туған ирешер, атҡа менһә ярашыр.

4. Романда мифологик образдар «тәңренең бирмеш көнө», «шайтан ярлы, мин бай» кеүек һүҙҙәрҙә бирелә.

Шулай итеп, Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романында лингвокультурология фәне сиктәрендә ике мөһим мәсьәлә хәл ителә – тел билдәләре аша этник сиктәр асыҡлана, ундағы халыҡтың материаль һәм рухи мәҙәниәте күҙаллана. Роман киләсәк быуынды халыҡ педагогикаһы, этник традициялары менән таныштыра, тыуған телгә, тыуған ергә, туған халҡыңа, ололарға ихтирамлыҡ тәрбиәләй, рухи ҡиммәттәрҙе байыта, үткәндәргә ҡыҙыҡһыныу уята.

Әҙәбиәт:

1. Кейекбаев Ж.Ғ. Туғандар һәм таныштар. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1991. – 352 бит.

2. Сәмситова Л.Х., Ижбаева Г.Р., Әхмәтшина Г.С., Байназарова Г.М., Килмәкова Ә.М., Ташбулатова Р.М. Башҡорт фольклоры концептосфераһы. Лингвокультурологик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2013. – 492 бит.

Тимербулатова Р.М.,
учитель башкирского языка и литературы
БРГИ №1 имени Рами Гарипова г.Уфа

БАШКИРСКИЙ НАРОДНЫЙ ЭПОС «УРАЛ-БАТЫР» КАК СРЕДСТВО ФОРМИРОВАНИЯ МЕТАКОМПЕТЕНЦИИ ОБУЧАЮЩИХСЯ (мастер-класс)

Известный русский философ Александр Пятигорский говорил: «Человек достигнет результата, только делая что-то сам». И эти слова актуальны сегодня как никогда.

В условиях перехода общеобразовательных школ к ФГОС перед учителями ставятся задачи формирования знаний в соответствии с новыми стандартами, формирование универсальных действий, обеспечивающих все учебные предметы, формирование компетенций, позволяющих ученикам действовать в новой обстановке на качественно высоком уровне. Компетентностный подход в образовании сегодня – это ответ на вопросы, как решать практические задачи в условиях реального мира, как стать успешным, как строить собственную линию жизни.

Реализации данных задач в национальной школе способствует изучение башкирского эпоса «Урал-батыр», который является мощным источником формирования компетентности обучающихся.

Многие поколения исследователей обращались к нему, пытаясь проникнуть в его тайны, разгадать символический код. Обращаясь к эпосу «Урал-батыр», также хочу проследить идеи воспитания детей в семье, сохранения семейных традиций башкирского народа.

Обращение к древнему произведению «Урал-батыр» дает возможность прикоснуться к сокровищнице древних культур, понять их неоценимую значимость, потому что в нём наиболее ярко выражены философское воззрение народа, нравственные идеалы, история, семейные традиции, воспитание личности.

Здесь не только история народа, но и постижение сути основы общества – семьи, которая остается самой важной в формировании метакомпетенции и воспитании личности.

В изучении данного эпоса можно воспользоваться всеми ключевыми компетенциями в образовании. Рассмотрим конкретные

© *Р.М. Тимербулатова, 2020*

практические задания, которые направлены на формирование этих компетенций.

При применении информационных компетенций обучающиеся получают такие задания, для выполнения которых необходимо привлечь Интернет, справочники, словари, энциклопедии и т.д., например, при лингвистическом анализе эпоса «Урал-батыр», чтобы доказать архаичность произведения, обучающимся дается поработать с непонятными словами. Тут им необходимо прибегнуть к различным источникам информации, чтобы узнать о происхождении слов, архаизмов, диалектизмов, фразеологизмов.

Башкирский эпос «Урал-батыр» составлен на основе архивной рукописи и содержит многочисленные дополнения стилистического, лексического, фразеологического характера. Основа текста эпоса связана с диалектной речью. В нем отражены характерные для восточного диалекта, в то же время присутствуют слова из южного диалекта башкирского языка.

Также можно вести работу по краткому словарю мифопоэтической символики, составленной Г.Х. Бухаровой, д.ф.н., профессора БГПУ им. М. Акмуллы. Обучающиеся могут проверить свои ответы по заранее подготовленным пазлам. Данная работа ведется в трех группах, число которых соответствует трём мирам, представленным в самом эпосе: подземный, земной (реальный), небесный.

В самом мифе дается объяснение названиям. Во всех мировых мифологиях, особенно в эпических произведениях тюркоязычных, монгольских, тибетских народностях, трехмерный мир закреплен в мифологической системе как единый архетип.

Очень интересным аспектом информационной компетентности является применение ИКТ. На практике очень эффективной является работа с иллюстрациями из эпоса «Урал-батыр». Обучающиеся получают задание «Оживи образы». Это является подготовительной работой по созданию мультфильмов. Мои воспитанники снимали анимационные фильмы по эпосу «Акбузат», который является продолжением эпоса «Урал-батыр», создали образа Акбузата на гобелене (автор – Батталовой Гульназ).

Не менее актуальным является формирование социально-трудовых компетенций в работе. Они означают владение знаниями и опытом в сфере гражданско-общественной деятельности (выполнение роли гражданина, наблюдателя, избирателя, представителя), в социально-трудовой сфере (права потребителя, покупателя, клиента, производителя), в сфере семейных отношений и обязанностей, в

вопросах экономики и права, в области профессионального самоопределения. Применение социально-трудовых компетенций на уроках по изучению башкирского эпоса «Урал-батыр» сводится к тому, что обращается внимание способности личности взаимодействовать с другими людьми, с обществом. Умеет ли личность выполнять социальные функции, знает ли об обществе, в котором живет во взаимодействии с человеком и друг с другом, рынке труда – все эти вопросы не остаются в стороне.

Мы живем в век научно-технических открытий. А мифы, сказки народов мира, особенно эпос «Урал-батыр» способны перенести нас в древний мир, они свидетельствуют о том, что люди испокон веков ценили отцовские заветы, семейные законы, которых необходимо знать и нынешнему поколению.

Изучение эпоса способствует формированию социально-трудовых компетенций обучающихся на примере следующих заданий.

При рассмотрении ритмико-фонетической организации текста можно поиграть в игру «В царстве Катила». Дается отрывок, обучающиеся по нему должны найти слова со звуком «Ҡ», анализировать значение ритмичного повторения звука, опредилить позицию автора.

Событие происходит в стране Катила, где проливается людская кровь. Следовательно, эти слова связывается со смертью. При описании смерти используется фонема «Ҡ», которая ассоциируется со смертью. Слово «Ҡатил» с арабского переводится «палач», «убийца».

Далее обсуждается тема власти в стране Катил. Обучающиеся получают задание «Что бы вы изменили, если были бы царем этой страны?». Класс делится на три группы, составляют программу. После выполнения задания оттачивается умение вести диалог, слушать друг друга, вырабатывается общая точка зрения, обучающиеся готовят публичное выступление, в котором представляют результаты своей работы. На дом дается задание создать письменную коммуникацию (своё сочинение) по определённому тексту.

Также можно использовать ролевые игры. Например, «Легко ли быть министром?». Класс делится на 4 группы (министерства): министерство здравохранения, министерство образования, министерство труда и социальной защиты населения, министерство природопользования и экологии. Группы находят проблемы из эпоса «Урал-батыр», ищут пути их решения в соответствии с направлением министерства.

Когда обучающиеся при выполнении задания оказываются в реальной жизненной ситуации, повышается их мотивация к учению.

Коммуникативные компетенции также способствует дальнейшему самосовершенствованию ребенка. Одним из действенных методов подготовки к созданию собственного текста является составление различных роликов по эпосу. Например, «Расскажи иностранцу об эпосе «Урал-батыр». Дальнейшим этапом этой работы является создание фильма «Урал-батыр – достояние башкирского народа». Полную версию фильма можете увидеть на сайте гимназии.

Преступив порог третьего тысячелетия, многие народы ясно осознали, насколько важно и необходимо знать историю народа, насколько важно почитание обрядов. И какая бы сложная общественно-политическая ситуация ни возникала, как показывает жизнь, человеку всегда необходимо брать начало развития своей личности в семье, в традиции и обычаях народа.

Актуальность изучения произведения продиктована временем. Я думаю, что будущее людей в духовном возрождении через искусство, литературу, в частности, через эпос «Урал-батыр». Изучение древнего произведения поможет обучающимся осознать свое место в жизни, стать ответственными за свои поступки, быть благоразумными в вечной борьбе отцов и детей, стать уважительнее к родителям и своим историческим корням. Через почитание народных традиций можно воспитывать в детях готовность к переменам, развивать в них такие качества как мобильность, конструктивность, приобретать умения, которые могут использоваться и трансформироваться применительно жизненных ситуаций.

Тураева Г.З.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Күмертау ҡалаһының 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ТЕЛЕБЕҘҘЕ, ЕРЕБЕҘҘЕ ҺАҠЛАЙЫҠ!

Ниндәй матур, ҡөҙрәтле, бәрәкәтле, ғәзиздәрҙән-ғәзиз тыуған еркәйем! Ғорур Урал тауҙарын байҡап осҡан бөркөттәй мәғрур, балдай татлы, нәфис туған теле – башҡорт теле! Яланды биҙәп, күңелдәргә дәрт, илһам биреп күҙҙең яуын алып үҫкән ер күрке – нәфис сәскәләрҙәй төрлө милләттәр бер туғандай татыу ғаилә булып йәшәүсе бәхетле халҡым менән!

Иншалла, Башҡортостанда йәшәүсе бөтә халыҡтар өсөн рус теле менә бергә дәүләт теле – башҡорт телен өйрәнеүгә республикала бөтә

© *Г.З. Тураева, 2020*

шарттар ҙа бар. Балалар баҡсаһы, мәктәп, урта, махсус белем биреү, юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған программа, күрһәтмәләр һәм дәреслектәргә таянып уҡытыла. Телде өйрәнеү өсөн киң мәғлүмәт саралары: радио, телевидение, ваҡытлы матбуғат – бөтә эш гөрләп тора. Ғалимдар телде уҡытыу буйынса хеҙмәттәр яҙа, методистар өйрәтеп туя алмай. Бында эшләнгән эштәрҙе һанай китһәң, ҡулда йөҙ, мең бармаҡ булһа ла етмәҫ!... Эйе, барыһы ла бынамын тигән!

Ләкин… Ни хәл итәһең, яҡты көндө алмаштырған төн пәрҙәһе кеүек туған тел хаҡына бөтә эшләнгән изге эштәрҙе селпәрәмә килтереүсе, бәкәлгә һуғыусы ҡаршылыҡтарға күҙ йомоп ҡарарға ҡушмай минең выжданым…

Ғәзиз туғандарым, тормош карабының рух командирҙары, мин, ябай ғына башҡорт ҡыҙы, бөгөн алдығыҙға күңелемде өйкәгән, бер минутҡа ла тынғылыҡ бирмәгән көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләшергә килдем. Һеҙҙең нур бөркөп торған тылсымлы аҡыллы, уйсан өмөтлө күҙҙәрегеҙгә ҡарағас, тәндәремә йылы йүгерә. Милләтебеҙ, киләсәгебеҙ, хуш еҫле гөлдәребеҙ – балаларыбыҙ, телебеҙҙе яҡлауға, һаҡлауға һәм үҫтереүгә яңы ҡыйыу аҙымдар менән бер бөтөн йоҙроҡ булып хеҙмәттәшлек итеүгә тәрән ышаныс белдерәм.

Милләтебеҙҙең тарҡаулана барыуы: йолаларҙы, телде онотоу, үткәндәргә ҡәҙер-хөрмәт юҡлыҡ, барыһына вайымһыҙлыҡ – бөгөнгө көндөң төп проблемаһы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, телебеҙ яҙмышы әле тулыһынса хәл ителмәгән. Тел тураһында закон еренә еткереп үтәлмәй. Ни өсөн балалар башҡорт телен дәүләт теле, хатта туған тел булараҡихлас, теләк менән өйрәнмәй?

«Ағас башын ел бора, әҙәм башын һүҙ бора», – тип халҡым юҡҡа ғына әйтәмгән. Бында бөтә нәмә ғаиләнән башлана. Уҡытыусы ни тиклем бөтә күңелен һалып белем, тәрбиә бирмәһен, әгәр өйҙә балаға әсә теленең икмәк-тоҙ һымаҡ кәрәклеге ҡанына һеңдерелмәһә, һөҙөмтәгә ирешеү ҡыйын. Шуға мин эште ғаиләнән башлайым. Тәүге дәрестә баланың үҙе, ата-әсәһе, туғандары тураһында итәғәтле генә һорашып, уларҙың күңеленә үтеп инерлек тылсымлы һүҙҙәр ярҙамында һәр бала менән аралашам, телде белеү, уға ҡарашын билдәләйем. Тиҙ арала ата-әсәләр менән эште яйға һалып туған телде өйрәтеү буйынса бергәләшеп бөтә мөмкинлектәрҙе егеп эшкә керешәбеҙ. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәй.

Икенсе ауырлыҡ, телде өйрәтеү буйынса программалар дәүләт, ил кимәлендә бер бөтөн системаға һалынып эҙмә-эҙлекле даими алып барылмауына бәйле. Инде генә геүләтеп эшләй башлаһаҡ, ҡайҙандыр «аҡыллы баштар» башҡорт телен тик уҡырға теләгән балаларға ғына

өйрәтергә, ә ата-әсә риза түгел икән, ҡаршы килергә ярамай тигән хөсөт тараталар, хатта газетала шул турала яҙырға баҙнат итәләр. йәнәһе, ата – әсәйҙәр балһын башҡортса уҡытһа, рус теленән артта ҡала, берҙәм дәүләт имтиханыныа әҙерләнеү ауырлаша, балам икмәктоҙлоҡ һөйләшә белгәс еткән, тип тәрән яңылыша. Әйҙә уҡытыусы яу яланында тегеләй итә, былай итә, ә ваҡыт туҡтап тормай, үтеп кенә бара.

Ни өсөн башҡорт теленән берҙәм дәүләт имтихандары юғары уҡыу йорттарында иҫәпкә алынмай? Үкенескә ҡаршы, һуңғы ваҡытта ата-әсәләр, халыҡ араһында башҡорт теле тураһында төрлө уйҙырмалар таратыуға сик ҡуйылмауы хәүеф тыуҙыра. Ғөмәмән, башҡорт теле, уҡытыусылар дәүләт тарафынан яҡлауға мохтаж. Әгәр ҙә бөгөндән башлап бергәләп аныҡ маҡсаттар ҡуйып бергәләшеп көрәшкә күтәрелмәһәк, иртәгә һуң булыуы ихтимал!

Хөрмәтле ҡәрҙәштәрем! Битарафлыҡ, күҙ йомоу, һәр нәмәгә риза булып өндәшмәү – оло хата, быға сик ҡуйырға! Зәки Вәлиди әйткәнсә: «Туған телде һаҡлау өсөн бөтә мөмкин һәм мөмкин булмаған сығанаҡтар аша көрәшергә тура киләсәк».

Мине борсоған тағы бер нәмә – бөгөнгө көндә башҡорт халҡының этнос булараҡ ауыр һәм ҡыйын дәүерҙә йәшәүе. Сөнки йәштәрҙең рухи яҡтан тарҡала барыуы күңелде ҡыра. Ғаилә һәм ил яҙмышына ҙур йоғонто яһаусы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йәмғиәттәге бөгөнгө хәле аянысы. Сөнки гүзәл заттарҙың әсә наҙы, әсә йылыһын сабыйына еткереп, нәфис, йомшаҡ тәбиғәтле, иманлы гүзәл балалар үҫтереү урынына байлыҡ, мул тормош, ҡаты бәғерле була барыуы, эскелек һаҙлығына батыуы кеүек йәмһеҙ күренештәр арҡаһында күпме сабыйҙар йәтимлеккә дусар. Һуңғы 2-3 йылда халыҡтың күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүе күҙгә ташлана. Тик аҡса хаҡында ғына ҡайғыртып, ил, тел, милләт хәстәрлеген ситкә ҡуйырға ярамай. Сөнки быны нимә менән бөтөүен күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Халыҡ ошо мәсьәләләр тураһында тәрән борсола, сөнки эшһеҙ ҡалыу ҡурҡынысы янай. Бер-беребеҙҙе яҡларға, һаҡларға, үҫтерергә тейешбеҙ. Берҙәм һәм татыу булырға кәрәк! Был өлкәлә балалар, үҫмерҙәр араһында төрлө ижтимағи ойошмаларҙың һөҙөмтәле эшләүе мөһим. Ҡот осҡос фажиғәгә юлыҡмау өсөн мәктәптә әҙәп, әхләҡ тәрбиәһен юғары кимәлгә күтәреү зарур! Ни өсөн «Тормош һабаҡтары» дәресе мәктәп программаһынан төшөрөп ҡалдырыла?

Бөгөнгө көндә 30 проценттан артыҡ йәштәр эш эҙләп ғаиләләрен, балаларын ҡалдырып «оҙон» аҡса артынан ят ерҙәрҙә йөрөп ятҡанда сит ил ҡунаҡтары Башҡортостанға бер-бер артлы күсеп киләләр ҙә үҙ эштәрен асып ебәрәләр, шунан яйлап ҡына бөтә мал-мөлкәткә ысын

хужа булып китеп, тамыр йәйгәндән-йәйә баралар. Ҡайҙа ғорурлыҡ! Ауыл, ҡала тулы эшһеҙ, урам тапап, тәмәке көйрәтеп йөрөүсе, йәки телевизорға көнө-төнө текләп ултырыусы йәштәр, әллә күпме буйҙаҡ егеттәр, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар! Тимәк, ғаиләлә, мәктәптә балаларҙы киләсәккә әҙерләй белмәгәнбеҙ. Шуның арҡаһында балалар һаны кәмей, мәктәптәр ябыла, уҡытыусылар эшһеҙ ҡала!

Быны булдырмау өсөн мәктәп эскәмйәһенән башлап баланы хеҙмәткә, төрлө һөнәргә әҙерләүгә көстө йәлләмәйек!

Тағы ла шуны әйтеп китергә теләйем: аҫаба башҡорт балалары бәләкәйҙән үҙҙәрен ысын хужа итеп тойоп үҫһен, милли рухлы, иманлы, белемле, мәҙәниәтле булһын өсөн уларҙы башҡортлоҡ тойғоһо менән үҫтереү көнүҙәк бурыс булып тора.

Милләтебеҙ яҙмышын хәл итер, артабан йәшәү йүнәлешен билдәләп, вазифаһы буйынса ғына түгел, йөрәк ҡушыуы менән халҡым тип янып-көйөп йөрөүсе йәштәр күберәк булһын ине!

Был йәһәттән ата-әсә, мәктәп, бала өсмөйөшө берҙәм эш алып барыу әһәмиәтле.

Бөтә тереклеккә йән биргән, туйындырған һәм кейендергән, кеше иткән республикабыҙҙың тәбиғәтен һаҡлау, ҡәҙерләү, уны һаҡ файҙаланыуҙы көнүҙәк мәсьәлә итеп ҡуяйыҡ! Сөнки тәбиғәтебеҙ йылдан-йыл ярлылана, ағыулана.

Балалар баҡсаһынан башлап һәр балаға тәбиғәттең йәшәү сығанағы булыуын ҡанына һеңдерергә кәрәк!

«Рух һүнмәһә – ил һүнмәҫ», тигән халыҡ мәҡәлдәрендә тәрән философик төшөнсә, ҙур тормош тәжрибәһе ята. Рухҡа тарихты индерергә кәрәк. Ни өсөн башҡорттарҙың һаны кәмей?

Хөрмәтле туғандар! Милли үҙаң, мәҙәниәт, тарих буйынса төплө белем биреү, уны практик йәһәттән өйрәтеү – туған тел уҡытыусыһының мөҡәддәс бурысы.

Ауылдарҙа ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар клубы, хоҡуҡтарҙы өйрәнеү буйынса махсус курс, өҫтәлмә дәрестәр ойоштороу кәрәк!

Халҡым тип янған, милләт, ил, ер, белем, мәҙәниәт һәм дөрөҫлөк тел өсөн утҡа-һыуға инерҙәй шәхестәр үҫтеререү беҙҙең – туған тел уҡытыусыларының иң изге бурысы!

Фаршатова Ә.Ә.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Яңауыл ҡалаһының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ ДИАЛЕКТЫ ШАРТТАРЫНДА УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ МИЛЛИ ҮҘАҢЫН ТӘРБИӘЛӘҮ
(оҫталыҡ класы)

Милли үҙаң ул – милләттең үҙағасы, милләттең тормошо, йәмғиәттәге урынын тойоу, уның мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү, уның бөгөнгө хәлен һәм киләсәк яҙмышын яҡшыртыу өсөн даими хәстәрлек күреү [1; 81]. Бала донъяға килгәс тә беренсе һүҙҙәрҙе туған телендә ишетә. Милли үҙаңды тәрбиәләү һәм артабан үҫтереү милли мөхиткә мөнәсәбәтле.

Оҫталыҡ класымдың маҡсаттары:

1. ерле шарттарҙа уҡыусыларҙың милли үҙаңын тәрбиәләү;
2. ҡулланылған алымдарым менән тәжрибә уртаҡлашыу.

Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Милли телдең иң юғары формаһы булып әҙәби тел һанала. Әҙәби телдән башҡа дөйөм халыҡ теле лә бар, ул диалекттарҙы, ябай телмәрҙе, жаргондарҙы үҙ эсенә ала. Дөйөм халыҡ теле – әҙәби телдең артабанғы байыу, үҫеү, камиллаштырыу сығанағы, улар үҙ-ара эҙмә-эҙлекле бәйләнештә тора.Туған телгә ҡарата уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа, һөйөү тәрбиәләүҙә, әсә теленең үҫеш процесын аңлатыуҙа уҡытыусы һис шикһеҙ диалекттарға һәм ерле һөйләштәргә таяна.

Уҡытыусының шәхси сайты – ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнеш араһында араҙашсы, уҡыусылар менән белем алыу сараһы. Сайтты ҡулланыу уҡытыу эшсәнлеген байыта, уҡытыу процесын ҡыҙыҡлы, нәтижәле һәм ижади итеп ойошторорға мөмкинлек бирә. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу процесында дистанцион эшмәкәрлек» тип аталған проект өҫтөндә биш йыл эш алып барҙым, эште алып барыу өсөн шәхси сайтымдың (https://farshatova.jimdo.com) ҡушымтаһын да астым (http://anvarovna.jimdo.com/). Эшемдә башҡалар ҙа файҙаланырлыҡ яңылыҡтарға ынтылып йәшәйем. Дистацион эшмәкәрлек менән бик күп уҡыусыларға телебеҙгә һөйөү уяттым тип ышаныслы әйтә алам.

© *Ә.Ә. Фаршатова, 2020*

Бөгөн һеҙҙең менән төньяҡ-көнбайыш диалекты шарттарында рус мәктәбендә милли үҙаң тәрбиәләүҙә тәжрибәм менән уртаҡлашырға теләйем. Был эште башҡарыуҙа уҡыусыларҙы ла,ата-әсәләрҙе лә йәлеп итеү маҡсатынан сайтыма тағы ла https://rodn2016.jimdo.com/ ҡушымта астым һәм көн дә сайттағы материалдарҙы тулыландыра барам.

Ерле һөйләш шарттарында әҙәби тел нормаларына өйрәтеү алымдары: (быларҙың бөтәһе лә сайтымда үҙем ҡулланған күнегеүҙәрҙе тәҡдим итәм) https://rodn2016.jimdo.com/

1. Беренсенән,башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре өҫтөндә эш алып барыу:а) Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **й** урынына **ж** осраштырғылай **ете-жиде, йәй-жәй, еләк-жиләк**. **Ә өнөн э өнө** менән алмаштырыу осраҡтары ла күҙәтелә. **Бәләкәй- [бэлэкэй].**

б) Һүҙҙәрҙәге **ҙ өнө з өнө** менән әйтелә.

Ҙур– зур, баҙар – базар, беҙҙең – безнең, ҡаҙ– каз, баҙ – баз һ.б.

в) башҡорт теленең **һ, ҫ өнө** урынына **с,ч** өнө ҡулланыуы

һин – син, иҫәнме – исәнме, һандуғас – сандугач, һалам – салам, баҫкыс – баскыч, баҫма – басма һ.б.

г) ө өнө ү менән, ү өнө ө менән

өйрәк – үрзәк, өйрәнәм – үрәнәм, һөйләй – сүйләй, ғүмер – гөмер һ.б.

ғ) күплек ялғауҙары өҫтөндә эш: аттар – атлар, ҡыҙҙар– кызлар, китаптар – китаплар, дәрестәр – дәресләр һ.б.

2. орфографияға өйрәтеү алымын ҡулланыу (һүҙлек, ирекле, ижади,күреү, аңлатмалы, һайланма диктанттар); орфографик күнегеүҙәр эшләү (ауыр орфограмманы табыу, текстан диалект һүҙҙәрҙе табып, әҙәби башҡорт телендә дөрөҫләп уҡыу), тексты күсереп яҙыу (төбәк һөйләшендә уҡып күрһәтеү);

3. аңлатыу алымы (әҙәби телмәр менән диалект араһындағы айырманы аңлатыу, башҡорт әҙәби телендәге текстарҙы ерле һөйләштә уҡыу, айырмаларын, оҡшашлыҡтарын асыҡлау);

4. төрлө дидактик карточкалар ҡулланыу, унда бер үк һүҙе диалект һәм әҙәби телдә сағыштырыу, һығымта яһау ;

5. диалект менән бәйле интерактив-мультимедиа күнегеүҙәре башҡарыу;

6. уҡытыусының сайты аша ерле шағирҙар, яҙыусыларҙың тормош юлы, ижады менән таныштырыу;

7. был әҫәрҙәрҙе ҡулланғанда, әҫәргә, унда ҡулланылған ерле һөйләш һүҙҙәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатында автор ҡулланған һөйләмдәрҙәге диалект һүҙҙәрҙең синонимдарын, антонимдарын табыу.

8. Диалогтар, ситуатив текстар ҡулланыу. Яңауыл ерендә ҡатнаш ғаиләләр күп. (Башҡорт – удмурт, татар – башҡорт, башҡорт – мари

ҡатнаш ғаиләләре). Ҡала ерендә рус мәктәбендә башҡорт телен өйрәтеүҙә күберәк диалогтарҙы, ситуатив тестарҙы ҡулланам. Башланғыс кластарҙа «Туғанлыҡ терминдары» буйынса ҡоролған диалогтарҙа бала үҙе төбәк һөйләшендә был һүҙҙәрҙе нисек ҡуллана шулай ҡулланыуҙы ла хуплайым. Был диалект һүҙҙәр башҡорт теленең һүҙлек запасын байыта ғына тип уйлайым.

9. Йыл һайын районыбыҙҙа «Башҡортостандың 100 шағиры» шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе уҙа.Унда ерле шағирҙарҙың әҫәрҙәрен уҡыусыларыбыҙ шундай ғорурлыҡ менән башҡара. Был сараның да туған теленә, тыуған төйәгенә һөйөү уятыуҙа ҙур роль уйнауын билдәләп үткем килә. (Сайтымда бер нисә сығыштың видеоһын да тәҡдим итәм).

Һәр төбәктең үҙенең фольклоры һаҡланған. Бында төбәккә генә хас мәҡәлдәр ҙә, йомаҡтар ҙа, юрауҙар ҙа, ырымдар ҙа, төрлө йолалар ҙа халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын байыта, тулыландыра. Мәҫәлән, ҡыҙ кейәүгә сыҡҡас, «Торған ерендә таш булһын», тигән әйтем бар. Яңауыл районының Бәҙрәш-Аҡтау тигән ауылы эргәһендә Дусай исемле шишмә бар. Элек килен булып төшкән кешегә, йола булараҡ, шул шишмәнән ваҡ таш йотторғандар.

Йыл да районыбыҙҙа Шәжәрә байрамы үтә. Балаларға туған телен өйрәтеүҙә төп алымдарҙың береһе – халҡыбыҙҙың әҙәби байлығына, фольклор мираҫына таяныу. Был байрамдарҙа балалар фольклорындағы һамаҡтар ҙа, үртәүестәр ҙә, таҡмаҡтар-таҡмазалар ҙа уларҙың телмәрен байытыуҙа, ижади фекерләүен һәләттәрен үҫтереүҙә, тапҡырлыҡ-зирәклеген тәрәнәйтеүҙә ышаныслы ярҙамсылар.

Диалекттар һәм уларға ҡараған һөйләштәр әҙәби телгә эленән-эле һут биреп, уны тулыландырып тороусы тамырҙар улар.

Әҙәбиәт:

1. Аҙнағолов Р.Г. Үҫтереүле уҡытыу методикаһын инеш. Шәхес тәрбиәләүҙең көнүҙәк мәсьәләләре. – Өфө: БР ФА, «Ғилем» нәшриәте, 2011. – 80-81-се б.

2. Уҡытыусының шәхси сайты https://rodn2016.jimdo.com/

Хәкимова Г.А.,
юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,
М. Минһажетдинов премияһы лауреаты,
«БР мәғариф алдынғыһы»,
Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы
Учалы районының Учалы ауылы башҡорт гимназияһы

М. КӘРИМ ӘҪӘРҘӘРЕ БУЙЫНСА МӘКТӘП СӘХНӘҺЕ ӨСӨН СЦЕНАРИЙҘАР
(телмәр үҫтереү өсөн уҡытыусыларға методик ҡулланма)

Мәктәп сәхнәләре йыш ҡына сценарийҙаға, пьесаларға ҡытлыҡ кисергәнен үҙ тәжрибәмдән белгәнгә күрә, коллегаларыма башҡорт халыҡ шағиры М. Кәримдең әҫәрҙәренә таянып яҙылған бер нисә сценарий тәҡдим итәм. Был сәхнәләштереү өсөн яҙылған әҫәрҙәр театр түңәрәктәрен алып барыусыларға ла, сәхнәләштереү конкурстарында ҡатнашыусыларға ла, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә лә ҙур ярҙам булыр, тип уйлайым. Беҙ М. Кәримдең бик күп әҫәрҙәрен сәхнәләштерҙек. Балаларға иң оҡшағандары: «Өс таған», «Ҡайынлыҡ урманында», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Айгөл иле» әҫәрҙәре булды.

Башлыҡ һайлау

(М. Кәримдең «Өс таған» повесы буйынса)

Ҡатнашалар:

Гөлнур – Айҙарҙың һеңлеһе

Вәзир

Айҙар

Ғабдулла

1-се шаршау

(Малайҙар сәхнәгә һөйләшеп килеп сығалар)

Вәзир: Кирәмәттең хәле мөшкөл икән...

Айҙар: Бер суртан арҡаһында...

Ғабдулла: Суртан түгел, бер яман кеше арҡаһында. Кирәмәтте был хәлдә ҡалдырырға ярамай.

Вәзир: Күп итеп ыуылдырыҡ йыяйыҡ та, Кирәмәткә илтеп һалайыҡ. Балыҡ ул ыуылдырыҡтан ярала.

Айҙар: *(ҡырт киҫеп)* Ыуылдырыҡ түгел, тере балыҡ ебәрергә кәрәк!

© *Г.А. Хәкимова, 2020*

(Малайҙарҙың һөйләшеүен Гөлнур тыңлап тора һәм үҙе лә һиҙмәҫтән ҡысҡырып ебәрә. Ә ҡыҙыу бәхәсләшкән малайҙар бер-береһенә ҡарашып аптырап ҡала.)

Гөлнур: Ҡыҙыл ыуылдырыҡ магазинда ла бар!

Айҙар: *(һеңлеһенә бойороҡ биреп)* Ысҡын бынан!

Гөлнур: *(ҡаршылашып)* Ысҡынмайым!

Айҙар: *(асыуланып)* Шыл, тиҙәр һиңә!

Гөлнур: Шылмайым, үҙең шыл!

Айҙар: *(ҡаты бойороғон ҡапыл йомшаҡ вәғәҙәгә алмаштырып)* Тыңлаһаң, турғай балаһы тотоп бирермен, һылыуым, хатта икене.

Гөлнур: *(ҡыуанып)* Антмы!

Айҙар: Ант!

(Гөлнур ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй йүгереп сығып китә, ә малайҙар, иркен тын алып, фекерҙәрен дауам итәләр).

Айҙар: Малайҙар, әйҙәгеҙ, колхоздың балыҡсылар бригадаһына барып ярҙам һорайыҡ.

Вәзир: *(Айҙарҙың был кәңәшенән көлөп, уны үсекләргә керешә)* Ярҙам, ярҙам, имеш... Бар, бөтә ауылға сығып ҡысҡыр, ярҙам һора. Бахыр... *(Теш араһынан серт иттереп төкөрөп ебәрә).*

Ғабдулла: *(Едти итеп)* Малайҙар, башта уҡ ант итәйек – был сер. Өндә лә, төштә лә, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә серҙе сисмәҫтән булһын. Кем дә кем телен тыя алмай, ул һатлыҡ йән тип аталасаҡ! Антмы? *(Үҙе куш ҡулым маңлайына ҡуйып ант итә).* Ант!

Вәзир: Ант!

Айҙар: Ант!

Ғабдулла: Ыуылдырыҡлыһын һайлап ҡына беҙгә ҙур бер күнәк балыҡ тоторға кәрәк.

Вәзир: *(һикереп үк тора)* Ниңә уны тотоп торорға?. Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын.

Ғабдулла: *(асыуланып).* Батмай. Тура эште кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр!

Вәзир: *(мах бирмәҫкә тырышып)* Ҡалайыраҡ эре сирттергән була, әйтерһең, башлыҡ...

Айҙар: *(нимәлер тапҡандай ҡысҡырып ебәрә)* Малайҙар, беҙгә ысынлап та бер башлыҡ кәрәк. Кем башлыҡ була?

(Ғабдулла менән Вәзир бер-берһенә ҡарашып өндәшмәй торалар).

Ғабдулла: Башлыҡты һайларға кәрәк.

Вәзир: *(күҙҙәрен сылт сылт йомоп)* Малайҙар, ә, малайҙар, минең бер генә лә башлыҡ булғаным юҡ... *(Тауышын ҡалтыратып)* Айҙар

ҡыш буйы класта староста булды. Ғабдулла стена газетаһына һайланды, район слетына барҙы, Бер мин генә...

Ғабдулла: *(һалҡын тауыш менән)* Башлыҡты һорап алмайҙар!

Вәзир: *(һаман да өмөтөн өҙмәй, хәйләкәр йылмайып)* Шыбаға! Кем өҫкә сыға – шул башлыҡ була!

Айҙар: *(ҡырт киҫеп)* Шыбағаны уйында ғына тоталар. Тапҡан уйын! Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше башлыҡ була!

Вәзир: Харап икән. Йүгеректе башлыҡ итергә, имеш. «Башлыҡ» ул «аяҡ» түгел, «баш» һүҙенән алынған – белмәһәң, бел. Иң йәтеше уның – мәргәнлектә ярышыу. Кем мәргән ата – шул командир. Ана, Ғабдулла әйтһен!

Ғабдулла: Иң дөрөҫөн әйтәйемме?

Вәзир, Айҙар: Әйт, әйт!

Ғабдулла: Иң дөрөҫө – көрәштә көс һынашыу. Кем алышта еңә - шул башлыҡ.

Вәзир: *(мыҫҡыллап)* Ҡоро көс күрһәтеп кенә башлыҡ булыу замандары үткән инде**.**

Ғабдулла: *(асыуланып, Ғабдулланың яғаһынан эләктереп ала)* Нимә?

Айҙар: (уларҙы саҡ айырып) Ҡуйығыҙ, малайҙар, әйҙәгеҙ ярыштарҙы башлайыҡ. Өсөбөҙҙөң дә һүҙе һүҙ була: беренсе ярыш – йүгеректәр ярышы, икенсе ярыш – мәргәнлектә атышыу, өсөнсө ярыш – көс һынашыу. Ризамы?

Вәзир, Ғабдулла: *(бергә)* Риза!

2-се шаршау

Айҙар: Беренсе ярыш – йүгеректәр ярышы. *(Ҡулы менән күрһәтеп)* Малайҙар, ауыл ситендәге яңғыҙ ҡарағасты күрәһегеҙме? Беҙгә шул ағасты урап килергә кәрәк. Кем дә кем уны беренсе булып урап килә, шул еңеүсе була. Аңланығыҙмы?

Вәзир, Ғабдулла: Эйе, эйе...

Айҙар: *(команда биреп)* Раз, два, пли! *(Айҙар шунда уҡ атлығып сығып китә. Ғабдулла унан ҡалышмай, ә Вәзир бөтөнләй артта тороп ҡала.)*

Вәзир: *(Айҙарҙың шәп йүгереүенә асыуы килеп)* Ерән шайтан! Ботон таш бәреп һындыраһыңмы ни? Һөрлөгөп тә китмәй бит, исмаһам!

Айҙар: *(ҡарағасты килеп ҡосаҡлап)* Мин еңдем! Мин беренсе!

Ғабдулла: *(шулай уҡ ҡарағасты килеп ҡосаҡлап)* Мин икенсе!

(Был ваҡытта Вәзир, иптәштәренең ағасҡа барып еткәнлектәрен күреп,оятҡа ҡалмаҫ өсөн, ярты юлда лап итеп ергә ултырып ала ла

аяғын ҡарай башлай. Бер аҙҙан ул, аҡһай биреп, иптәштәрен ҡыуып етә.)

Айҙар: *(көлөп)* Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына.

Вәзир: *(бахыр булып)* Аяғыма сүп керҙе. Мине ярышта ҡатнашмаған тип иҫәпләгеҙ!

Ғабдулла: *(Вәзирҙең аяғын ҡарап)* Бында бит иҫке яралар ғына. Еңелгәс, еңелдең инде.

Ғабдулла, Вәзир: *(Айҙарҙы ике яҡлап уратып)* Йүгеректәр ярышының еңеүсеһе – Айҙар батыр!

Вәзир: Малайҙар, әйҙәгеҙ, ваҡытты оҙаҡҡа һуҙмайыҡ, ярыштың икенсе төрөнә күсәйек *(Ҡарағасҡа Айҙарҙың сигелгән түбәтәйен ҡуйып)*.

Кем дә кем, анау ултырған ағасҡа, (ағасҡа күрһәтеп) рогатканан таштар менән атып, өс атыуҙа күберәк тейҙерә, шул еңеүсе була. Килештекме?

Ғабдулла, Айҙар: *(бергә)* Килештек!

Вәзир: *(ата торған урынды билдәләп)* Ҡарағастан утыҙ аҙым үлсәп, таяҡ ҡаҙайыҡ. Ошонан тороп атырға тейешбеҙ. Сиратты алфавит буйынса билдәләйбеҙ. Беренсе булып Айҙар ата. *(Айҙар түбәтәгә ҡарай бик оҙаҡ тоҫҡай, ә малайҙар уның һәр бер хәрәкәтен иғтибар менән күҙәтәләр)*

Вәзир: (ҡыуанып) Әһә.... Тәүге таш ҡайҙалыр выжлап осоп та китте, ҡайһы яҡҡа барып төшкәне лә күренмәне.

Ғабдулла: *(Айҙар атҡан яҡҡа ҡарап, ҡулдарып сәпәкәй итеп)* Икенсеһе – шап иттереп ҡарағасҡа һуғылды!

Айҙар: *(оҙаҡ тоҫҡап)* Ҡыуанмай тороғоҙ! Бынығы түбәтәйҙе осороп алып китәсәк!

Вәзир, Ғабдулла: *(Айҙарҙың түбәтәйгә тейҙермәгәнен күреп, икеһе лә көлөп)* Таш үҙ юлына китте, түбәтәй ҡымшанманы ла. Айҙар, еңелдең!

Ғабдулла: *(тантаналы итеп)* Икенсе булып майҙанға Вәзир сыға.

(Вәзир башта бик етди ҡиәфәт менән сәпкә ҡарап тора, шунан ашыҡмай ғына рогаткаһын ҡора һәм тоҫҡай башлай, тап шул ваҡыт уның танауына бер серәкәй килеп ҡуна. Ләкин Вәзирҙең быға иҫе китмәй.)

Айҙар: *(ситтә, үҙ алдын һөйләнә)* Ҡурҡаҡ һин, серәкәй, танауына ҡунғансы, күҙенә килеп инһәң, ни ереҥ кәмер ине, йүнһеҙ...

(Айҙар һуҡранып та бөтә алмай, түбәтәй осоп та китә).

Вәзир: (эре генә) Бер ҡоймаҡты майланыҡ!

(Вәзир тағы ла тоҫҡай.)

Вәзир: *(был атыуы ла уңышлы булыуын күреп, эре генә)* Ике ҡоймаҡты майланыҡ!

Айҙар: *(ситтә, үҙ алдын һөйләнә)* Абау... Баш сатнап китте. Таш, әйтерһең дә, минең маңлайға килеп тейҙе. *(Вәзир тағы ла тоҫҡап атып ебәрә).*

Вәзир: *(өсөнсө атыуҙа түбәтәйҙең ботаҡҡа тейгәндән һелкенеп төшкәнен күрһә лә ҡысҡырып ебәрә)* Өс ҡоймаҡты майланыҡ!

Айҙар: (эстән һөйөнөп) Майламайыраҡ тор әле... Майың етмәҫ! Атҡан ташың ағасты аша китте.

Вәзир: (уны үсекләп) Күҙең ҡыҙамы? Эсең әрнейме? Бына шулай атырға кәрәк, Айҙар мырҙам. Был һиңә тыр-тыр йүгереү түгел.

Ғабдулла: (бошоноп) Шул тиклем маҡтаныуҙан нисек телдәре талмай. Вәзирҙең өсөнсө ташы барыбер иҫәпләнмәй. Харамлашма ла!

Айҙар: Өсөнсө сират Ғабдуллаға. *(Ғабдулла түбәтәгә ҡарай тоҫҡап атып ебәрә, ә малайҙар уның һәр бер хәрәкәтен иғтибар менән күҙәтәләр)*

Ғабдулла: *(ҡыуаныып)* Ике атыуың да бушҡа булды. Таштарыңдан ел генә һыҙғырып ҡалды.

Айҙар: Әһә, береһе сәпкә тейҙе. Ғабдулла, икенсе урынды алдың!

Ғабдулла, Айҙар: (*Вәзирҙе ике яклап уратып)* Бөгөнгө ярыштың иң шәп мәргәне – Вәзир батыр!

Ғабдулла: Ә хәҙер көрәш майҙанына рәхим итегеҙ. *(Шыбаға тотошалар, тәүҙә Айҙар менән Вәзир, устарына төкөрөп, ҡапма-ҡаршы килеп баҫалар.)*

Айҙар: Алыш бармы, еңеш бармы?

Вәзир: *(усына төкөрөп)* Алыш та бар, еңеш тә бар! (*Малайҙар оҙаҡ ҡына көрәшәләр, көстәр бер тигеҙ була. Ләкин Вәзир, ҡырын йығыла биреп, Айҙарҙы баш аша ырғыта. Шул ваҡытта нимәлер пыр-р-р итер йыртылып китә.)*

Тәгәрәп ятҡан Айҙарҙың ике усында Вәзир өҫтөндәге зәңгәр күлдәктең ике итәге була. Хужа өҫтөндә бары ике еңе менән яғаһы ғына эленеп ҡала.)

Ғабдулла: *(Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен ҡарап көлөп ебәрә)* Ха-ха-ха! Ха-ха-ха!

Айҙар: *(Ҡабырғаһы менән осло ташҡа барып төшкән Айҙар, ауыртыныуын онотоп, Ғабдуллаға ҡушыла)* Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир! Ха-ха-ха!

(Бер нимә лә аңламаған Вәзир, битендәге тирен һөртмәксе булып, күлдәк итәген ҡапшай. Ләкин ҡулы яланғас ҡорһағына тейә. Ул бары шунда ғына Айҙарҙың усындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоп алынғанына төшөнә.)

Вәзир: *(көлмәй, танауын йыйыра биреп, ғорур ғына)* Баш һау булһа, мал табылыр әле!

(Ғабдулла ҡаршыһына килеп) Алыш бармы, һалыш бармы?

Ғабдулла: Алыш та бар, һалыш та бар? Ләкин көрәште ҡабул итмәйем. Өҫтөңдә күлдәгең дә, билеңдә ҡайышың да юҡ. Етмәһә салбарың да өлтөрәп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, тотонор нәмәң юҡ!

Айҙар: *(ҡайышын сисеп)* Вәзир, мә, минең ҡайышты ал. *(Баштарын сайҡай-сайҡай һөҙөшөргә килгән йәш үгеҙҙәр кеүек гәйрәтләнеп, малайҙар бер-береһенә ташланалар.) (Ғабдулла, ҡапыл теҙләнеп, Вәзирҙең күкрәк аҫтына инә. Күҙ асып йомғансы тегене яуырынан ала ла зырылдатып әйләнергә тотона. Әйләнеп-әйләнеп йөрөй ҙә, үҙе йығылып, Вәзирҙе баш аша тәгәрәтеп ебәрә.)*

3-сө шаршау

Айҙар: *(ҡыуанып)* Һайлауҙар бөттө. Башлыҡҡа суҡмарҙы тапшырырға ваҡыт етте инде.

(Малайҙар Ғабдуллаға төбәлә.)

Вәзир: Иң күп отош һинең яҡта...

Айҙар: Эйе, эйе... Иң күп отош һинең яҡта...

Вәзир: Теләһәң утҡа, теләһәң һыуға алып ин! Беҙ һинең тоғро юлдаштарың.

Ғабдулла: Малайҙар, әкиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе йүгерек, береһе мәргән, береһе көрәшсе. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты.

Айҙар: Юҡ инде, иптәшкәй, баш берәү генә була. Һин башлыҡ. Һиңә – ура! *(Тауҙарҙы яңғыратып һөрән һала).*

Вәзир: Эйе, Айҙар дөрөҫ әйтә. Һин башлыҡ. Һиңә – ура! *(Малайҙар Ғабдулла тирәләй ҡыҫҡырышалар).*

Ғабдулла: (башлыҡҡа хас едти тауыш менән) Улай булғас минең беренсе фарманды тыңлағыҙ! Кирәмәтте ҡотҡарыу өсөн төҙөлгән орядҡа «Өс таған» тип исем ҡушырға. Ризамы? *(Малайҙар ошо тарихи фарманды ҡабул иткәндән һуң, бер-береһенең устарына ҡулдарын һалалар).*

Вәзир: Риза. Артистар бейей торған шундай бейеү ҙә бар хатта.

Ғабдулла:Ә хәҙер Кирәмәтте ҡотҡарырға саптыҡ!

(Сәхнәнән «Өс таған» отряды йүгереп сығып китә)

(Шаршау ябыла)

Ҡайынлыҡ урманында

(М. Кәримдең «Ҡайынлыҡ урманында» хикәйәһе буйынса)

Ҡатнашалар:

Әлфиә Күбәләк

Ағастар Еләк

Сәскә Бәшмәк

(Әлфиә йырлай-йырлай урманға килә.)

Әлфиә (йырлай):

Йәй көндәрен урманға
Барабыҙ һәр көн.
Унда рәхәт, күләгә,
Шатлана һәр кем.
Беҙ уйнайбыҙ ҡысҡырып:
«А – у, а – у!»
Урман һуҙа ҡайтарып:
«А – у, а- у!»
Һауаһы саф, хуш еҫле
Тирә-яҡ йәмле!
Бөрлөгәне, еләге
Бигерәк тәмле.
Төрлө ҡоштар һайраша,
Ҡысҡыра кәкүк,
Беҙҙең йырҙарҙы улар ҙа
Ҡабатлай кәкүк.

(Урманға етер-етмәҫ үк, Әлфиәгә ҡыҙыл ҡанатлы бик матур күбәләк тап була. Әлфиә уны баҫтыра башлай, бер аҙ шулай ҡыуышып йөрөгәс, ул күбәләккә өндәшә).

Әлфиә: *(йырлай)* Әйт әле, күбәләк,
Һөйләшәйек бергәләп
Был тиклем күп осоп,
Арымайһың һин нисек?

Күбәләк: *(йырлай)* Мин торам ҡырҙараҙа,
Болонда, ураманда,
Уйнайым, осамын
Яҡты көн булғанда.
Иркәләй һәм һөйә
Ҡояштың яҡтыһы,
Аш булалыр миңә
Сәскәләр хуш еҫе.

(Күбәләк шулай йырлай-йырлай сәсәкәгә килеп ҡуна, ә Әлфиә уны тоторға үрелә.)

Күбәләк: *(асыуланып)* Мин бөгөн иртән генә йәшәй башланым. Һин миңә теймә, мине рәнйетмә! Беҙ – тәбиғәт матурлығы! Уның йәмен юҡ итһәң, ер йөҙө йәмһеҙләнер! Ә хәҙер мин иркенләп бер уйнап ҡалайым. Үҙең уйнағанда шулай ҡыуып йонсотһалар, рәхәт булырмы һуң?

(Әлфиә ҡурҡып китә.)

Әлфиә: *(аптырап)* Урманда һәйбәт нәмә бер күбәләк кенәме ни? Ана ниндәй матур сәскәләр үҫә. Теләһәң – ҡыҙылын, теләһәң – ағын, теләһәң – зәңгәрен өҙ. *(Әлфиә сәскә йыйырға уйлай, өҙҙөм генә тигәндә сәскә илап ебәрә.)*

Сәскә: *(илап)* Ай-ай! Аяғымды ауырттыраһың. Ниңә ул тиклем ҡаты тотонаһың? Ай! Ебәр! *(Әлфиә сәскәне ебәргәс тә, теге, илауынан туҡтай алмай, һөйләнә бирә.)* Мин бәләкәс бит әле. Яңы ғына бөрөнән сыҡтым. Ә һин һуғышаһың. Үҙеңдең аяғыңды шулай ҡыҫып тотһалар, рәхәт булыр инеме?

Сәскә: *(йырлай)* Мин – сәскә, үҙемсә
Һағышым, ғәмем бар
Тоямын барын да
Минең дә йәнем бар.
Эй, кескәй дуҫтарым,
Ҡәҙеремде белһәгеҙ,
Ергә йәм биреп,
Үҫһен был, тиһәгеҙ,
Сәскәне өҙмәгеҙ!
Өҙмәгеҙ! Йәлләгеҙ:
Аҙ ғына булһа ла
Минең дә йәшәгем
Килә бит донъяла!

(Йырлап бөткәс, ҡыҙға ҡарап) Вәт! Әгәр ҙә һеҙ беҙҙе гел шулай өҙгөләһәгеҙ, тирә-яҡ йәмһеҙләнер, матурлыҡ ҡалмаҫ ерҙә.

Әлфиә: *(аптырап)* Бына һиңә яңылыҡ! Күбәләккә лә теймә, сәскәне лә өҙмә!

(Шулай аптырап тора ла, сәскәне ҡалдырып, урман эсенә инеп китә. Бәшмәктәр үҫкән аҡланға килеп сыға.)

Әлфиә: *(ҡыуанып)* Уй, ҡайһылай күп бәшмәктәр! Булмаһа, кәрзинемде тултырғансы бәшмәк йыяйым. Улар бит йомшаҡ, тәндәре лә ауыртмайҙыр!

(Бәшмәккә үрелә, ләкин Әлфиә тейер-теймәҫ үк, бәшмәк сырылдарға тотона).

Бәшмәк: *(асыуланып)* Эшләпәмде… эшләпәмде боҙаһың, тим! Үҙеңдең эшләпәңде боҙһалар, рәхәт булырмы һуң? *(Әлфиәнең сәсенән эләктереп ала.)* Мин дә һинең кеүек ҡыҙ! Мин – бәшмәк ҡыҙы. Мин һинең эшләпәңде боҙмайым бит, һин дә кешенекенә теймә! (йырлай)

Эшләпәмде ҡырын һалып
Эре генә ултырам!
Мин – байлығы тәбиғәттең

Файҙа ғына килтерәм.
Тик боҙмағыҙ урынымды,
Өҙмәгеҙ һеҙ тамырҙан!
Беҙ бит – урман хазинаһы
Матур һәм һаҡ һин ҡылан!

(Әлфиә аптырап, ҡайтырға борола. Ул кескәй генә аҡланға килеп сыға, унда тәгәрәп-тәгәрәп еләктәр бешкән. Ҡыҙ уларҙы өҙөргә баҙнап итмәй.)

Еләк: Нимәгә иҫең китте? Ниңә беҙҙе өҙмәйһең? *(Әлфиә һаман да өндәшмәй, еләктең телгә килгәненә аптырап ҡала).* Беҙ инде тама бешеп өлгөрҙөк. Ғүмеребеҙ барыбер күп ҡалманы. Һин беҙҙе, һаҡ ҡына ҡыланып, япраҡтарыбыҙҙы өҙмәй генә, күп итеп йыйып кит. Өйҙә әсәйең беҙҙән ҡаҡ ҡойор, ҡайнатма ҡайнатыр, һалҡын ҡыш килгәс, һеҙ, күмәкләп табынға йыйылып, тәмлекәйҙәр менән сәй эсерһегеҙ. Шул саҡ урман аҡланын, беҙҙең менән бергә йәшәгән сәскәләрҙе, күбәләктәрҙе, бәлки, хәтергә төшөрөрһөгөҙ. Беҙ йәшәгән йәйҙе һағынып ҡуйырһығыҙ. Тартынма, өҙ беҙҙе! Беҙ шундай тәмлебеҙ, хуш еҫлебеҙ. Беҙ – ер менән ҡояш балалары!

(Әлфиә башта еләктәрҙе шикләнеберәк өҙә. Ҡарышыусы булмағас, ул тиҙ үк ҡыйыуланып китә. Күбәләк, Сәскә, Бәшмәк һәм Еләктәр ҙә уйнай-шаяра Әлфиәгә бер кәрзин еләк йыйышалар. Шунан ҡыҙ йырлай-йырлай өйөнә ҡайтып китә, ә дуҫтары ҡул болғай-болғай уны оҙатып ҡала).

(Шаршау ябыла)

Байрам ашы ҡара-ҡаршы

(М. Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесынан өҙөк буйынса)

Ҡатнашалар:

Кендек Хәмитйән

Шәһиҙулла Вәлетдин

Ибрай

Кендек: ***(Кендек үҙ алдына һөйләнә)*** Бөгөн байрам. Ҡорбан байрамы. *(Өҫтөнә күрһәтеп)* Был байрамға мине ана ҡалай баштан аяҡ кейендерҙеләр. Ҡыҙыҡ инде, өҫтөнә яңы, матур кейем кейгәс, нисектер, күңелең дә бөтәйеп, йәмләнеп киткәндәй була. Ана шулай тыштан-эстән яңырып, ялтырап мин урамға сығасаҡмын. Байрам тигәнең бары урамда ғына була. Өйгә һыйып бөткән байрам – байрам түгел ул.

Баш осомда ғына ҡарлуғастар ҡыйылып үтә. Йәшел үлән өҫтөндә турғайҙар һикерешә. Әйтерһең, ҡоштар ҙа кешеләр байрамын дауам итә.

Шәһиҙулла: Эй, Кендек! Әй, Рукавказ!

Кендек: *(Тауыш килгән яҡҡа ҡарап һөйләнеүен дауам итә)* Был Шәһизулла тауышы, Шәһибәктәр тыҡрығы яғынан килә. Мине саҡыра. Үҙе күренмәй. Шәһизулла беҙҙең башлығыбыҙ. Ул исемде өндәштеме, һин шунда уҡ уның эргәһенә килеп баҫырға тейешһең. Ҡабатларға яратмай. *(Башлыҡ тауышы килгән яҡҡа йүгерә.)*

Вәлетдин: Рукавказ!

Кендек: (*тауышты ишетеп туҡтай һәм үҙ алдына һөйләнеүен дауам итә*) Әмерҙе был юлы тыңҡыш Вәлетдин ҡабатланы. «Рукавказ» – минең икенсе ҡушаматым – һуғышсан ҡушаматым. Анау бер саҡ бөтә малайҙар, икегә бүленеп, һуғыш уйнар алдынан һәр беребеҙгә яңы исем – ил исеме тағылды тағылды.

Байрам иртәһендә башлыҡ, моғайын, һуғышсан оран һалғандыр. Тиктомалға Рукавказ тип саҡырмаҫ. *(Малайҙар янына йүгереүен дауам итә. Шул ваҡыт малайҙарҙы күреп туҡтап ҡала һәм уларҙы күҙәтә.)* Малайҙар тыҡрыҡ тулы. Тик Әсғәт кенә күренмәй. Ҡайһылары көнбағыш яра, ҡайһылары сертләтеп кипкән муйыл сәйнәй.

Ибрай: *(Кендекте күреп ҡала һәм уны бер ҡат урап сыға).* Тә-тә-тә-тә! Мәкәрйәнән килгән купецмы ни? Көмөш сылбырлы сәғәте генә юҡ. *(Кендектең байтаҡ һалынып торған ыштан бауын тартып)* Хәйер, сылбыры бында аҫылынып тора икән!

Шәһизулла: *(Ҡулы менән ишара яһап, Ибрайҙы ҡыуып ебәрә лә эйәген сөйөп кенә)* Нимә шулай ике ыштан балағың бүлтәйеп сыҡҡан?

Кендек: *(башлыҡҡа ярарға тырышып)* Бер кеҫәлә көнбағыш, Шәһизулла ағай, икенсеһендә кипкән муйыл. Көнбағыш шундай эре. Лекарь урыҫы Тимофей килтергәйне…

Шәһизулла: *(бойороп)* Һин, ыштанһыҙ, барыбер кешегә өләшеп бөтөрөрһөң. Көнбағышын да, муйылын да күсер минең кеҫәләргә!

Кендек: *(Ул кеҫәһендәге көнбағышты ла, муйылды ла шатлана-шатлана Башлыҡтың кеҫәһенә күсерә. Шунан кеҫәләрен күрһәтеп)* Бөртөгө ҡалмаһа ла үкенмәйем. Ашамаған ашмы.

Шәһизулла: *(Кендекте маҡтап)* Шәп егет һин, һыҡмыр түгелһең! (*Кеҫәһенән көнбағыш һәм муйылды алып)* Мә, бер ус көнбағышың, бер ус муйылың үҙеңә булһын.

Кендек: *(ҡыуанып)* Ысынлап та, була бит киң күңелле, ғәҙел кешеләр! Шуларҙың береһе беҙҙең башлыҡ! *(Шул ваҡыт Мәсет манараһынан мәзиндең аҙан тауышы яңғырай. Кендек был тауышты ишетеп хыялға бата.)* Йәнемә яңынан байрам рухы ҡайтты. Ергә бөгөн шундай изге көн килде. Бөтә ыҙмалар ҙа бейек, бөтә әҙәмдә ҙә тигеҙ. Ҡайҙалыр бик яҡында ғына, ахыры, беҙҙең Йәшелтау артында, һарыҡтар менән бүреләр бер көтөүҙә йөрөй. Резинка калушлы, бәрхәт түбәтәйле, ҡыҙыл ыштанлы, зәңгәр сатин күлдәкле малай шул көтөүҙе

көтөп йөрөй. Әле бүреләр, әле һарыктар килеп унының ҡулын ялап китә…

Ибрай: *(Кендектең бөйөрөнә төртөп, Хәмитйәнгә ҡулы менән күрһәтеп ыҫылдай)* Ишетәһеңме, ана Хәмитйән нимә ти һиңә?

Кендек: *(хыялланып торған еренән тертләп)* Ишетмәйем.

Ибрай: Кендек, Кендек, Кендек…

Хәмитйән: *(башын сайҡап)* Юҡ, әйтмәнем, биллаһи, әйтмәнем.

Ибрай: *(Хәмитйәнгә килеп бышылдай)* Күрәһеңме, ана тегенең ирене ҡыймылдай. Нимә ти ул? Арҡыры баш, Арҡыры баш, Арҡыры баш, ти…

Кендек: *(иларҙай булып)* Яҡты ҡояш, икмәк өҫтө! Әйтмәнем, – тим, – Хәмитйән бит етем, етем кешене Ҡорбан байрамында рәнйетергә ярамай.

Ибрай: Һы, ул бер ҙә ҡорбан тип тормай… Ана күҙен сылт-сылт йома: Кендек, Кендек, Кендек тиеүе шул унының. Эсенән ҡабатлай…

Кендек: *(үҙ алдына)* Хәмитйәндең күҙе, ысынлап та, сылт-сылт килеп тора. Тиктәҫкә түгел был. Эсенән генә миңә исем атауы бик ихтимал.

(Был ваҡытта малайҙар Кендек менән Ибрайҙы түңәрәк эсенә ала)

Ибрай: **(***Хәмитйән менән Кендекте һөсләтеп)* Давай, давай! Һеҙҙән ҡеүәт, минән көс!

(Малайҙарҙың йоҙроҡтар төйнәлә, тештәре ҡыҫыла)

Кендек: *(беренсе булып Хәмитйәнгә килтереп һуға)* Мә, ал кәрәгеңде!

Ибрай: *(бер аҙ артҡа сигенеп, Кендектең эсенә тибә)* Байрам ашы – ҡара ҡаршы!

Кендек: *(бөгөлөп төшөп)* Уй, эсем, эсем…. *(Шунан һушын йыйып, Хәмитйәндең танауына килтереп һуға)* Ҡунаҡ ашы-ҡара ҡаршы!

(Малайҙар оҙаҡ ҡына һуғышалар, Кендек иҫтән ауа.)

Малайҙарҙың береһе: *(ҡото осоп)* Оло инәй… *(Малайҙарҙың бөтәһе лә ҡасып китә. Оло инәй иҫһеҙ ятҡан Кендекте күтәреп алып ҡайта.)*

(Шаршау ябыла)

Хәлисова А.А.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ишембай ҡалаһының 16-сы урта белем биреү мәктәбе

«ҮҘ УЙЫН» ФОРМАТЫНДА КЛАСТАН ТЫШ САРА

Бөгөнгө көндә мәктәптәрҙә белем биреү системаһы принципиаль үҙгәрештәр кисерә. Федераль дәүләт белем биреү стандарттары индереүҙән бирле уҡыусыларҙың үҙ аллы белем алыуға ынтылышын, ижади һәләтен, потенциалын асыу һәм үҫтереү бурысы иғтибар үҙәгендә. Беҙ тәрбиәләгән бала үҙ халҡы, милләте, тарихы өсөн ғорурлана белһә, халыҡтың йыр-моңон күңеленә һеңдереп, шул нигеҙҙә тәрбиәләнһә, тыуған ерен ғәзиз әсәһе кеүек һөйөп, йөрәге халҡы менән бергә типһә, халыҡтың рухы, маҡсаты, уй-хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәһә, үҙенең бөтә булмышын халҡына бағышлаһа ғына йәмғиәткә файҙалы кеше була ала. Был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн башҡорт телен уҡытыуҙың эстәлеге һәм формаһы ла яңырырға һәм заман талаптарына яуап бирерлек итеп ойошторолорға тейеш.

Мәктәптә уҡыусыны рухи яҡтан үҫтереү, шәхес итеп формалаштырыуҙа тел, әҙәбиәт, мәҙәниәт, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү дәрестәре һиҙелерлек роль уйнай. Киләсәк кешеһен тәрбиәләү өсөн был предметтар уҡытыуҙың алдынғы алымдарын йылдан-йыл камиллаштырып, заман талабына ярашлы һығылмалы итеп яңырып һәр уҡытыусыға, һәр төбәккә лә еткерелә бара. Хәҙерге информацион киңлектәр, аралашыу өсөн саралар алдынғы тәжрибәне йәш уҡытыусыларға ла, традицион алымдарҙы яңыртыу өҫтөндә эшләгәндәр өсөн дә ҙур мөмкинлектәр аса. Предмет-ара бәйләнештәр, интеграциялы дәрестәр үҙен күптән аҡланы инде.Шул күҙлектән сығып башҡорт телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен һәм тарихын берләштереүсе кластан тыш сара тәкдим итәм үҙ коллегаларыма.

Класс өс төркөмгә бүленә. Сират буйынса һәр команда тема һәм хаҡына ҡарап һорау һайлай. Хаҡы ни тиклем юғары, шул тиклем һорауҙың ауырлығы билдәләнә. Дөрөҫ яуап һорау хаҡы тиклем балл бирә, яуап дөрөҫ булмаһа, команда «-» балл ала.Уйын аҙағында юғары мәрәй алған команда еңеүсе тип иғлан ителә.

Тел

1. Эргәһенә саҡырып хат яҙҙы? яуап булманы. Ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла? ***(Һыҙыҡ).***

© *А.А. Хәлисова, 2020*

2. Был уҡыусылар бик оҫҡорҙар, тырыштар һәм зирәктәр. Һөйләмдең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән? ***(Сифат).***

3. Ашты һеңгәс маҡта, юлдашты белгәс маҡта. Һөйләмдәге хәл төрөн билдәләгеҙ. ***(Ваҡыт хәле).***

4. Байрас бер һыҙҙырып уйнап ебәрҙеме – йәштәр түгел, хатта ҡарттар йыйылып китә ине клубҡа. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ. **(Эйәрсән шарт һөйләм)**

5. «Мулла бесәйе» фразеологизмы ниндәй кеше тураһында әйтелә? ***(Хәйләкәр, аҫтыртын).***

6. Ашыҡҡан **нимәгә** бешкән? ***(ашҡа)***

7. «Талдар таҡмаҡ әйтте, ә көнбағыш бейеп торҙа баҫҡан урында» Р. Ниғмәти ниндәй һүрәтләү сараһын ҡулланған? ***(Йәнләндереү).***

8. Ә һеҙ бөгөн автобус менән ҡайтаһығыҙмы? Һөйләмдә киҫәксәне табығыҙ. **(-мы).**

Әҙәбиәт

1. Һыҙҙырт, ҡурай үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙәрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын,
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.

Был юлдарҙың авторын билдәләгеҙ. **(Ш. Бабич).**

2. «Ер» поэмаһының авторы? **(Б. Бикбай).**

3. Ҡара ла ғына урман ҡая бите,
Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп, яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

Был юлдар ниндәй халыҡ йырының һүҙҙәре? **(«Тәфтиләү»).**

4. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» әҫәренең жанры? **(Повесть).**

5. Пугачевтың көрәштәше булған башҡорт старшинаһы тураһында Ғәли Ибраһимов яҙған романдың исеме? **(«Кинйә») Аукціон.**

6. Әҫәрҙең айырым өлөштәренең үҙ-ара бәйләнештә бер бөтөн итеп ойошторолоуы нимә тип атала? (**Композиция).**

7. Әхмәт, Гөлнур, Миңьян образдары, ниндәй әҫәрҙән? **(Ғәлимов Сәләм, «Шоңҡар» поэмаһы).**

8. Минең яҙғанды уҡығас,
«Әкиәт», - тимә ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора.

Был өҙөк ниндәй әҫәрҙән? **(«Үлмәҫбай»).**

Мәҙәниәт

1. Салауат Юлаев һәйкәленең скульпторы кем? **(Сосланбек Тавасиев)**

2. Милли театр сәнғәтендә ул-оҫталыҡ эталоны. Актер, режиссер, драматург. Я.А. Протазановтың «Салауат Юлаев» кинофильмында төп образды башҡара. **(Арыҫлан Мөбәрәков).**

3. Башҡорт ҡумыҙын өр-яңы бейеклектәргә күтәрә. 1991 йылда Яҡутстанда «Донъяның Беренсе виртуоз ҡумыҙсыһы» тигән дипломға һәм платин ҡумыҙға лайыҡ була. Кем хаҡында һүҙ бара? **(Роберт Заһретдинов).**

4. Башҡорт бейеү һәм йыр ансамбленә нигеҙ һалыусы. «Өс туған», «Ете ҡыҙ», «Төньяҡ амурҙары» бейеүҙәре авторы кем? **(Фәйзи Әҙһәм улы Ғәскәров).**

5. Был беренсе профессиональ театр 1919 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында асыла. 1922 йылда Өфөгә күсә. 1971 йылда Башҡортостандың халыҡ шағирының исеме бирелә. Һүҙ ниндәй театр хаҡында? **(Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры).**

6. Ҡурайсы, йырсы, өзләүсе. Рәсәй делегацияһы составында Италия, Франция, Польша, Швеция, Япония, Венгрия, Пакистан һ.б. илдәрҙә сығыш яһап, тамашасыларҙы хайран ҡалдыра. **(Ишмулла Ишкәле улы Дилмөхәмәтов).**

7. Был һәйкәл кемгә арнап ҡуйылған? **(композитор – Заһир Ғариф улы Исмәғилев)**

8. Күренекле «Өс ҡатын» картинаһын кем яҙған? **(Әхмәт Фәткулла улы Лотфуллин).**

Тарих

1. «Любизар» йырында ниндәй тарихи осор ваҡиғалары һүрәтләнә? **(1812-ғы Ватан һуғышы).**

2. Д. Юлтыйҙың «Тимеркәй фәлсәфәһе» әҫәрендә ниндәй йылдар тураһында һүҙ бара? **(1 донъя һуғышы).**

3. 1919-1922 йылдарҙа Башҡортостандың баш ҡалаһы? **(Стерлитамак).**

4. "Кинйә" романында ниндәй тарихи осор ваҡиғалары һүрәтләнә? **(1773-1775)**

5. Ә. Вәлидиҙең Башҡортостан автономияһын төҙөү буйынса үткәргән тәүге тарихи ҡоролтай ниндәй архитектура ҡомартҡыһы бинаһында уҙғарыла? **(Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа).**

6. Нисәнсе йылда Темәс ауылы Башкортостандың баш ҡалаһы булып китә **(1919).**

7. Пугачевтың көрәштәше булған башҡорт старшинаһы тураһында Ғәли Ибраһимов яҙған романдың исеме? **(«Кинйә»).**

8. Башҡорт бейеү һәм йыр ансамбленә нигеҙ һалыусы. «Өс туған», «Ете ҡыҙ», «Төньяҡ амурҙары» бейеүҙәре авторы кем? **(Фәйзи Әҙһәм улы Ғәскәров).**

Башҡортостан шәхестәре

100

200

300

400

500

600

700

800

Шагисултанов Ф.А.,
кандидат географических наук,
доцент кафедры Международных отношений, истории и востоковедения ФГБОУ ВО УГНТУ

ИЗ ИСТОРИИ ГЕОГРАФИЧЕСКИХ ИССЛЕДОВАНИЙ ЮЖНОГО УРАЛА В XVIII ВЕКЕ

В XVIII веке в связи с началом развития науки, техники и экономики Российской империи на всей ее территории начали проводиться обширные географические исследования, в особенности в его внутренних и окраинных областях. Это время характеризуется началом планомерных научных исследований, картографирования территории и промышленного освоения природных богатств Урала, в том числе и Южного Урала. В крае получает большое развитие горнорудная промышленность, строятся десятки горных заводов [10; 77].

© *Ф.А. Шагисултанов, 2020*

Неоценима роль в этом деле крупного ученого-географа, Обер-секретаря Сената и статского советника И.К. Кирилова. В 20-х гг. XVIII века он руководил работами по топографической съемке России, по итогам которой опубликовал первое систематическое экономико-географическое описание России – «Цветущее состояние Всероссийского государства» (1727) и составил первый выпуск «Атласа Всероссийской империи» (1734) [1; 336].

В 1734 году И.К. Кирилов выступил автором проекта по укреплению влияния и обороноспособности России на юго-восточных рубежах. В мае 1734 года он назначается начальником Оренбургской экспедиции. Экспедиция должна была всесторонне изучить обширный край, собрать сведения о природе, истории, населении, этнографии, хозяйстве, произвести картографические съемки, построить крепости и т.д. За годы своего пребывания в Башкирии Оренбургская экспедиция сумела выполнить значительную часть намеченных проектов. Были осуществлены большие строительные работы, построен город-крепость Оренбург (ныне город Орск), сооружено множество крепостей и укреплений. Наряду с топографическими и картографическими работами И.К. Кириловым на территории Южного Урала впервые была организована разведка и разработка полезных ископаемых [6; 27-30].

После смерти И.К.Кириллова в 1737 году Оренбургская экспедиция была переименована в Оренбургскую Комиссию. Руководство Оренбургской Комиссией было возложено на В.Н. Татищева – выдающегося ученого-географа, историка и государственного деятеля. Он придавал большое значение картографированию края, изучению его горных богатств, прибегая при этом к помощи местного населения [8; 62].

К 1740 году на основе собранных экспедицией материалов была составлена первая карта полезных ископаемых Южного Урала. Важную роль в изучении территории Южного Урала и прилегающих областей сыграло учреждение в 1741 году при Оренбургской Комиссии Географического департамента. В 1744 году была образована Оренбургская губерния, в связи с чем, деятельность Оренбургской Комиссии прекращается [8; 95].

В 1752 году Оренбургская губернская канцелярия поручает геодезистам во главе с И.Красильниковым составление генеральной карты Оренбургской губернии. В 1755 году работа над составлением карт (фактически Атласом Оренбургской губернии) была завершена. Атлас Оренбургской губернии состоял из одной генеральной и 10

частных карт Оренбургской губернии, а также одной карты Средней Азии [2; 271].

П.И. Рычковым в дополнение к «Ландкартам» И. Красильникова были написаны пояснения – Топография Оренбургской губернии» [3; 21].

В топографию тогда включались не только сведения о рельефе, но и характеристика «других элементов природы – рек, озер, климата, животного мира, а также данные о населении, его занятиях, торговле, городах» [3; 22].

Далее П.И. Рычков на основании материалов Оренбургской экспедиции, собственных наблюдений, обстоятельного изучения имеющейся литературы к 1755 году завершил написание первой части, а в 1760 году – второй части «Топографии Оренбургской губернии», которая была опубликована в 1762 году в журнале «Сочинения и переводы, к пользе и увеселению служащих». В 1759 году в этом же журнале была опубликована «История Оренбургская по учреждению Оренбургской губернии», где П.И. Рычковым детально рассказывается история организации Оренбургской экспедиции до образования в 1744 году Оренбургской губернии [5; 9-10].

Вместе с тем «Топография Оренбургской губернии» одновременно публикуется отдельной книгой под названием «Топография Оренбургская, то есть обстоятельное описание Оренбургской губернии, сочиненное коллежским советником и Императорской Академии наук корреспондентом Петром Рычковым».

Книга П.И. Рычкова «Топография Оренбургской губернии» состоит из двух частей. Первая часть представляет собой общий обзор губернии, во второй – описываются отдельные «провинции» и «дистанции» губернии. Иными словами дано комплексное описание всего Оренбургского края, где приводятся сведения о климате, поверхностных водах, растительности и животном мире, хозяйстве и населении губернии» [6; 32-33].

В первой главе автор, говоря о климатических особенностях и поверхностных водах края, отмечает хорошую увлажненность Предуралья и бедность осадков Зауралья. Здесь же описаны реки и озера Оренбургской губернии. Озера подразделены П.И. Рычковым на две части: озера киргизские и знатные озера Башкирии. Из рек отмечены главные («знатнейшие» – по П.И. Рычкову): Волга, Кама, Яик, Тобол, Уй, Уфа, Белая, Сакмара, Самара и др. В этой же главе описаны Уральские и другие горы, пещеры, полезные ископаемые края. В разделе «О скотах и зверях» П.И. Рычков в алфавитном порядке перечисляет представителей животного мира. Он описывает

насекомых и птиц. В специальном разделе приводятся сведения о рыбах, обитающих в реках и озерах [7; 54-55].

Вместе с тем особый интерес для географов представляет пятая глава первой части «Сокращенное описание местоположения всей Оренбургской губернии, о поверхностях и внутренних богатствах земли». Ф.Н. Мильков – один из биографов П.И. Рычкова замечает, что «…пятая глава представляет образец блестяще составленного очерка природы Оренбургской губернии. В ней широко использованы личные наблюдения автора и со всей полнотой раскрывается присущий П.И. Рычкову талант географа-страноведа» [4; 41]. Недаром его часто называли «Колумбом Оренбургского края». По этому поводу академик Г.Ф. Миллер писал: «Обстоятельная история описания России появиться лишь тогда, когда во всякой губернии будет человек искусством и прилежанием подобный П.И. Рычкову» [9; 63].

Во второй части «Топографии Оренбургской губернии» даны характеристики городов, крепостей и других населенных пунктов. Здесь отдельная глава посвящена Уфе и Уфимской провинции, где он с восхищением отмечает, что «…во всей Российской империи едва сыщется ль другая, чем Уфимская провинция… повсюду ж леса, в коих множество бортевых пчел, реки судовыя и рыбныя, озер рыбных и пажитных мест везде довольно…» [7; 410].

Важно при этом подчеркнуть, что фундаментальный труд П.И. Рычкова «Топография Оренбургская, то есть обстоятельное описание Оренбургской губернии, сочиненное коллежским советником и Императорской Академии наук корреспондентом Петром Рычковым» не потерял интереса до наших дней и представляет собой классический образец комплексного страноведческого сочинения, написанный ярким и живым языком [4; 9].

Литература:

1. Башкортостан: Краткая энциклопедия. – Уфа, 1996.
2. Греков В.И. Очерки из истории русских географических исследований 1725-1765 гг. – М., 1960.
3. Мильков Ф.Н. П.И. Рычков. Жизнь и географические труды. – М., 1953.
4. Мильков Ф.Н., Гвоздецкий Н.А. Физическая география СССР. – М., 1986.
5. Оренбургские степи в трудах П.И. Рычкова, Э.А. Эверсмана, С.С. Неуструева / Под ред. Ф.Н. Милькова. – М.: Географгиз, 1949.
6. Псянчин А.В. Башкортостан на старых картах: история географического изучения и картографирования. – Уфа: Гилем, 2001.

7. Рычков П.И. «Топография Оренбургская или полное географическое описание Оренбургской губернии» Ч.2. – СПб., 1762.

8. Соловьев А.И., Абзалов Р.М. Особенности картографирования Южного Урала в XIX веке и его связь с географическими исследованиями территории // Материалы VIII Всеуральск. совещ. по вопр. географии, охраны природы и природопользования: Комплексная физическая география и краеведение. – Уфа, 1972.

9. Хисматов М.Ф., Сухов В.П. География Башкортостана. – Уфа, 2000.

10. Шагисултанов Ф.А. Начальный этап географического изучения и горнозаводского освоения территории Южного Урала (на примере Белорецкого района Республики Башкортостан) // Наследие. Heritage. Ядкяр. Вестник гуманитарных наук. – 2006. – № 4.

Шәрипова Р.Ш.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Баҡалы ауылының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ –БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК ШАҒИРЫ, АЗАТЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ
(кластан тыш сара)

Алып барыусы: Ғинуар айы. Алһыу таң беленә.
Күктә аяҙ. Баҡса тын ғына
Ҡапыл көслө тауыш. Өй йәмләнә.
Бер ир бала килә донъяға.
Бала тыуа йөҙлә шөйлөк менән
Һирәк осраҡ. Ғәжәп ғәләмәт.
Кендеккәйгә шатлыҡ: күлдәк менән
Йортҡа юрау дәүләт – ғәләмәт.
Һиртмәләнгән бәллеү-бишеге.
Тәғбир әйтеп, уға Әхмәт бабай
Шәйехзада ҡуша исемен.
Бабай уны, башҡортом, тип һөйә,
Намыҫ, бәхет теләй, изгелек.
Илгә, йортҡа, ата-әсәһенә
Күрһәтһен, ти, яҡты изгелек.

Сәхнәгә әбей менән бабай сыға. Әбей ҡулында бәпәй. (Бәпәй илаған тауыш)

© *Р.Ш. Шәрипова, 2020*

Әсәһе: Сеү, сеү, балам, тыныслан инде.

Атаһы: Аллаға шөкөр, улыбыҙ исемле булды, ҡайғырма , әсәһе, хәҙер инде улыбыҙ тынысланып та китер.

Әсәһе: Оҙон ғүмерле, бәхетле бул, балам.

Атаһы: Һүҙең өҫтөн, йөҙөң күркәм, ҡулдарың эшсән булһын.

Әсәһе: Йоҡла, улым, тыныслан.

Сығып китәләр.

Алып барыусы: Тарихта әллә ниндәй тап килеүҙәр бар. Бына шуларҙың береһе. Аҡмулланың үлгән йылы – Бабич тыуған йыл ине. «Башҡорттарым уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» – тип оран һалғанда Аҡмулланың ярһыуҙары һәм өмөттәре әйтерһең дә васыят – аманат булып Бабич яҙмышына килеп тоташа.

Үҫкән Шәйехзада, атаһы, әсәһе, иптәш егете сәхнәгә сыға.

Шәйехзада: Атай, әсәй минең һеҙгә ҙур үтенесем бар.

Атаһы: Әйтеп ҡара әле, улым.

Шәйехзада: Минең иң яҡын дуҫым, Зәки менән, донъя күреп, ил гиҙеп ҡайтҡыбыҙ килә.

Әсәһе: Юҡты һөйләмәле, улым.

Атаһы: Юҡ, юҡ, улым, был турала уйлап та ҡарама, мин һис кенә лә риза түгелмен.

Зәки: Мөхәмәтзакир ағай, Сажиҙә инәй, ҡайғырмағыҙ, беҙ бит бергә китәбеҙ, минең атайым менән әсәйем ризалыҡ бирҙеләр инде.

Атаһы: Ярай, теләгегеҙ булғас, барығыҙ , донъя күреп ҡайтығыҙ, ил эсендә турғай үлмәй ул.

Шәйехзада: Рәхмәт атай, әсәй, хәйер-фатихағыҙға.

Үҙ маяғымды
Үҙемсә ҡаҙап,
Үҙ һабағымды
Үҙемсә аңлап,
Юлдар яһармын
Шулай йәшәрмен.

Атаһы, әсәһе: Иҫән-һау әйләнеп ҡайтығыҙ, күрешергә яҙһын!

Сығып китәләр.

Алып барыусы: Шәйехзада Бабич Ҡаҙағстандан 1911 йылдың көҙөндә ҡайта.Унан « Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә, 1916 йылдың яҙында тамамлай.

Шәйехзада сыға.

Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, әй китап, баҡһам һиңә,
Ысын, асыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә.
Әй китап, мин аңғраны төҙ юлға күндерһәнә,
Мине баҫҡан йәһел уттан һыу һибеп һүндерһәнә.

Әй китабым, әй китап, миңә кыл һин хитап,
Һин генә башымдағы сүп-сарҙы алырһың утап.

Сығып китә, сәхнәгә өс ҡыҙ сыға. Ҡул эштәре эшләйҙәр, йырлайҙар.

Йондоҙҙар күктә яналар,
Кешеләр ерҙә балҡый.
Илем, ерем, халҡым, тиеп,
Янырҙар ғүмер баҡый.

1-се ҡыҙ: Әй, апайҙарым, Шәйехзада ағайымды әйтәм, беҙҙе, туғандарын ҡалдырып, күптән сығып киткән ине, һаман ҡайтканы юҡ.

2-се ҡыҙ: Эйе шул, бик һағындырҙы үҙе.

3-сө ҡыҙ: Тиҙерәк ҡайтһын ине инде.

Ҡыҙҙар йүгереп керә.

Ҡыҙҙар: Һөйөнсө, һөйөнсө, Шәйехзада ағайыбыҙ ҡайтып килә.

Шәйехзада инә, ҡулында шәлдәр.

Шәйехзада: Әй, минең матурҙарым, шундай һағындым һеҙҙе.

Туғандарым һеҙгә алып ҡайттым,
Аҡ яулыҡтар ғына бүләккә.
Аҡ яулыҡтар кеүек аҡ бәхеттәр,
Аҡ юл һеҙгә минең теләктә.

3-сө ҡыҙ: Рәхмәт, ағайым, бик матурҙар.

2-се ҡыҙ: Әйҙәгеҙ әле, ҡыҙҙар, был ҙур шатлыҡтан ағайыбыҙға бейеп тә, йырлап та күрһәтәйек.

Шәл бәйләнем,шәл бәйләнем, (2)
Шәлем түңәрәк түгел лә,
Шәлем түңәрәк түгел.
Осоп барып ҡайтыр инем, (2)
Йәнем күбәләк түгел. (2)

Алып барыусы: Шәйехзада Бабич 1917 йылдың авгусында Ырмбурға килеп «Ҡармаҡ» журналының яуаплы сәркәтибе булып эшкә урынлаша һәм Урал аръяғында Зәки Вәлиди етәкселегендә барған башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡушылып китә.

Зәки инә.

Зәки: Ай, бигерәк тә матур бейейҙәр, Шәйехзада беҙгә китергә ваҡыт, халыҡ көтә.

Шәйехзада:

Иҫә елдәр, өйөрөлә болоттар,
Әллә дауыл, әллә яуынға.
Белмәй бер кем, күпме сайкалырҙар
Беҙҙең баштар, юлда, дауылда.
Һау булығыҙ, туғандарым. Иҫән булһаҡ бер күрешербеҙ әле.

Ҡыҙҙар: Һау булығыҙ, иҫән йөрөгөҙ.

Алып барыусы: Революция килде. Бабич был дулҡындарҙы ла әҙерлекһеҙ ҡаршы алды. Революцияның ҡиблаһы ҡайһы яҡта икәнен күңеле менән дөрөҫ һиҙенһә лә, тирә-яғынан үтеп киткән мең төрлө ваҡ юлдарҙың бөйөк ҡәғбәгә алып барасағын тиҙ генә аңлап, алдан күреп етә алманы.

Атаһы менән әсәһе инәләр, ҡулдарында хат.

Әсәһе: Ҡыҙҙарым, һөйөнсө, һөйөнсө.

Атаһы: Иҫән улым, иҫән, хаты килде.

Әсәһе: Шиғырҙар менән яҙған бит әле балам.

Ҡыҙҙар: Тиҙерәк уҡы әле, инәй.

Әсәһе хатты уҡый.

Хатты яҙам йыраҡтан,
Алтын таулы Баймаҡтан,
Ҡағыҙҙары аҡ майҙан,
Ҡараһы һөт-ҡаймаҡтан.
Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын,
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

Атаһы менән әсәһе барып ултыралар.

Алып барыусы: Шәйехзада «Көтәм» исемле шиғырында үҙ башҡорт халҡының шул саҡтағы ауыр яҙмышын күҙ алдына баҫтыра һәм шул ук ваҡытта милләттең киләсәгенә оло өмөт бағлай.

Кыҙҙар: 1) Халҡым тейеп һин ҡабындың
Заманалар хәтәр саҡта
Ал таңдың былбылы булдың
Шәйехзада, Шәйехзада.
2) Йөҙәр йылға тик бер тыуа тиҙәр
Таң ҡалырлыҡ йыр – моң маһиры,
Һинең маһирлыҡтың, оҫталыҡтың,
Урал илкәйендә тамыры...
Ана шуға, Бабич, һин үлемһеҙ,
Халҡымдың һин даһи шағиры.
3) Килдек һинең эҙҙәреңде юллап
Эҙҙәреңә баҫып үтергә
Үтергә лә, оло рухың менән
Ғүмереңә башты эйергә.
Ғүмереңә башты эйергә, тим...
Ә һин егерме дүрт йәшеңдә
Ирек өсөн,

Азат йырың өсөн
Атылғанһың ерҙә йәшендәй.

Алып барыусы: Башҡа халыҡтарҙыҡы кеүек үк, башҡорт халҡының да төп терәге ғәзиз ере. Халыҡ үҙ ерендә генә ирекле. Шәйехзада Бабичтың 1917 йылда яҙылған «Тупраҡ» исемле шиғырында да башҡорт аҫабаларының ер мәсьәләһенә етди ҡарау кәрәклеген белдерә, ерҙе ҡулдан ысҡындырмауҙы, ерҙең башҡорттоң байлығы, киләсәге икәненә баҫым яһала.

1. Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡка балабыҙ.
Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
Күкрәктәге санабыҙ.
Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,
Беҙ тупраҡка ятабыҙ.
Тупраҡ ҡәҙерен аңлам ау
Беҙҙең өлкән хатабыҙ.

Алып барыусы: Бабичтың «Башҡортостан» исемле шиғыры милли хәрәкәттең үҙенә күрә бер гимнына әүерелә. Уны башҡорт һалдаттары көйгә һалып, йырлап йөрөгән.

1.Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ...
Башҡортостан – гөлбостан,
Сөмбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!..

Алып барыусы: «Күҙеңде ас» – был шиғырҙың исеме үк уяулыҡҡа саҡырып тора:

3. Күҙең де ас, егет, бул ҡаһарман,
Зәһәр сәсеп ажғыр, ҡәһәрлән.
Күр, илеңде ялмап һәр яғынан,
Дөрләп янып килә йәһәннәм...

Алып барыусы: «Теге донъя рәхәттәре»н көтөп ятыу хилаф, ә бөгөнгө фани донъяла һәйбәт йәшәргә тырышырға кәрәк», ти Шәйехзада Бабич һәм көрәшеп үткәрергә өндәй ҡыҫка ғүмерҙе:

4. Төкөр донъяһына, бул түҙемле,
Ағыулама юҡҡа тамырыңды.
Ысын ирекле алғы көн өсөн
Көрәшеп үткәр ҡыҫка ғүмереңде!

Алып барыусы: Республикала Шәйехзада Бабич исемен мәңгеләштереү уңайынан байтаҡ эштәр башҡарылды: музейҙар асылды, мәктәптргә, гимназияларға, китапханаға уның исеме бирелде, премияһы булдырылды, Башҡортостандың бик күп төбәктәрендә бюстар, таҡтаташтар ҡуйылды, урамдар Шәйехзада Бабич исемен йөрөтә.

Быйыл**,** ике мең ун етенсе йылда, Булат Йосопов режиссерлығында Шәйехзада Бабичтың тормош һәм ижад юлына арналған, быуаттың бер мең ун етенсе, бер мең ун туғыҙынсы йылдарҙа илдә барған милли хәрәкәттәрҙе күҙ алдына баҫтырған «Бабич» тигән фильм төшөрөлдө

Алып барыусы:

Шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич
Тыуып-үҫкән Әсән ауылында
Әсән ауылының кешеләре
Һағынып һөйләй уның хаҡында
Иҙелгәнде яҡлап йырлаған ул,
Үткен ҡәләм булған ҡулында,
Халҡыбыҙға күп мираҫ ҡалдырған
Ҡыҫҡа ғына ижад юлында.

СОДЕРЖАНИЕ

Приветственное слово заведующего кафедрой башкирского и других родных языков и литератур ИРО РБ Рахимовой Э.Ф. 3

Приветственное слово начальника МКУ «Отдел образования администрации городского округа город Стерлитамак РБ» Ишбаева З.Я. ……………………………………………………..……..4

Приветственное слово директора МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева» г. Стерлитамак Шагисултановой А.Б. ………..….5

Приветственное слово декана факультета башкирской и тюркской филологии СФ БашГУ Илишевой Р.Х. ……………………………….....7

I БҮЛЕК. УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ҺӘМ СТУДЕНТТАРҘЫҢ ҒИЛМИ-ТИКШЕРЕНЕҮ ЭШТӘРЕ………………………………………………….......9

Арҫланова И.И., Үтәев А.Ф.
РӘШИТ НАЗАРОВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ДУҪ ОБРАЗЫ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ...9

Арҫланова Р.Ф., Сәләхова З.И.
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ АЛМАШТАРҘЫҢ КҮПЛЕК ФОРМАЛАРЫ..11

Арыҫланғәлиев И.Р., Зәйҙуллина М.И.
БАШҠОРТ ТЕЛЕН ҺАҠЛАУ ҺӘМ КИЛӘСӘК БЫУЫНҒА ТАПШЫРЫУ..14

Арыҫланова Н.Р., Арыҫланова М.С.
ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВ ӘКИӘТТӘРЕНЕҢ ТӘРБИӘҮИ ҺӘМ ТЕЛ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ…………………………………………………16

Байбулов И.И., Вәлиева Г.Д.
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ РЕКЛАМА ТЕКСТАРЫНЫҢ СИНТАКСИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ………………………………………………18

Байтурина Э., Абдрахманова А.М.
ШАЙХЗАДА БАБИЧ – ПЕВЕЦ БАШКИРСКОГО НАРОДА………...21

Боҫҡанова Г.И., Солтанғолова Р.Р.
МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒЫРҘАРЫНДА ТӘБИҒӘТКӘ ҺӨЙӨҮ ТӘРБИӘЛӘҮ……………………………………………………..24

Бәширова И., Рәжәпова Ә. ……………………………………………26

Вәлиева А.О., Әхмәтова А.Т.
БАШКОРТ ТЕЛ ҒИЛЕМЕНЕҢ ҮҪЕШЕНДӘ ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВТЫҢ РОЛЕ...28

Гафарова А., Тимиргалина Ф.М.
СЕМЕЙНАЯ ШКАТУЛКА ВОЕННЫХ РЕЛИКВИЙ (вклад моей семьи в Победу над фашисткой Германией)………………………….......30

Ғөбәйҙуллина А.Р., Арыҫланова М.С.
ҒАФУРИ РАЙОНЫНЫҢ «ТАБЫН» ГӘЗИТЕНӘ КҮҘӘТЕҮ………...33

Ғөбәйҙуллина Ә., Ғатина С.С.
РИНАТ КАМАЛДЫҢ «ТАНЯ-ТАҢҺЫЛЫУ» СЕНТИМЕНТАЛЬ РОМАНЫНДА БӨГӨНГӨ КӨН ПРОБЛЕМАЛАРЫНЫҢ САҒЫЛЫШЫ…………………………………………………….35

Ғүмәрова Э., Тимербулатова Р.М.
«ТИРМӘ» ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮ ҮҘӘГЕ ПРОЕКТЫ.........................37

Ежова Д.В., Коротаева Л.В.
РОЛЬ МАЖИТА ГАФУРИ В ФОРМИРОВАНИИ ЛИТЕРАТУРЫ ВОЛЖСКО-УРАЛЬСКИХ НАРОДОВ РОССИИ……………………39

Зайнуллин И.Ф., Козлова О.Н.
CATCHPHRASES FROM MOVIES, THEIR USE IN REAL LIFE SITUATIONS…………………………………………………………...43

Засова А., Хәкимова Г.А.
ТУҒАН ТЕЛДЕҢ КЕШЕ ҺӘМ ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮҘӘГЕ РОЛЕ…45

Исҡужина С.Р., Дилмөхәмәтов И.Т.
ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ҠАТЫН-ҠЫҘ ШИҒРИӘТЕ...49

Исмәғилев А.А., Шәкирова Г.Ғ.
ПРОФЕССОР Ж.Ғ. КЕЙЕКБАЕВ ҺӘМ Н.В. ГОГОЛЬ ИЖАДЫНДА ӘСЕ КӨЛӨҮ-САРКАЗМ АЛЫМЫНЫҢ ҮРЕЛЕШЕ……………………50

Йәрмөхәмәтова И.И., Әминева Л.И., Йәрмөхәмәтова Г.М.
«БАШЙОРТ» ТУРИСТИК КОМПЛЕКС ЯРҘАМЫНДА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕН ПОПУЛЯРЛАШТЫРЫУ............................53

Йәһүҙина Д.С., Дәүләтшина М.Ф.
ӘСӘМ ТЕЛЕ – СӘСӘН ТЕЛЕ..55

Касымбек А.Д., Аккужина Ф.А.
ИДЕЙНО-ТЕМАТИЧЕСКОЕ СОДЕРЖАНИЕ ЭПОСОВ ТЮРКСКИХ НАРОДОВ...57

Ҡотлогилдина И.М.,Үтәев А.Ф.
КӘТИБӘ КИНЙӘБУЛАТОВА ШИҒРИӘТЕНДӘ ҺУҒЫШ ТЕМАҺЫ...60

Латыпова А.А., Илишева Р.Х.
Ф. БҮЛӘКОВТЫҢ «ШАЙМОРАТОВ-ГЕНЕРАЛ» ДРАМАҺЫНЫҢ ЖАНР ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ...62

Мостафина А.И., Илишева Р.Х.
Т. ҒИНИӘТУЛЛИНДЫҢ «БЫНА ҺУҒЫШ БӨТӨР ҘӘ» ПОВЕСЫНДА ЙӘШӘҮ ҺӘМ ҮЛЕМГӘ ГЕРОЙҘАРҘЫҢ ҠАРАШТАРЫ..................64

Мостафина А.И., Үтәев А.Ф.
БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНДА ДӘРҮИШ ОБРАЗЫ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ...65

Мөхәрәмов Р.Р., Әйүпова Д.Ғ.
ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ «ЫРҒЫҘ» РОМАНЫНДА СИФАТТАРҘЫҢ СЕМАНТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕН АСЫҠЛАУ......67

Мырҙабулатова Ф.Ф., Сәләхова З.И.
ҺҮҘҘӘРҘЕ ҮҘЛӘШТЕРЕҮ ПРОЦЕСЫ ТУРАҺЫНДА БАШҠОРТ ТЕЛСЕ-ҒАЛИМДАРЫНЫҢ ФЕКЕРҘӘРЕ..72

Мурясова А.Р., Куклина Н.А.
ГЕРОИ БОГАТЫРСКИХ СКАЗОК…………………………………..75

Мәмбәтова Г., Басирова Г.Ә.
З. БИИШЕВА ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҠУЛЛАНЫЛҒАН ЯБАЙ СИФАТ ХӘБӘРҘӘР……………………………………………………………..78

Мәмбәтова З., Басирова Г.Ә.
Ә. ХӘКИМОВ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҠУЛЛАНЫЛҒАН АЙЫРЫМЛАНҒАН ТУЛТЫРЫУСЫЛАР……………………………..80

Насырова Н.М, Насырова Л.Ғ.
МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ» ПОВЕСЫНДА ТӘРБИӘ АЛЫМДАРЫ…………………………………………………..82

Платонова М.В., Нагаева З.З.
ГРИГОРИЙ ПУЛЬКИН – ВАСИЛИЙ ТЁРКИН………………………..84

Прочухан Д.К., Козлова О.Н.
ENGLISH EUPHEMISMS: USAGE AND CLASSIFICATION…………85

Сафина Г., Султанова Р.Т.
БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ЙЫЛДАРЫНДА ҠЫУҒЫН ҠЫУЫУСЫЛАР……………………………………………………….87

Султангареева Р.Т., Аккужина Ф.А.
КОНЦЕПЫ В ХУДОЖЕСТВЕННОЙ ЛИТЕРАТУРЕ ТЮРКОЯЗЫЧНЫХ НАРОДОВ..89

Сәфәрғәлиева Д.Ғ., Дилмөхәмәтов И.Т.
ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ ИЖАДЫНДА ЕР ТЕМАҺЫ.............................91

Сәхибгәрәева Л.М., Үтәев А.Ф.
СОЦИАЛЬ СЕЛТӘРҘӘРҘӘ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНЕҢ САҒЫЛЫШЫ...93

Фаткуллина Э.Э., Исяндавлетова Г.Н.
ОБРАЗ КОНЯ В СКАЗКАХ (на примере сказки П.П. Ершова «Конёк-Горбунок» и русских народных сказок)………………………………...95

Федоров И.В., Биккузина Л.М.
РАССКАЗЫ А.П. ЧЕХОВА О БАШКИРСКОМ НАРОДЕ…………....96

Хаметшина Д.Р., Воронина Н.
У ВОЙНЫ НЕ ДЕТСКОЕ ЛИЦО (Мужество и патриотизм детей в произведениях о Великой Отечественной войне)…………………….....99

Хисмәтуллина Г.Г., Сәләхова З.И.
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘГЕ ҠАТЫН-ҠЫҘ ТӨШӨНСӘҺЕ – КИҢ МӘҒӘНӘЛЕ ЭТНОМӘҘӘНИ ҺӘМ ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИК ФЕНОМЕН……………………………………………...………….101

Хәйруллина Э.Н., Дилмөхәмәтов И.Т.
БАШҠОРТ ТЕЛЕН ҮҪТЕРЕҮ ҺӘМ ПОПУЛЯРЛАШТЫРЫУ ЫСУЛДАРЫ...103

Шайхулова Д.В., Аккужина Ф.А.
АЛТАЙСКИЙ ГЕРОИЧЕСКИЙ ЭПОС «МААДАЙ-КАРА»………...104

Әмирханова Г.А., Сәләхова З.И.
ДӨЙӨМ МӘҒЛҮМӘТ САРАЛАРЫНДАҒЫ ИҒЛАНДАРҘА ҠУЛЛАНЫЛҒАН ИНГЛИЦИЗМДАР……………………………...108

Әсәҙуллин Д., Хәкимова Г.А.
Ж. КЕЙЕКБАЕВ ИЖАДЫНДА БАТЫРЛЫҠ ТЕМАҺЫ (Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған Советтар Союзы Геройы, укытыусы Зөбәй Үтәғоловҡа бағышланған әҫәр миҫалында).......................................110

Юмагузина Я.И., Хайсарова А.Ф.
ЭКРАНИЗАЦИЯ ХУДОЖЕСТВЕННЫХ ПРОИЗВЕДЕНИЙ О ВОЙНЕ КАК ИСТОЧНИК ВОСПИТАНИЯ ПАТРИОТИЗМА (на примере повести М. Карима «Радость нашего дома»)………………………....114

Ягафарова Р.Р., Курбанова Р.А.
О ЯЗЫКЕ ПОНЯТНОМ И НЕПОНЯТНОМ (ЛИНГВИСТИКА ТАЙНЫХ ЯЗЫКОВ)…………………………………………………118

Якупова А., Аминева З.Р.
ЯЗЫКОВЫЕ УНИВЕРСАЛИИ НА ПРИМЕРЕ АНГЛИЙСКОГО, БАШКИРСКОГО И РУССКОГО ЗЫКОВ…………………………..120

II БҮЛЕК. УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ИЖАДИ ЭШТӘРЕ……………………......127

Аканаев С.З., Саҙрисламова Г.Г.
МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ» ПОВЕСЫ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУҘАР..127

Арыҫланғәлиев И.Р., Зәйҙуллина М.И.
ХАЛЫҠТЫҢ ҮЛЕМҺЕҘЛЕГЕ – УНЫҢ ТЕЛЕНДӘ..........................128

Арыҫланова Д., Рәжәпова Ә.Ғ.
БӘХЕТЕ – ХЕҘМӘТТӘ (очерк)...130

Вәлиев А.Р., Ҡолдобаева Р.Д.
САЛАУАТТЫ ТӨШТӘ КҮРҘЕМ БӨГӨН...132

Ғазина И.В., Кинйәбаева Ф.И.
БИРМӘЙЕК БЕҘ ТЕЛДЕ ЙОТОРҒА……………………………...133

Ғизәтуллина А.Р., Шакирова Г.Ғ.
АТЛЫ ШАҒИР – ЯУГИР (поэма-бағышлау)...134

Ғирфанова Г.Р., Ғирфанова М.Р.
МИНЕҢ ОЛАТАЙЫМ – БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ВЕТЕРАНЫ..137

Ғирфанова Г.Р., Ғирфанова М.Р.
ӨҘӨЛГӘН МӨХӘББӘТ (Миннур өләсәйемдең һөйләгәндәренән. Бәйет)...140

Ғөбәйҙуллина Ә., Ғатина С.С.
ИЛДЕ ТОТҠАН ТЕЛЕМ, ҺҮҘЕМ БАР……………………………...142

Ғүмәров С., Абдрахманов Ә.М.
ЕР ЯҘМЫШЫ – БЕҘҘЕҢ ҠУЛДА...144
ТЕЛҺЕҘ БАШҠОРТ…………………………………………………..147

Ғәбитова Н.Ә., Муллағолова М.З.
НИМӘ УЛ БӘХЕТ? (Сәсән-шағир Мифтахетдин Акмулланың «Нәсихәттәр» шиғырына эйәреп яҙған шиғыр)...................................149

Ибраһимова Р., Ғатина С.С.
РУХ АСЫЛЫ МИҢӘ БӨГӨН КӘРӘК (уйланыу)……………………152

Иманғолов А.Р., Муллағолова М.З.
ТЫУҒАН ЯҒЫМ, МИНЕ ҒӘФҮ ИТ... (асыҡ хат)................................155

Камалова Ю.К., Хәлилов Ә.Н.
ТУҒАН ТЕЛЕҢДӘН СИТЛӘТЕЛМӘ, БАШҠОРТОМ! (мәҡәлә).......157
ТАРИХ ЯҘЫРМЫ ИКӘН АЛЬП ТАШЫ?.. (хат).................................158

Кәримов Д.Д., Муллағолова М.З.
БАТЫРҘАРҘАН ЯҠТЫ ЭҘ ҠАЛА (эссе)...160

Килдебәков Э.Р., Ғөбәйҙуллина Р.И.
ЯҠТЫЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ АҠМУЛЛАҒА..162
БАШҠОРТОСТАН (100 йыллыҡ юбилейына арнала).......................163

Ҡаһарманова Л.Ф.
ТӘРЖЕМӘЛӘР (К.М. Симоновтың һуғышҡа арналған шиғырҙарына
рус теленән башҡортсаға тәржемәләр)..164
ЙЫЛДЫҢ ИҢ ОҘОН КӨНӨ...164
КӨТ МИНЕ...164
ДАН..165

Ҡотлобирҙина Ә., Ғилманова З.Н., Ҡотлобирҙина А.Р.
БЕҘҘЕҢ ОЛАТАЙҘАРЫБЫҘ...166

Ҡунафина А.Ю., Ҡунафина Э.С.
ОЛАТАЙЫМ...168
БӨЙӨК ШАҒИР...169
БӘХЕТ..169
МӘҢГЕ ЙӘШӘР БАШҠОРТ ТЕЛЕМ..169

Минһажева Г.И., Зәйҙуллина М.И.
ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – КӨНӨ БАР..170

Петрова Р.А., Солтанғолова Р.Р.
БАШҠОРТ ТЕЛЕ (хикәйә)...172

Рәхимова Э., Ғәббәсов Р.М.
РӘМИ ҒАРИПОВТЫҢ «ТУҒАН ТЕЛ» ШИҒЫРЫ БУЙЫНСА
ИНША…………………………………………………………………173

Сафина Г.С., Вәлиева Ә.С.
ОЛАТАЙЫМА ХАТ...176

СәләмоваА.И., Вәлиева А.Р.
ТИК КӨСЛӨЛӘР ҒҮМЕРҘӘРҘЕҢ ҺӘР МИҘГЕЛЕН ЙЫР ИТӘ.......178

Усманов Ф.И., Тимерғәлиева Р.Х., Шартдинова Ф.М.
ҺУҒЫШ ҠАТЫН-ҠЫҘ ЗАТЫНАН ТҮГЕЛ…...................................180

Фәткотдинова Г.Г., Рәхимова М.М.
ЯУГИР ҠАРТАТАЙЫМ..183

Шаһиев У.Р., Ғөбәйҙуллина Р.И.
МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНА МИНЕҢ ҠАРАШЫМ (эссе)………185

Шәрипова Г.Ш., Солтанғолова Р.Р.
ТУҒАН ТЕЛЕМ...188
ҠАРТАТАЙЫМ...188
МӘҢГЕЛЕК УТ...189

Шәрипова Э.К., Абдрахманова Э.Ғ.
ЯҠТАШТАРЫМА ХАТ..190

Әхмәҙиева М.М., Шакирова Г.Ғ.
ҮЛЕМ МЕНӘН ЯУЛАНҒАН ҮЛЕМҺЕҘЛЕК (эссе)…………….....193

Әхмәҙуллин Т.А., Мөкимова Г.Х. 195

III БҮЛЕК. УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ ҒИЛМИ-МЕТОДИК ХЕҘМӘТТӘРЕ...199

Аҫылаева З.З.
Ж. КЕЙЕКБАЕВТЫҢ «ОМОРҘАҠ БАБАЙ» ХИКӘЙӘҺЕ БУЙЫНСА ДӘРЕС КОНСПЕКТЫ...199

Байымова А.М.
АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫН ӨЙРӘНГӘНДӘ ЗАМАНСА АЛЫМДАР ҠУЛЛАНЫУ...202

Байсламова А.М.
БАШҠОРТ ТЕЛЕ ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНДӘ: ПРОБЛЕМАЛАР ҺӘМ ПЕСРПЕКТИВАЛАР..205

Вәхитова З.С.
Ш. БАБИЧТЫҢ «ҠАНДАЛА» БАЛЛАДАҺЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ..209

Галимова И.А.
В ГОСТЯХ У СКАЗКИ (сценарий внеурочного занятия)...................210

Ғатин М.К.
БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ УРМАН КӘСЕБЕ ЛЕКСИКАҺЫ: ӨЙРӘНЕҮ ТАРИХЫ ҺӘМ ТИКШЕРЕҮ ЮҪЫҠТАРЫ……………………….212

Гималова Г.Р.
БАШҠОРТОСТАН. ЯҢҒЫҘЛЫҠ ҺӘМ УРТАҠЛЫҠ ИСЕМДӘР (дәрес планы)………………………………………………..…..219

Ғирфанова М.Р.
КҮП МӘҘӘНИӘТЛЕ МӨХИТТӘ МӘКТӘП ТЕЛЕВИДЕНИЕҺЫ АША ТУҒАН ТЕЛГӘ ЗАМАНСА ҠАРАШ..221

Зәйҙуллина М.И.
ЭТНОМӘҘӘНИ КОМПОНЕНТЫ АША РУС ТЕЛЕНДӘ БЕЛЕМ АЛҒАН БАШҠОРТ БАЛАЛАРЫН ТУҒАН ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ПРЕДМЕТЫН ӨЙРӘНЕҮГӘ ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ ҮҪТЕРЕҮ................225

Касимова Р.Р.
МЕТОДЫ ПРОЕКТОВ В ОБРАЗОВАНИИ ОБУЧАЮЩИХСЯ.........227

Рәжәпова Ә.Ғ.
ДӘРЕСТӘРҘӘ, КЛАСТАН ТЫШ САРАЛАРҘА ЯҢЫ ТЕХНОЛОГИЯЛАР ҠУЛЛАНЫУ НИГЕҘЕНДӘ УҠЫУСЫЛАРҘА ҮҘ АЛЛЫ БЕЛЕМ АЛЫУ КҮНЕКМӘЛӘРЕ ТӘРБИӘЛӘҮ ҺӘМ УҠЫУ СИФАТЫН КҮТӘРЕҮ (эш тәжрибәһе тураһында мастер-класс).......229

Саляхова З.И.
КОЛИЧЕСТВЕННОСТЬ ИМЕН СУЩЕСТВИТЕЛЬНЫХ В БАШКИРСКОМ И КАЗАХСКОМ ЯЗЫКАХ...................................231

Стодольникова В.Г.
ФОРМИРОВАНИЕ ФИНАНСОВОЙ ГРАМОТНОСТИ В ШКОЛЕ...233

Сәйетҡолова Л.Ф.
ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВТЫҢ «ТУҒАНДАР ҺӘМ ТАНЫШТАР» РОМАНЫНДА ТЕЛ МӘҘӘНИӘТЕ КҮРЕНЕШТӘРЕ……………….235

Тимербулатова Р.М.
БАШКИРСКИЙ НАРОДНЫЙ ЭПОС «УРАЛ-БАТЫР» КАК СРЕДСТВО ФОРМИРОВАНИЯ МЕТАКОМПЕТЕНЦИИ ОБУЧАЮЩИХСЯ (мастер-класс)...240

Тураева Г.З.
ТЕЛЕБЕҘҘЕ, ЕРЕБЕҘҘЕ ҺАҠЛАЙЫҠ!...243

Фаршатова Ә.Ә.
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ ДИАЛЕКТЫ ШАРТТАРЫНДА УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ МИЛЛИ ҮҘАҢЫН ТӘРБИӘЛӘҮ (оҫталыҡ класы)...247

Хәкимова Г.А.
М. КӘРИМ ӘҪӘРҘӘРЕ БУЙЫНСА МӘКТӘП СӘХНӘҺЕ ӨСӨН СЦЕНАРИЙҘАР (телмәр үҫтереү өсөн уҡытыусыларға методик ҡулланма)………………………………………………………...250

Хәлисова А.А.
«ҮҘ УЙЫН» ФОРМАТЫНДА КЛАСТАН ТЫШ САРА......................261

Шагисултанов Ф.А.
ИЗ ИСТОРИИ ГЕОГРАФИЧЕСКИХ ИССЛЕДОВАНИЙ ЮЖНОГО УРАЛА В XVIII ВЕКЕ…...264

Шәрипова Р.Ш.
ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ – БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК ШАҒИРЫ, АЗАТЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ (кластан тыш сара)......................268

Научно-методическое издание

РЕСПУБЛИКАНСКИЕ
КИЕКБАЕВСКИЕ ЧТЕНИЯ

Сборник материалов
Республиканской научно-практической конференции
«XII Киекбаевские чтения»,
посвященной Международному дню родного языка,
письменности и культуры и и Году башкирского языка

Компьютерный набор и верстка А.Р. Давлетбаева

Авторы несут ответственность
за достоверность материалов, изложенных в сборнике

Подписано в набор 12.02.2020 г.	Подписано в печать 12.02.2020 г.
Подписано в свет 12.02.2020г.	Формат 60x84$_{1/16}$.
Бумага офсетная.	Гарнитура «Times».
Печать оперативная.	Уч.-изд.л. 10,0
Тираж 60 экз.	Усл. печ.л.10,5
Заказ № 2321/20.	Цена договорная.

Редакционно-издательский сектор Стерлитамакского филиала БашГУ:
453103, Стерлитамак, пр. Ленина, 49.

Отпечатано в типографии «Перспектива», г.Стерлитамак,
ул. Худайбердина, 58, Дом быта, 1 этаж, офис 2